# Ағиҙел

**Өфө,
ғинуар
2010**

**1(1042)**


ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ


Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Роберт БАЙЫМОВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат ҠӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ,
Фәнил ҠОҘАҠАЕВ,
Ноғман МУСИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Әмир ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир)*,
Харис Сәғитов (баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары),
Зилә Йәнбәкова, Әлфиә Махиянова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Камалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 авгусында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС-37206.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 12.01 2010. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70x100 1/16.
"Times" гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 4 597 экз. Һатыуҙа хаҡы иркле. Заказ № 2.0001.10.

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**©«Ағиҙел», 2010 (1, 1042)**

# БЫЛ ҺАНДА:

*Башҡортостан Яҙыусылар союзына – 75 йыл*


**Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов һәм Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Рауил Бикбаев сығыштары.** ............................................................5

ШИҒРИӘТ

**Марат Кәримов.** Йылдар ауазы. Шиғырҙар. ..............................11
**Факиһа Туғыҙбаева**. Мин ҙур кеше булам мәрхәмәттән… Шиғырҙар. ..........................................................................22
**Рамазан Шәғәлиев**. «Тыуған яғым күлдәргә бай…» Шиғырҙар. ..........................................................................37

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Хәйҙәр Тапаҡов**. Ҡурсаҡ. Хикәйә. ..............................................42
**Әхмәр Үтәбай**. Үрелеп алған алма. Хикәйә. ................................67
**Шамил Хажиәхмәтов**. Әле үә 30 мең йыл әүәл. Хикәйә. .............86
**Сәғирә Шәрәфетдинова**. Көҙгө күкрәү. Хикәйә. .......................110

ДУҪЛЫҠ КҮПЕРҘӘРЕ

**Вячеслав Ар-Серги**. Йәнеңдә һағыштар өткәндә… Шиғырҙар. ..........................................................................120

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Ғайса Хөсәйенов**. Хәсән Назар шиғриәте. ..................................124

РУХЫБЫҘ ТАМЫРҘАРЫ

**Гөлнур Хөсәйенова**. Халыҡ ижады – иғтибар үҙәгендә. ...............136

ӘҘӘБИ МИРАҪ

**Рамаҙан Өмөтбаев**. Уйын ҡорбаны. Хикәйә. ...........................140

ТАРИХ ШАҢДАУЫ

**Зиннур Нурғәлин**. Башҡорт теленең дәүләт теле булып танылыу тарихынан. .....................................................................151

БАШҠОРТ ЙЫЛЪЯҘМАҺЫ

**Рәжәп Малыбаев**. Һәйкәлгә лайыҡ шәхес. ..................................167

СӘНҒӘТ

**Динара Кәримова**. Алсаҡлыҡ нурҙары өләшеп… .......................177

САТИРА ҺӘМ ЮМОР

**Мөнир Ишбулатов**. Бар ине заманалар. Хикәйә-хәтирә. ......181

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

*75 лет Союзу писателей Башкортостана*

**Выступления Президента Республики Башкортостан М. Рахимова и председателя Правления союза писателей Башкортостана Р. Бикбаева.**

ПОЭЗИЯ

**М.Каримов, Ф.Тугузбаева, Р.Шагалиев** *(стихи).*

ПРОЗА

**Х.Тапаков.** Кукла *(рассказ).*
**Ахмер Утябай.** Сорванный с яблони плод *(рассказ).*
**Ш. Хазиахметов.** 30 тысяч лет вперед *(рассказ).*
**С. Шарафетдинова.** Осенний гром *(рассказ).*

МОСТЫ ДРУЖБЫ

**Вячеслав Ар-Серги.** Ностальгия *(стихи).*

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**Г. Хусаинов.** Поэзия Хасана Назара.

КОРНИ ДУХОВНОСТИ

**Г. Хусаинова.** В центре внимания – народное творчество.

ЛИТЕРАТУРНОЕ НАСЛЕДИЕ

**Р. Уметбаев.** Азарт *(рассказ).*

ЭХО ИСТОРИИ

**З. Нургалин.** Признание башкирского языка государственным.

БАШКИРСКАЯ ЛЕТОПИСЬ

**Р.Малыбаев.** *Личность, достойная благородной памяти.*

ИСКУССТВО

**Д.Каримова.** Излучая душевную доброту *(об актере Р. Загитове).*

САТИРА И ЮМОР

**М.Ишбулатов.** Были же времена *(рассказ-воспоминание).*

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.

# *Башҡортостан Яҙыусылар союзына – 75 йыл*



**Мортаза РӘХИМОВ,**
**Башҡортостан Республикаһы Президенты**

**Хөрмәтле яҙыусылар! Ҡәҙерле дуҫтар!**

Һеҙҙе ғәзиз тыуған яғыбыҙҙың ижтимағи-сәйәси, мәҙәни һәм рухи тормошондағы иҫтәлекле ваҡиға — Башҡортостан Республикаһы Яҙыусылар союзы ойошторолоуҙың 75 йыллығы айҡанлы ихлас йөрәктән тәбрикләйем.

Республиканың революцион үҙгәрештәр, халыҡ массалары үҙаңының бығаса күрелмәгән үҫеше тулҡындарында тыуған йәше һәм составы буйынса республиканың иң ҙур ижади берекмәһе был. Мәгәр Рәсәйҙең иң тәүге автономлы республикаһында профессиональ яҙыусылар ойошмаһының тыуыуы, иң тәү шартта, егерменсе быуаттың 20—30-сы йылдарына тура килде. Шул осорҙа Башҡортостанда формаһы яғынан милли һәм йөкмәткеһе яғынан интернациональ булған совет художестволы әҙәбиәте ныҡ үҫеште. Һәм ошо ижади берекмә үҙенә әҙәби һүҙ, ғәҙеллек идеалдарына эскерһеҙ хеҙмәт итеүсе ҡәләм оҫталарын тупланы.

Башҡортостан Яҙыусылар союзының йылъяҙмаһы бөйөк Ватаныбыҙ яҙмышынан айырылғыһыҙ. Мөһим төҙөлөштәр, индустрияләштереү һәм коллективлаштырыу көндәрендә әҙиптәребеҙ тормошобоҙ героикаһын данлаған йырҙар яҙҙы. Сәйәси репрессиялар йылдарында улар сәнскеле ГУЛАГ зиндандарында һәләк булды. Яҙыусылар

---

*2009 йылдың 22—24 октябрендә республикабыҙҙа Башҡортостан Яҙыусылар союзының ойошторолоуына 75, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына 90 йыл тулыу айҡанлы оло тантаналар булып үтеүе хаҡында үткән һандарҙа яҙғайныҡ инде. Журналыбыҙҙың был һанында уҡыусылар иғтибарына Башҡортостан Республикаһы Президенты М. Ғ. Рәхимовтың юбилей айҡанлы Башҡортостан яҙыусыларына ебәргән ҡотлауын, Яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе Р. Т. Бикбаевтың Конгресс-холдағы тантаналы йыйылышта һөйләгән докладын тәҡдим итәбеҙ.*

үҙҙәренең йөрәк һүҙе менән ватандаштарыбыҙҙы алышҡа әйҙәне һәм үҙҙәре, бар булмышына аяғүрә баҫып, баштарын һала-һала, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашты. Оҙаҡ көтөлгән Еңеүҙән һуң улар халыҡ хужалығын күтәреште, сиҙәм аҡтарҙы, БАМ төҙөнө, Белорет — Ҡарламан тимер юлын һалышты. Былар бөтәһе лә — беҙҙең бөйөк үткәнебеҙ. Быларҙың һәммәһе лә нәфис әҙәбиәттә киң ҡолас менән сағылдырылған!

Бөтөүгә барған совет осоро ла үҙенең тәрән мәғәнәһенә эйә. Демократлаштырыу, һүҙ ирке, суверенлаштырыу йәш һәм башлап яҙыусыларыбыҙға, шағирҙарыбыҙға һәм драматургтарбыҙға әҙәбиәт майҙанына ныҡлап аяҡ баҫырға мөмкинлек бирҙе. Үкенескә күрә, цензура юҡлығы шарттарында был осорҙа матбуғатта түбән сифатлы әҫәрҙәр ҙә ташҡа баҫылды. Әммә Башҡортостан әҙәбиәте бер ваҡытта ла көс ҡулланыуға, дошманлашыуға һәм үс-нәфрәткә саҡырманы. Ул һәр саҡ юғары рухиәт ҡиммәттәрен — Мөхәббәт, Матурлыҡ, Тыныслыҡ һәм Килешеп йәшәүҙе күҙ уңында тотто.

Яҙыусыларыбыҙҙың телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе, башҡорт халҡының, шулай уҡ күп милләтле тотош Башҡортостан халыҡтарының традицияларын һәм ғөрөф-ғәҙәттәрен һаҡлауға һәм үҫтереүгә индергән өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Һоҡланғыс һүҙ оҫталары, тыуған еребеҙҙең һәм бөтә мәғрур Рәсәйҙең ысын патриоттары Рәшит Ниғмәти, Һаҙиә Дәүләтшина, Дауыт Юлтый, Сәйфи Ҡудаш, Зәйнәб Биишева, Назар Нәжми, Әнғәм Атнабаев, Рәми Ғарипов, Мостай Кәрим, Рауил Бикбаев, Әхиәр Хәким, Ноғман Мусин, Роберт Паль, Юрий Андрианов, Михаил Чванов, Александр Филиппов, Тимер Йосопов, Марат Кәримов, Нәжиб Асанбаев, Ирек Кинйәбулатов һәм башҡа бик күптәрҙең исемдәре республикабыҙҙа ғына түгел, беҙҙән алыҫ-алыҫ тарафтарҙа ла билдәле. Уларҙың бөтәһе лә Яҙыусылар союзы сафтарында яҡшы сынығыу алды. Ошонда улар юғары профессионализм һәм изге әҙәби эшмәкәрлектә ысын патриотизм өлгөһө күрһәтеүгә өлгәште.

Һеҙҙең әүҙем мәғрифәтселек эшмәкәрлегегеҙ ҙә юғары баһаға лайыҡ. Әҙәби фестивалдәр, конференциялар һәм конкурстар, авторҙарҙың ижад кисәләре һәм уҡыусылар менән осрашыуҙары күп милләтле Башҡортостан халыҡтарының рухи йәһәттән байыуына, йәш ҡәләм оҫталарын табыуға һәм ижади үҫтереүгә, киләһе быуындарҙы әхлаҡи һәм эстетик тәрбиәләүгә булышлыҡ итә. Һеҙгә, ҡәҙерле дуҫтар, ғәзиз Башҡортостаныбыҙ һәм мәшһүр Рәсәй шөһрәтен арттырыу хаҡына яңы ижади ынтылыштар һәм артылыштар теләйем. Ныҡлы һаулыҡ, имен-аман тормош һәм бәхет теләйем!



**Р а у и л   Б И К Б А Е В ,**
**Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе**

**Хөрмәтле Президент!**
**Ҡәҙерле дуҫтар һәм арҙаҡлы ҡунаҡтар!**

Был көндәрҙә Башҡортостан Республикаһы, баш ҡалабыҙ Өфө Рәсәйҙең үҙенсәлекле әҙәби үҙәгенә әүерелде. 22 октябрҙә беҙҙә Рәсәй Яҙыусылар союзы Секретариаты ултырышы уҙғарылды. Унда милли әҙәбиәттең бөгөнгө проблемалары, үҙ-ара бәйләнештәребеҙ һәм перспективаға ынтылыштар хаҡында бик тә ихлас, тәрән йөкмәткеле һөйләшеү булды. Кисен иһә Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына 90 йыл тулыуға арналған тантаналар халыҡ байрамы төҫөн алды. Йәнә беҙ Башҡортостан Яҙыусылар союзының яңыртылған бинаһын туйланыҡ, баш ҡала вуздарында әҙәби осрашыуҙар ойошторолдо.

Хәҙерге көн дә ҡыуанысլы ваҡиғаларға ифрат бай. Юбилейға арналған саралар Киләштә — Мостай Кәримдең тыуған төйәгендә дауам итте. Әле иһә беҙ ҡунаҡсыл Конгресс-холға йыйылдыҡ. Йөҙйәшәр һәм мәңге йәш Өфөбеҙҙең йәменә әүерелгән мөһабәт бинаны икеләнмәйсә халыҡтар дуҫлығы храмы тип атарға мөмкин.

Һанап үтелгән иҫтәлекле осрашыуҙар һәм ваҡиғалар, ҡәҙерле дуҫтар, осраҡлы ғына тап килеүҙәр түгел. Әгәр төптәнерәк уйланһаҡ, бөтә был сараларҙа бөгөнгө Башҡортостан тормошоноң ритмы, көнитмешебеҙ принциптары сағыла.

Биш йыл элек беҙ Рәсәй Федерацияһы ҡоласында ғына түгел, бәлки, тотош СССР киңлектәрен үҙ эсенә алған байрамды — Союзыбыҙҙың 70 йыллығын тәүгеләрҙән булып уҙғарҙыҡ. Бына беҙ тағы ла байрам

кисәһенә йыйылғанбыҙ. Ижади союздар араһында иң өлкәне һаналған республикабыҙ Яҙыусылар союзына — 75 йыл.

Беҙҙең Союз үҙенең үҫеш юлында халҡыбыҙ менән берлектә күп еңеүҙәр яуланы һәм ҡыуаныстар кисерҙе. Ҡаты һынау йылдарында ла беҙ сынығыу үттек. Мәгәр ауырлыҡтарға һәм ыҙаларға ҡарамаҫтан, Союзыбыҙ гелән юғары ижад ҡиблаһына — донъяларҙы яҡшыртыуға һәм берләшеүгә тоғро ҡалды.

Бөгөн беҙ ижади берләшмәбеҙҙе төҙөгән, ә аҙаҡ ҡанлы утыҙ етенсе йылдың ҡорбаны булған өлкән ҡәләмдәштәребеҙҙе оло хөрмәт, рәхмәт тойғоһо һәм бер үк ваҡытта сикһеҙ һағыш менән иҫкә алабыҙ: Дауыт Юлтый, Афзал Таһиров, Төхфәт Йәнәби, Ғабдулла Амантай, Булат Ишемғол, Ғөбәй Дәүләтшин... Был тойғоларға Бөйөк Ватан һуғышы яландарында һәләк булғандар өсөн ҡайғырыу өҫтәлә: Низам Ҡәрип, Мәлих Харис, Мөхәмәтйәров Хәй, Сәғит Мифтахов, Хөсәйен Ҡунаҡбай, Мазһар Абдуллин, Бәҙрүш Моҡамай һ. б.

Яҙыусылар союзы — ул изге йорт, унда күп таланттар: Башҡортостандың халыҡ шағирҙары Мәжит Ғафури, Сәйфи Ҡудаш, Рәшит Ниғмәти, Мостай Кәрим, Назар Нәжми, Рәми Ғарипов, Әнғәм Атнабаев, әҙәбиәтебеҙ тарихына күркәм сәхифәләр өҫтәгән халыҡ яҙыусылары Зәйнәб Биишева, Әхиәр Хәкимов асылды. Ошонда уҡ бер нисә быуын шағирҙар, прозаиктар, драматургтар, әҙәбиәт белгестәре үҙҙәренең тәүге әҫәрҙәрен уҡыны. Хәҙер инде уларҙың яҙмышы әҙәби ғаиләбеҙҙән айырылғыһыҙ.

Яҙыусылар союзының эшмәкәрлегенең төп маҡсаты булып ижади көстәрҙе берләштереү, әҙәби фекерҙе үҫтереү, милләт-ара әҙәби бәйләнештәрҙе нығытыу торһа ла, Союзыбыҙ 75 йыл дауамында күп ҡырлы ҡатмарлы һәм ижтимағи йәһәттән мөһим бурыстарҙы хәл итеүҙә ҡатнашты. Ижади Союзыбыҙ — халҡыбыҙ тормошоноң йылъяҙмасыһы, ул һәр саҡ әҙәби ижад менән генә сикләнмәне. Тарихи һынылыш дәүерҙәрендә ул мәғрифәтсе лә, тәрбиәсе лә, халыҡ мәнфәғәтен ҡурсалаусы ла, кәрәк саҡта яугир ҙа, көрәшсе лә булды.

Мин, әлбиттә, һәр ҡайһыбыҙға ҡәҙерле Союзды илаһилаштырырға йыйынмайым. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, изге эштәр менән рәттән ғәҙелһеҙлектәр ҙә булды. 1937 йылдағы яманаты сыҡҡан йыйылыштарҙа эш бер-береһен әшәке битәрләүҙәргә һәм нахаҡ ғәйепләүҙәргә тиклем барып еткән. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа Мөхәмәтша Буранғолов ошо Союзда ғәм халыҡ алдында хөкөм ителә. Ошо уҡ осорҙа Баязит Бикбайға уйҙырма гонаһтар тағылғас, Яҙыусылар союзы үҙенең тәүге орденлы яҙыусыһын лайыҡлы рәүештә яҡлап ҡала алманы. Шулай уҡ Рәми Ғарипов та был ойошмала яҡлау тапманы.

Әлбиттә, бөтөн был кире күренештәрҙә Яҙыусылар союзын ғәйепләргә ярамай. Күп ваҡыт ындай йәмһеҙ хәл-ваҡиғалар ижади ойошмала тороусылар һәм ижад итеүселәр иркенән тыш була торғайны. Ҡөҙрәтле партия Үҙәк Комитеты үҙенең ҡарарҙарында башҡорт драматургтарына ҡара тап яҡҡан бер мәлдә республика

Яҙыусылар союзының ғына быны юйып ташларға көсө етә инеме һуң? Совет әҙәбиәте эҙәрлекләүҙәр, тыйыуҙар һәм сикләүҙәр шарттарында ла художестволы фекерләү һәм ижад итеү һәләтен һаҡлап ҡала алыуы арҡаһында ғына донъяла танылыу яуланы. Былдай еңел булмаған һынауҙар Башҡортостан Яҙыусылар ойошмаһына тупланған әҙиптәр иңенә лә төштө. Беҙҙең ижади Союздың етмеш биш йыллыҡ юлы, — ваҡыты-ваҡыты менән һикәлтәле булыуына ҡарамаҫтан, үҫеш һәм нығыныу юлы ул.

Яҙыусылар союзының һуңғы егерме йылы — ҡатмарлы ваҡиғалар осоро. Бөтә илебеҙ өсөн яуаплы был арауыҡта ойошмабыҙ ижади тормош менән йәшәне. Мәскәүҙә һәм ҡасандыр икһеҙ-сикһеҙ илдең күпселек төбәктәрендә союздар тарҡалған, бүленгән саҡта — хәйер, Советтар Союзы үҙе лә тарҡалды — ойошмабыҙҙың бөтөнлөгөн, берҙәмлеген һәм йоғонтололоғон һаҡлап ҡала алдыҡ. Был — әҙәбиәтебеҙ берҙәмлегенең һөҙөмтәһе, ижади ойошмаларыбыҙҙың уртаҡ маҡсат һәм ынтылыштар менән йәшәүенең сағылышы.

Әҙип һүҙенең ҡеүәтен дәлилләүсе миҫалдарҙы төрлө дәүерҙәрҙә осратырға мөмкин. Һәм бөгөн, Башҡортостандың дәүләтселеге, республика халҡының киләсәге хәл ителгәндә, Яҙыусы Һүҙе айырыуса әһәмиәткә эйә. Шуға күрә лә беҙҙең әҙиптәребеҙ һәр саҡ ижтимағи-сәйәси өйөрмәләрҙең, һәр саҡ тормоштоң алғы майҙанында. Быны буш һүҙ тип аңларға ярамай. Был — әҙиптәребеҙҙең граждандлыҡ йөҙө, намыҫыбыҙ һәм выжданыбыҙ ҡушыуы.

Әсә теле һәм милли мәктәп яҙмышы, тарихты объектив һүрәтләү, республикабыҙҙан ситтә йәшәүсе ҡәрҙәштәребеҙҙең хәл-әхүәле, ғәзиз тәбиғәтебеҙгә һаҡсыл ҡараш — былар ифрат ҡатлаулы, уйландырғыс һәм ҡәләмдәштәребеҙҙе кисекмәҫтән ошо темаларға тотонорға этәреүсе бурыстар. Был тәңгәлдә Союзыбыҙҙың хеҙмәттәрен күрмәү мөмкин түгел.

Ижади секцияларҙа яңы әҫәрҙәрҙе тикшереү, дөйөм йыйылыштарҙа һәм съездарҙа фекер алышыуҙар, йәш авторҙар семинарҙарын уҙғарыу, шиғри, ижади кисәләр, юбилей тантаналарын, яҙыусыларҙың район-ҡалаларға сәфәрҙәрен ойоштороу, күрше республикаларға сәйәхәт ҡылыу, ижади мираҫ комиссияларының эшмәкәрлеген етәкләү, ҡәләмдәштәрҙең китаптарын нәшерләүҙә ҡатнашыу, уларҙың көнкүреш шарттарын хәстәрләү — һанап бөткөһөҙ мәшәҡәттәр, хатта ҡай саҡ аптырап та ҡуйыла: быға нисек өлгөрәбеҙҙер...

Башҡортостан Яҙыусылар союзы үҙ эшмәкәрлегендә идарабыҙҙың төбәктәрҙәге — Стәрлетамаҡ, Сибай, Учалы, Яңауыл, Күмертауҙағы ойошмаларының булышлығына таяна, Әҙәби фондыбыҙ ҙа ҙур эштәр атҡарырға һәләтле.

Беҙҙең иң ҙур терәгебеҙ — Президентыбыҙ Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовтың һәм Республика Хөкүмәтенең көндәлек иғтибары, даими хәстәрлеге. Асығын әйтергә кәрәк: ошондай хәстәрлек һәм ярҙамдан башҡа, хөрмәтле Мортаза Ғөбәйҙулла улы, Башҡортостан Яҙыусылар

союзының илһамлы ижад тормошон күҙ алдына ла килтереп булмай.

Республика етәкселегенең ярҙамынан тыш башҡорт телендә китаптар баҫыусы донъялағы берҙән-бер "Китап" нәшриәтенең хәлдәре бик ҡыҙғаныс булыр ине. Бәхетебеҙгә, халыҡтың рухи үҫешендә айырым роль уйнаусы ошо нәшриәтебеҙ быңдай яҙмыштан йолоп ҡалынды һәм яңыраҡ үҙенең 90 йыллығын билдәләне.

Дәүләт дотацияһынан тыш милли сәнғәт йәшәй ҙә, үҫешә лә алмай. Шуға күрә лә беҙ, киләсәктә лә республика етәкселеге Союзыбыҙҙы, милли әҙәбиәтебеҙҙе, милли баҫмаларыбыҙҙы һәм «Китап» нәшриәтен хәстәрлекле күҙ уңынан ысҡындырмаҫ, тип өмөтләнәбеҙ.

Һәр яҙыусы өсөн китап яҙыу һәм уны ташҡа баҫтырыу — күп йыллыҡ хеҙмәтенең ҡыуаныслы һөҙөмтәһе ул. Хәҙерге осорҙа, тормоштоң күп өлкәһен интернет баҫымсаҡлағанда, китап хәлдәре айырыуса ҡыйынлыҡтарға осрай. Һәр халыҡ өсөн китап уның шәхес танытмаһы булып тора, киләсәккә юл күрһәтеүсе маяҡ хеҙмәтен үтәй. Глобализмдың емергес көстәре шашынған дәүерҙә хатта бөйөк милләттәргә лә үҙ китабын һаҡлап ҡалыу ауырға төшә. Башҡорт телендә, рус йә иһә инглиз, ғәрәп йә ҡытай теленә сағыштырғанда, китаптар бик аҙ донъя күрә. Әммә ләкин күкрәк киреп, оло ғорурлыҡ менән раҫлай алабыҙ: башҡорт китабы бер ҡасан да боҙоҡлоҡҡа, әхлаҡһыҙлыҡҡа, болғанышҡа йәки милләт-ара ыҙғышҡа әйҙәмәне, әйҙәмәйәсәк тә.

Ике йөҙҙән ашыу ағзаны берләштергән Союзыбыҙҙа бөгөн утыҙ ғына йәшен тултырған иптәштәребеҙ ҙә, шулай уҡ үҙҙәренең һикһәненсе артылыштарын уҙған аҡһаҡалдар ҙа бар. Ветерандарыбыҙ үҫеп килгән быуын өсөн ысын мәғәнәһендә һүҙ оҫтаһы һәм кешегражданин өлгөһөн үтәй.

Союзыбыҙҙың етмеш биш йыллыҡ юлын байҡап һәм рухи эҙләнеүҙәр, өлгәшелгән ҡаҙаныштар хаҡында уйланып алғандан һуң, Пушкин кеүек ҡысҡырып ебәрге килгеләй: "Дуҫтар! Һоҡланғыс беҙҙең Союзыбыҙ!" Әммә беҙ бер ҡасан да үҙебеҙгә йөкмәтелгән сикһеҙ оло яуаплылыҡ, юғары талаптар һәм бурыстар, тыуған Башҡортостаныбыҙҙың бөгөнгөһө һәм киләсәге хаҡында онотorға тейеш түгел! Беҙҙе уртаҡ бәхет һәм уртаҡ ғазаптар — туған телебеҙгә, әҙәбиәтебеҙгә, рухиәтебеҙгә хеҙмәт итеү берләштерҙе, берләштерәсәк. Был изге юлыбыҙҙа, әйҙә, ижад ҡыуаныстары юлдаш булһын һәм беҙҙең әҙәби асыштарыбыҙ барса ватандаштарыбыҙҙың дөйөм шатлығына, уртаҡ байлығына әүерелһен, ойошмабыҙҙың юбилейы тотош халыҡ байрамына әйләнһен.



**Марат**
**КӘРИМОВ**

# ЙЫЛДАР АУАЗЫ

## *Һәр замандың үҙ йыры бар*

*Һәр замандың үҙ йыры бар,*
*Шул йыр менән иҫтә ҡала.*
*Ә шулай ҙа йырланмайса*
*Күпмеләре эстә ҡала.*

*Моңлораҡы эстә ҡала —*
*Һуҡмай килер сәғәттәре.*
*Етер бер саҡ, етер, тиһең,*
*Уларҙың да нәүбәттәре.*

*Ғүмеремдә төрлө йыр бар,*
*Аңлар уҡып ҡарағандар.*
*Ҡалғандарға эйәрҙем дә*
*Ҡаҡтым-һуҡтым барабандар.*

*Инде бик һаҡ ауыҙ асам,*
*Алып муза һорнайын мин.*
*Тамаҡ йыртып ҡысҡырмайым,*
*Күңелдәген йырлайым мин.*

1973

---

*Марат Кәримов 1930 йылдың 9 ғинуарында Ейәнсура районының Күгәрсен ауылында тыуған. Педучилище тамамлап, балалар уҡыта, армияла хеҙмәт итә. «Ленинсы» гәзите, «Пионер», «Һәнәк» журналдары редакцияларында эшләй. 2003 йылдан — Башҡортостандың халыҡ шағиры.*

*Өлкән ҡәләмдәшебеҙҙе 80 йәше менән ихлас һәм ихтирамлы тәбрик итәбеҙ.*

## *Берәҙәк эт*

*Йондоҙло төн тын ҡалаға төштө.*
*Ай тирбәтте йоҡо бишеген.*
*Тик магазин эргәһендә генә*
*Бер эт тора күптән, күшегеп,*
*Асылмаҫмы, тиеп, ишеге.*

*Өрөп-өрөп ала, йөрөп ала,*
*Был һалҡында нисек сыҙаһын.*
*Берәҙәктер, ахыры, — ҡышҡы төндә*
*Ниндәй хужа этен сығарһын.*
*Ә был күрә аслыҡ ыҙаһын.*

*Ана, нисек мөлдөрәп ҡарай бит ул*
*Витринала ятҡан байлыҡҡа.*
*Тик быяла аша буйы етмәй*
*Ҡолбасаға, иткә, балыҡҡа.*
*Ышанмаҫлыҡ улар барлыҡҡа.*

*Ышанырлыҡмы ни! Ҡасан ғына*
*Алдарында аҙыҡ мул ине.*
*Нарта тартып, наслегтарға сапҡан*
*Ул ине бит, эйе, ул ине.*
*Ғүмере уның оҙон юл ине.*

*Мең саҡрым — ун саҡрым ине,*
*Таныш ине һәр бер ҡарышы.*
*Тах-тах! Уңға! Тох-тох! Һулға! Һаман*
*Ҡолаҡтарҙа каюр тауышы.*
*Етеҙ ҙә һуң эттәр сабышы!*

*Ҡасан үҙгәрҙе һуң был яҙмышы?*
*Ана, ҡара юлдар ташына,*
*Эттәрҙән дә етеҙерәк икән*
*Тәгәрмәсле нарта — машина.*
*Шулар етте эттең башына.*

*Ҡала төҙөлә. Эттәр генә белә:*
*Йөк ташыуы, ай-һай, ауыр ҙа.*
*Нарталарын, барыһын ташланы ла*
*Шофер булып китте каюр ҙа.*
*Йөрөй икән хәҙер ҡай ерҙә?*

*Ә бит ниндәй ине! Ас булһа ла,*
*Башта уны — этен ашатты.*
*Хәҙер инде бер кем иркәләмәй,*
*Малайҙар ҙа уға таш атты,*
*Ниндәй ғәйебе өсөн? Баш ватты.*

*Үҙен-үҙе йәлләп олоно эт,*
*Илағандай булды йәш бала.*
*Ләкин уны бер кем ишетмәне,*
*Иҙрәп йоҡлай ине йәш ҡала.*
*Бетон ҡала. Цемент, таш ҡала...*

1978

## Әрем

*Ауыр йылдар... Сабыр йылдар...*
*Булған кеүек әле генә.*
*Баҫыуҙарҙа башаҡ һирәк,*
*Шаулап үҫә әрем генә.*

*Икмәк күрһә, һауыған китә*
*Сабыйҙарҙың йәне-тәне.*
*Ауыҙымды өтөп ала*
*Икмәктәге әрем тәме.*

*Ялан ҡыҙырып һыйыр ҡайта.*
*Әсәй һуң ас йөрөтмәне:*
*Шундуҡ һауып һөт эсерә,*
*Ул һөттә лә әрем тәме.*

*Әсе михнәт замандары —*
*Улар һуғыш замандары.*
*Ваҡыт беҙҙән алып китә*
*Һаман ары... һаман ары...*

*Ләкин тәме телдә ҡалған.*
*Йырҙар яҙам — әсе сыға.*
*Балалыҡтың күләгәһе*
*Эйәреп йөрөй һәр йырсыға.*

*Балалығым баллы түгел,*
*Тик үпкәм юҡ үткәндәргә.*
*Бал яғылған шиғыр яҙыу*
*Ҡалһын инде бүтәндәргә.*

1978

## Бурандарҙа ҡалам

*Буран менән ҡултыҡлашып барам,*
*Йоҡлай төнгө ҡалам.*
*Буран түгел, ахыры, мин, буғай, ул —*
*Тәҙрәләрҙе ҡағам.*

*Йүгерәмен ҡыйыҡ баштарынан,*
*Зың-зың итә ҡалай.*
*Гүйә, бөгөн мин элекке кеүек*
*Тынғы белмәҫ малай.*

*Һөрән һалам кеҫек:*
*— Әй, кешеләр,*
*Йоҡламағыҙ иртә.*
*Тормошоғоҙ бит былай ҙа һеҙҙең*
*Күберәк йоҡлап үтә.*

*Выждан өсөн, намыҫ өсөн, юҡ, юҡ,*
*Кәрәк түгел мендәр.*
*Ярһыуҙары менән булһын улар*
*Был буранға тиңдәр!*

*Иртә менән буран ары китте,*
*Йәнә тының ҡалам.*
*Урамдарҙан барам. Күңелем менән*
*Бурандарҙа ҡалам.*

1985

## Йөрәк уты кәмей

*Йөрәк утым кәмей барған һайын,*
*Ҡатышы юҡ бында йәшемдең.*
*Мин ул утты, яҙғы йәшен итеп,*
*Шиғыр юлдарына йәшерҙем.*

*Кемдер алып уҡыр, һәр кемдең дә*
*Шиғыры була күңеле ятаҡҡан.*
*Йәшнә, шиғырым, шул саҡ ер балҡытып,*
*Ә күкрәүең килер аҙаҡтан.*

*Йөрәк утым кәмей барған һайын...*

1988

## Беломор

*Папиростар араһында*
*«Беломор» иң данлыһы.*
*Данлыһы, тип яңылыш әйттем,*
*Ҡанлыһы ул, ҡанлыһы.*

*Мәскәү — Беломор каналын*
*Кемдәр һуң төҙөгәндәр?*
*Бинахаҡҡа ғәйепләнгән*
*Ғүмерҙәр өҙөлгәндәр.*

*Шул каналдың аҫтарында*
*Кемдәрҙең ҡәберҙәре?*
*Ниңә шулай юҡҡа сыҡҡан*
*Кешенең ҡәҙерҙәре?*

*Ә нисек һуң шауланылар,*
*Уныһын булдырҙылар!*

*Хөр халыҡтың подвигы, тип*
*Ҡолаҡты тондорҙолар.*

*Һәм папирос сығарҙылар —*
*«Беломор» яҙыуында.*
*Ошо подвиг булһын, әйҙә,*
*Һәр кемдең ауыҙында!*

*Амнистия — геройҙарға!*
*Пьедесталдан төшөгөҙ!*
*Хәлһеҙ булып ҡайтып керҙе*
*Урта хәлле күршебеҙ.*

*— Йә, Мөхәмәт ағай, һөйлә,*
*Башың ниндәй ек күрҙе?*
*Тик ул бер ни һөйләмәне,*
*Төкөрҙө. Ҡан төкөрҙө.*

*Һөйләмәне, эсенә йотто,*
*Нимәләр уйлағандыр,*
*Тағы каналдар төҙөргә*
*Исәбе булмағандыр.*

*Тәмәкене нығ тартты ул,*
*Шул ғәҙәттән биҙмәне.*
*Мин янғансы ул янһын, тип*
*Ауыҙынан өҙмәне.*

*Тәмәкеһе булмағанда*
*Кемдән генә «атманы».*
*Ләкин мәрхүм бер саҡта ла*
*«Беломор»ҙы тартманы.*

1988

## *Рәшәткәләр*

*Балкондары тимер рәшәткәле,*
*Тәҙрәләре тимер рәшәткәле.*
*Ишеге лә тимер. Саҡ астылар,*
*Быныһына ла бик ҙур рәхмәт әле.*

*Баҡсаларға сығам. Рәшәткәләр.*
*Кибеттәргә керәм. Рәшәткәләр.*
*Өндә генә түгел, хәҙер хатта*
*Төштәремдә күрәм рәшәткәләр.*

*Ямғырҙан һуң шытҡан бәшмәкме ни —*
*Ярыша-ярыша үҫә рәшәткәләр.*
*Үҫә-үҫә, әҙәм балаһының*
*Күңеленә күсә рәшәткәләр.*

*Онотола йөрәктәрҙе асып,*
*Нурҙар сәсеп, йәшен йәшнәткәндәр.*
*Күңел менән күңел араһына*
*Һаҡсы булып баҫҡан рәшәткәләр.*

*Рәшәткәләр аша ҡарай-ҡарай*
*Беҙ тиңләштек, буғай, тотҡондарға.*
*Рәшәткәле яҙмышыбыҙ беҙҙе*
*Һөйрәй тағы ниндәй упҡындарға?*

*Бер нәмәһеҙ урында ла хәҙер*
*Бар шикелле тойола рәшәткәләр.*
*Үлгәс тә бит унан ҡотолоу юҡ —*
*Ҡәберҙәргә ҡуйыла рәшәткәләр.*

1994

## Ымһыныу

*— Дөйөм торлағыбыҙ иҫкергән, — ти,*
*Орансыбыҙ — яңы ҡарашлы. —*
*Уны һүтеп, яңы йорт һалайыҡ*
*Көндөң талабына ярашлы.*
*Беҙҙән шуны күптән көтә заман!*

*Емерергә беҙ оҫтарып бөткән,*
*Һүтәбеҙ ҙә утҡа яғабыҙ.*
*Нигеҙ ҡутарғандар араһында*
*Батырҙарҙан батыр ағағыҙ*
*Йөрөп ята арыу белмәй һаман.*

*Емереүен өйҙө емерҙек тә,*
*Ә яңыһын нисек һалаһы,*
*Заман талабына яуап биргән*
*Материал ҡайҙан алаһы?*
*Кирбес түгел, хет булһасы саман.*

*Оран һалған иптәшебеҙ беҙҙе*
*Кәкре ҡайынға бит төкәткән.*
*Сос ҡуллылар үҙҙәренә айырым*
*Ҡыуыш ҡорған дөйөм мөлкәттән.*
*Улар йәшәй! Беҙгә генә яман.*

*Өҫкә яуа ҡарҙар, яуа боҙҙар,*
*Ышыҡ урын ҡайҙан табабыҙ?*
*Бушҡа ымһынғандар араһында*
*Бахырҙан да бахыр ағағыҙ*
*Йөрөп ята. Күтенә күрә таман...*

1997

## Эшсе

*Хәрби завод, тимәк, серле завод,*
*Исеме юҡ, бар тик номеры.*
*Шул номерлы завод цехтарында*
*Үтә уның алтын ғүмере.*

*Һуңлағанды унда яратмайҙар,*
*Ана, сәғәт һуҡты алтыны.*
*Ғәзиз балалары йоҡлай әле,*
*Үбеп оҙатып ҡалды ҡатыны.*

*Энә күҙле проходнойҙан уҙҙы,*
*Станогын ходҡа ебәрҙе.*
*Мең һөнәрең уға кәрәк түгел,*
*Ул үҙ иткән шул бер һөнәрҙе.*

*Хәрәкәттәр аныҡ, ҡулдар етеҙ,*
*Яһағаны нимә бит әле:*
*Кешеләргә үлем алып килгән*
*Дәһшәтле бер ҡорал детале.*

*Минут үтә — деталь, минут — деталь...*
*Күпме улар? Һанын кем белгән!*
*Хәрби базаларҙа складтар*
*Ошо ҡорал менән күмелгән.*

*Унда ғына һыймай, илдәр буйлап,*
*Континенттар буйлап тарала.*
*Ул бар ерҙә һин тыныслыҡ көтмә,*
*Ул бар ерҙә һуғыш ярала.*

*Ҡорал шартлай. Уның ялҡынында*
*Ҡарт-ҡоролар, бала-сағалар,*
*Ҡорал яһаусыға ләғнәт уҡып,*
*Яна... яна... яна... яналар...*

*Йорттар ҡайҙа? Харабалар ғына.*
*Гөлдәр ҡайҙа? Ҡалған көл генә.*
*Өҫтәренә әсе төтөндәрҙән*
*Кәфен йәйеп йөрөй ел генә.*

*Ә ул һаман эше менән мәшғүл:*
*Зыр әйләнә һаман станок.*
*Хәрәкәттәр аныҡ, ҡулдар етеҙ —*
*Вәт оҫталыҡ тиһәң оҫталыҡ!*

*Сменаһы бөттө. Ул ҡайтышлай*
*Магазиндан алды яртыны.*

Балалары инде йоҡлағандар,
Үбеп ҡаршы алды ҡатыны.

Ғаилә башлығының кәйефе шәп,
Алдарында — тулы табағы.
Был заманда тағы нимә кәрәк?
Өҫтө бөтөн һәм туҡ тамағы.

Күңеле тыныс. Уға ишетелмәй
Ҡорбандарҙың ҡарғыш-илашы.
Сәйәсәткә уның ҡатнашы юҡ,
Уның өсөн бар бит ил башы!

Ял итергә ятты. Иртән тағы
Станогы көтә эшендә.
Ана нисек ул йылмайып йоҡлай,
Тыныс көндәр күреп төшөндә.

1998

## Зыяратта

Эх, һеҙҙең эргәгә йышыраҡ
Ҡайтаһы ине шул, ҡайтаһы!
Һәм бына, үпкәле шығырлап,
Асылды зыярат ҡапҡаһы.

Ҡәберҙәр... ҡәберҙәр... ҡәберҙәр...
Өҫтөнә муйылдар йәш ҡоя.
Исемдәр яҙылған таштарға
Һағышлы сәскәләр баш ҡуя.

Һеҙҙең дә ғибрәтле ғүмерҙәр
Минең дә яҙмышҡа бәйләнгән.
Бергәләп йәшәлгән миҙгелдәр
Ҡайтмаҫлыҡ тарихҡа әйләнгән.

Әммә һис хәтерҙән юйылмай
Һеҙҙәге яҡшылыҡ, ихласлыҡ.
Ерҙәме ҡалды ул матурлыҡ,
Гүрҙәме — ике-өс ҡоласлыҡ?

Һеҙҙән һуң килеүсе быуындар
Нимә һуң бирмәксе алмашҡа?
Уларҙың донъяһы ят безгә:
Уй башҡа, йәм башҡа, ғәм башҡа.

Тик тауҙар һаман да элекке,
Уйсан сал ҡылғанлы баштары.
Мәңгелек хаҡында серҙәрен
Тыңлайҙар зыярат таштары.

*Таштарҙа — Ай менән йондоҙҙар,*
*Янына яңылар ҡушылыр.*
*Моғайын, сикһеҙ был ғаләмдең*
*Ерҙәге көмбәҙе ошолор.*

*Шул көмбәҙ аҫтында һеҙ ятҡан*
*Мәңгелек бишеге тирбәлә.*
*Йоҡоғоҙ татлылыр. Шулай ҙа*
*Ашығыу юҡ һеҙҙең эргәгә.*

*Был фани донъяны ташларға*
*Әлегә сиратым ҫтмәгән,*
*Йырҙарым яҙылып бөтмәгән,*
*Һүҙҙәре табылып етмәгән.*

*Кисәге һүҙемдең көсө юҡ,*
*Ул ҡаршы торалмай яманға.*
*Әсе һүҙ, уҫал һүҙ кәрәктер*
*Бөгөнгө болғауыр заманға.*

*Хушығыҙ хәҙергә! Шығырлап*
*Ябылды зыярат ҡапҡаһы.*
*Иҫәнлек һораша белмәгән*
*Мәсетле ауылға ҡайтаһы.*

1999

## ***Оҙатыу***

*Хушлашыу һәр саҡ шом ҡуҙғата,*
*Хушлашыу йөрәкте һыҙлата.*
*Бар ауыл бер булып, йыйылып*
*Бер улын Кавказға оҙата.*

*Ҡатындар ҡара шәл урана,*
*Керпектәр йәштәргә сылана.*
*— Мәңгегә китмәйем бит, әсәй,*
*Әйләнеп ҡайтырмын, илама!*

*...Китте лә эләкте тамуҡҡа.*
*Булды ул Ач-хойҙа, Бамутта.*
*Һәм бына әйләнеп тә ҡайтты.*
*Ҡайтты тик ул цинк табутта.*

*Һәр һуғыш тик нәфрәт уята,*
*Ҡорбандар йөрәкте һыҙлата.*
*Бар ауыл һөлөктәй бер улын,*
*Зар илап, ҡәбергә оҙата...*

2000

## Ғашиҡтар яҙмышы

Беребеҙ ҡояш сығышында,
Беребеҙ байыштарында.
***Халыҡ йырынан***

*Ҡаршы тора алманыҡ шул*
*Тормош ағыштарына.*
*Киттең ҡояш сығышына,*
*Ә мин — байыштарына.*

*Түҙеүҙәре ҡыйын икән*
*Һөйөү һағыштарына.*
*Инде юлым яҡынлаша*
*Ғүмер ауыштарына.*

*Бармы шаһит тәүге йәрҙәр*
*Ҡабат ҡауышҡанына?*
*Уртаҡ юлдар бирелмәй шул*
*Ғашиҡ яҙмыштарына.*
*Кемгә — ҡояш сығышына,*
*Кемгә — байыштарына...*

2002

## Дуэлянт

*Хәрби тарих. Уның менән*
*Бар минең дә танышлығым.*
*Офицерҙар әйтер булған:*
*— Честь имею! Намыҫлымын!*

*Ҡарамайса: «Бының өсөн*
*Себер көтә!» — тиеүҙәргә,*
*Үҙ намыҫын һаҡларға тип*
*Сыҡҡан улар дуэлдәргә.*

*«Намыҫлымын!» Ошо һүҙҙең*
*Ҡәҙерҙәре киткән заман.*
*Парламенттар сепрәк итеп*
*Уға аяҡ һөрткән заман.*

*Маяҡһыҙ ил, аяҡһыҙ ил,*
*Иманһыҙ ил ҡайҙа бара?*
*Ирекһеҙҙән иҫкә төшә,*
*Офицерҙар, һеҙҙең сара.*

*Тормош үҙе юйып ҡуйҙы*
*Араларҙың алыҫлығын.*
*Һеҙҙең девиз — беҙҙең девиз:*
*«Честь имею! Намыҫлымын!»*

*«Честь имею! Намыҫлымын!»*
*Ҡилмәй башҡа зарланаһы.*
*Мин — дуэлянт! Барьерға баҫ,*
*Намыҫһыҙҙар заманаһы!*

2002

## Янымда бул!

*Тормош — дауыл, һынай ҙа ул,*
*Яҙмыш менән уйнай ҙа ул.*
*Дауылдарҙан аралармын,*
*Янымда бул! Янымда бул!*

*Йондоҙ яуған төнөмдә бул,*
*Ҡояш көлгән таңымда бул.*
*Икәү бергә һоҡланырбыҙ,*
*Янымды бул! Янымда бул!*

*Гөлөм дә бул, алым да бул,*
*Татый торған балым да бул.*
*Янда ғына булып ҡалма,*
*Йәнемдә бул! Ҡанымда бул!*

2006

## Ватан

*Ер шарында ике полюс, тибеҙ,*
*Рәсәйҙә лә шулай — сер түгел.*
*Мин, Ватан, тим, һин дә, Ватан, тиһең,*
*Тик ватандар беҙҙең бер түгел.*

*Һинең Ватан — батша һарайҙары,*
*Таш ҡоймалар уны уратҡан.*
*Минең Ватан — ергә һеңгән өйҙәр,*
*Күренеп тә бармай йыраҡтан.*

*Һинең Ватан — алдау офистары,*
*Банктар һәм биржа залдары.*
*Минең Ватан — минең кеүектәрҙең*
*Фәҡирлектән тыуған зарҙары.*

*Һинең Ватан — тамыры юҡ Ватан,*
*Дер ҡалтырар дауыл-елдәрҙән.*
*Минең Ватан — мәңге ошо ерҙә,*
*Тамырҙарын тәрән ебәргән.*

*Ҡара һәм аҡ... Ялған менән хаҡлыҡ...*
*Бер-беренә улар иш булмаҫ.*
*Ике полюс ҡушылмаған кеүек,*
*Ватандар ҙа беҙҙең ҡушылмаҫ.*

2006

**Факиһа**
**ТУҒЫҘБАЕВА**

## *Мин ҙур кеше булам мәрхәмәттән...*

*— Поэзияң — миңә серҙәш, — тине,*
*Күҙ-йәш түгеп әйтте сит бер ҡатын.*
*— Мин ҙур кеше булдым рәхмәтеңдән,*
*Көтмәгәндә, ҡатын, һин илаттың.*

*— Һиндәй тоғро бармы икән тағы? —*
*Ихлас әйтте миңә яҡын дуҫым.*
*— Ҡәҙереңдән үҫте күңелдәрем,*
*Бәхетемә исемеңде ҡуштым.*

*—Хәлең нисек, әсәй?*
*Балаҡайым,*
*Эй өҙөлөп тора минең өсөн.*
*— Мәрхәмәтең һаҡлай йөрәгемде,*
*Һаҡлай яҙмышымды аҡыл көсөң.*

*— Хеҙмәтеңә күрә хөрмәте, — тип*
*Ололаны мине ил башлығы.*
*— Илем өсөн инселәнгән илһам,*
*Хеҙмәт менән тағы көн башланды.*

---

*Факиһа Туғыҙбаева — Бүздәк районы Ҡаңны-Төркәй ауылы ҡыҙы. БДУ-ның филология факультетын тамамлай, төрлө матбуғат органдарында эшләй. «Аҡбуҙат» журналын ойоштороусы һәм уның баш мөхәррире. Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты.*

*Ҡәләмдәшебеҙҙе 60 йәше менән ихлас ҡотлайбыҙ, яңы ижади үрҙәр теләйбеҙ.*

*— Балам! — тине, һөйөп, бер аҡһаҡал,*
*Майҙан тотҡас халыҡ араһында.*
*Ҙурланың һин мине, эй аҡһаҡал,*
*Һәм тарихты күрҙем ҡарашыңда.*

## Сыбыртҡы менән йылан

*Йылан шыуышамы, тиһәм,*
*Булып сыҡты сыбыртҡы.*
*Сыбыртҡыны күп татыным,*
*Арҡа буйымды йыртты.*

*Йөҙөмдө йыртманы ләкин,*
*Аҡыл ғына төйнәнем.*
*Сыбыртҡыға рәхмәт әйтәм,*
*Булмаһа ла һөйгәнем.*

*Яҙмышым яҙ-ҡышлы булды,*
*Күҙем генә теймәһен.*
*Ҡара йыландар үҙҙәре*
*Ҡурҡты минән, күрәһең.*

*Күҙҙәремде быуа һалып,*
*Юлымды киҫмәнеләр;*
*Тәүбә! Тәүбә!*
*Был хәлдәр бит —*
*Барыһы ла кисәгеләр.*

*Йыландар ҙа үҙгәрә шул,*
*Башҡасараҡ шыуыша.*
*Килеп инмәҫ, тип кем әйтер,*
*Мин яһаған ҡыуышҡа?..*

***

*Нәфсе ҡыҫтап-ҡыҫтай нәфесемде*:*
*«Умырып ал!*
*Тик бер йәшәргә!*
*Терәкле лә, арҡалы ла ерҙә*
*Тейенгәндәр алтын-йәшмәгә.*

*Намыҫ ҡоло — ул бит барыбер ҡол,*
*Ҡарап торма ярлы-ялпыға.*
*Бәҫең һинең алтын һүҙ генәме?*
*Һин хаҡлыһың ысын алтынға...»*

*Эй ҡоторта Нәфсе әфәндекәй,*
*Рекламанан миңә күҙ ҡыҫа,*

*Нәфес—күңел, йән.

*Телевизор аша йылмайғанда,*
*Һүҙе ҡапланғандай һулышҡа.*

*Тиндәремде һанай-һанай торам*
*Кибеттәрҙә һөткә, икмәккә.*
*Их, етмәһә, Нәфсе әфәндекәй*
*Яраға тоҙ һалып имгәтә.*

*Нәфсене мин әле еңә киләм:*
*«Нәфис түгелһең һуң шул, әфәнде!»*
*Йә намыҫым төшөп ҡалыр, тиеп*
*Ямай һалам йыртыҡ кеҫәмде.*

## Цунами

«Фәйләсүф» шағирға

*Һыуҙың ерҙә формулаһын*
*Асҡандар күптән,*
*Шул тиклем дә күп асҡандар —*
*Таҙа һыу бөткән.*

*Һыуҙан ҡыуа кешеләрҙе,*
*Ярһып, цунами:*
*Һыу ҡайнай ялҡын-ут булып,*
*Бөтөп сыҙамы.*

*Цунамиҙың ғәйрәтендә*
*Кипкән инештең*
*Сибек өнөн бөгөн төштә*
*Мин дә ишеттем.*

*Күңелемдең формулаһын*
*Табалһаң — табыш,*
*Цунамиҙа ялҡынлана*
*Минең дә һағыш.*

## Ғәйбәт вирусы

*Тән сырхауы йән сырхауы түгел,*
*Ауырыуҙан дарыу табыла.*
*Ғәйбәт вирусына дауалар юҡ,*
*Үтеп инһә зиһен-аңыңа;*

*Ғәйбәт вирусына дауалар юҡ,*
*Батша тиклем батша баш һала,*
*Ҡоторонған кеше йыртҡыстан*
*Яманыраҡ һиңә ташлана.*

*Ниңә кәрәк иң заманса ҡорал,*
*Бер һүҙ етә икән башыңа?!*
*Шымсыларҙың өргән ҡуҙҙарынан*
*Илдәр яна, һуғыш асыла.*

*Сик-биктәрҙе белмәй ошо вирус,*
*Телдән телгә, илдән илдәргә*
*Күсә бара интернеттар аша,*
*Мохтаж түгел дауыл-елдәргә.*

*Быуаттарҙан быуаттарға күсә,*
*Иммунитет — бары выжданың.*
*Ыжламайым, тигәйнем дә бына,*
*Уф, ғәйбәттән тағы һыҙландым.*

***

*Бесән өҫтөндә ҡайтамын,*
*Юрта ғына йөк атым,*
*Күҙ менән йондоҙ ауларға*
*Ҡаҡсалҡан күккә баҡтым.*

*Сәрмәсәндән рәхәт һалҡын*
*Тарала ерҙе иңләп,*
*Йөк башында бәүеләмен,*
*Арба, — гүйә, сәңгелдәк.*

*Эңерҙә ирей көн үҙе—*
*Юғалта балҡыштарын.*
*Йәйҙе алып ҡайтып киләм,*
*Йылытыр, тип, ҡыштарын.*

*Хөрмәтләгән кеүек мине,*
*Өйҙәр, ана, ут ала.*
*Ҡапҡа асыҡ ҡайтыуыма,*
*Аш еҫе — ихатала.*

*Йөк менән бергә ауамын —*
*Әсәй ҡосаҡлап ала...*
*Ҡайҙа икән шул саҡтағы*
*Бесән сапҡан ҡыҙ бала?!*

*Инә ҡортон юғалтҡастын,*
*Туҙҙырылған күс-йортом.*
*Сит кеше мин, индем бына*
*Һыу эсергә бер йотом.*

*Тыуған тупһа төптәрендә*
*Сит кеше мин, сит кеше.*

*Ҡасып ҡалайыммы бында*
*Таныш кесерткән төҫлө?*

*Кесерткәндәр саҡмай мине,*
*Бәләкәстән ул — дуҫым.*
*Ишеткәндәй булам үҙем*
*Әсәйемдең тауышын.*

*Юҡ, китәйем, кеше-ҡара*
*Йәшемде күрмәҫ элек.*
*Китәйем мин ҡапҡаларға*
*Яңы йоҙаҡтар элеп:*

*Иҫтәлектәр сыҡмаһындар*
*Оҙатырға артымдан.*
*Мин бесән ташыған арба*
*Сит ҡулдарҙа ватылған.*

## Фәлсәфә

*Миндә хәҙер сәскә фәлсәфәһе,*
*Үҫкем килә, орлоҡ ҡалдырғым,*
*Һыу-һауанан килә, тупрағымдан*
*Йәшәү танһығымды ҡандырғым;*

*Миндә хәҙер йылға фәлсәфәһе,*
*Алға ғына аҡһын уйҙарым.*
*Һыуҙың төбөндәге таштар кеүек,*
*Иҫтәлектә ҡалһын моң-зарым;*

*Миндә хәҙер тауҙар фәлсәфәһе,*
*Ер тетрәһә, — бәлки, ауырмын,*
*Ергенәмдең ете ҡатына ла*
*Сат йәбешкән йәшәү тамырым.*

## Ҡултамға

Был донъяны аҡыл, йөрәк тота,
Дәрәжәләр тотмай донъяны.
**Назар НӘЖМИ.**

*Эй аҡыллы һүҙҙәр, Назар ағай,*
*Йәшәү ҡанунының ише генә!*
*Эстән, тыштан яҙып ҡуйырлыҡ бит*
*Оло, кесе түрә ишегенә.*

*Хәлдәр ләкин бөгөн башҡасараҡ,*
*Донъяларҙы тота ҡултамғалар.*
*Ҡултамғаны хатта миҙал итеп*
*Йәштәр муйындарға йыш тағалар.*

*Күлдәктәргә уны төшөрәләр —*
*Батшаныҡы йәки «йондоҙ»ҙоҡо*
*Булһа—килешер ҙә ине, бәлки,*
*Ҡултамға бит уйнаш бер ҡыҙҙыҡы.*

*Донъяларҙы тота ҡултамғалар,*
*Сәйәсмәндәр бөтөн Ер шарында*
*Ышаналар бөгөн кешелекте*
*Ҡултамғалар ғына һаҡларына...*

*Бына мин дә торам сират көтөп,*
*Түгә-түгә күпме йөҙ һыуымды,*
*Бер ҡултамға өсөн — көнө буйы,*
*Ҡыҙған башым бында тиҙ һыуынды.*

*Шул ҡултамға хәл итергә тейеш*
*Минең яҙмышымды иртәгәһен.*
*Документ тип уны йөрәгеңдең*
*Тапҡырында ғына йөрөтәһең.*

*Мин үҙем дә ҡуям ҡултамғалар,*
*Шиғыр яҙған кеүек, янып утта,*
*Назар ағай бик хаҡ әйткән, тиеп:*
*«Был донъяны аҡыл, йөрәк тота!»*

## Эсәмен әрем һыуын

*Әрнеүемде баҫыр өсөн*
*Эсәмен әрем һыуын.*
*Ергә, һыуға, һауаларға*
*Юҡ рәнйеүем, асыуым.*
*Шайтанды бер аңлайым тип,*
*Дегәнәклеккә сумам,*
*Ен-пәрей булып күренһәм*
*Шау сәскәле ысындан,*
*Ҡандар тама үҙ усымдан,*
*Йөрәккә ҡандар һарҡый.*
*Рәнйешемде онотоРға*
*Нисек булайым һантый?!*
*Тупрағыма түгелһә лә*
*Күпме ҡайғы, ҡара ҡан,*
*Ап-аҡ булып ромашкалар*
*Тағы ла сәскә атҡан.*
*Минең дә бит кешелектән*
*Торалыр күктәр имен;*
*Минең дә бит күңелемдән*
*Һыуҙар сафлана, тимен;*
*Минең дә бит өмөтөмдән*
*Үләндәр ҡалҡа яҙын.*
*Юҡҡа түгел һәр һулышым,*

*Юҡҡа түгел һәр аҙым.*
*Мин дә балсыҡтан яралған,*
*Ҡатырған мине Ҡояш.*
*Кирза итек иҙгәндә лә*
*Мин ул еремә оҡшаш.*
*Иген үрсеткән еремә,*
*Емеш биргән тупраҡҡа.*
*Ҡаралаһалар ҙа һалып*
*Йәндән китмәҫ буръяҡҡа,*
*Ишетелә мәңгелектән*
*Ҡош һайрауы ҡолаҡҡа.*

## Ҡасаҡ

*Һырахана — тыуған мөйөшкәйе,*
*Ҡайҙа барһын йолҡош теләнсе?*
*Күпертептәр һыра ҡоя «дуҫы»,*
*Һыйлай ҡулдарынан килгәнсе.*

*Таштай ҡатҡан икмәк һыныға ла*
*Ярап ҡала тамаҡ ас саҡта.*
*Оҡшатамын уны үҙе теләп*
*Бәхетенән ҡасҡан ҡасаҡҡа.*

*Булғандыр ҙа уның тыуған өйө,*
*Ата-әсәһе лә иҫәндер,*
*Әмер түгел, бары хәмер генә*
*Ейер ризыҡтарын киҫкәндер.*

*Булғандыр ҙа уның ғаиләһе—*
*Күгәрсендәй гөр-гөр килгәндер,*
*Бишегендә ятҡан баш балаһы:*
*«Атаҡайым!» — тиеп көлгәндер.*

*Булғандыр ҙа уның тыуған ере,*
*Туйҙырыусы беҙҙе туп(ы)раҡ.*
*Тупраҡтан да, тыуған өйөнән дә*
*Мәңге ҡайтмаҫлыҡ ул бик йыраҡ.*

*Күңелендә — шайтан туйҙарылыр,*
*Эй Хоҙайым, уныһын кем белһен?*
*Кешелектән сыҡҡан кеше бына*
*Үйландыра инде төрлөһөн.*

*Өйө генә түгел, ул үҙе юҡ,*
*Ғаилә генә түгел, юҡ иле.*
*«Инәйеңде генә шулай итәм!..»—*
*Эскеселәр бар ҙа бер телле...*

*Осратмаһам уны нимә булған?*
*Байғош түгел бит был.*

*Их, ысын!*
*Йәшлегемдә ғәзиз тауышынан*
*Танып ҡалдым халыҡ артисын.*

*Үлә яҙып ғашиҡ ине ҡыҙҙар,*
*Ул буй-һыны, тауыш, ул йөҙө!*
*Шөһрәт толпарында елдерҙе лә*
*Балда-майҙа ғына ул йөҙҙө.*

*Урал батыр ине сәхнәлә ул,*
*Яуға атлыҡтырған Салауат.*
*Йөрәгенән һыҙен һурып алып*
*Йәшәй ине йәнде дауалап.*

*Уйнап, әллә уйлап отторғанмы*
*Был тормоштан?*
*Унығын кем белһен?*
*(Эй, һин, тормош,*
*Урал батырға ла*
*Һис кенә лә еңел түгелһең.)*

*Ниндәй рәхәтлектәр өмөт итеп*
*Был донъянан ҡасҡан?*
*Ул — ҡасаҡ.*
*Тере саҡта асмаҫ фажиғәһен,*
*Үлгәс — хәтирәләр асасаҡ.*

## Эволюция

*Ерҙең йөҙө — даръя булған, тиҙәр,*
*Хайуандар, ти, булған балыҡ һынлы.*
*Шып-шым үткән йыйылыштан сыҡҡас,*
*Иҫкә төшөрҙөм һуң ниңә быны?*

*Хәҙер ҙә бит тыуа ҡайһы кеше*
*Шау балыҡҡа оҡшап, ти ғалимдар.*
*Уйлап-тикшергәндән сәбәптәрен,*
*Радиацияны ғәйепләйҙәр.*

*Шигем дә юҡ. Бәлки, шулайҙыр ҙа,*
*Ниндәй радиация һуң беҙҙең тормош?*
*Халыҡ ауыҙына һыу ҡапҡандай,*
*Илдә үҙгәрһә лә бар ҡоролош?!*

*Халыҡ ауыҙына һыу ҡапҡандай,*
*Шып-шым үтәй йүнһеҙ әмерҙәрҙе,*
*Хәйлә ҡармағына берҙәм ҡаба,*
*Ем көткәндәй көтөп әҙерҙәрҙе...*

*Халыҡ күрмәһә лә, балыҡ күрер,*
*Изгелегең ҡыл, ти мәҡәл.*
*Дөрөҫ әйтә.*
*Тиң ниңә һуң кеше һынлы кеше*
*Балыҡ булып йәшәй күрәләтә?!*

## Ер әйләнә...

*Эй Хоҙайым!*
*Бирсе сабырлыҡтар,*
*Ер шарында яңғыҙ баҫып торам.*
*Ер әйләнә...*
*Үкһеҙ яңғыҙлығым —*
*Бар ғаләмгә, гүйә, һүҙһеҙ оран,*
*Ер шарында яңғыҙ баҫып торам.*

*Сүллек ҡайнай бархандары менән,*
*Ажарлана, ана, диңгеҙҙәре.*
*Ер шарында яңғыҙ баҫып торам,*
*Ел-дауылдар иҫә гел тиҫкәре,*
*Йәһәннәмгә йәнде түңкәрерҙәр...*

*Көс бир, Хоҙай!*
*Көс бир*
*Йөрәгемә*
*Ошо ғазаптарҙы үткәрерлек.*
*Ер үҙәге — Урал иҫкә төшкәс,*
*Күңелдәрем китте күтәрелеп,*
*Осмаҫ йәнем, осмаҫ түңкәрелеп.*

*Кешеләргә ышанысың бөтһә,*
*Ерҙең тартыу көсө нимә генә?*
*Ҡайғыһы юҡ миндә Ер шарының,*
*Үҙ тиҙлеген белеп елә генә —*
*Ҡаршы килеп ҡара теләгенә?!*

## Ситлектәге батшалыҡ

*Нисек була икән башҡортсаһы*
*Зверинецтың, тим, исеме?*
*Билет һатып ҡына индерәләр,*
*Ҡыҙыҡ күрһен, тиеп кешене.*

*Ата арыҫлан да — ҙур ситлектә,*
*Ашаталар, ахыры, — батша ныҡ.*
*Бер ҡурҡыныс янамай ҙа бында —*
*Ситлек эсендә бар батшалыҡ.*

*Бүре-маҙар, юлбарыҫ та, ана,*
*Ҡара йыланы ла — ситлектә.*

*Иректәге сәпсек кенә барыһын*
*Сырҡылдаған булып сит итә.*

*Эй Арыҫлан!*
*Башҡа илдә берәү*
*Ололамаҫ һине «батша» тип.*
*Мин генә ул шулай өндәшәмен:*
*Менталитет беҙҙең башҡа бит.*

*Эй мәрәкә!*
*Барсағыҙҙы әгәр*
*Азат иткәндә лә ситлектән —*
*Ояғыҙға кире ҡайтарырға*
*Берәй ризыҡ еткән, ит иткән...*

*Бер тамаша ҡылыуым да етте —*
*Ял итәйем китеп ситкәрәк!*
*Үҙ хәлеңде аңлау өсөн ҡай саҡ,*
*Йыртҡыс булғанда ла, сит кәрәк.*

## *Киләсәкте уйлайым мин...*

*I*

*Аҡбуҙатҡа атланғанһың, Заятүләк;*
*Һыу иленән Балҡантауға ҡайтыу — теләк.*
*Асылынан сығып бер аҙ китеүеңә,*
*Ышанғандай мең-мең йылдар үтеүенә,*
*Ҡарағанһың арттарыңа ҡайырылып,*
*Эркелешеп сыҡҡан йылҡы, айырылып,*
*Кире сумған Һыу иленә — батшалыҡҡа;*
*Елдергәнһең, ҡыуанып һин баш һаулыҡҡа.*
*Заятүләк—ырыуымдың инеш башы,*
*Зат-зәүерҙең гәүһәре һин, йөҙөк ҡашы,*
*Шуға һиңә оҡшағандыр минең холҡом:*
*Һис ҡурҡытмай күрәсәгем: ҡойон, упҡын!*
*Еләм мин дә Аҡбуҙатта, һинең кеүек,*
*Сапҡанымда йәнгенәйем — азат кейек,*
*Йыртҡыстарҙы аулайым мин шоңҡар сөйөп.*
*Шоңҡар тигән йыр булыр ул — оса бейек;*
*Тик артыма ҡарамайса нисек түҙмәк?*
*Хәтер атлы йылҡыларым меңләп, йөҙләп*
*Эйәргәнен тоя йәнем, тән сымырлай,*
*Үткән көнгә тарта, тарта уй сылбырҙай!*
*Оҙатамы өйөр-өйөр ырыҫ ҡына?*
*Боролдо иһәм—ырыҫ ҡаса ҡырыҫ ҡына...*
*Булдымы икән бәхет, һөйөү сағым ғына, —*
*Сумған барыһы күлдең төпкөл ағымына.*

II

*Заятүләк — ырыуымдың инеш башы,*
*Зат-зәүерҙең гәүһәре һин, йөҙөк ҡашы.*
*Ҡисәге көн кисәгелә ҡалһын, әйҙә,*
*Аҡбуҙат тик тора алмай тышау-бәйҙә.*
*Һыу батшаһы хәтирәңде һаҡлай бирһен,*
*Ә толпарың ал таңыңа ҡанат кирһен!*
*Заятүләк, мин бит күптән төшөнгәнмен*
*Илкәйемдең ырыҫҡайын төшөргәнен*
*Ваҡыт тигән даръяларҙың төптәренә:*
*Инҡилаптар тына, берсә ҡуптарыла...*
*Түл йәйәбеҙ ырыу-ырыу, ырыу-ырыу,*
*Нәҫелебеҙ ағасы нык — теймәҫ ҡырау.*
*Өйөр-өйөр мал да үрсей ут-ялҡындай,*
*Баҫыу-баҫыу иген үрсей ҡот-алтындай.*
*Күҙ күреме генә етмәҫ ерҙәрем бар,*
*Илемде ил иткән аҫыл ирҙәре бар.*
*Алдағыны уйлайым мин, Заятүләк,*
*Һинән ҡалған ошо теләк, ошо бүләк!*

## Яңы йыл байрамынан һуң

*Боҙ-ҡар һарайҙарҙы емерәләр,*
*Байрам тамам. Ҡәрәк йәшәргә!*
*Тәтәй таҡҡан шыршы, батша булып,*
*Яңғыҙ тороп юҡҡа йәшәрә.*

*Ҡарһылыу ҙа, Ҡыш бабай ҙа күптән*
*Китеп барҙы хыял иленә.*
*Елдәр ялай байрам майҙандарын,*
*Гел сүп кенә микән телендә?*

*Ҡар һындар ҙа берәм-берәм ирей,*
*Асығыраҡ шуға һәйкәлдәр.*
*Һәйкәлдәрҙә ҡалған кешекәйҙәр*
*Бөйөк һүҙҙәр беҙгә әйткәндәр.*

*Тик шуныһы ғына үкенесле:*
*Һалғандары булған шау боҙҙан,*
*Үлеү менән,*
*Улар беҙгә ҡорған*
*Ҡоролоштар иреп боҙолған.*

*Бик боронғо балбал булып тора*
*Йәнһеҙ бронза, йәмһеҙ таш һындар,*
*Мәңгелеккә ергә ҡатҡан кеүек,*
*Мәңге аҡтармаҫтай ташҡындар.*

*Тик берәү ҙә инде табынмай шул*
*Батшаларға —*
*Улар иҫкергән.*
*Гел тиҫкәре һүҙҙәр һөйләһәм дә,*
*Мин үҙемде бөгөн кисерәм.*

## Ҡустыларым

*Улы ҡәҙерләһә — әсәһе лә*
*Бик хөрмәтле,*
*Иле ҡәҙерле...*
*Хәсрәтемде*
*Аңлатырлыҡ түгел...*
*Арта бара шағир ҡәбере.*

*Вәлидиҙәр илдә тыуып тора,*
*Бабичы һуң ҡайҙа — шағиры?!*
*Ҡустыларым!*
*Әжәл ҡыра һеҙҙе,*
*Ҡанһыратып уйлы бәғерҙе...*

*Туғандарым!*
*Сафтар һирәкләнә,*
*Юҡ та баһа илдә ҡан ҡойош.*
*Бер дошман да һеҙгә төбәп атмаҫ,*
*Атлап барыуығыҙ ҡып-ҡыйыш.*

*Дошманға ла тик көслөләр кәрәк,*
*Ҡыйыуҙарҙы ғына аталар.*
*Һеҙгә тейеп тормаҫ бер-берәү ҙә:*
*«Былай ҙа, — тип, — аунап яталар...»*

*Ҡустыларым!*
*Ҡурсып өндәшәмен:*
*Һеҙ — талантлы халыҡ таланты.*
*Беләһегеҙ бит һеҙ:*
*Вәлидиҙәр*
*Бабичтары менән ҡанатлы!*

***

*Дошманыма рәхмәт инде!*
*Ул көнләшкән һайын үҫәм:*
*Ваҡытымды ҡәҙерләтә —*
*Башым сыҡмай минең эштән.*

*Дошманыма рәхмәт төшһөн!*
*Гел күҙәтеп уяу тора.*
*Ғәмһеҙлектән ойоп китһәм,*
*Әлдә ул бар уятырға!*

*Дошманымды хөрмәт итәм*
*Аңлағанға минең көстө,*
*Юлдарымды киҫкәндә лә*
*Ҡара йылан булып үсе.*

*«Дошманыма дан!» — тимен мин,*
*Ул түгел дә ике йөҙлө.*

Матурлана барам һаман,
Сөнки миндә — ике күҙе.

## Мөхәррир

Баш мөхәррир вазифаһы —
Дәрәжә түгел, яҙмыш.
Яңылышһа бер өтөргә,
Ер шарының шартлауы бар
Ҡапылдан ғына, яңылыш.

Төҙәтә ул хаталарын
Батшаларҙың, ярандың —
Ер йөҙөндә күпме улар,
Меңәрләгән, эй Раббым!

Ғалимдарҙың формулаһын
Раҫлап ҡуя ҡултамға,
Философтарҙың яңылышын
Иң беренсе ул таба.

Кеше хаҡын хаҡлау ғына—
Уның иң төп бурысы,
Уҡый-яҙа
Ирегәнсе
Күҙҙәренең ҡороso.

Компьютер ҙа, интернет та
Унан аҡыллы түгел.
Булһа икән дә уларҙа
Мөхәррирҙәге күңел?

Мөхәррирҙәге кешелек,
Ундағы оло йөрәк!
Ул бер үҙе булғанда ла,
Бөтөн йыһанға терәк.

Йөрәге лә шартлап ҡуя,
Булһын, тиеп, ил имен.
Намыҫ үлсәүе — мөхәррир,
Хаҡлыҡ үлсәүе, тимен.

## Тигеҙләмә

Математик мәсьәләләр ябай,
Тигеҙләмәләргә ҡоролған.
Тигеҙләргә кәрәк бары уйлап,
Шулай килә, тиҙәр, борондан.

Мин уларҙы уйнап сисә инем,
Бала инем — ихлас, бер ҡатлы,—

*Уйландырмай ине кеше йәне,*
*Уйландырмай ине ир, ҡатын...*

*Ярылыр ҙа үҙ эсенә алыр:*
*Ер шарына бәрелә маңлайым,*
*Йәшәү менән үлем — тигеҙләмә,*
*Тик тигеҙләй генә алмайым.*

## Ҡырыҫлыҡ

Несказанные речи я больше не твержу.

**Анна АХМАТОВА**.

*Эстән генә һыҙып йәшәйем мин,*
*Эске монологты төшөрһәң*
*Аҡ ҡағыҙға —*
*Том-том булыр ине,*
*Иҫкергәнмендер мин иҫкерһәм.*
*Йәшен менән йәшен сәкәшкәндәй,*
*Әрләшә лә — кемдер онота.*
*Ә мин — тып-тынысмын.*
*Йәшәй бирәм,*
*Әрнеү һалып йәнгә, гел утта.*
*Күңелемдә — әйтелмәгән һөйөү,*
*Әйтелмәгән рәнйеш, аһ-зарҙар;*
*Әйтелмәгән өгөт-нәсихәттәр,*
*Әйтелмәйсә ҡалған ҡарарҙар...*
*Йыртып ташлап булмай беренһен дә*
*Йәки булмай утҡа ырғытып,*
*Йылмайыуға ғына йәшереп тә —*
*Мин үҙем бит шуға ҡырыҫлыҡ!*
*Ҡырағайлыҡ түгел,*
*Ҡырыҫлыҡ мин —*
*Тәрбиәһен биргән тау-таштар.*
*«Яратмай», — тип үйлама һин, Кешем,*
*Ауыр булһа минең ҡараштар.*

***

*Ер-һыуынам минең,*
*Ерһеүҙәрем*
*Баштарымдан ғына ашҡаны.*
*Йәннәттә лә йәнгә йәм табалмам,*
*Үҙ итәлмәм һинән башҡаны.*

*Бер артыҡ баш тоям үҙ-үҙемде,*
*Ятһа ла мине баш ҡалам.*
*Асылының аҫау тулҡынына*
*Ҡоластарым йәйеп ташланам.*

*Менеп баҫам тағы Балҡантауға —*
*Башын эйеп ҡала ҡылғандар,*
*Уҡлы ҡылған, әрһеҙ әремдәр ҙә —*
*Бөтәһе лә миңә туғандар.*

*Танышы ла, таныш түгеле лә,*
*Эй, өҙөлөп әйтә: “Туғаным!”*
*Бер кемгә лә мине оҡшатмағыҙ,*
*Мин еремә оҡшап тыуғанмын.*

*Ауыҙ менән ҡоштар тотҡанда ла,*
*Таштар ярғанда ла маңлайым,*
*Үҙем менеп баҫҡан Балҡантауҙан*
*Бейегерәк була алмайым.*

*Таптырмағыҙ минән далалағы*
*Йәнде ҡурғыс ҡырыҫ ялҡынды,*
*Асылының тәрәнлеге миндә,*
*Ҡандарымда уның һалҡыны.*

*Тормай бер кем минән, бер нәмә лә*
*Изгелеге өсөн хаҡ һорап,*
*Ҡаҡланғанда дауа миңә ҡаҡы,*
*Шишмә һыуы, ыулы аҡһырғаҡ.*

*Ергә ятам —*
*Ҡараштарым күктә,*
*Ҡояш булып йыһан төбәлгән.*
*Түбәндә лә түбәнселек түгел,*
*Шишмә йыры килә түбәндән.*

*Тулҡынланам баҫыу тулҡынында —*
*Күҙ күреме етмәҫ диңгеҙем.*
*Алтындарын ҡаҡҡан шул диңгеҙгә*
*Күңелдәрем менән игеҙмен.*

*Яландарым минең,*
*Ялан аяҡ,*
*Мин ялан баш — һеҙҙең үҙ бала.*
*Батып киләм сәскә туҙанына,*
*Ҡулым бирәм ҡулын һуҙғанға...*

*Мәрмәр баҫҡыс, көмөш манаралар —*
*Ул минеке түгел, баш ҡалам.*
*Һағынғында йәнде имләр өсөн*
*Асылыға төшөп таш алам.*



Рамазан
ШӘҒӘЛИЕВ

# «ТЫУҒАН ЯҒЫМ КҮЛДӘРГӘ БАЙ...»

## *Бына ниндәй!*

*Ағиҙелкәй киң икән,*
*Диңгеҙҙәргә тиң икән, —*
*Дуҫ-иштәрҙең тыуған яғы*
*Бына ниндәй ил икән.*
*Саҡырыуҙы көтөп тормай,*
*Һағындыңмы — кил икән.*

*Өфөләре «өф» иткән,*
*Йорттары күккә еткән.*
*Йүкәләре, муйылдары*
*Күптән хуш еҫтәр бөрккән.*
*Урам буйлап теҙелешеп*
*Минең килеүҙе көткән.*

*Кешеләре шат икән,*
*Күңелдәре пак икән,*
*Ҡунаҡтарҙы ҡунаҡ итмәү*
*Улар өсөн ят икән:*
*Дуҫ-иштәрҙең тыуған яғы*
*Бына ниндәй яҡ икән.*

---

*Рамазан Шәғәлиев (1935) — танылған башҡорт шағиры. Силәбелә йәшәп ижад итә. Башҡортостан Республикаһының һәм Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. 20-нән ашыу китап авторы. М. Аҡмулла, Ҡ. Даян исемендәге премиялар лауреаты.*

*75 йәшлек юбилейың менән, ҡәләмдәш!*

## Өйәлге күл*

*Өйәлге лә күлкәй, әй, ҡамышың*
*Уйнар микән, ҡырҡһам ҡурайға?*
*Ҡыр ҡаҙҙарың, ояларын ташлап,*
*Осмаҫтармы башҡа туғайға?*

*Өйәлге лә күлкәй, әй, ҡамышың*
*Сал тулҡындар менән ҡойона.*
*Һиҙәһеңме, бөтә ҡыяҡтарҙан*
*Һыуҙарыңа ынйы ҡойола.*

*Өйәлге лә күлкәй, әй, ҡамышың*
*Һайрар ҡоштарыңа тал икән.*
*Урал ғына тауым күкрәгендә*
*Һиндәй күлдәр тағы бар микән?*

## Таң елдәре

*Мейәс өҫтөндә — аҡ томан,*
*Аҡҡоштар төшкәнме ни?!*
*Үҙ күлдәрен ташлап, улар*
*Мейәскә күскәнме ни?!*

*Бөҙрә талдар аҡҡоштарҙы*
*Иркәләй, наҙлаймы ни?!*
*Ҡағынғанда ҡанаттарҙы*
*Ҡамыштар һанаймы ни?!*

*Тулған ай ҙа улар менән*
*Йөҙә, ҡойонамы ни?!*
*Береһенән береһенә*
*Йөрөп һыйынамы ни?!*

*Таң елдәре томандарҙы*
*Таратып үтә икән.*
*Таң еле менән аҡҡоштар*
*Оса ла китә икән.*

## Гармунһыҙ ауыл

*Ауылыбыҙҙа гармунсы юҡ,*
*Беҙҙең ауыл — гармунһыҙ.*
*Шуға уның урамдары*
*Кистәрен йырһыҙ, моңһоҙ.*

---

* *Силәбе өлкәһендәге күл.*

*Гармунһыҙ ауылдың ҡайҙан*
*Йыр белһен ҡыҙ, улдары?!*
*Гармун телдәрендә бит ул*
*Ауылдың йыр, моңдары.*

*Моңдар сормаларҙа ята,*
*Аунап туҙан эсендә,*
*Кемдеңдер уйнауын көтөп*
*Иртәләрен, кисен дә.*

*Гармунлы саҡын һағынып*
*Хәтерләй ауылҡайым.*
*Егет, гитараһын сиртеп,*
*Бейетә һылыуҡайын.*

## Килегеҙ беҙгә ҡунаҡҡа

*Тыуған яғым күлдәргә бай,*
*Тыуған яғым — күлдәр иле.*
*Йәнгә рәхәт, тәнгә сихәт*
*Күлдәренән иҫкән еле.*

Ҡушымта:
*Килегеҙ беҙгә ҡунаҡҡа,*
*Ял итергә Ҡоншаҡҡа.*
*Теләһәгеҙ, ҡалырһығыҙ*
*Ғүмергә беҙҙең яҡта.*

*Киң күңелле, алсаҡ йөҙлө*
*Беҙҙең яҡтың кешеләре.*
*Туғандарса ҡаршы алыр*
*Ололары, кеселәре.*

Ҡушымта.

*Ниндәй өйҙөң түрендә лә*
*Ҡунаҡтарға урын әҙер.*
*Өҫтәлдәр ҙә байрамдарса:*
*Һеҙҙе көтә хөрмәт, ҡәҙер.*

Ҡушымта.

## Ҡыҙ йыры

*Саҡырма мине һыҙғырып*
*Бөгөн, йән киҫәккәйем.*
*— Кемдер атын эсерә, — тип*
*Сығармаҫ әсәкәйем.*

*Сәкырма берүк йырлап та,*
*Йыр көсһөҙ, бәғеркәйем.*
*— Иҫеректәр йөрөй, — тиеп*
*Сығармаҫ әсәкәйем.*

*Тәҙрәбеҙҙең ҡапҡасын да*
*Ҡағып торма, йәнкәйем.*
*— Ел сыҡҡан, һалҡын тейер, — тип*
*Сығармаҫ әсәкәйем.*

*Гармуныңды алып сығып,*
*Уйнап уҙ, йөрәккәйем.*
*Һинең уйнауыңды үлеп*
*Ярата әсәкәйем.*

## Ал мине лә

*Ал мине лә үҙең менән бергә,*
*Китә күрмә яңғыҙ ҡалдырып.*
*Айырылып ҡалған аҡҡош һымаҡ*
*Мин йөрөрмөн һинһеҙ ҡаңғырып.*

*Китә күрмә көн-төн дөрләп янған*
*Усағыңды тапап, һүндереп.*
*Өшөгәндә кемгә һыйынырмын,*
*Хәлдәремде белер кем килеп?*

*Өҙә күрмә һайрар ҡошсоғоңдоң*
*Көйләр көйөн, йөрәк ҡылдарын.*
*Өҙөлгән ҡыл, нисек төйнәһәң дә,*
*Бирә алмай тәүге моңдарын.*

## Бер күрәһе ине

*Бер күрәһе ине,*
*Бер үтәһе ине*
*Һинең менән йәшлек эҙенән.*
*Таң аттырып бергә,*
*Ҡурҡып тормай бер ҙә*
*Ололарҙың әйткән һүҙенән.*

*Бер күрәһе ине,*
*Бер үрәһе ине*
*Таҡыялар һиңә икәүләп.*
*Ҡарап туймаҫ инем,*
*Арыу тоймаҫ инем*
*Көнө буйы һине иркәләп.*

*Бер кұрәһе ине,*
*Бер ұбәһе ине*
*Миңдәреңдән наҙлап, күҙеңдән.*
*Һөйөү йырын көйләп,*
*Эс серемде һөйләп,*
*Төшөрмәйсә һине теҙемдән.*

## *Көт кенә*

*Дауылды дауыл тимәм,*
*Яуынды яуын тимәм.*
*Таш яуһа ла сыҙармын.*
*Һиңә юлға сығармын.*
*Көт кенә һағынып мине.*

*Көндө көн тиеп тормам,*
*Төндө төн тиеп тормам.*
*Көнө-төнө елермен,*
*Яндарыңа килермен.*
*Көт кенә һағынып мине.*

*Ауыр тип тормам бер ҙә,*
*Алып килермен бергә*
*Сәскәләрҙең еҫлеһен,*
*Күҙкәйҙәрең төҫлөһөн.*
*Көт кенә һағынып мине.*

## *Уйнат әле*

*Уйнат әле гармуныңды*
*Үҙәктәрҙе өҙҙөрөп.*
*Уйнай белмәһәң өҙҙөрөп,*
*Уйнама йән көйҙөрөп.*

*Уйнат әле гармуныңды,*
*Сихри моңдар түгелһен.*
*Йоҡлап ятҡан һылыуҙарҙың*
*Йоҡолары бүленһен.*

*Уйнат әле гармуныңды,*
*Йөрәктәр ҡанатланһын.*
*Йәшлеген һағынғандарҙың*
*Йәшлеге ҡабатланһын.*



**Хәйҙәр ТАПАҠОВ**

# ҠУРСАҠ

## ХИКӘЙӘ

Илһөйәрҙең күҙ йәштәре сикәләренән һырғалап аҡты ла аҡты. Төпһөҙ күлдер ул үрһәләнгән йәне, юғиһә керпек төптәрен әсеттереп, тыйып торғоһоҙ тоҙло ағымдай тышҡа бәргән күҙ йәштәре бер туҡтамаһа бер туҡтар ине. Ул уларҙы тыйманы ла, тыйырға ла теләмәне. Кемдән тартынырға был яландай иркен, ҡиммәтле йыһаздар менән тулы һәм шул уҡ ваҡытта тере зат ҡалмаған таш лабиринтта? Хатта телефондан шылтыратып йыуатыусы, хәленә инеүсе лә юҡ бит. Шаулап-гөрләгән миллионлы ҡалала япа-яңғыҙы ҡалды. Тышы ялтырай, әммә булмышына иремәҫлек һалҡын боҙ һеңеп ҡатҡан. Ошо мәлдә йөрәк өйәнәге тотоп яҡты донъянан китеп барһа, белеүсе лә, күреүсе лә, хатта эҙләүсе лә табылмаҫ. Унһыҙ ҡолаҡтары тынсый ҙа баһа һәммәһенең, сөнки уҫал етәксенең теңкәгә тейеп мыжып йөрөүенән йөрөмәүе хәйерле! Эшенән дә өс-дүрт көн үткәс кенә, зарураттан түгел, әҙәп йөҙөнән эҙләргә тотонорҙар: унда-бында шылтыратып, белешеп аҙапланырҙар, рәт сыҡмаҫтайға оҡшаһа, һуңғы сиктә милицияға хәбәр итерҙәр. Унығы ла машинаһындағы сиренаны яман олотоп, уттарын янаулы балҡытып килеп етер, бүнәтәйҙәр табып, уларҙы ҡаратып ҡуйып фатир ишеген ҡайырырға керешер. Тимер ишек бирешә һалып бармаҫ, оҙаҡ этләнер емереүселәр. Ингәс унын ошо йомшаҡ ҡәнәфигә хәрәкәтһеҙ һеңеп ҡатҡанлығын күрерҙәр…

Ауырлыҡ менән тороп, ишек яҡ стенаны биләгән трюмо ҡаршыһына барып баҫты. Көҙгөнән уға илле йәштәр тирәһендәге арыған йөҙлө, йонсоу ҡиәфәтле ҡатын ҡараны. Ул уны таныны ла, таныманы ла: йоҡоһоҙлоҡтан, ана, һөрөм тартылған ҡабаҡтары ҡабарып шешмәкләнгән, күҙ ағы ҡан һауыуҙан ҡыҙарған, биттәрен күҙ йәштәренә уҡмашҡан тушь йәмһеҙләп юлаҡлатҡан. Ошо фиғеле кеүек үк, унын болоҡһоу күңеле лә аҡбалсығы ыҫланған мейестәй шыҡһыҙ.

«Алдыҡ менән берҙән-бер ҡыҙын үлем сигенә еткерҙе. Барыһын да үҙе

---

*Хәйҙәр Тапаҡов (1955) Йылайыр районының Һабыр ауылында тыуған. Оҙаҡ йылдар тыуған ауылында балалар уҡыта. Әле Сибай ҡалаһында йәшәй. Урындағы яҙыусылар ойошмаһы етәксеһе.*

ойошторҙо, бөтәһен тәфсилләп уйлап, айыҡ аҡыл менән ҡылды. Хәҙер килеп типкеләнеп урамға ҡыуылған эттәй шыңшый, Хоҙай Тәғәләнән Гөлкәйенең терелеүен һорай, ялбара. Шулай ҙа әле уға үлергә ярамай. Ярамай! Яҡты донъя менән хушлашырға әле иртәрәк. Дауахананың реанимация бүлегендә ятҡан ҡыҙын әсә булараҡ әжәлдән ул әрсәләмәһә кем әрсәләр?..»

Ҡыҙыл буяҡлы лакка ҡатырылған осло тырнаҡлы нәфис бармаҡтары менән ойпаланып ялбыраған ҡыҫҡа сәстәрен рәткә килтерҙе, усын маңлайына тигеҙҙе. Башы ярылыр сиккә етеп сатнап ауыртһа ла, маңлайы һалҡын. Әсәһен ерләгән мәлдә, хушлашып, ирендәрен уның маңлайына тигеҙеп алғайны, ул да ошолай этәргес, өшәндергес ине. Ус төптәре менән ике сикәһен ауырттырғансы ҡыҫты, шулайтып ул баш ауырыуынан, һеңгәҙәүҙән арынырға итте. Әммә еңеллек килмәне. Тотош кәүҙәһе менән әкрен боролоп, ҡарашын зал түрендәге пианино өҫтөнә ҡуйылған ҡурсаҡҡа йүнәлтте. Элекке көн дауахананан ҡайтышлай алғайны уны. Ни өсөн шулай эшләгәнен үҙе лә аҙағынаса төшөнмәне. Уйынсыҡты магазин витринаһының түрендә күрҙе лә, берәре һатып алмаҫ элек тип, ашығып мосолманға оҡшаған һатыусыға башҡортсалап мөрәжәғәт итә һалды: «Миңә анау ҡурсаҡты бирегеҙ, зинһар!» «Эту что ли?» Сөм-ҡара сәсле тәтәй һатыусы алһыу ҡан төҫөндәге помадаға буялған ирендәрен бөрөштөрөп ирештергәндәй, руссалап шулай тине лә, юрый ҡыланып, ситкәрәк ҡуйылған күрмәлекһеҙ арзанлыға нәҙек бармағын төрттө. «Юҡ, анау, түрҙәгене.» – «М-м-м… Но эта кукла очень дорогая, штучного исполнения.» – «Меня цена не интересует. Дайте!» Һонолған ҡулға ҡурсаҡ һалынманы. «Сами видите, размер большой. Товар для дошкольного возраста, так сказать. Вы наверное внучке покупаете?» – «Вам не все ли равно? – Ярһый барыуын тойҙо ла тауышын баҫып, тыныс ҡалырға тырышып өҫтәне. – Ваша обязанность – обслуживать посетителей, не так ли?» Бәйләнсек һатыусы иҫкәрмәгә ҡылъяйманы ла, әрһеҙ текәләп яуабын ҡайтарҙы: «Наша обязанность не только обслуживать, но и объяснять, предлагать подходящий товар». – «Шулай булғас, бирегеҙ, ҡыҙыма алам!» Әрепләшеүгә тартҡан ошо һөйләшеүгә нөктә ҡуйырға теләгән ҡыҙ, сама белмәй, йөҙөнөң имен ерен ҡалдырмай крем-буяҡтар яҡҡан йөҙөнә мыҫҡыллы йылмайыу ишараты йәбештерҙе лә, һорағанды тоттороп хаҡын алғандан һуң, ҡаҡ яшыҡ кәүҙәһе менән бергә ҡуш йоҙроҡтай осаларын бейетеп ситкәрәк китте һәм унда, йоҡомһорағандай күҙҙәрен йомоп, йыбанып ҡына һағыҙ сәйнәгән әхирәтенең ҡолағына үрелеп ниҙер шыбырҙаны. Уның яғына кинәйәле мут һирпелеп, пырх-пырх килеп көлөшөп алдылар. Ғәйбәтләнеләр, мыҫҡыл иттеләр инде үҙҙәренсә.

Шул дәү ҡурсаҡ хәҙер зәңгәр күҙҙәрен тултырып, шелтәләгәндәй уға төбәлгән. «Ниңә улай хөкөм иткәндәй ҡарайһың? Ғәйеплемен, гонаһлымын, Хоҙай ярлыҡаһын өсөн ни ҡылайым, әйт? Ҡарама улай, ҡарама!..» Ҡурсаҡты йөҙтүбән әйләндереп һалды.

Ярты ғүмере уҙып та бара, ә ул ҡәҙимге ҡыуаныстарға кинәнеп, тапҡанына мөрхәтһенеп йәшәмәне лә. Өҙлөкһөҙ күрәште, кемгәлер нимәлер иҫбатланы, талашты, еңде-еңелде, тағы ла сәмләнеберәк алға ынтылды, терһәктәре менән үҙенә юл ярҙы, уны ла кәсеп уҙармандары, көндәштәре һайлаған һуҡмағынан мәтәлдерергә аҙ тырышманылар. Ә өнәмәүселәр һәр ваҡыт һәм һәр ҡайҙа ла етерлек. Көндәштәр, тигән була, ир-атҡа талашҡандарҙы ғына шулай атайҙар ҙа. Ә ул талашып йөрөмәне, сөнки сибәр ине, әле лә төҫ ташламаған, шуға көслө заттарға бер ҡасан да ҡытлыҡ кисермәне, йәш сағында йәне түгел, тәне тартҡанын теләгән еренә алып китте. Тегеләренең тормошо, ғаилә хәле уны бөтөнләй ҡыҙыҡһындырманы. Ирҙәренең йәшерен, боҙоҡ хилафлыҡтарын

юллап йөрөүселәр ҙә булманы һәр хәлдә. Күҙҙәре майланған, ләззәт көҫәгән мәжнүндәргә вәғәҙәле ҡаш һикертеү ҙә етә ине, артынан магнитҡа тартылған тимер киҫәгеләй эйәрҙеләр. Бер кискә баштарын әйләндерә лә һуңынан онота был осрашыуҙы, бөтөнләйгә онота, ярҙамы тейерҙәйҙәрҙе генә хәтерендә ҡалдыра, бер кәрәкмәһә бер кәрәгеүҙәре бар. Фәхишәлек булдымы был, әллә аҙғынлыҡмы – уныһы хаҡында уйлап та ҡараманы.  Фәхишә тиергә – ул бит тәнен бер ваҡытта ла аҡсаға һатманы! Әммә ләкин бәғзеләрҙең ҡөҙрәте һуңынан фирманың үҫеүенә булышлыҡ итте, күптәр инә алмаған ауыр ишектәр уның өсөн ауырлыҡһыҙ асылды.  Ул, ғүмер океанында киләсәктә ҡайһы ярға сығарып ырғытырын белмәй, ағым ыңғайына йөҙгән юнысҡы ишаратында көн итте. Был эшенә, бизнесҡа түгел, шәхси тормошона ҡағылышлыһы, әлбиттә. Ә ирҙәрҙе түшәккә саҡырыуы  йәшәүенең буш мөйөшөн тулыландырырға ынтылыуы булды бары. Йәнә тәбиғәтте алдармын тимә, ул бит ни тиһәң дә ҡатын-ҡыҙ: көслө, дәртле, кәр-ғәйрәтле ир танһыҡлай, һөйгәһе, һөйөлгәһе килә. Тик һайлап эйәләтә уларҙы. Сыуалғаны ла ҡөҙрәтле түрәләр, министр урынбаҫарҙары, ҡалғандарға икенсе сортҡа ҡарағандай ерәнеп, түбәнһетеп ҡарай. Һуңғы модаға ярашлы кейенгән, еренә еткереп биҙәнгән, һыланған-һыйпанған һауалы ҡыҙға ябайыраҡтар күҙ һалыу ҡайҙа, яҡынларға ҡыймайҙар, тартыналар. Ғаяз ғына унан өркмәне, осрағанында гелән ҙур һоро күҙҙәрен тултырып ҡарап уҙа торғайны. Һоҡланып, яратып ҡарай. Улайға китһә, яңы ғына ойошторолған фирма ла ул саҡта артыҡ ҙурҙан түгел ине, хеҙмәткәр-эшселәре лә тиҫтә самаһы ғына. Шул бәләкәй төркөмдөң хужаһы ине, етәксеһеме, ойоштороусыһымы шунда. Һәр хәлдә «директор» исеме менән нарыҡламайҙар ине уны. Аралашыуҙары ла ябай, мөғәләмәләре лә тиң. Эреләнеп ҡыланыу  ҙа юҡ. Шул осорҙа килгәйне Ғаяз. Килде лә яғымлы һирпелеүе менән тертләтеп ебәрҙе күңелен. Уның машинаһына һағып бер нисә тапҡыр алыҫ юлға сығып йөрөп тә әйләнгеләне. Һиҙҙермәй генә күҙәтте егетте, уның фиғеленә, һөйләшеүенә, үҙен тотошона яҡындан иғтибар итте, тағы ла бер тапҡыр күңел яҡынлығына  инанды. Бынан тыш та фирманың коридорында йә ихатала көн һайын тейерлек тап итә Ғаязды, тап итә лә йөрәге сабырһыҙ тулап китә. Тик үҙен ҡулға алып өлгөрә, йөҙөнә һауаланыу ғәләмәте сығарып, күрмәгәнгә һалышып ситкә ҡарап үтә.

Һуңғы йылдарҙа фирма үҫте, киңәйҙе, сит ҡалаларҙа филиалдары барлыҡҡа килде. Фирма менән бергә тырыш, замананың алмашыныусан елен һиҙгер тойомлаусы, оҫта ойоштороусы етәксе булараҡ ул да үҫте, һәм… Ғаяз менән былай ҙа арауыҡ һаҡлаған аралары тағы ла алыҫлаша төштө. Ябай водитель менән фирма директорының араһында ниндәй яҡынлыҡ булыуы мөмкин? Йөрәк ҡушыуы менән йәшәргә бит 18 йәшлек елбәҙәк ҡыҙ түгел, уның йәшендә бөтөнөһөнән бигерәк айыҡ аҡыл өҫтөнөрәк. Өҫтөн дә бит, осрашҡандарында барыбер юғалып ҡалыр булды, һәм шул осрашыуҙы онота алмай йөрөй, күңеленән генә киләһе тап булышыуҙы көтә.

Онотолоп, таш һын һымаҡ урынында бер килке һерәйгәс, трюмо өҫтәлендәге ҡыҙыл корпуслы телефонға ҡарап алды. Уныһы нисәнсе көн өнһөҙ-тауышһыҙ. Һаҡ ҡына трубкаға һуҙылған ҡулы йәнһеҙ һалынып төштө. Ҡыҙыл төҫ, «ярамай» тип туҡталырға ҡушҡан светофор эше баҙлай. «Ярамай, төнө менән ярамай. Йоҡоһоҙ төн үткәрер ҙә иртәгә, таң менән шылтыратыр».

Кире килеп ҡәнәфигә гөрһөлдәгәс, башын артҡа ташлап, күҙҙәрен йомдо. Талсыҡҡан кәүҙәһе, аяҡ-ҡулдары хәрәкәтһеҙ, ә башында үткәндәрен барлаған уйҙар ҡайнаша. Уйы башында – Ғаяз. Ул бит йәшәүенең ҡәҙерле, онотолмаҫ бер хәтирәһе ине, үткән генә түгел, киләсәк көндәренә мәғәнә, йылылыҡ, яҡтылыҡ бөркөүсе яҡыны. Нишләп уны юғалтты, яҙмышы юлдарын киҫештереп, эргәһенә

ебәргән йәренән баш тартты. Бына ул, эргәлә генә, йылмай ҙа ҡулыңды һон инде. Юҡ бит, икеһен айырып тотоусы, ҡарар күҙгә күренмәҫ ҡаршылыҡты еңә алманы. Мөхәббәттә аҡыл түгел, эске тойомлау, йөрәк ҡушыуы алда йөрөй, ошо төшөнсәләр һиҙгер йән талабын барлыҡҡа килтерә. Егет кеше булараҡ тәҡдимде ул яһарға тейеш ине лә бит, тик был осраҡта түгел. Водитель директорына, мин һине яратам, һинһеҙ йәшәй алмайым, тип йөрәк сирен сисһенме? Былай ҙа белә, һиҙә ине барыһын да, шулай булғас, теге ашатламаҫлыҡ кәртәне емереп, беренсе аҙымды ул, фәҡәт ул ғына яһарға тейеш ине.

Бер нисә йылға һуҙылған өнһөҙ мөхәббәт уйынынан һуң Ғаяз көтмәгәндә фирманың финанс бүлегендә эшләүсе Рәсимә исемле экономист ҡыҙға өйләнде лә ҡуйҙы. Дуҫлашыуҙары ла күҙгә салынманы, буғай, шуға был никах фирмалағы күптәр, шул иҫәптән уның өсөн көтөлмәгән яңылыҡ ине. Бер генә мәлгә һеңгәҙәп ҡалды. Аҙаҡтан күңелен йыуатыулы, үҙһүҙле сәм тырнаны: «Теләй икән, әйҙә, өйләнә бирһен! Кем һуң ул Ғаяз?! Водитель! Уға тиңме? Абруйлы кисәләргә ябай эшсене ҡултыҡлап бара алмай ҙа инде, ул унда йә үҙен тота белмәҫ, йә әңгәмәне күтәрмәләй алмаҫ. Ояты ни тора!» Шулай тип үҙен-үҙе тынысландырырға тырышһа ла, йөрәге яҡын кешеһен юғалтыуҙан иңрәне, әммә кисерештәрен йөҙөнә сығарманы, хистәрен ете ҡат йоҙаҡҡа бикләне. Шаңҡыуы уҙғас, йүгереп йөрөп ят туйҙы ойошторорға керешеп китте. Белһендәр фирманың мөмкинлектәрен, эшсе-хеҙмәткәрҙәренә күрһәткән хәстәрен! Айырым сәм менән тотондо был сараға: хаҡына ҡарамай, ҡаланың ҙур рестораннарының береһен биләне, һый-хөрмәткә лә аҡсаны йәлләмәне, өйләнеүселәрҙе аптыратып, уларҙың яҡындарынан тыш арҙаҡлы ҡунаҡтарҙы ла саҡырҙы, телевидение, гәзит-журналдарҙың хәбәрселәренә йәүкәләтте, туй фирманы рекламалауға ла әйләнһен бер юлы. Бүләктең иң затлыһын да ул һалды, мәжлестәгеләрҙең ғәжәпләнеү ҡатыш хуплаулы геүләүе һәм алҡыштары аҫтында Ғаяздың усына бер бүлмәле фатирҙың асҡысын йомдорҙо. Иҫ киткес йомартлыҡ ине был. Аҡ бейеү башланғас, егетте уртаға саҡырып, уның һоро күҙҙәренә төбәлеп әйләнде-әйләнде лә, вальс тамамланғас: «Бәхетле бул!» – тине өҙөлөп. Ҡунаҡтарҙы оҙатып бөткәс, иң аҙаҡтан, кис буйы эргәһендә өйөрөлгән ут күҙле сибәр егеткә ҡаш һикертеп, сығыу яғына йүнәлде. Уларҙы Ғаяз моңһоу ҡарап оҙатты…

«Волга»ла ҡунаҡханаға йүнәлделәр. Өйҙә ярамай, унда әсәһе бар. Таныш администратор һүҙһеҙ ҙә аңланы, тауышһыҙ хәрәкәтләнеп, аулаҡ люксҡа алып барҙы. Артынан ишек ябылыр-ябылмаҫтан, егеттең өҫтөнә ташланды, өҫ кейемдәре тәртипһеҙ һибелеп, тирә-яҡҡа остолар… Шашты, ярһыны, иркәләне-наҙланы, үҙе лә ҡыҫыу, ҡомһоҙланыуҙарҙан иҫен юя яҙҙы, өйөгөү мәлендә арлан танһыҡлаған кәнтәй эттәй ҡыланды. Бушаныу мәле еткәс, ирендәренән «Ғаяз!..» тигән, аңына буйһонмаған иңрәүле өн ысҡынды.

Иҫергән зиһен бәргеләнеүҙәр аша айныған кеүек, ләззәтле енси ҡәнәғәтлек кисереү ҙә мәғәнәһеҙ бушлыҡ, сәбәпһеҙ асыу эйәртә артынан. Ҡайһы саҡ тәмәке ыҫы, араҡы көйөгө, ҡырҡыу тир еҫе аңҡып ятҡан, кисә күрмәлекле булып та, бөгөн уҡшытҡыс һөмһөҙгә әүерелгән әҙәмде ваҡ киҫәктәргә өҙгөсләп ырғытҡыһы килә. Был юлы ла, ут ҡапҡандай, өтәләнеп кейемдәрен йыйып, ашыҡ-бошоҡ кейенергә кереште, түшәктә ирәйеп тырпыраған яланғас һөйәр, ятҡан еренән тартыныуһыҙ ынтылып, биленән эләктерергә маташҡайны – йылғыр кәүҙә ситкә тайшанды.

– Вы что себе позволяете, уберите руку!

– Не понял, после всего этого… Илһөйәр Вариҫовна, һеҙ – супер мөғжизә, неповторимое чудо!

– Забудь эту ночь, понял, считай, что ее не было вообще… Ары минең менән

осрашыу эҙләргә маташһаң, ул һинең файҙаға булмаясаҡ, шуны онотма!

Шул мәл бихисап тапҡырҙар ҡабатланған яуапһыҙ һорау мейеһен ауырттырып һулҡытты: «Ни эшләнем мин?... Тағы ҡасанға тиклем ошолай дауам итер?..»

Туйҙан һуң Ғаязды йөк машинаһынан төшөрөп, шәхси водителе итеп эшкә алды. Боҙоҡ уйҙан түгел, яҡынлығын тойғоһо килеүҙән шулай эшләне. Уныһы ла еңел машинала йөрөүҙе хуп күргәнгәмелер, ҡаршылашманы, ҡатыны ғына инеп ҡыуанысын белдереп, рәхмәт әйтеп сыҡҡан булды. «Бер ҡатлы, хәйләһеҙ йән... – Ҡаршыһындағы хеҙмәткәрен көнсөл күҙәтте ул. – Кәүҙәң тыртыҡ, йә түшең беленмәй, йә осаң тимгелләнмәй тигәндәй, йоҡа сәстәрең еүеш һаламдай һалынған, оҙонса битең, ослайыбыраҡ күренгән танауың матурмы инде, йә, мәскәй әбейҙән саҡ ҡына күрмәлеклерәкһең бит! Ҡайһы ереңә ҡыҙыҡҡандыр, иҫе киткәндер инде Ғаяздың? Аңламаҫһың ҡатын-ҡыҙ һайлай белмәгән оңҡот ирҙәрҙе!»

Илһөйәр, күҙҙәрен асыулы яндырып, инеүсене тиктомалға ҡыҙҙырып ташланы:

– Ниңә улайтып эш мәлендә ваҡытһыҙ борсойһоғоҙ? Һеҙгә, кабинеттан кабинетҡа сапмайынса, төп бурыстарығыҙ менән шөғөлләнергә кәңәш итер инем. Ә кешене эшкә алыу-алмауҙы йәки вазифанан бушатыуҙы директор булараҡ мин үҙем хәл итәм. Хушығыҙ!

Туйға әҙерлек мәлендә хужаның ихласлығын, эскерһеҙ алсаҡлығын күреп, баһалап өлгөргән йәш ҡатын башта ни әйтергә белмәй юғалыңҡырап ҡалды, ҡулдарын ҡайҙа ҡуйырға белмәй ыҙаланды, шунан, ғәйепле кешеләй башын баҫып, сығыу яғына йүнәлде.

Көнө буйы Ғаяздың эргәлә йөрөүе ҡанатландыра уны, үҙен көктең етенсе ҡатында осҡандай хис итә. Яҡын кешеһенең эргәлә йөрөүе унын йәшәйешен тулыландыра, бөтәйтә. Ошолай киләсәккә туҡтауһыҙ елеп бараһы ла бараһы, башҡа бер ни ҙә кәрәкмәй. Егеттең буйсан, ҙур кәүҙәһе машина салонына көслөк менән инеп тығылһа, кабина тулып, йылынып, яҡтырып киткәндәй була: бөҙрәләнеп һибелгән һорғолт сәстәрҙән, яҫы маңлайҙан, табаҡ биттәрҙән, ҡымтылған ҡалын ирендәрҙән уға ғына тәғәйенләнгән наҙ бөркөләме ни! Тик ваҡыт-ваҡыт Ғаяздың Рәсимәһе янына инә һалып сығыуы ғына кәйефен ебәрә. Шул саҡ водителенән үс алғыһы, уны түбәнһеткеһе килә. Ул сабыр, ә сабыр кеше түҙеү сигенән үтһә – ғәҙәттә, көтөлмәгән аҙым яһай. Бер нисә тапҡыр «конспиратив» фатирға, ҡунаҡханаға «Волга»ла барҙы. Ғаяздың тышта көтөп ултырыуы – ниндәйҙер еңеүсе кисергән тойғоно көсәйтә. Ҡалыплашҡан, бихисап тапҡырҙар татылған һөйөү-иркәләүҙәрҙән ғарҡ булған, ят йөҙҙәрҙән, алдатҡыс һүҙҙәрҙән бүккән, һуңынан үкенәсәген дә белә күрә шулай эшләй. Әлегә генә ул ханбикә, бер аҙҙан бысраҡ итектәр һөртөлгән ҡойоло сепрәктәй тапланған йәнен ҡалтыратып, ытырғандырғыс ят еҫте эйәртеп афәттән ҡасҡандай ҡайтыу яғына еләсәк...

Табындарҙан сыға ла, Ғаяздан күҙҙәрен йәшерергә теләп, көндөң ниндәй мәле булыуға ҡарамаҫтан, ҡара күҙлеген кейә һалып ала. Былай ҡулай: кисерештәре, хистәр ғазабы ҡоромдай быяла артына йәшеренә. Ышаныслы, текә баҫып атлап йөрөүенә ҡарап ҡына, бар, унын күңел торошон тойомла, билдәлә.

Эшкә килеү менән секретарь ҡыҙ эш ҡағыҙҙары һалынған папканы индереп һалды. Һәр документтың мөйөшөнә күрһәтмә биреп ҡултамға ҡуя: «Баш тартырға!», «Тикшерергә», «Өйрәнергә», «Ултырышҡа сығарырға». Ғаяздың ғаризаһы ла бар: «Үҙ теләгем менән эштән ебәреүегеҙҙе һорайым...» Пультҡа баҫып, секретарына бойорҙо:

– Хәҙер үк Кәримовты тап!

Ғаяз инде лә ситке ултырғыстарҙың береһендә тынып ҡалды.
– Был нимә, Кәримов?
– Күрәһегеҙ бит. Ғариза.
– Сәбәп?
– Сәбәп юҡ, эштән китәм, шул ғына.
– Кеше сәбәпһеҙ китмәй. Нимә, алған зарплатаң ҡәнәғәтләндермәйме? Әйт, өҫтәрмен.
– Эш аҡсала түгел.
– Улайһа нимәлә?
– Шәхси тормошоғоҙға ҡыҫылырға теләмәйем.
– Ҡыҫылмайһығыҙ бит.
– Башҡаса һеҙҙе киске табындарға, ошрашыуҙарға алып бара алмайым. Эштән һуң өйҙә ҡатыным көтә.
– Кәримов, мине өйҙә бер кем дә көтмәй! Дүрт яғым ҡибла, шуға таш стеналарға бикләнәһем килмәй. Тағы кейәүҙә түгелмен, ireклемен, нимә теләһәм – шуны ҡылам! – Өҫтәлдәге ҡағыҙҙары маҡсатһыҙ шылдырғылағас, һәүетемсә өҫтәне. – Әйткәндәй, фирманың ярты проблемаһы шул табындарҙа хәл ителә.
– Уныһы һеҙҙең эшегеҙ. Ә мин китәм.
– Һине… Һеҙҙе бер ҡайҙа ла ебәрмәйем, Кәримов! – Шырпы бөртөгөләй ҡабынып китеп, ғаризаны йомарлап, ҡый һауытына ырғытты. – Хәҙер бар, сыҡ, машинала көт. Бөгөн бараһы ерҙәребеҙ күп!
Ғаяз аяғүрә баҫты:
– Ебәрмәһәгеҙ ҙә китәм! Ә ғаризаны йомарлап ырғытырға һеҙҙең хаҡығыҙ юҡ!
– Һеҙ минең водителем!
– Эйе, водитель, тик шәхси машинағыҙҙыҡы түгел.
– Машинала көтөгөҙ, Кәримов, үтенәм…
– Бына быныһы – әҙәмсә. – Ҡыҙыу атлап, ишекте ҡаты ябып сығып китте.
Көнө буйы һүҙ ҡушышманылар. Ул йөҙөн төмһәртеп, үсеккән балалай ситкә ҡараған, Ғаяз башлап яғымлы һүҙ ҡушһа, ҡайтымһаҡланып йылмайып ебәрер ине лә бит, уныһы ла рулгә сат йәбешеп, ҡаштарын төйөп ҡаршыға елгән юл таҫмаһына тексәйгән.
Эш һуңында Ғаяз ҡоро ғына һораны:
– Хәҙер ҡайҙа алып барырға бойорорһоғоҙ?
– Бойормайым. Һиңә бер ҡасан да бойорғаным булманы, Ғаяз, бойора ла алмайым. Арыным… – Йөҙөн ҡушусланы.– Бая ҡыҙып киттем, ғәфү ит, Кәримов… Инде мине кис һайын тик фатирыма ғына алып ҡайт, йәме, башҡа бер ҡайҙа ла түгел. Ғаяз… һин Рәсимәне яратаһыңмы ул?
– Ул мине ярата.
– Быныһы һәйбәт… Был донъяла һине кемдер ярата икән, был – бәхет… Ғариза мәсьәләһен хәл иттек, буғай, ҡалаһыңмы?
– Юҡ, Илһөйәр Вариҫовна, китәм. Әгәр ебәрмәйем тиһәгеҙ, тейешле ваҡытты эшләрмен дә, расчет яһарһығыҙ. Урыныма башҡаны эҙләгеҙ.
«Миңә башҡаһы кәрәкмәй…»
Теле икенсене әйтте:
– Йәл…Ҡайҙа инде?
– Муйын барҙа ҡамыт табылыр, уныһын уйламағанмын әле. Рәсимә һеҙҙә ҡала бит, шуға күрә хушлашырға ашыҡмайыҡ, килеп йөрөрмөн.
«Ҡатыныңа киләһең бит, миңә түгел!»– тип саҡ ысҡындырманы, үҙе салондың ишеген кинәт асып, сығыу яғына ынтылды:
– Хушығыҙ, тыныс төн теләйем!
Подъезд ишегенә йәбешкәйне, Ғаяздың тауышы кире боролоп килергә мәжбүр итте:

– Илһөйәр Вариҫовна! Ҡара күҙлегегеҙҙе оноттоғоҙ.

– Ҡалһын ошонда.

– Ә һеҙҙең күҙҙәрегеҙ һөйкөмлө. Шул матурлыҡты йәшерер өсөн кейәһегеҙме быны?

– Рәхмәт, Кәримов. Бер иҫкәрмә: һеҙ ҡатын-ҡыҙға комплимент әйтә белмәйһегеҙ.

«Күҙҙәрегеҙ һөйкөмлө!» Ғаяздың мөләйем ҡарашынан, яғымлы һүҙҙәренән балҡып киткән йөҙөн йорт яғына бороп, китергә ашыҡты.

Өйҙә әсәһе ашын бешереп көткән. Ишек асылып-ябылыу менән һыйын өҫтәлгә теҙергә лә кереште. Ирәбеләнмәй-сөсөләнмәй генә тәғәмләнеп алдылар. Әсәһе ҡырыҫыраҡ холоҡло шул. Пенсияға сыҡҡансы ҙур төҙөлөш тресында баш бухгалтер вазифаһында эшләгән. Шуға элекке эрелеге һаман ҡайтмаған, подъезд ауыҙындағы ултырғыста көндәр буйы ләстит һатҡан әбейҙәрҙе үҙһенмәй, улар менән эйәк ҡағып иҫәнләшеүҙән ары үтеп, аралаша һалып бармай. Йомошо төшһә, йә магазинға, йә урамға сығып әйләнә лә ҡалған ваҡытында, өй тауығылай, фатирҙа соҡсона. Үҙенә күрә мәшәкәте лә табыла инде: туҙан ҡунмаған ҡаралтыны ҡат-ҡат һөртөп алыу, бүлмәләрҙе йыйыштырыу, аш-һыу хәстәрләү кеүек эштәр уның өҫтөндә.

Аштан һуң залға сығып, эш ҡағыҙҙарын өҫтәлгә йәйеп ебәрҙе. Ҡашаяҡ шауҙырлатҡан әсәһе мәшәкәтен осланы ла, бәйләмен алып, ҡаршыһына ялпашты, уның күҙлек аша тағы ла ҡапсайыбыраҡ күренгән һалынҡы күҙ ҡабаҡтары асыла төштө, йоҡа ирендәре яҙылды:

– Бөгөн урамда бер әбейҙе осраттым әле.

Ҡағыҙҙарҙан айырылып, тыңлағанлығын белдерҙе.

– Шул әбей этеп килгән коляскаһындағы ейәнен, эй, яратып ҡылана, тегеһенең эргәһендә, эй, бөтөрөлә. Хәленән генә килмәй, тереләй йотор ине, билләһи. Шунан был бер заман тешһеҙ ауыҙын ышылдатып көйләп ебәрмәһенме! Баланың, мәйтәм, ҡотон осораһың! Был, ошоғаса йырҙан берәүҙең дә ҡото осҡаны юҡ әле, киреһенсә, моңға ылығып үҫкән бала миһырбанлы, кешелекле булып үҫә, ти. Педагог Макаренко, һиңә әйтәйем.

– Ул ҡарсыҡ ысынлап та йәш сағында йә уҡытыусы, йә тәрбиәсе булғандыр?

– Ҡайҙан! Ҡараһына ҡатҡан наҙан ауыл әбей-һәбейен әллә ҡайҙан танырға мөмкин.

Башланған әңгәмәне күтәрмәләмәй ҡағыҙҙарына эйелде лә, бер аҙҙан эш теләгенең һүрелеүен тойоп, уларҙы йыйып ситкәрәк һалды.

– Әсәй, бәләкәй саҡта һин миңә йыр йырлағаның булдымы ул?

– Әйттең хәбәр, улайтырға ваҡытты ҡайҙан тапмаҡ? Трестың бар финанс ауырлыҡтары минең өҫтә ине ләһә! Төпкөл башҡорт ауылынан килеп шул дәрәжәгә күтәрелеп ҡара! Һәр кемдең ҡулынан килерлекме? Көнө-төнө тиерлек йүгерәм, өҫтәүенә, ситтән тороп финанс институтында уҡыйым, фатир юҡ. Бүреләр араһында бүре булып, тешләгәнен тешләп, тамаҡларлығын тамаҡламаһаң, килеп йәбешеүҙәрен көт тә тор! Ҡырағай капитализмдың бәғерһеҙ алымдарын мин шул саҡта уҡ аңлап, төшөнөп өлгөргәйнем инде. Уның ҡарауы, аҙаҡтан һин бер нәмәгә лә ҡыйынлыҡ, тарлыҡ кисермәнең, бал-май өҫтөндә йөҙөп кенә ауырлыҡһыҙ институтты бөтөрҙөң. Әле лә бынамын тигән кәсебең бар. Быларҙың бөтәһе лә таныштарһыҙ, файҙалы бәйләнештәрһеҙ эшләнмәй. Йүнсел ҡатын ғына булдыҡлы бала тәрбиәләй ала. Ул бәлйерәгән әбейҙең «Бишек йыры» кемгә хәжәт? Бигерәк тә бөгөн.

– Онотҡанда бер булһа ла мине шул йырҙы йырлап йоҡлатырға кәрәккәндер ул, ә, әсәй? Ысынбарлыҡҡа икенсерәк күҙлектән ҡарар инем, бәлки…

Алтын тештәр ҡымтылды, әсәһе ҡайтарып өндәшмәне. Һүҙ башҡаса ялғанманы. Кәрәк булған өсөн генә «Яңылыҡтар» программаһын ҡарағас, йоҡо бүлмәһенә йүнәлде. Йомшаҡ түшәгенә сумһа ла, йоҡлап китә алманы, әйләнеп-тулғанып ята бирҙе.

…Әсәһе уны көслө итеп тәрбиәләгән дә бит, тик ул көслө ҡатын бәхетлеме? Нимә һуң ул бәхет тигәнең, уның асылы нимәлә? Эйе, нужа татымай үҫте, ауырлыҡ кисермәне, ә бына атаһын бер тапҡыр ҙа күргәне булманы. Күргеһе килә ине бит! Ниндәйерәк кеше һуң уның атаһы, буйы-һыны, килбәте нисегерәк, ҡайһылайыраҡ итеп кейенеп йөрөй, үҙен тота? Бәләкәй саҡта, атайым кем ине, тип йыш төпсөнә ине. Ҡыҙының һорауына әсәһе һәр саҡ уратып яуап ҡайтара:

«Атайың һин бәләкәй саҡта уҡ китте беҙҙән… Араҡыға әүәҫләнде…»

«Аҡыллы инеме?»

«Эскән кеше аҡыллы була тиме инде…»

«Ул нишләп килмәй, беҙҙе күргеһе килмәйме ни?»

«Алыҫта атайың…Тиҙ генә килеп етер ерҙә түгел…Йә, мәшәкәтләмә мине, былай ҙа эштәрем күп…»

«Атайымды ярата инеңме?»

«Ниндәй яратыу?.. Осраҡлы осрашыу, яҙмыш хатаһы ғына бары…»

«Мин кемгә оҡшағанмын, әсәй: һиңәме, әллә атайымамы?»

«Күреп тораһың бит – миңә! Һин минең ҡыҙым, башҡа бер кемдеке лә түгел!..Тағы шуны киҫәтәм: урамда берәй берәҙәк йә эскесе туҡтатып һүҙ ҡушһа, туҡтама, үт тә кит. Әгәр бәйләнә ҡалһа, милициянан ярҙам һора…»

«Нишләп улай тиһең, әсәй?»

«Ҡабатлатма, әйткәнде эшлә! Урам тулы йыйын әтрәгәләм, килеп бәйләнеүҙәре бар».

Бер көн мәктәптән сығышлай унан апаруҡ йыраҡҡа баҫҡан, бит-йөҙөн шырт баҫҡан иргә иғтибар итте. Төбәлеүҙе шәйләгән ир, йөҙөн йәшереп, ситкә тартылғандай итте, мәгәр бөтөнләй үк китмәне, ыуаланып шул тирәлә ҡалды, тулҡынланып, кеҫәһенән тәмәке сығарып ҡапты. Иртәгәһен дә, бер нисә көн үткәс тә, был асарбаҡ ҡаҡҡан ҡаҙыҡтай шул ерҙә һерәйә ине. Ҡыҙыҡай һынамышҡа күсә башланы, мәктәп тупһаһына сыға ла күҙҙәрен йома, шунан эсенән ҡабатлай: «Хәҙер башымды уң яҡҡа ҡайырып күҙҙәремде асһам, теге ағай торасаҡ». Һәм шулай булып сыға ла. Ҡыйыулығын туплап, уға яҡынларға йөрьәт итте бер көн.

– Вы кто?

Йоҡа кәүҙәле ир йәнләнеп китте лә, ас яңаҡлы, күкһел соҡорҙарға батҡан һүрәнке күҙҙәрен көлдөрҙө:

– Минме? Ошо тирәлә йәшәйем, дөрөҫөрәге, ҡарауылдамын, төндә эшләйем, әле сменанан ҡайтып килеш.

– «Нишләп һеҙ гел ошо урынға баҫаһығыҙ?

– Матур урын, ҡалҡыулыҡ, тирә-яҡ ус төбөндәгеләй асыҡ күренә. Йәнә бында минең ҡыҙым уҡый.

–Кем ул? Бәлки, мин уны беләмдер?

– Юҡ, юҡ, белеүең икеле… Пәрәник, кәнфит, туңдырма ашағың киләме? – Ул керләнеп, йылтырап ҡатҡан кеҫәһенә тығылды.

– Мин таныш түгел кешенән бер нәмә лә алмайым! – Бындай кеҫәлә аҡса ятамы, тигән һымағыраҡ ҡараны шикелле шул саҡ.

– Ниңә улай тиһең? Кеҫәм йыртыҡ булһа ла, ҡотло ул, тиндәр төшөп ҡалып бөтһә лә, унан ҡағыҙ аҡса өҙөлмәй. – Әйткәндәренән ҡыҙыҡ табып, эскерһеҙ көлөп ебәрҙе. – Унда кәнфитлек аҡса ятамы икән, әйҙә, һынап ҡарайбыҙ! – Ирҙең һүҙ сыбалтыуына ҡарағанда, шыпа уны эргәһенән ебәргеһе килмәй. Тап әсәһе киҫәткән шикле кешегә оҡшаған.

– Мин һеҙҙән аҡса ла, кәнфит тә алмайым, әсәйем ҡушмай.

– Ни өсөн?

– Ят кеше менән һөйләшмә, әгәр ул бәйләнә ҡалһа, милиция саҡырт, ти.

– Ят кеше… – Аралашыуҙан теремекләнгән күҙҙәр ҡалҡмаҫ өсөн кире төпһөҙ соҡорҙарына баттылар. – Йә, ярай, әйҙә, шулай булып ҡалһын. – Ир үҙ алдына һөйләнгәндәй әйтте. – Йыш осрап торһам, аптырама, йәме, әйтәм бит, ҡыҙым ошонда белем ала, йәнә ҡайтыр юлым ошо тәңгәлдән. Әгәр ярҙам кәрәкһә, тартынма. Мин гел ошо ерҙә булырмын. Ярай, хуш, йә әсәйең килеп сығып, тауыш күтәрер.

Ул ир, көн һайын булмаһа ла, теге ҡалҡыу урында йыш күренә ине, ярпайып баҫа ла өмөт менән мәктәп ишегенә төбәлә. Уның ҡорҙай кәүҙәһенән, моңһоу күҙҙәренән ниндәйҙер илаһилыҡ бөркөлә төҫлө. Уҡытыусы ирекле темаға инша яҙырға ҡушҡас, тотто ла ошо сәйер, шул уҡ ваҡытта тыйнаҡ, миһырбанлы кеше хаҡында яҙҙы. Бөтә тырышлығын һалды, яҙғанына йән йылыһын, күңел матурлығын, йәшәйештең тылсымлы сер-мөғжизәһен өҫтәне. Тәҙрәгә ҡарап теге иргә төбәлеп ултыра ла, картина яҙған рәссамдай, илһамланып ҡағыҙға эйелә.

Ул ир уға осраясаҡ әле, йыш осраясаҡ, арауыҡ аша уны ҡурсырға теләгәндәй баҫып торасаҡ, тик башҡаса эргәһенә генә килмәйәсәк, һүҙ ҡушмаясаҡ…

Үҫә төшкәс, бер тапҡыр ҙа күрмәгән атаһына булған ҡыҙыҡһыныуы яйлап һүрелә төштө. Бәлки, һүрелмәгәндер ҙә: аныҡ булмаған яуап ҡайтара, кәмetә бит ул теләкте, ни тиһәң дә. Паспорт алыр мәл еткәс, атаһының барлығын тағы ла бер тапҡыр хәтерләттеләр, паспорт өҫтәленә әсәһен саҡыртҡандан һуң, тейешле урынға «Борисовна» тип яҙып ҡуйҙылар, ә бит тыуыу тураһындағы танытмала ундай мәғлүмәт юҡ ине лә баһа. Ҡайҙан тапҡандар был исемде?

Тағы һорай ҡуйҙы:

«Әсәй, атайым урыҫ инеме әллә?»

«Һиңә барыбер түгелме ни?»

Ғәжәп, ул урыҫ та түгел, башҡорт та түгел, ә бары ер менән күк араһында аҫылынған тоҡомһоҙ, затһыҙ йән. Институтты бөтөргәс, үҙен «Вариҫовна» тип атарға ҡушты. Сөнки был һүҙҙең мәғәнәһен тәрәндән аңлай ине, әсәһе телде яҡшы белде, ҡыҙына ла өйрәтте, үҙ-ара ла туған телдә аралаштылар, өйгә һәр ваҡыт башҡорт баҫмаларын яҙҙырттылар, өй китапханаһының ҡап яртыһын башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәре биләй. Вариҫ – тимәк ул кемдәндер мираҫ алыр өлөшлө кеше. Эйе, ул өлөшлө ине: утыҙ йәшендә баш ҡалала билдәле фирманың директоры дәрәжәһенә күтәрелде, әле лә матди ауырлыҡ кисермәй, етеш йәшәй. Тик бер генә нәмә: йәшәүе ҡотһоҙ. Уны һорап та, юҡтан әүәләп тә, аҡсаға һатып алып та булмай икән. Ҡотһоҙлоғоноң айышына төшөнә лә төштө һымаҡ, әммә уйының тормошҡа ашырына шикләнә, уны онотorға, аңынан ҡыуырға ынтыла.

Ял көнө йорттары эргәһендәге паркта йөрөп әйләнергә итте. Ундағы аулаҡ эскәмйәләрҙең береһендә йәш әсә балаһын имеҙә. Өҫтөнә киң итәкле килешле күлдәк кейгән, йоҡа плащы ла һомғол буйҙы кипсәлдереп, кәүҙәне нәфис итеп күрһәтә. Яурыны тапҡырынан киҫелгән ҡуйы сәстәре, күрмәлекле йөҙө уны тағы ла сибәрләндерә төшә. Күлдәк иҙеүенән күренгән йәш, йоморосай түше һөттән тулышҡан. Ҡатындың йөҙөнән аңлата алмаҫлыҡ рух ныҡлығы һәм самимилыҡ бөркөлә, бары игелек кенә сағылған күҙҙәрендә эске кинәнес һәм өмөт балҡый. Был күренеште тәү ҡат күргәндәй ҡатты ла ҡалды. Ҡапыл уның да имсәк остары баланың ҡытыршы теленән, бәрхәт ирендәренән тертләгәндәй зымбырлып киттеләр, тәненән ҡайнар ағым йүгерҙе, хыялый ләззәт кисереүҙән күҙҙәрен йомдо…

Уны әле генә абайлаған ҡатын түштәрен йәшереп боҫормаланы:

– Ғәфү итегеҙ, улым саф һауала имергә ярата шул…

– Зарар юҡ… Һау булығыҙ…– Мамыҡҡа әүерелгән аяҡтарын көскә хәрәкәтләндереп китеп барҙы.

Шул сабыйҙың уймаҡ ауыҙын ҡайтҡас ҡабаттан күкрәгендә тойғандай итте, тулҡынланыуҙан маңлайы еүешләнде, ирекһеҙҙән кипкән ирендәрен ялап алды. Ҡатын-ҡыҙҙың ырыҫы әсә булыуҙалыр: баланы яратыу, ҡурсыу, хәстәрләүҙәлер, моғайын…

Әллә уға ла бала табырғамы икән? Тик кемдән?! Яратмаған кешенәнме? Тағы йәше үткән, һуңлаған. Ниңә, тәүәккәлләргә лә мөмкин, ул бит бизнес тип аталған, ике осло хәтәр шөғөлдән ҡурҡып торманы. Тик атайһыҙ баланы бағыуҙан ни мәғәнә? Бына ул да «Борисовна-Вариҫовна» бит, дөрөҫөндә мөхәббәтһеҙ бәйләнештән яралған. Ана, әсәһе ирен, уның атаһын күргеһе лә килмәй, башмаҡ үгеҙҙән ҡасып быҙаулаған тана һыйырҙай түлләнгән дә оноҡтан тегене, яҡын да юлатмай. Ауырға ҡалды ла икән, ти, уны туғыҙ ай буйы ҡарынында йөрөтөргә тейеш була ла. Тыуҙырғандан һуң әле әллә күпме декрет отпускыһында ултырырға кәрәк! Ә эше? Бизнес бит бер генә көндө лә файҙаһыҙ үткәреүҙе ғәфү итмәй. Йүргәк йыуып мәшәҡәтләнгән арала конкуренттары тапаясаҡ, иҙәсәк уның фирмаһын…

Бәлки, Ғаяз?.. Яратҡанлығын күҙ ҡарашынан, ым-ишараһынан һиҙә. Ғаяз да уның өсөн ҡәҙерле, булмышын гөлтләтеп тоҡандырыр сатҡы. Юҡ, юҡ, ул түгел…Уларҙың араһын айырып тотҡан, теге күҙгә күренмәҫ кәртә бар… ул – ҡатын ире, ғаилә башлығы… Уға яҡынлай ҙа алмай, ташларға ла көсөнән килмәй. Ә Ғаяз китергә булды. Бәлки, хаҡлылыр ҙа…

Түшәгендә бесәй балаһындай йомарланды. Уны бөтәһе лә көслө, ҡырыҫ итеп күреп өйрәнгән. Ә бит ҡайһы ваҡыт көсһөҙлөгөн күрһәткеһе, кемгәлер һыйынғыһы, унан ярҙам өмөт иткеһе килә. Ул да бит ҡатын-ҡыҙ затынан, әлеге мәлдә бала тапҡыһы килгән яп-ябай бисә. Фирмаһы ла, килеме лә, етеш тормошо ла кәрәкмәй. Уға бала кәрәк, уның бәпес имеҙгеһе килә…

Иртәгәһен башы тубалдай булып эшкә барҙы, оперативка үткәрҙе, урынбаҫарҙарының ҡайһыһын хупланы, ҡайһыһын тәнҡитләне, бәғзеләрен ерле юҡҡа тиргәп ташланы. Ағымдағы эш: ул иртәгә лә, иртәнән һуң да, унан ары ла шулай ҡабатланасаҡ, бер нәмә лә үҙгәрмәйәсәк. Эшмәкәрлек бары күберәк табыш алыуға ҡоролған, бында хистәргә бирелеү урынһыҙ. Уның таштай ҡатҡан битлеге аша бер кем дә эсендә ҡайнаған икеләнеүле уйҙарҙы һиҙмәне. Оперативка тамамланғас, Ғаязды саҡыртты. Тағы һүҙ ялғанманы. Тынлыҡты уның әрнеүле тауышы бүлде:

– Ғаяз, мин арыным...

– Ял итергә кәрәк һеҙгә, Илһөйәр Вариҫовна, мәшәҡәттәрегеҙҙе ҡуйырға ла ял итергә.

– Юҡ, мин яңғыҙлыҡтан арыным…

Шул мәлдә микрофонда секретарының тауышы ишетелде:

– Илһөйәр Вариҫовна, һеҙҙе аҙыҡ-түлек министрлығынан һорайҙар!

– Тоташтырығыҙ!.. Кәримов, мин һеҙҙе шуға саҡырттым: беҙгә бөгөн Стәрлегә барып киләһе бар, машинаны һәйбәтләп ҡарағыҙ. Сығырға мөмкин!

«Тағы һөйләшергә бирмәнеләр…» – тип екһенеп уйланы.

Һиҫкәндереп, төн уртаһында телефон шылтыраны:

– Тыңлайым… – Күрше бүлмәлә йоҡлаған әсәһен уятып ҡуйыуҙан ҡурҡҡанға ишетелер-ишетелмәҫ өндәште.

– Илһөйәр… Илһөйәр Вариҫовна…Был мин борсой инем…

– Сәғәткә ҡара, Кәримов!

– Төнгө ун ике… Ваҡытһыҙ бимазалағаным өсөн ғәфү итегеҙ…

– Шылтыраттың бит инде, әйт йомошоңдо!

– Бала табыу йортонда бер йәш әсә өс көнлөк кенә балаһын ҡалдырып киткән, тип ишеттек, Рәсимәнең әхирәте шунда эшләй бит. Бөгөн барып ҡараным. Ҡыҙ бала, һөйкөмлө генә үҙе.

– Ҡалдырһа һуң? Ниңә уны миңә һөйләйһең? Улайтып йүгергеләп йөрөгәнсе ҡатыныңа әйт тә, бик һөйкөмлө булғас, алығыҙ аҫырарға! Тыныс төн теләйем, иртә менән подъезд алдында бул! – Йәне көйгәнгә тауышын күтәреп, һәр һүҙенә баҫым яһап яуапланы ла асыу менән трубканы урынына һалды. Ләкин йоҡоһо оҫҡайны инде, халатын кейҙе, балконға сығып баҫты, сигарет тоҡандырҙы. Кәрәҙҙе хәтерләткән йорттарҙың күбеһендә, төн уртаһы ауыуға ҡарамаҫтан, уттар балҡый. Аҙға ғына булһа ла күҙҙәрен йомоп серем итәме икән был ҡала? Йоҡоһоҙлоҡтан интегә төҫлө, тыныслығын юғалтҡан, шуға ҡуҙғыған күс һымаҡ геүләй һәммәһе…Ана бит, күктәге бөләңгерт ай ҙа шул шау-шыуҙан арып, алйып, йыуылмаған батмустай, офоҡ ситенә эленеп ҡалтайған, көслөрәк тауыш сыҡһа, ҡайтауазға ҡаҡлығып, урынынан ҡубып, хәҙер түбәнгә тәкмәсер. Бәләкәй сағында әсәһенән һорағаны ла булды:

«Мин ҡайһы мәлдә тыуҙым, көндөҙмө, әллә төндәме?»

«Төндә. Айлы төндә. Палата эсен һыу һымаҡ яҡтырта ине тулған ай».

Уның игеҙ һыңары һымаҡ күктәге ай, ғүмеренең хәтерҙә ҡалыр мәлдәрендә, юғарыға ҡара, мин бит бында, тигәндәй күҙгә бәрелеп күренеп тора. Әле айҙың да хәле үтә мөшкөлгә оҡшаған. Теге саҡ, Ғаязды тәү тапҡыр тап иткәнендә, йоҡоһо ҡасҡанда тулған ай бүлмә эсен әкиәттәгеләй көмөш нурҙарына тултырғайны…

Үҙәген әсеткән әсе төтөн менән бергә аңына яңы ғына барып еткән уй көтмәгәндә зиһенен тертләтеп ебәрҙе: «Ғаяз бит уны яңғыҙлыҡтан ҡотҡарыу сараһын эҙләй!.. Ул бит уның бала һөйгөһө килеүенә төшөнгән… Ҡыҙ бала, ти бит, һөйкөмлө, ти…»

Сигаретын ырғытты ла ашығып инде, йоҡо бүлмәһенең утын ҡабыҙып, үрлеҡырлы йөрөргә тотондо, башы тиҙ әйләнде, түшәгенә ултырып тотош кәүҙәһен ҡайҡайтты, йоҡомһорағандай күҙҙәрен йомдо. Тыштан боҙ ҡаялай һалҡын, һәммәһенә битараф һымаҡ күренһә лә, уның эсендә утлы ҡойон ҡайнай. «Әсәйемде уятып кәңәшләшергәме икән? Юҡ! Был мәсьәләне ул, бары ул ғына хәл итергә тейеш! Йәнә шуны алдан һиҙә: теләгенән баш тартырға өгөтләп һүрәсәк уны әсәһе, әллә ниндәй сәбәптәр уйлап табасаҡ, кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр килтерәсәк…»

Кинәт алға ынтылды ла, телефон трубкаһын ҡалҡытып, таныш номерҙы йыйҙы:

– Ғаяз, ғәфү ит, ете төн уртаһы икәнлеген дә беләм… Кисекмәҫтән мине теге бала табыу йортона алып бар! Юҡ, иртәгә түгел… Ул баланы хәҙер күрергә теләйем!

Бала табыу йортона уларҙы төн уртаһында кем генә индереп торһон инде! Таңға ҡәҙәр, эш көнө башланғансы, кисектереп торорға тура килде. Ғаяз менән инеп ҡаранылар сабыйҙы. Ҡып-ҡыҙыл йомарсыҡты ап-аҡ биләүгә төрөп һалғандар. Буйы ла беләк буйы самаһы ғына. Янына кешеләрҙең инеүен белде әллә – бүлтек иренен сәпелдәтеп, ашағыһы килеүен һиҙҙертте. Шуларҙы яратып күҙәтте лә бәхетле йылмайып ебәрҙе, тартынып ҡына Ғаязға һирпелде, ә ул «оҡшаны бит, тәүәккәллә» тигәндәй башын һелкте.

Күңелендә бөрөләнеп тулышҡан теләген өтәләнеп, ашығып тормошҡа ашырҙы. Әсәһенең ҡаршы килеүенә, тырт-мырт итеп ризаһыҙ ҡыланыуына ла иғтибар итмәне. Кәрәкле документтарҙы юридик шартына килтереп тултырып, баланы алып ҡайтҡансы аҙна-ун көн самаһы ваҡыт уҙҙы.

Бала табыу йортоноң баш табибы уны кабинетына саҡыртты:
– Ҡайһылайыраҡ итеп оформить итәбеҙ? Опекун…
Әйтеп бөтөргә бирмәй бүлдерҙе:
– Мөмкин булһа, минең балам итеп!
– Мөмкин түгел шул, ташлап китһә лә, уның әсәһе бар, бер көн килеп ташлағанын таптырыуы ихтимал.
– Нимә эшләргә ул саҡта?
– Белмәйем. Уйлашайыҡ.
– Минең исемгә ауырлы ҡатын картаһын тултырып булмаймы? Асығыраҡ итеп әйткәндә, мин ауырлы булып һеҙҙә иҫәптә торғанмын һәм ошо ҡыҙҙы тапҡанмын.
– Ә был бала?
– Ә ул тыуғандан һуң өс көн үткәс – үлгән! Теге ҡатын һорай ҡалһа, шулай тип әйтерһегеҙ. Минең өсөн ул – тыуҙы! – Ҡыйыу уйын нығытып ҡуйырға теләп, аҡса төргәге сығарҙы ла баш табип яғына этте.
– Бөтә нәмә лә аҡсаға һатылмай, һеңлем. Беҙҙең араға аҡса мөнәсәбәттәре килеп инһә, һөйләшеүебеҙ килеп сыҡмаясаҡ!
– Ғәфү итегеҙ, мин яңылыштым! – Төргәкте йәшереүҙән башҡа сара ҡалманы.
– Һеҙ – иртәгәге көн кешеһе, ҡыйыу һәм әрһеҙ. Йәмғиәтебеҙҙә алыш-биреш мөнәсәбәттәре моронлай башланы бит инде, баҙар һеҙҙең кеүектәр өсөн. Бигәйбә, быларҙы һүҙ араһында ғына әйтеүем. – Ҡулындағы ҡәләмен өҫтәлгә туҡылдатып, баш табип биниһая ваҡыт өндәшмәй ултырҙы. – Һеҙҙең тәҡдим, дөрөҫөн әйткәндә, минең башыма инеп тә сыҡманы, шулай ҙа ҡыҙыҡлы фекер. Уны тормошҡа ашырырға мөмкин, тик сер ике арала ҡалған осраҡта.
– Уның өсөн мин ни эшләргә тейешмен?
– Ихлас итеп рәхмәт әйтергә.
– Шул ғынамы?
– Эйе, шул ғына.
Ыңғай хәл ителде уның үтенесе, баланың исемен таныҡлыҡҡа Гөлкәй, ә атаһын Ғаязовна тип яҙҙыртты. Шул мәлдә, берәйһе күреп ҡалмаһын тигәндәй, тирә-яғына һипһенеүле ҡарашын атты.
Ошоғаса динде бар тип тә белмәгән әсәһе, уны аптыратып, көтөлмәгән тәҡдим яһаны:
– Балаға исемде мулла саҡыртып, ҡолағына ҡысҡыртайыҡмы икән әллә? Өсәүләп мәсеткә барып әйләнгәндә лә килешер. Ни тиһәң дә, беҙ – мосолмандар, иманға хилафлыҡ килмәҫ ине. Башта ҡаршы килһәм дә, тәү күргәс үк был бала оҡшаны, күңелемә ятты. Хәҙер уны, Хоҙай Тәғәләнән рөхсәт алып, үҙебеҙҙеке итәйек.
– Әсәй! – Ғәжәпләнеп уға бер аҙ текәлгәндән аҙаҡ аптырағандай һораны: – Һин динде бар тип тә белмәй инең, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе иҫкелек ҡалдығы тип һанға һуҡманың, әле шуларҙы үтәмәксеһеңме? Ышанғы килмәй!
– Олоғайҙым бит инде, ҡартайған һайын күп нәмә иҫкә төшә икән ул…
Баланы бағыу әсәһенә ауырға төшөр тип, юғары белемле, яңы ғына институт бөтөргән тәрбиәсеһен дә тапты. Хеҙмәтсе менән һөйләшкәндәй, тегенең алдында дорфа ҡыланды. Белһен хеҙмәтсе уның кемлеген һәм үҙенең биләгән урынын.
– Беҙҙә йәшәрһегеҙ, йәшәр урынығыҙ юҡлығын беләм. Бында урын етерлек. Туҡланыу ҙа ошонда, ул хеҙмәт хаҡы иҫәбенә инмәй. Аҡсаға мохтажлыҡ кисермәҫһегеҙ, эшегеҙҙең сифатына ҡарап өҫтәрмен дә. – Саҙаҡа биргәндәй ҡыланып, ҡыҙҙың тубығына меңлек аҡса һалды. – Баланы балалар баҡсаһына биргәнгә тиклем бында эшләрһегеҙ, ары минең офисҡа, секретарь вазифаһына күсеү ихтималлығы бар, әле ул эштә йөрөгән ҡатын пенсия йәшендә. Алдан шуны

иҫкәртмәксемен: баланы – биләүҙән, тигән әйтем бар, ҡыҙымды беренсе көндән үк бизнес-леди итеп тәрбиәләү – беренсе бурысығыҙ.

Тормошона Гөлкәй килеп ингәс, йәшәүенә йәм өҫтәлгәндәй итте. Эшкә ниндәйҙер дәрт менән сығып йүгерә, эске елкенеү менән ҡайтып инә. Кистәрен дә ҡағыҙҙарында соҡонмай, ваҡытын ҡыҙына бүлергә тырыша, тик һуңғы осорҙа күңелен ҡапма-ҡаршылыҡлы, үҙе лә аҙағынаса төшөнөп етмәгән хистәр биләй бара… Гөлкәй ҙә уны таный башланы инде: күреү менән йылмайып ебәрә, бәләкәй ҡошсоҡтай, уға ынтылып талпына. Тәрбиәсе ҡыҙ ҙа тырыш, эшкә сымыры икән, ни тиһәң дә ауылда үҫкән бит. Гөлкәйҙе ваҡытында ашата, өҫтөндәге кейеме лә һәр саҡ йыуылған, үтекләнгән. Ҡыҙҙың бөхтәлеген хуплағандай, бер көн һорай ҡуйҙы: «Һеңлем, кейәүҙә лә түгелһең, ә баланы һис ауырлыҡһыҙ, еренә еткереп ҡарайһың. Быларҙың барыһын да институтта өйрәтәләрме?» Ҡыҙ оялсан йылмайҙы: «Бала бағыуҙы институтта ғына өйрәтеү аҙҙыр, мин бит ауылда күп балалы ғаиләлә үҫтем. Иң өлкәне мин…»

Ошо һөйләшеүҙән аҙаҡ оҙаҡ ҡына уйланып йөрөнө. Йәнә телевизорҙан күрһәтелгән бер тапшырыу тоҡана барған утҡа кәрәсин һипте. Әңгәмәне сал сәсле фән докторы алып барҙы, ул күп илдәр гиҙгән мәғлүмәтле кеше ине, тапшырыуҙы эстәлекле, мауыҡтырғыс, аңлайышлы итеп ҡорҙо, әңгәмә барышында тура бәйләнешкә инеүселәр ҙә байтаҡ ҡына булды. Ул сит илдә үткәрелгән бер тәжрибәне ғибрәт өсөн бәйән итте. Ике маймыл балаһын күҙәтеү аҫтында үҫтергәндәр: береһе – ата-әсәһенең ҡарамағында, икенсеһе – бер үҙе ситлектә бикле. Тегеләр ҙурайғас, икеһенә ике маймыл балаһы тотторғандар. Беренсеһе шунда уҡ бәләкәсте ҡабул итеп, уның тураһында хәстәрлек күрергә керешеп киткән, икенсеһе, яңғыҙлыҡта үҫкәне, килтерелгәнде һис аямай ботарлап ырғытҡан. Бикле ситлекте ул илебеҙҙә йыл һайын арта барған балалар йорттары менән сағыштырҙы һәм әңгәмәһен былайыраҡ тамамланы: «Йәмғиәтебеҙҙең нигеҙе ул – ғаилә, бары унда ғына әҙәп, шәфҡәтлелек, кешелеклелек сифаттары тәрбиәләнә».

Ҡараны ла, шул тапшырыу башынан сыҡманы, тутыҡ игәүҙәй өҙлөкһөҙ мейеһен игәне: «Ул да, моғайын, ситлектә яңғыҙы тәрбиәләнгән маймыл затынандыр. Дәрт менән сығып йүгереүе – өйҙән, баланан ҡотолдом, тигәндәй ҡыуанып ҡасыуы түгелме икән? Эйе, кис етһә, ысынлап та Гөлкәйен һағына, юҡһына, тик ҡайтып күрһә, күңеле ҡайта, ерле-юҡҡа һарыуы ҡайнай башлай, тышынан йылмая-көлә, ә эсендә – хисһеҙ бушлыҡ. Теге хайуан инстинкттары өҫтөнлөк алған маймылдай, балаға насарлыҡ ҡылып ҡуйыуҙан ҡурҡып, Гөлкәйҙең янына килгәндә ирекһеҙҙән ҡулдарын артына йәшерә. Бала йәнеңә берекһен өсөн уның иң элек йөрәк ярып сығыуы шарттыр, бәлки. Бөгөн бит ҡайһы бер ҡатындар, ялланып, бай, аҡсалы ханымдарға бәпес табып бирәләр. Ауырҙы туғыҙ ай буйы йөрәк аҫтында йөрөткән ҡатындарҙың баланы тыуҙырғандан һуң биргеләре килмәү осраҡтары ла булғылай икән. Сөнки унда – уның ҡаны, уның йәне…

Бер көн эшенән ҡайтты ла, Гөлкәйҙе күтәреп алып, бүлмәһенә инеп бикләнде. Өҫтәлгә одеал йәйеп, баланы сисендерҙе, уға оҙаҡ итеп текәлеп торҙо, шунан иҙеүен ысҡындырып, күкрәксә айылын бушатҡас, килбәтһеҙ ҡыланып, ҡабарынҡы түшенең имсәк осон уймаҡ ауыҙға ҡаптырҙы. Резина имеҙлек һурып күнеккән бала һутлы, йылымыс нәмәнән ятһынып ҡалды тәүҙәрәк, шунан ымһындырғыс хуш еҫте, тәмде ҡабул итеп, ҡарһаланып имергә кереште. Һурыуҙан ҡатындың ылйыраған тәненән зымбырлатҡыс ят, әммә көтөлгән, танһыҡ рәхәтлек йүгерҙе. Ләкин был кинәнес оҙаҡҡа барманы, ҡыҫырға алданғанын шәйләгән бала теле менән имсәк осон этеп сығарҙы ла, ситкә ҡайырылып, аҡырып иларға тотондо.

«Ят бала: танауы ла, ауыҙы ла, тумалаҡ бите лә, етендәй һары сәсе лә уныҡы түгел. Бәлки, ул урыҫ йә башҡа милләттәндер әле…Ят…ят…ят…»

Ишекте асты ла йүгерә-атлай килеүсе тәрбиәсегә екерҙе:

– Аҡыртма баланы, ҡара!

Залда бәйләме менән булашҡан әсәһе уға уҫал йылмайып һирпелде:

– Нимә, ҡурсаҡты уйнатып туйҙыңмы, инде теңкәңә тейҙеме? Иҫкәртмәнем түгел, иҫкәрттем, тыңламаның…

Үткәндәрҙе иҫләп хәтирәләргә бирелгән Илһөйәр йәнә урынынан торҙо. Әллә ҡасан эңер төшөп, ер өҫтөнә төн шаршауы ятҡан. Утты ҡабыҙмай ғына, тәҙрә ҡорғандарын ситкә тартты. Эскә ҡала ҡабыҙған уттарҙың һүрәнке яҡтылығы һарҡты. Дөм-ҡараңғы йыһанға төбәлде. Ҡайһылай ҙа өшәндергес икән дә баһа нөктәләй генә булһа ла нур осмото төҫмөрләнмәгән, ҡурғаштай ауыр болоттар япҡан күк йөҙө. Ай булмағас, исмаһам, йондоҙҙар булһа ла емелдәшһәсе. Киҫкенләшеп киткән, тәҙрәне әрһеҙ ҡаҡҡан төнгө елгә сыҙамағандыр йондоҙҙар, шуға бөртөгө лә ҡалмай ҡойолоп бөтөп, көмбәҙ йәмһеҙ ҡара сатырға әүерелгәндер. Юҡ, сатыр түгел, ҡоромло ҡаҙан. Шул шөкәтһеҙ ҡаҙан өҫтөнә түңкәрелгәнме ни – булмышы сараһыҙлыҡтан ҡороша, тын алыуы ауыр. Быуылғандай, муйынын ыуып хәтһеҙ ваҡыт һерәйеп торҙо.

Гөлкәйһеҙ ҡалһа, ни ҡылыр, йәшәүенең йәме, мәғәнәһе ҡалырмы? Ығыш ҡыймылдап килде лә йөҙтүбән ятҡан ҡурсаҡты әләктереп диванға һалғайны, тегеһе «Эң-ң-ң-ң-ә-ә-әәә…» тигән йәлләнес тауыш сығарҙы. «Йә, илама инде, илама, яныңа ятам бит», – тип һөйләнде лә, ҡулдарын баш аҫтына ҡуйып, ҡурсаҡтың эргәһенә диванға һуҙылып ятты. Хәтер йомғағы ары һүтелде.

… Гөлкәй һөйкөмлө бала булып үҫте, әле атлап китмәҫ элек үк ым-ишараһы менән, ынйылай тештәрен емелдәтеп ихлас көлөүе менән, күгәрсендәй геүләп һөйләнеүе менән үҙенә ҡараттыра һәм яраттыра белде. Аңланы хәҙер: баланы тыуҙырған әсә түгел, ҡараған, тәрбиәләгән, уның ғәме менән йәшәгән әсә. Ул да ваҡыт үтеү менән күңелен ҡыҙына баҫты.

Ҡабаланып эшкә йыйынған мәлендә тейешлекте үтәп, ҡыҙының битенән «әп» итеп сығыу яғына йүнәлгәйне генә, артынан Гөлкәйҙең асыҡ итеп өндәшеүе ишетелде: «Ә-сс-ә-ййй!» Ҡолағына яңылыш ишеteләләр, тип урынында ҡатып ҡалды ла сәйерһенеп артына боролдо: «Кем әсәй?! Улмы? Ошоғаса уны былай атағандары булманы ла. Йыр һымаҡ моңло яңғырай икән дә баһа ҡәҙерле исем!» Йүгерә-атлай килеп, Гөлкәйен күтәреп алды ла ҡабатлап һораны: «Кемгә әйттең уны? Миңәме? Йә, тағы ла бер ҡабатла әле! Ҡабатла!» Гөлкәйе бар тештәрен бер юлы күрһәтеп ауыҙын йырҙы: «Ә-ә-ә-сс-ә-әййй!» Ул, илай-көлә, баланы ҡосағына ҡыҫты: «Рәхмәт, ҡыҙым, ошо һүҙеңә. Әсәйең мин, мин һинең әсәйең!»

Сос бала йәше тулмаҫ элек үк атлап китте. Ҡаршылыҡтарҙы һанға һуҡмай, туҡтай белмәй йүгерә генә, әләгеп йығылыуҙарҙан, һаҡһыҙ төкөүҙәрҙән ҡолаяҡтары, маңлайы күгәреп бөтә, шунда ла ҡуймай.

Ҡыҙыу эш мәлендә ҡурҡынған тауыш менән әсәһе шылтыратты:

– Илһөйәр, Гөлкәй юғалды бит әле…

– Нисек юғалды? Һеҙ бит иртән өйҙә ҡалдығыҙ.

– Паркта йөрөп алырға тип сыҡҡайныҡ шул. Эргәмдә генә ине, күҙ яҙҙырмай ҡарап ултырҙым.

– Һуң?!.

– Бәйләм дә алып сыҡҡайным. Иғтибарымды бер минутҡа ситкә алғанмындыр. Әйләнеп ҡараһам, ултырғыс артында уйнап ултырған бала осто-гүҙе юҡ. Эҙләмәгән ерҙе ҡалдырманым…

– Нишләп кенә урамға сыҡтығыҙ, әсәй! Һеҙ бит ауылда түгел, миллионлы ҡалала! Хәҙер нимә эшләйбеҙ инде?! – Биниһая ваҡыт ни ҡылырға белмәй тетрәнеү кисереп ултырҙы ла, милицияға хәбәр иткәс, машинаһына үҙе ултырып ҡайтыу яғына елде.

Оҙаҡ эҙләнеләр Гөлкәйҙе, төш етте, көн кискә ауышты. Милициянан килгәндәр, Гөлкәйҙең фотоһын, уның тураһында мәғлүмәт алғас, кире китергә ашыҡты. Улар өсөн тултырылған ҡағыҙҙар, ғариза, фото мөһимерәк ине шикелле. Өмөтһөҙлөккә бирелеп йортҡа яҡын майҙансыҡтарҙың береһенә боролғайны, сыр-сыу килеп уйнаған балалар араһында Гөлкәйен күреп ҡалды: етен сәстәренә ҡом һылашҡан, кейгән күлдәге эт алғыһыҙ, бит-йөҙө танымаҫлыҡ булып бысранған. Барып ҡосаҡлап алды ла быуынһыҙланып ергә сүкте, иңрәүле үкһеп ебәрҙе: «Нишләп мине ташлап киттең? Юғалттым бит мин һине, йәнем сыға яҙҙы!» Гөлкәйҙең йомшаҡ осаһына сәпелдәтте. Тегеһе лә ауыртыуҙан түгел, әсәһен һағыныуҙандыр шарылдап илап ебәрҙе.

Һәр әҙәм балаһы өсөн иң аяныслыһы яңғыҙлыҡтыр, моғайын, сөнки һәр кем ише менән, кешеләр араһында йәшәр өсөн тыуа. Йылдар үтеү менән, Гөлкәй уның айырылғыһыҙ, яңғыҙлыктан ҡурсалап көнитмешен тулыландырыр ҡәҙерле бер һыңарына әүерелде. Быны ул әсәһен, Ғаязды юғалтҡас ҡына бөтә тәрәнлегендә төшөндө.

Әсәһе һыҙып ауырып йөрөнө-йөрөнө лә бер көн ныҡлап, башҡаса тормаҫ өсөн түшәгенә ятты. Диагнозды белә ине, әсәһен тәү тапҡыр табипҡа алып барғанда аҙаҡтан ҡалып һөйләшкәйне. «Операция яһарға һуң, шуға файҙаһыҙға ынйытмайыҡ», – тип төңөлдөрҙө онколог. Әсәһе, янып бөтөп барған майшәмдәй, көн һайын күҙгә күренеп ирене, әүәлге тулы, төйөрөм кәүҙәһе кибә барып, ҡорҙайға әүерелде, сыҡмаған йәне бар инде шунда.

Эргәһендә оҙаҡ ҡына ултырғандан һуң тороп китергә йыйынғайны, ауырыуҙың ҡыу ҡурай беләкле шау һөйәк бармаҡтары уның ҡул һыртына ипле ҡағылды:

– Китмә әле эргәмдән, әйтәһе һүҙҙәрем дә бар… Ғүмерем осона сығып килә шикелле, ҡыҙым…– Һүнгән ҡараш ғазап аша уға төбәлде, ҡоро тирегә ҡалған яңаҡтар тартыша биреп ҡуйҙылар.

– Төҙәлерһең әле, әсәй, бөтә кеше лә ауырып ала инде ул.

– Бер-беребеҙҙе алдамайыҡ, әүрәтерлек йәштән үткәнмен күптән, мин бит барыһын да белеп ятам, ерле юҡҡа ғына онколог тикшермәне мине. Һуңынан, уның кабинетынан ҡобараң осоп килеп сыҡҡанында уҡ, барыһын да төшөндөм. – Эргәһендәге стаканға ҡойолған минераль һыуҙы уртланы.– Хәҙер, һөйләй башлаһам, берүк бүлдермә, һорауҙарыңды бирмә, барыбер яуаптарым юҡ. – Тоноҡ, әрнеүле тауыш йөрәк түренән һығылып сыҡҡандай әкрен ишетелә.

– Үҙ ғүмеремдә ике тапҡыр хаталандым. Улар мине ғүмерем буйы эҙәрлекләне, йәшәүемдең мәғәнәһен, ҡабыр ризығымдың тәмен, татын алды. Үлһәм, әхирәттә лә тынсымамдыр, йәнем тамуҡта янып ғазапланыр, моғайын.

Беренсе гонаһым – йәш саҡта яңғыҙ әсәйемде ауылда ташлап киттем. Әсә күңеле – балала, бала күңеле – далала, тигәндәре дөрөҫтөр, аҙмышымды теләгәнсә ҡорам, хәл итәм инде, үҙемсә. Тәүҙә район үҙәгендә бухгалтерҙар курсын бөтөрөп, шунда эшләнем, финанс техникумына ситтән тороп уҡырға ингәс, дөйөм ятаҡтан урын табып, баш ҡалаға күстем, шунан һуң – институт, үҫеү өсөн ары тырышлығымды һалдым. Хоҙай шаһит: эшһөйәрлек, ныҡышмаллыҡ минең ҡанымда ине, тәүлегенә өс-дүрт сәғәт кенә серем иткән саҡтар булды. Карьера ҡайғыһы әсәйемде икенсе планға күсерҙе. Башта, фатирлы булғас күсереп алырмын, тип үҙемде-үҙем алданым, шунан уныһын хәстәрләгәс, тағы ла юғарыраҡҡа ынтылып күҙҙәрем тондо. Ауыл, әсәй баштараҡ икенсе планға күсһә,

хәҙер бөтөнләй онотолдо. Дәрәжәле ҡунаҡтар йыйғанда ауыл әбейе ҡамасаулай, йәнәһе. Тағы минең сығышымды белмәҫкә тейештәр. Шулайыраҡ фекер йөрөттөм. Былай ай һайын почтанан аҡса һалам һәм онотҡанда бер ҡабалан ғына ҡайтып әйләнә инем. Уға ауыр саҡта аҡса түгел, мин кәрәккәнмендер, уны әле генә, кеше көнөнә ҡалғас, аңланым… Вафатына ла ҡайта алманым, санаторийҙа сәләмәтлегемде нығытып яттым. Һуңлап хәбәр иттеләр. Ваҡытында белһәм дә, Ҡара диңгеҙ ярын, күңелле ялымды ҡалдырыр инемме икән? Яҡты донъяға тыуҙырған әсәне һуңғы юлға оҙатмау, өҫтөнә бер ус тупраҡ һалмау – оло гонаһ!

Атайыңа килгәндә, ул да ғүмеренең буйы тиерлек беҙҙең эргәлә йәшәне, һыртынан ғына һине күреп йөрөнө, эргәңә генә килмәне… Яңыраҡ үлеп ҡалды. Бәхилләшергә тип барғайным, ҡатыны индермәне. Һәйбәт кеше ине һинең атайың. Мин генә уға лайыҡ, иш була алманым, яратмай тороп, карьера өсөн кейәүгә сыҡҡайным шул. Иртәме-һуңмы ғаиләбеҙҙең тарҡаласағын һиҙеп, рәсми никахҡа ла инеп торманым. Ә бит атайың миңә ваҡытында үсергә ярҙам итте: институтты бөтөрҙөм, күптәр ымһынып та эләктерә алмаған вазифала эшләнем, башҡалар подвалда көн иткәндә ҡала үҙәгенән фатир алдыҡ. Әйҙә, ҡыуанып йәшә лә йәшә генә.

Мөхәббәтһеҙ, яратмаған кеше менән йәшәүе ауыр икән. Күҙгә төшкән сүп һымаҡ, һәр хәрәкәте, һәр ҡылығы йәнде көйҙөрә, өҙлөкһөҙ ҡәнәғәтһеҙлек хисе күңелде ҡыра. Тәүге йылдары, нишләптер, ауырға ҡала алманым. Теләкһеҙ сәселгән орлоҡ шытым бирмәгән кеүек, хисһеҙ яҡынлыҡ та емешһеҙ булалыр, бәлки. Шулай яҙмышҡа күнеп, сыҙап йәшәп ятҡанда, атайыңдан туберкулез сире таптылар, оҙаҡ ҡына, ике ай самаһы диспансерҙа ла ятып сыҡты. Һыныҡҡа һылтау тигәндәй, ошо хәл тулышҡан шештең һытылыуына сәбәп булды, атайыңды больницанан икенсе мөнәсәбәттә ҡаршы алдым; айырым ултырып ризыҡланыу, айырым һауыт, ауырыуыңды йоҡтораһың, тип уны түшәктә үҙемә яҡынлатмай маташтым, мәгәр ҡатын менән ир мөнәсәбәтенән баш тартып буламы инде. Ярты йыл самаһы шулай дауам итте. Атайың, ауыҙына араҡы алмаған ир, эсештерә башланы, эшендә ҡытыршылыҡтар килеп тыуҙы. Бер саҡ хатта ул үҙ-үҙенә ҡул һалыуға барып етте, галстугы менән быуылырға маташҡан еренән саҡ һалдырып алдым. Борис ары сыҙаманы, бар нәмәһен ике сумаҙанға тултырҙы ла мине, Алла ҡөҙрәте менәндер йәнемдә яралған, әле тыуып өлгөрмәгән һине ҡалдырып сығып китте. Тәүҙә дөйөм ятаҡта көн итте, шунан урам һепереүсе ҡатынға ингән, тип ишеттем, ниндәйҙер ойошмаға төнгө ҡарауылға эшкә урынлашҡан. Һирәкләп осраштырғылай ине ул, һүҙһеҙ үтеп китеү уңайһыҙ нисектер, ни тиһәң дә нисә йылдар ир менән ҡатын хөкөмөндә йәшәнек, аяғөҫтө килеш хәл-әхүәл белешкән булабыҙ. Бәхетле йәшәгәнмелер ул, әллә юҡмылыр, уныһы миңә ҡараңғы, тик шуныһын яҡшы беләм: атайыңдың яҙмышын емерҙем, уны балаһынан айырҙым. Ә бит ул һине һыртыңдан күреп булһа ла ныҡ ярата ине… Бөгөнгөләй хәтеремдә, һин тыуғас, бала табыу йортона кемдер бер ҡосаҡ рауза сәскәләре ҡалдырып китте. Атайың икәнлеген аңланым, уға, фәҡәт уға ғына шундай нескә йомартлыҡ хас ине. Ә мин, белекһеҙ, тыуыу тураһындағы таныҡлыҡҡа уның исеме яҙылыуын теләмәнем. Тәрбиәһеҙлегем, ҡаты бәғерлегем шул саҡлы булдымы икән инде.

– Әсәй, уны бит йыш күрә инем. Башта – мәктәп эргәһендәге ҡалҡыулыҡта, шунан – институт алдында. Ул гел ҡыҙын көтә ине. Мин булғанмын икән…

– Эйе, шул ине һинең атайың…Тәрбиәм дә һиңә аҙ эләкте шул, ҡыҙым, кисер мине… Көн әйләнәһенә эшләгән балалар баҡсаһына биреп, онотҡанда бер барып күрә инем бит, эшем эйәһе… Шуға ла Гөлкәйҙе ҡыҙлыҡҡа алырға иткәсең, ул да һинең яҙмышыңды ҡабатлап ҡуймаһын тип, ҡурҡып ҡаршы төштөм… Гөлкәйҙе ҡара, һаҡла, ҡыҙым, мин дә китһәм, һиңә кем ҡала тағы…

Яҡындарымды ҡалдырып, уларҙың яҙмышын тапап юғарыға үрмәләнем, туймаҫтай ҡыланып, нәфселәнеп байлыҡ, мөлкәт йыйҙым. Нимәгә кәрәккәндер, бына килеп, ике аҙым ер ҡуйынына инеремде көтөп ятам, унда кәфендән ары бер нәмә лә кәрәкмәй…

Ҡайғы яңғыҙ йөрөмәй, тигәндәре раҫтыр: әсәһен ерләп, етеһен уҡытыуға Ғаяз автоһәләкәткә эләкте. Ул фирманан китеп, ниндәйҙер төҙөлөш тресына водитель булып эшкә урынлашҡайны.

Иртән, эшкә килгәс үк, Рәсимә дауахананан илай-илай шылтыратҡайны, әйтелгән адресты табып барҙы. Янына бер кемде лә индермәйҙәр. Рәсимә лә палата ишегенең төбөнә ултырғыс ҡуйған да шунда һенағастай бөгөлөп төшкән. Ныҡыша торғас, биш минутҡа ғына рөхсәт алды. Ғаяздың тотош кәүҙәһе, башы бинтҡа уралған, юғарыға сөйөлгән танауы ғына ослайып күренә.

Ҡулдары менән кәүҙәһен ҡосаҡлап, бөршәйеп кенә уның эргәһенә килде.

– Ишетәһеңме, Ғаяз, мин килдем…

– Илһөйәр… Ә мин һинең килереңде белдем. Иртәме-һуңмы барыбер эргәмә килер инең.

– Икәүләп бергә йөрөгәндә нишләп аварияға эләкмәнек икән, Ғаяз, ә? Бәлки, һәйбәтерәк булыр ине…

– Юҡты һөйләмә… Һиңә йәшәргә лә йәшәргә… Илһөйәр Вариҫовна тип әйтмәгәнгә ғәфү ит, яҡын итеп өндәшкем килә…

– Ә мин ҡайһы ваҡыт, нишләп исемем менән генә атамай икән, тип һиңә үпкәләй ҙә инем.

– Икенсе ерҙә, икенсе шарттарҙа осрашһаҡ, бәлки, беҙҙең яҙмыш та башҡасараҡ китер ине… Ят ирҙәр ҡосағына ташығанда һиңә ныҡ рәнйенем, Илһөйәр… Яратҡанымды белә тороп, шулай эшләнең…

– Теге кистән һуң ундай урындарға башҡаса йөрөмәнем, ышанаһыңмы?.. Һинең өсөн бөтәһен дә эшләрмен, Ғаяз, һауығырһың, аяғыңа баҫырһың.

Ғаяз, ҡараңғылыҡ аша яҡты нур күрергә теләгәндәй, бинтҡа сырмалған йөҙөн тәҙрә яғына борҙо ла ауырлыҡ менән, телен көрмәлдереп һораны:

– Әйт әле, өҙгөләнеп, ашығып нимә өсөн тырышаһың ул? Әгәр… үҙ бәхетеңде үҙең ҡорорға ҡабаланаһың икән, әйт: һин – бәхетлеме?

Яуап таба алмай оҙаҡ һүҙһеҙ һерәйгәндән һуң, Илһөйәр уҙған ғүмеренә тотош баһа биргәндәй, әйтерен көрһөнөүгә ҡушып һығып сығарҙы:

– Тормошҡа ашмаҫ хыялдарға алданып, тотош донъяны бер юлы ҡосорға тырышҡан булабыҙ, ә эргәлә генә йөрөгән оло бәхетте күреп, уның ҡәҙерен белеп йәшәргә аҡылыбыҙ етмәй, бына нимә аяныс.

– Дөрөҫ әйтәһең… Әле минең өсөн тормошҡа ашмаҫ хыял – аяҡтарыма баҫып көн яҡтыһына ҡыуаныу, һине күреү, һинең күҙҙәреңә ҡарау… Әле лә ҡара күҙлек кейеп, күҙҙәреңде минән йәшерергә тырышып ултыраһыңмы? Урынһыҙ… Былай ҙа тома һуҡырмын, дөм-ҡараңғы баҙ төбөндә ятҡандаймын…

– Юҡсы. Һиңә күҙлекһеҙ генә ҡарап ултырам. – Илһөйәр ҡабалан сисеп, күҙлеген сумочкаһына йәшерә һалды.

– Һәйбәт… Тағы бер үтә лә мөһим үтенесем бар…

– Әйт.

– Рәсимәне ситкә типмә, ҡулыңдан килгәнсә ярҙам ит. Уның минән башҡа бер кеме лә юҡ, детдом балаһы бит ул. Шулай булһа ла, кешегә ышанып барыусан, йәне сибек, үҙен яҡлай ҙа, һаҡлай ҙа алмай. Бөгөнгө заман кешеһе түгел. Ярҙам итерһеңме?

– Итермен. Тағы… Гөлкәйҙе «Ғаязовна» тип яҙҙырттым. Был – минең ошоғаса бер кемгә лә әйтмәгән, йәшереп йөрөгән серем.

– Дөрөҫ эшләгәнһең, беҙ бит уны икәүләп таптыҡ…

Шәфҡәт туташы инеп, шым ғына бүлдерҙе:

– Ауырыуға тынныслыҡ кәрәк.

Шулай итеп бер төптән тиерлек ике яҡын кешеһен юғалтты Илһөйәр. Донъя бушап, ҡотһоҙланып, ҡараңғыланып ҡалды. Тормошонан толҡа тапмай, ҡыҙын эйәртеп ҡала ҡыҙырырға сыҡты. Төбәп барыр ере лә юҡ, халыҡ ағымына ҡушылып, эйәреп хәсрәтен онотоу бар теләге. Гөлкәйгә ни ҡыуаныс ҡына, әсәһенең кәйефендә эше лә юҡ: һикрәңдәп алға сығып китә, кире әйләнеп килә лә, етәкләп, уның ҡулын бәүелдерергә тотона. Ҡыҙы хәҙер уның тормошоноң йәме, мәғәнәһе, әгәр ул булмаһа, ҡайһылай итеп күтәрер, еңер ине бөләңгертлекте, ҡуңалтаҡ яңғыҙлыҡты?

Иҫке универмаг янынан үтешләй Гөлкәй уны эскә етәкләне, инеү менән уйынсыҡтар бүлеге яғына йүгерҙе лә күҙе витрина түрендәге дәү ҡурсаҡҡа төштө. Һоҡланыуҙан телдән ҡалды, шунан, осҡонланған ҡарашын юғарыға йүнәлтеп, саҡ ишетелерлек итеп шыбырҙаны:

– Какая красивая кукла!.. Матур… Әсәй, купи!

– Нимәне? – Уның иғтибарһыҙ, тарҡау ҡарашы икенсе яҡта.

– Ошо ҡукланы…Мам, я ее видела во сне…Ал, пожалуйста… Башҡа бер нәмә лә һорамайым.

– Миндә ҡурсаҡ ҡайғыһымы, Гөлкәй? Беҙ бит йөрөп әйләнергә генә сыҡтыҡ, әйберҙәр һайларға түгел. Һатып алынған әйбер кәйеф торошона тап килергә лә тейеш бит әле. Икенсе ваҡыт, йәме.

– Ҡасан?

– Иртәгә…Бәлки, икенсе аҙнала…

– Сейчас купи, мам…

– Нишләп шул тиклем ныҡышһың, ә, бөтә кеше беҙгә ҡарай, уңайһыҙ, ниндәй тәрбиәһеҙ ҡыҙыҡай был, тип уйлайҙарҙыр әле. Өйҙә бит ҡурсаҡтарыңдан быуа быуырлыҡ!

– Миңә ошо кәрәк!

– Бына еңмеш! Икенсе ваҡыт, тинем бит! – Ҡыҙын етәкләп сығыу яғына елтерәтте.

Гөлкәй ул ҡурсаҡты ҡабатлап һораманы ла, иҫенә лә төшөрмәне, бары сығарылыш кисәһендә генә әйтә биреп ҡуйҙы.

Кисәгә әҙерләнеп бөткәс, көҙгө алдына баҫып, үҙен тағы ла бер тапҡыр күҙҙән үткәргәс, тып итеп уның ҡаршыһына килеп баҫты:

– Әсәй, йә, нисек?

– Класс! Бындай затлы кейем бер кемдә лә юҡ. Министрҙарҙың ҡыҙҙары кейәме икән әле? Әллә күпме аҡса түгеп, махсус заказ менән тектерҙем.

– Как-то и не хочется выделяться. Неудобно.

– Хатта удобно! Күрһендәр беҙҙең кемлекте!

– Рәхмәт, әсәй, күлдәгем дә, бынау туфлиҙарым да ныҡ оҡшай… Я стала похожа на ту куклу.

– Ҡайһы ҡурсаҡҡа тағы?

– Теге универмагтағы минең күҙем төшкән куклаға. Алып бирергә обещала, так и забыла. Ә мин уны көн һайын барып ҡарай инем. Бер көн уны һатып алдылар… У меня было такое ощущение, как-будто я потеряла дорогую вещь, что-то нужное…

– Гөлкәй, әйҙә юҡ-барҙы хәтерләп кәйефте ебәрмәйек. Үткән, бөткән, онотолған. Хәҙер һин ҡурсаҡ уйнарға бала түгел дә.

– Зато үҙем бөгөн шул куклаға оҡшап торам, эйе бит, әсәй?

– Эйе, һин минең ҡурсағым, иң ҡәҙерле ҡурсағым! – Ҡыҙын ҡосаҡлап алды.

Мәктәпте тамамлағас, Гөлкәй педагогия институтына барырға теләне, былай ҙа бәләкәйҙән уҡытыусы булырға хыяллана ине. Әсәһе ҡырҡа ҡаршы төштө, бәйләнештәрен эшкә егеп, йүгереп-хәстәрләп, ҡыҙын бизнес йүнәлешендәге институттың престижлы бүлегенә уҡырға индерҙе. Был ҡылығын да бик эшлекле аңлатты:

– Һин кергән институтҡа күптәр инә алмай илап йөрөй, сөнки киләсәк бизнесҡа бәйле. Нимәгә ул уҡытыусылыҡ? Абруйһыҙ, аҡсаһыҙ шөғөл ул, минеңсә. Көндәр буйы мәктәптән ҡайтып инмә, төндәр буйы дәфтәрҙәр тикшер. Шул да булдымы һөнәр?

– Значит, в будущем детей учить не будут?

– Уҡытһындар башҡалар, тик һин түгел. Ғүмерең буйы тиндәргә бил бөгөргәме иҫәбең?

– Если я хочу…

– Һин нимә теләгәнең, теләмәгәнең, әсәй булараҡ, миңә яҡшыраҡ билдәле. Һуңынан, башыңа аҡыл кергәс, рәхмәттәр уҡыясаҡһың!

– Получается, что я – круглая дура?

– Бер кем дә һине аҡылһыҙ тимәй, әлегә башыңда елдәр уйнай, бары шул ғына!

Ҡыҙы ризалашманы ла, ҡаршылашманы ла, ирендәрен ҡымтып ситкә ҡараны.

Ихлас ҡына итеп уҡып алып китте Гөлкәй. Былай ҙа тырыш ул, һәр эште еренә еткереп, йыйнаҡ итеп башҡарырға күнеккән. Шундуҡ фирмала ҡыҙына урын да әҙерләй башланы. Ул уның юлын дауам итергә тейеш.

Икенсе курсты тамамлаған йәй диңгеҙ ярына ял итергә китергә йыйынып йөрөгәндә, ҡыҙы көтөлмәгән яңылыҡ әйтте:

– Мам, может, не поедем на море… Бында, ҡалала, ял итәйек.

– Ул ни тигән һүҙ тағы? Путевкалар алып, әҙерләнеп бөткәс. Көндәр буйы ҡала шауын тыңлап, асфальт мазутына болғанып, төтөн еҫкәп ятырғамы иҫәбең? Барабыҙ!

– Мам, мин кейәүгә сығам, дай согласие…

Аяҙ көндө йәшен һуҡтымы ни: иң әүәл ул телһеҙ ҡалды, шунан бер аҙҙан, әйтелгәндең айышына төшөнгәс, көслөк менән асыуын йотоп, өҙөп-өҙөп әйтте:

– Нимә тинең?.. Кейәү?!. Һинең йәштә!..

– Хәҙер бала түгелмен, мам.

– Һин бала, ҡанаттарын ныҒытып, оянан сығып осоп ҡарамаған ҡош балаһы! Ишетәһеңме? Уҡыуыңды бөтөр башта, эшкә урынлаш, шунан уйларһың кейәү тураһында. Ул саҡта ла әле һайлаған егетеңде тәүҙә миңә алып килеп күрһәтергә бурыслыһың, танышҡас – уйлармын: фатиха бирергәме, әллә юҡмы!

– Сабит һәйбәт егет. Он тебе понравится, мам. Ундай кеше юҡ донъяла, ул һәйбәт, ул…

– Етте, кәрәккән-кәрәкмәгәнде лыбырҙап ҡан баҫымымды күтәрәһең, ҡала хулигандарын күргән бар, улар бөтәһе лә бер сыбыҡтан ҡыуылған.

– Юҡ, ул ауылдан… Армиянан ҡайтҡан да милицияла эшләп йөрөй, заочно учится в юридическом.

– Кем, милиционер тинеңме? Мент! Кешенән мент яһап була, ә менттан кире кеше әүәләү – мөмкин булмаған эш!

– Сабит һәйбәт егет, аҡыллы, сибәр…

– Сибәр булыуына ышанам, ә бына аҡыллы икәнлегенә шигем ҙур. Улар бөтәһе лә башта матур һайрай, өйләнгәс йыртҡысҡа әүереләләр.

– Уны һин ҡайҙан беләһең, әсәй, һин бит ғүмерең буйы яңғыҙ.

Гөлкәйе, йәшлегенә барып, уның ауыртҡан еренә ҡағылыуын беләме икән?

Йөҙөн сирһа ла, һыр бирмәҫкә тырышты:

– Шуны белгәнгә лә яңғыҙмын. Бигерәк тә һине яттан йәберләткем килмәне. Әле лә шуны теләмәйем. Иң тәүҙә хистәреңдең тәрәнлегенә, ихласлығына ышан, шунан ғына минән ризалыҡ һора.

– Ышанғанға ла һорайым бит. Мин Сабитты яратам. Ул – мине.

– Мөхәббәт бөгөн бар, иртәгә юҡ.

– А дядя Гаяз? Говорят, ты его любила. Очень. Хотя ты меня не родила, ты роднее всех на свете, һин минең әсәйем! Об этом мин һиңә күп тапҡырҙар ҡабатланым, ҡабатлаясаҡмын әле… Но я знаю точно – минең атайым дядя Ғаяз түгел, ул бары һинең мөхәббәт фантазияң ғына.

– Ғаяз? – Нимә әйтергә лә белмәй, юғалып ҡалды. – Ул бөтөнләй икенсе, фантазия ла түгел, уның бында ни ҡыҫылышы?..

– Сабит та минең өсөн башҡалар түгел, икенсе, уны нельзя объяснить, шуны ғына әйтмәксе инем.

– Етдилекте аңларға әле һиңә иртәрәк. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң икенсе егетте осратырһың да быныһын оноторһоң. Шунан тағы, кейәүгә сығам, тип башты ҡатырырһыңмы?

– Я же говорила, у нас очень серьезно, мам…

– Әйттем – бөттө! Кейәүҙе выбирай из нашего круга, уровень и интересы должны совпадать! Беләһең килһә, һинең менән бер бик шәп егет ҡыҙыҡһына, әсәһе – мәҙәниәт министрлығында бүлек мөдире, атаһы унан да юғарыраҡта, Министрҙар кабинетында, ултыра.

– Егет ҡыҙыҡһынамы, әллә ата-әсәһеме?

– Уныһы һиңә нимәгә кәрәк? Главное – малайына ҡала ситендә хан һарайындай коттедж төҙөйҙәр. Улар үткән йыл ҡайҙа ял иттеләр, беләһеңме? Беҙҙең ише Ҡара диңгеҙҙә йонсомайҙар. Египетта! Быйыл Таиланд яғына юлланмаҡсылар!

– Меня не интересует, где они отдыхают. Минең өсөн есть – ты, шунан – Сабит.

– Эй, наивная, бер ҡатлы йән, ҡасан һиңә аҡыл керер икән, ә? Һинең менән бәхәсләшеп арыным, ял иткем килә. Был мәсьәләне ҡабатлап кәйефемде ебәрмә башҡаса. Үтенәм.

Гөлкәй эсенә йомолдо. Ял иткәндә лә көндәр буйы ауыҙ асып һүҙ өндәшмәй, йә диңгеҙ ярына китеп юғала, йә ҡайта ла түшәгендә аунай, йә китапҡа текәлеп ята. Күрә: ҡыҙында уҡыу ҡайғыһы юҡ. «Турһайып йөрөр-йөрөр ҙә онотор әле үпкәһен. Шулай уҫал һөйләшмәһәң, әллә кем менән яҙмышын бәйләргә иҫәбе. Киләсәгенең емерелеүе хаҡында уйлап та ҡарамай. Әйҙә үсекһен, тынысланыр әле… »

Шифахананан ҡайтҡас, яңы дәрт менән эшкә кереште. Ғаилә ҡытыршылығы ла бер аҙға онотолдо шикелле. Диңгеҙ һауаһы барыбер килеште Гөлкәйгә, ҡайтыр мәлдә күңеле асылғандай итте, ҡояш күрмәгән тәне ҡарағусҡыл төҫкә инеп янды, йөҙөнә нур ҡунды. Уҡыуҙар башланғас, иртә менән лекцияларға тип сығып китә, кис һуң ғына ҡайтып инә. Ял көндәрен дә уҡыу залында үткәрә.

Ике ай самаһы үткәс, өйҙә яңынан янъял ҡупты.

– Гөлкәй, тороп тор әле, был нимә?!– Ҡыҙының ҡабара төшкән ҡорһағына төрттө.

Ҡыҙы үҙгәрмәне, тыныс ҡалды, ошондай һөйләшеүҙең булырын көтөп, әҙерләнеп йөрөгәндер.

– Беҙҙең балабыҙ буласаҡ, әсәй!

– Беҙҙең?.. Кемдән!!!

– Сабиттан. Ҡысҡырма, мам, мне волноваться вредно.

– Ах, һин!.. Кәнтәй! – Ғүмерҙә әйтмәгән һүҙҙе ысҡындырҙы ла, тыйылып ҡала алмай, ҡоласлап ҡыҙының сикәһенә сабып ебәрҙе. Гөлкәй ҡул һырты менән ялланған ерен ыуҙы, сәстәрен төҙәтте:

– Спасибо, мам, может, я этого и не заслуживаю…

Илһөйәр устары менән йөҙөн ҡаплап бөгөлөп төштө лә сеңләп илап ебәрҙе:

– Мәсхәрә! Оят! Хәҙер кеше күҙенә нисек күренербеҙ, ә? Шуны уйланыңмы? Мине тотош ҡала белә! – Ҡәтғи ҡарарға килгәндәй, алға һонолдо ла ҡыҙының яурындарынан ҡарманы. – Әә-ә, мин төшөндөм, ниһайәт, ул эт һине көсләгән, мәжбүр иткән! Шуны ла төшөнмәй ҡаңғырам, алйот! Кисекмәҫтән ғариза яҙабыҙ ҙа уны төрмәгә тығабыҙ! Милиция, имеш, бәйелһеҙ мент! Уға ла закон бар!

– Тырышма, әсәй, мин үҙем теләп…

– Ул һине ҡурҡыттымы, янанымы? Әйтмәҫкә ҡуштымы? Мин барҙа бер кемдән дә ҡурҡма, ҡыҙым! Уны, беләһеңме, нимә эшләтәм?

– Бер нәмә лә эшләтмә, әсәй, прошу…

Сараһыҙлыҡтан Илһөйәр тағы ла ярһыбыраҡ иларға тотондо, бүлмәһенә инеп бикләнеп, үрле-ҡырлы ташланып, яралы кейектәй үрһәләнде. Эңер төшкәс, бер аҙ тынысланып, сығарған ҡарарын әйтте:

– Иртәгә больницаға барабыҙ, аборт яһатаһың! Был турала бер кем дә белергә тейеш түгел!

– Бер ҡайҙа ла бармайым, мам. Буду рожать!

– Бараһың!

– Не ори, сказала, не пойду, значит, не пойду. Мине күп уйнаттың, я тебе не кукла!

Күпме генә ялбарһа-янаһа ла, Гөлкәйҙе күндерә алманы. Һүҙен һүҙ итеп өйрәнгәнгә сәме ҡуҙҙы. «Берҙән-бер ҡыҙыңды ла тыңлата алма инде! Үҙһүҙләнеп ҡыланһа ла, Гөлкәй йәш бит әле, тәжрибәһеҙ, бер ҡатлы. Өгөткә килмәһә, хәйлә менән еңеп була ла, янъял ҡуптарып нервыларҙы бөтөргәнсе, нишләп был сара ошоғаса башыма килмәгән?!» Иртәгәһен таң менән таныш акушер-гинекологка китте, тегенең ҡабул итеү бүлмәһенә инеп бик оҙаҡ һөйләште. Тәүге aборттың кире эҙемтәләре тураһында хәтеренә төшөргән табип уның еңмеш теләген кире һүрергә тырышты. Әлеге мәлдә Илһөйәрҙе эҙемтә түгел, башҡалар алдындағы абруйы ҡыҙыҡһындыра ине. Шуға ла әйтелгәндәрҙе ишетмәне лә, ишетергә теләмәне лә, үҙенекен тылҡый бирҙе. Уның һис шикһеҙ тормошҡа ашыр хәйләһенә теләктәш булырға теләмәгән табип усына һәлмәк кенә аҡса төргәге яҭҡас йомшарҙы, күнде, үҙенең дауаханала эшләр көнөн әйтте, килешелгәнде асмаҫҡа һүҙ бирҙе.

Ҡайтты ла һин дә мин йөрөй башланы, әйтерһең, бер ни ҙә булмаған. Уның ҡайтымһаҡланыуын күргән Гөлкәйҙең йөҙө асыла төштө. Киске аштан һуң ҡыҙын бүлмәһенә саҡырҙы ла ягымлы өндәште:

– Бер нәмәне лә төҙәтерлек түгел, ҡылынаһы ҡылынған…– Һағайыуҙы шәйләгәс, йылмайып өҫтәне. – Ризамын, тап бәпесеңде!

Ҡыҙы муйынынан һығып ҡосаҡланы:

– Һин ни тиклем аҡыллыһың, әсәй! Шулай булырын алдан уҡ белгәйнем! Сабитҡа ла әйтәм, әсәй, пусть радуется!

– Уға өндәшмәй тор әле… Башта белгестәргә күренәйек, анализдарыңды тапшыр, шунан күҙ күрер…

– Ярай, әсәй, ҡайһы больницаға күренергә?

– Ул беҙҙән алыҫ түгел инде.

– Ҡасан барабыҙ?

– Һин иртәгә лекцияларыңды тыңлап бөт тә – төштән һуң.

Ҡыҙын кәрәкле кабинеттың ауыҙына алып килде лә эскә инеп торманы, сират көткәндәрҙән ҡарашын йәшереп, ситкәрәк китте.

Гөлкәй кабинеттан йылмайып килеп сыҡты.

– Доктор нимә тине, ҡыҙым?

– Һөйләште генә, анализдарҙы тапшырғас, УЗИ үткәс кенә ныҡлап тикшерермен, тине. Улары ике-өс көн ваҡытты алыр әле, ти.

Ҡыҙы һуңғы көндә аяҡтарын саҡ һөйрәп ҡайтып инде лә бүлмәһендәге урынына ауҙы. Йөҙө ҡара көйгән.

Барыһын да белеп, алдан көтөп йөрөһә лә, белмәмеш ҡиәфәттә һораны:

– Ҡыҙым, гинеколог нимә тине? – Карауат ситенә һағып, сәстәренән һыйпаны.

– УЗИ-ҙың күрһәткестәре үтә лә насар, аборт яһарға кәрәк, тине. Яһатмаһаң, родится неполноценный ребенок, ти.

– Бәлки, доктор хаталанғандыр, улар ҙа кеше бит. Иртәгә барып һөйләшәм дә яңынан тикшереү үтерһең.

– Не надо, мам…

– Юҡ, барам тигәс барам, һуңынан нимә эшләргә кәрәклекте бергәләп хәл итербеҙ.

Кискеһен эштән ҡайтты ла йөҙөн төмһәртеп әйтте:

– Һөйләштем, доктор хаҡлы… Ҡалғанын үҙең хәл ит… Йәш көйөнсә генә ауырыу бала бағыуы еңел түгел инде. Ауырыу ғынамы, ненормальный, ти… Башында һыулы шеш бар, ти. Беҙҙеңсә һыумейе була инде…

Гөлкәйен абортҡа оҙатыр көндө әллә нишләп күңеле урынынан ҡупты, булмышы үрһәләнде. Хәйләһен әйтергә уҡталып-уҡталып ҡуйһа ла, һуңғы сиктә тыйылды. Гөлкәй, ишек төбөнә килгәс, ҡайырылды ла уға моңһоу төбәлде. Ҡарашында өмөтһөҙлөк ярылып ята.

– Ладно, мам, я пойду.

– Туҡта! Улай ғына сыҡма әле, балам. Әйҙә, ултырып алайыҡ бер аҙ, юлға йыйынғандағы кеүек.

Икеһе ике яҡҡа ҡарап дивандың ике башына ултырҙылар. Ул ирендәрен ҡыймылдатып белгән доғаларын уҡыны. «Әллә ебәрмәҫкә лә ҡуйырғамы? Күңелем тартмай нишләптер». Өҫтәүенә, Ғаяз төшөнә инде бөгөн. Ҡаршыһына килде лә, ҡара күҙлеген һалдырып, күҙҙәренә төбәлде: «Күҙҙәремә ҡара, Илһөйәр, унда нимә күрәһең? Ҡара һәм аңла!» – тине. Нимә әйтергә теләне? Минең ише, ул да ҡаршымы икән әллә?

– Ҡыҙым?..

Гөлкәй, йә, әйт, тигәндәй, һүҙһеҙ төбәлде.

– Ней… алмаш кейемдәрҙе һалдыҡ, йыуыныу кәрәк-яраҡтары, халат, аяҡтарыңа шипатай… Һиҙәм, нимәнелер онотторҡ барыбер. Иртәгә бараһыңмы әллә? Онотҡанды иҫкә төшөрәйек тә.

– Нет. Мам, пойду… провожать не надо, знаешь, не люблю…

– Йә, хәйерле… – Гөлкәйен ҡосаҡлап, арҡаһынан тупылдатып һөйҙө. – Туҡта, бер генә нәмәне оноттом да баһа! – Йүгерә-атлай кухняға сығып әйләнде. – Бынау икмәк телемен тешлә әле. Ризығың һине көтөп ятһын. Бына һәйбәт. Инде – бар!..

Икеһенең араһын бүлеп, тимер ишек шартлап ябылды. «Китмә, балам!» – тип ҡысҡырып ебәрә яҙҙы ла, ауыҙын усы менән ҡаплап, иҙәнгә сүкте. «Ҡайһылай баш китерлек итеп алдашырға һәләтле ул, күҙ ҙә йоммай ҡыҙын упҡынға этәрә! Йәнә, яп-ябай, ҡатын-ҡыҙҙар һис уйламай яһатҡан аборттың абортына ҡыҙын оҙон юлға йыйындырғандай итеп оҙатасы. Шулай ҡыланыуында эске һиҙемләүе ятамы икән әллә?.. Юҡ! Барһын, бер уның ҡыҙы ғына аборт яһатмай ҙа. Институтты бөтөргәс кейәүгә сығыр, үҙе бала ғына көйө бала ҡосаҡлап ултырһынмы?..»

Табиптың әйтеүе буйынса, ҡыҙы иртән иртүк ҡайтып инергә тейеш ине лә, ниңәлер тотҡарланды. Төш мәлендә лә күренмәгәс, сыҙамай, шылтыратты.

– Ғәлләмованың ҡан баҫымы кинәт төшөп китте, уны әлегә сығармайҙар, – тине теге остағы тауыш.

Хафаға ҡалып, дауаханаға ашыҡты. Табип, ҡулдарын йәйеп, аҡланырға тотондо:

– Бөтәһе лә һәйбәт эшләнде бит. Ундайҙар минең ҡулдан көнөнә тиҫтәләп үтә. Уның менән бергә ингәндәр, ҡайтып китеп, ана, урамда гонаһһыҙ фәрештәләй, күбәләктәй осоп йөрөйҙәр. Ә ҡыҙыңдың көтмәгәндә ҡан баҫымы төштө лә китте, аборт мәлендә күп ҡан да юғалтманы бит. Аңлашылмай.

– Бәлки, ҡан тапшырырға кәрәктер? Минең – беренсе группа. Кәрәккәнсе алығыҙ!

– Уныһы тураһында кәңәшләшербеҙ. Әлегә кәрәкмәй.

Коридорҙа, Гөлкәй ятҡан палата ауыҙында, һерәйгән оҙон буйлы, мыҡты кәүҙәле милиционерҙы осратты. Егет, уны күргәс, бойоҡ күҙҙәрен теремекләндереп кеселекле сәләмләне: «Һаумыһығыҙ». Аҙға ғына туҡталып, уны тағы ла бер тапҡыр күҙҙән үткәргәс, сәләмде алмай, ишекте шар асып эскә атланы. «Ошолор теге мент… Былай төҫкә-башҡа арыу ғына икән, йөҙө лә мөләйем, ирәбе…»

Гөлкәйҙе ике урынлы палатаға бер үҙен һалып ҡуйғандар. Апаруҡ иркен бүлмәлә ул кесерәйеп, юғалып ҡалғандай. Ҡан ҡасҡан йөҙө ҡағыҙҙай ағарған, күҙҙәре генә тере ҡуҙҙай көйрәп яналар. Уның инеүен күргәс, ирендәрен һиҙелер-һиҙелмәҫ ҡыймылдатып әйтте:

– Әсәй, килдеңме?..

– Килдем, балам… Нишләп улайтып ятаһың инде…– Күҙҙәренә йәш төйөлдө.

– Илама, әсәй, илау – көсһөҙлөк билдәһе, тиһең бит. Ә һин көслө… Мин генә как кукла – маленькая, беззащитная, хрупкая как стекло…

– Иламайым, ҡыҙым, һин дә бирешмә, йәме, төҙәлерһең.

– Не знаю, мам, у меня какая-то слабость…– Ҡыҙы йоҡомһорағандай ойоп китте.

Дежур табиптан рөхсәт алып, әлегә ҡыҙының янында ҡалырға булды. Тегендә, офисында, ҡулына барыбер эш бармаҫ, өйгә ҡайтһа, тынғылыҡ тапмаҫ. Бында ни күрһә лә бергә күрерҙәр, уныһы-быныһының кәрәгеүе ихтимал. Әйтелгән ергә барып ҡан тапшырып килде лә, буш карауатҡа ятып, хәсрәтле ҡарашын ҡыҙына төбәне.

Гөлкәй хаҡлылыр, ул бигерәк ҡурсаҡҡа оҡшаған: һығылмалы йәтеш буйһыны, ҡалын, һап-һары сәстәре, ҙур зәңгәр күҙҙәре, тумалаҡ биттәре 13-14 йәшлек уҡыусы ҡыҙҙарҙыҡына тартым. Ҡылығы, үҙен тотошо ла үтә ябай, бер ҡатлы, ышаныусан, ҡала әрһеҙҙәренә оҡшамаған. Эйе, ҡыҙының күңеле ыуалыусан ине шул, ә ул уны ватып, бында килтереп һалып ҡуйҙы. Төҙәлерме берҙән-бере? Әгәр төҙәлмәһә, уның был донъяла йәшәүенән мәғәнә ҡалмаясаҡ. Ниңә шуны элегерәк төшөнмәне, элегерәк тойомламаны? Еңмешлегенә, ҡара тырышлығына барып ҡылды бит был гонаһты. Ҡаза тигәнең шулайтып күҙҙе бәйләп, аңды томалап киләлер…

Гөлкәй күҙҙәрен асты, башын борҙо:

– Ҡайтманыңмы ни, әсәй?

– Һине ташлап ҡайҙа ғына барайым. – Тора һалды ла, бөтәрләнгән күлдәген төҙәткеләп, сәсен ипкә килтереп, ултырғыс тартып, ҡыҙының эргәһенә ултырҙы.

– Как хорошо, что ты рядом… Элек унда-бында, кәрәккән-кәрәкмәгәнгә йүгергеләгәнбеҙ икән, мам. Иртән ты на работу, а я в институт. Диңгеҙҙә ял иттек, бергә йөрөмәнек тә.

– Һауыҡ ҡына, ҡыҙым, инде бер ҡасан да айырылмаҫбыҙ.

– Здорово… Мам, мин бәләкәй саҡта белә инем, һин подходишь ночью, сәсемдән һыйпайһың, миңә рәхәт-рәхәт була. Лежу, боюсь открывать глаза. Күҙемде асһам, һин уҫал итеп берәй нәмә әйтеп китеп барырһың, тип ҡурҡа инем… Однажды бер йырҙы пианинола уйнағаныңды ишеттем, шунан эргәмдә көйләнең. Такая была нежная мелодия, нежный твой голос, и твоя рука была такая мягкая… Почему-то на пианино играла очень редко, а ведь у тебя музыкальный дар.

– Пианинона әсәйем минең 18 йәшемә бүләк иткәйне. Бәләкәйерәк саҡта музыкаль мәктәптә шөғөлләнгәс, арыу ғына уйнай ҙа инем шул. Һуңынан эш күплеккә һылтанып, пианиноға һирәк яҡынланым, уның ҡарауы, донъя мине музыка ҡоралынан былайыраҡ уйнатты… Һиңә сығарған йыр ине ул, балам, тик йырларға ваҡыт ҡына таба алманым.

– 19 йыл буйымы?

– Һин бәләкәй саҡта юҡ-бар артынан саптым, иртәгә, иртәнән һуңға, тип кисектерә килдем. Ә һин ҡапыл ғына үҫтең дә киттең, абайламай ҙа, өлгөрмәй ҙә ҡалдым.

– Ул йырҙы хәҙер йырла, мам, беҙ бит бер ҡайҙа ла ашыҡмайбыҙ.

– Бында больница, оҡшармы икән?

– А ты шепотом, я услышу, я пойму…

Ул, башҡараһы йырға яйлағандай, тамағын ҡырҙы:

– Көйө хәтерҙә, әммә һүҙҙәрен онотмағанмынмы икән… Былайыраҡ йыр ул…

*Әлли-бәли, бәй-бәй,*
*Исеме уның Гөлкәй.*
*Уйнай торғас арыған,*
*Ял итеп алһын кескәй…*

*Гөлкәй – матур ҡыҙ бала,*
*Башын мендәргә һала,*
*Талғын бишек моңона*
*Тиҙҙән йоҡоға тала…*

– Минең исемем менән яҙғанһың, мам. Такие слова!

– Әйтәм бит, һиңә арнап сығарғайным уны. «Бишек йыры» тип атаным да һин үҫкәс кенә, һуңлап йырлап ултырам бына.

*Йом-йом күҙең, Гөлкәйем,*
*Һин бит минең кескәйем,*
*Наҙлы моңға иркәләнеп*
*Тыныс йоҡла, бәпескәйем…*

Гөлкәй оҙаҡ ҡына йөҙөн ҡушуслап өндәшмәй ятты. Уның был мәлдә ни уйлағанын, кисергәнен белеү мөмкин түгел ине. Устарын яҙғас, кинәт ҡайырылып, көтөлмәгән һорауын бирҙе:

– Һиңә Сабит оҡшанымы, әсәй?

– Оҡшаны.

– Хәҙер уға нимә тип кенә әйтермен инде? Он ведь ничего не знает.

– Үҙем һөйләшермен. Аңлар. Аҡыллы егеткә оҡшаған. Ҡыҙым, һиңә ҡурсаҡ һатып алдым әле, һин бала саҡта алғың килгәнде таптым – шул магазиндан, шул урындан. Әйтерһең, нәҡ һин теләгәнде күп йылдар үткәс хәтерҙәренә төшөргәндәр ҙә килтергәндәр. Иртәгә алып киләйемме?

– Йәнһеҙ ҡурсаҡтар етерлек ул был донъяла, йәнлеһен юғалттыҡ бит инде, мам, таба алмаҫлыҡ итеп юғалттыҡ…

– Бөтәһенә лә мин ғәйепле, кисерә алһаң кисер, бәпесем…

Гөлкәй һурылып киткән йөҙөн ситкә борҙо. Система көпшәһенән ҡан тамырына һарҡҡан дауаның балыҡ ҡыуығылай киң өлөшөнә тигеҙ бүленеп тамсылауы ҡолаҡ тондорғос тынлыҡта бермә-бер асыҡ ишетелә төҫлө. Әйтерһең дә, тамсылар ауырыуҙың әйткәнен тәҡрарлайҙар: «Тыпп… тыпп… юҡҡ… юҡҡ…»

Төн уртаһында ҡыҙының хәле ҡапыл киҫкенләшеп киткәс, кисекмәҫтән реанимация бүлмәһенә күсерҙеләр.

Тағы ла ике тәүлек ҡыҙының ишек төбөн һаҡлап, ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа янына инеп-күренеп йөрөгәндән аҙаҡ, арманһыҙ булып фатирына ҡайтты. Бында ла арыған зиһенен йоҡо алманы: бары шаңҡыған, аңы томаланған йәне ойой, ә әсеткән күҙҙәре асыҡ, мейеһен мең төрлө ҡапма-ҡаршылыҡлы һорауҙар йыбырлата, бына әле быуынһыҙ һыны диванға һуйҙайған. Һеңгәҙәткес йоҡоһоҙлоҡ барыбер үҙенекен итте, күҙҙәре үҙҙәренән-үҙҙәре йомолдолар.

Тертләп уянды ла беренсе уйы мейеһен ярҙы: «Гөлкәй нисек?» Ҡурҡа-ҡурҡа трюмо янына килде лә телефонға ҡараны. Бөгөн ул төндәгеләй ҡыҙыл төҫөн яндырмай, иртәнге тоноҡлоҡта ҡара йәшел һымағыраҡ та күренә әле. Трубканы күтәрҙе, кәрәкле номерҙы ашығып йыйҙы:

– Але! Ғәлләмованың…хәлен әйтегеҙ, зинһар…

– Кем шылтырата?

– Әсәһе…

– Һәйбәт! Һәр хәлдә кисәгегә ҡарағанда һәйбәт.

– Ҡан баҫымы?

– Күтәрелә.

– Рәхмәт һеҙгә… Рәхмәт…Төҙәлеренә өмөт бар, тимәк?

– Яҡшыға юрайыҡ, апай.

– Имен генә килһен инде бөгөнгө көн. Һеҙгә лә шуны теләйем, һеңлем.

– Рәхмәт. Һау булығыҙ.

Иҫен йыя алмай бер килке урынында тапанды, йәнен аңлата алмаҫлыҡ кинәнес сорнаны, өҫтөнән тауҙай ауыр йөктө алып ырғыттылармы ни! «Ҡыҙым йәшәйәсәк…Тимәк, мин дә…» Көҙгөләге ҡатын да бөгөн күпкә теремек һәм алсаҡ күренде. Ҡапыл урынынан ҡубып йыйына башланы, теге дивандағы ҡурсаҡты ҡабалан эләктереп ҡуйынына ҡыҫты ла ҡойондай өйөрөлөп тышҡа атлыҡты. Тупһаларҙан төшөшләй телефондан машинаһын саҡыртырға уҡталды ла, кире уйланы – фатирына, машина эсенә генә һыйған ҡыуаныс ҡыуанысмы инде, әйҙә, шатлығы киң урамдарҙы тултырһын, осраған береһенә яғылып уларҙы ла ҡотло, бәхетле итһен!

Подъезд ишегенән сығыу менән күҙҙәре сағылып, ҡулын маңлайы өҫтөнә күтәрҙе. Һауа аяҙытып ебәргән дә баһа! Кисәге болоттар ҡайҙалыр китеп юғалғандар. Иртәнге ҡояш офоҡтан ҡалҡыр-ҡалҡмаҫтан бар тереклеккә көлтә нурҙарын һибергә тотонған. Зәңгәр сатырҙың көнбайышына һыуҙай саф, үтә күренмәле ай йәбешкән. Бына ни өсөн бөгөнгө иртә яҡтыраҡ та, нурлыраҡ та икән! Ер өҫтөн бер юлы ай менән ҡояш яҡтыртҡас, донъя бөтөн, имен, теүәл, тимәк. Йылмайып ебәрҙе. Сумочкаһынан ҡара күҙлеген алды ла, бер аҙ уйланғандай итеп торғас, уны кеймәйенсә эргәһендәге сүп һауытына ырғытты. Ниңә күҙҙәрҙе томалап йәшерергә? Көҙгө сыуаҡ көндәр былай ҙа һанаулы ғына ҡалған бит.

Ҡатын һары япраҡтар түшәлгән тротуар буйлап атлап китте лә бер аҙҙан халыҡ йыйылған туҡталышҡа боролдо.



Әхмәр
ҮТӘБАЙ

# ҮРЕЛЕП АЛҒАН АЛМА

## хикәйә

*Әсәйем Мәрйәм Хәйбулла ҡыҙының
яҡты иҫтәлегенә бағышлайым*

– Донъя малы – дуңғыҙ ҡаны. Нәплеүәйт донъяһына, Сәғиҙә килен. Бөгөн бер нәмә лә эшләп торма. Ыҙалама. Эш мәңге бөтмәй ул. Ул-был ит тә миңә бер сынаяҡ сәй яһап бирһәң, шул еткән. Бабай урманға киткәс, ауҡанда ғына иркенләп икәүләп һөйләшеп алырбыҙ, йәме? Һиңә күптәнән бирле әйтергә тип йыйынып йөрөгән һүҙҙәрем дә бар ине. Ошоғаса әйтмәйсә, һуҙып килдем. Шуның мәле килде. Ҡыҙҙарыма ла бөгөнгә килмәй торорға ҡуштым…

Урындыҡта радио тыңлап ятҡан Маһиҙә инәй ишектән инеп килеүсе Сәғиҙәне шул һүҙҙәре менән ҡаршыланы. Ятҡан еренән ынтылып, өҫтәл ситендә ултырған радиоалғыстың тауышын баҫты. Түшәгендә бишенсе йыл рәттән ята инде ул. Ҡабаттан аяғына баҫмаҫлыҡ булып, ошолай лыпындан ятыуы. Һин дә мин йүгереп кенә йөрөгән еренән. Үҙен, гүйә, донъяға ун бер бала тыуҙырған әсә тимәҫһең инде. Һаҡланманы шул, йәш ҡатындар кеүек бигерәк өтәлән ҡыланды. Инде етмеше тулып үткәс, килен йомшап ҡына түрҙә рәхәтләнеп ултырыр мәлендә берәр ботлоҡ ике биҙрәгә һыу тултырып, шуларҙы күтәреп кенә харап булып ҡуйҙы шул. Бабайы Ғөбәйҙулла, ҡаланыҡына оҡшатып, кранынан бороп алмалы итеп өйгә анһат һыу үткәреп тә биргәйне. Юҡ, ғүмере буйы нимәнелер күтәреп өйрәнгән кешене был ғәҙәтенән тыйып буламы ла анһатҡа күнектереү мөмкинме инде? Хәс тә йәш сағындағыса өтә баҫып, биҙрәләрен күтәреп, тиҙ-тиҙ генә йүгерә-атлап китмәксе иткәйне лә. Ҡулдарының көсө етте биҙрәләргә, тик аяғының мурт һөйәктәре генә күтәрә

*Әхмәр Үтәбай 1960 йылдың 29 ғинуарында Баймаҡ районының Буранбай ауылында тыуған. Башҡорт дәүләт педагогия институтын тамамлай. Гәзит-журналдар редакцияларында, Башҡортостан телевидениеһында эшләй. Әле «Киске Өфө» баҫмаһында баш мөхәррир урынбаҫары.*

*Шағирҙы, прозаикты, публицисты 50 йәше менән ихлас ҡотлайбыҙ!*

алманы бындай ауырлыҡты. Ыңғайы бер ҡолап китте. Шулай ҙа ҡулындағы биҙрәләрен ергә ултыртып өлгөрҙө…

Тамсы ла һыуы түгелмәне. Ҡара йәшенән алғайны ҡулдарына биҙрәләрҙе Маһиҙә. Көйәнтәләп шишмә юлдарын нисәмә тапҡырҙар тапаны. Тотош ил етешһеҙ йәшәгән юҡлыҡ йылдарында балаларын туйындырам-кейендерәм тип, шул уҡ биҙрәләргә еләк, муйыл, ҡарағат, бөрлөгән, сейә, бойҙай, һоло, арпа тултырып, ауылдарынан егерме биш саҡрымда ятҡан ҡалалағы баҙар юлын нисәмә тапҡырҙар үтте икән? Ул сағында йәш, баҫҡан еренән осҡон сәсрәтерлек сос, етеҙ ине. Уның биҙрәләре һәр саҡ тулы һыулы, ғәмәлдәре емешле, үҙе мул ҡуллы, сумарт, ырыҫлы булды. Ауылдың йөҙөк ҡашы, уңған килен, егәрле ҡатын, хәстәрлекле әсәй, өлгөлө өләсәй-картәсәй ине ул.

Уға ауылдаштары ауыр саҡтарында йомош һорап килде. Үҙенең балалары күп булыуға ҡарамаҫтан, бер кемде лә кире бороп сығарманы ул. Һәр кемдең хәленә инә белде. «Алай ҙа беҙҙең ошо ҡотло ҡул Маһиҙә бар, унда һәр саҡ һораған нәмәң була. Бер кемде лә буш ҡул менән сығармай: аҡса алып торорғамы, башҡа төрлө әйберме, ризыҡмы, унан бер ҡасан да буш ҡул сыҡмайһың»,– тиҙәр уның хаҡында ауылдаштары. «Маһиҙәнең ире уңған, ана, ҡарағыҙ, ун бер балалары булыу өҫтөнә, Ғөбәйҙулла ауылда иң беренсе булып «Жигули» һатып алды. Балалары ла ас йөрөмәй, өҫ-баштары бөтөн. Барыһына нисек өлгөрәләрҙер…» – тип әйтеүселәр ҙә табылды. «Ана шул ире булмаһа, шул ире арҡаһында кеше булып йөрөй, мин «Герой-әсә» тип күкрәк ҡағып…» – тип мат ҡурыусылар ҙа осраманы түгел, осраны. Ундайҙары ауылда берәү-икәү ине. Хәҙер килеп, Маһиҙә инәйҙең иңенән күтәргеһеҙ өйөлгән донъя йөгө ана шулай итеп өҙөлөп төштө. Донъя йөгөн ҡолап киткәнсе һөйрәне ул.

Ергә һығылып төшкән Маһиҙә инәй тәҡәтһеҙ ауыртыуынан сар-сыулап ҡысҡырып ебәрҙе. Йәне сығып китә яҙҙы. Янына йүгерә һалып килеп еткән бабайы Ғөбәйҙулла уны, сабый бала ише күтәреп, өйгә индереп һалды. «Тиҙ ярҙам» машинаһын саҡырҙылар. Район үҙәгенә алып барҙылар. Аяғының һынған таз һөйәктәрен фотоға төшөргән табиптарҙың кәңәше түбәндәгесә ине: ауырыуҙың таз һөйәктәре үтә нәҙегәйгән, улар ҡабат уңалмаясаҡ, йәбешмәйәсәк, шуға күрә уға район дауаханаһы шарттарында операция яһауҙың фәтүәһе юҡ. Республика клиникаһына йүнәлтмә яҙып бирҙеләр.

Ун һигеҙ йәшендә килен булып төшөп, ғүмер буйы Буранғол ауылынан бер ҡайҙа ла китмәй йәшәгән, өйрәнгән өйөнән, донъяһынан, балаларынан бер тотам да айырылмаған Маһиҙә инәй иң баштан уҡ «бармайым»дан һалдырып, табиптарға ҡаты ҡаршы торҙо. Яҡын да килмәне. «Йүнәлер яра үҙе йүнәлә ул. Бер ҡайҙа ла йөрөмәйем, бармайым, үлһәм үҙ йортомда ятып үләм. Анһат тиһегеҙме ер аяғы ер башында ятҡан Өфөгә барып аяғымды телдереп ятырға. Ыста. Оялмай. Ошо йәшәгәнем дә еткән, сама белергә кәрәк, фәлән-төгән…»

Фотоларҙы баш ҡалала йәшәгән улдары Әнүәр ҡайтып алып китте. Өфөләге киң билдәле хирургҡа алып барып күрһәтеп ҡараны ул. Атҡаҙанған табип, фотоларҙы ҡарағас, үҙе лә һиҙмәҫтән һыҙғырып уҡ ебәрҙе.

– Ай-һай… Бына ошо һөйәктәре һынған урынға тимер талыҡтар ҡуйырға була булыуын,– хирург ҡулындағы ручка менән фотоға төртөп күрһәтте. – Тик апайҙың үҙ аяғы менән йөрөй алыуы икеле. Алтмыш йәшендә ошо хәлгә ҡалһа – бер асыу. Аяғына баҫҡан хәлдә лә, оҙаҡ йөрөй алмаҫ, һөйәктәре икенсе урындан шаҡарылып һыныуы, һаулығы тағы ла ныҡыраҡ ҡаҡшауы бар…

– Нимә тәҡдим итәһегеҙ?

– Ул ғүмеренең ҡалған өлөшөн түшәктә ятып үткәрһә, яҡшыраҡ булыр, тип

уйлайым. Һынған һөйәктәр аралығына кимерсәктәр үҫеп сығып, ялған быуын шарттарында ул ҡултыҡ таяҡ менән ипләп кенә баҫып йөрөүе лә бар. Уның йәшендәге бындай ауырыуҙарҙың күбеһе шулай йәшәй…

Маһиҙә инәйҙең Өфөгә барыуҙан баш тартыуға бәйле һиҙемләүе, ысынлап та, дөрөҫлөккә тура килде лә ҡуйҙы. Ғәжәп. Барыһы ла хирург әйткәнсә килеп сыҡты. Тәбиғи һиҙемләү тойғоһо, икенсе төрлө әйткәндә, интуиция инәйгә тыумыштан саманан тыш көслө итеп бирелгәйне. Ул, ғөмүмән, тормоштағы бик күп хәл-ваҡиғаларға, сетерекле ситуацияларға үҙенең ҡарашын алдан уҡ, ғалимдар теле менән әйткәндә, прогнозын белдереп, уларҙың һөҙөмтәһен дөп-дөрөҫ итеп әйтеп биреүе менән ауылда абруйлы кешегә әүерелгәйне. Был йәһәттән уға барыһы ла, бигерәк йәшерәк ҡыҙ-ҡатындар, хатта үҙенән өлкәнерәктәре лә кәңәшкә килде. Бала сағы һуғыш мәленә, юҡсыллыҡҡа тап килеп, Маһиҙә инәйгә уҡыу бөтөнләй эләкмәне, яҙыу-һыҙыу һәләте лә пенсия алғанда ҡултамғаһын ғына ҡуйырлыҡ кимәлдә генә ине. Ә бына тормош мәктәбен Маһиҙә инәй һис бер мәктәпкә алыштырғыһыҙ уҡыу йорто – академия кимәлендә тамамланы. Алпамыш кәүҙәле ире Ғөбәйҙулла иһә ғүмере буйы колхозда бригадир, тракторсы, комбайнсы. Ҡатмарлы техникаларҙы хатта бәйле күҙе менән дә һүтеп, кире йыя алған алтын ҡуллы механизатор, колхозсылар араһындағы үҙ-ара мөнәсәбәтте оҫта итеп ҡора белеүсе тәжрибәле һәм абруйлы бригадир Ғөбәйҙулла ағай ҙа ошо бәләкәй генә кәүҙәле ҡатынының көндәлек кәңәшенә һәр саҡ мохтаж ине.

Улай ғына ла түгел, әгәр ҙә ире Ғөбәйҙулла, ниндәйҙер эш башҡарырға ниәтләп, әгәр ҙә ҡатыны менән кәңәш итмәһә йәки ул эште үҙенсә генә башҡарһа, һәр саҡ уңышһыҙлыҡҡа осрап торҙо. Шуға күрә ире хатта бәләкәй генә сөйҙө ҡайҙалыр ҡағып ҡуйыр алдынан һәр саҡ башта Маһиҙә инәйгә кәңәш итте. «Әбей, әсәһе, һинең менән кәңәш итергә ине. Әгәр ҙә бына был эште шулай итеп башҡарһам, нисегерәк килеп сығыр ине икән?» тиеберәк өндәшә ине ҡатынына Ғөбәйҙулла. «Әбейе» уның әйткәнен тыныс ҡына көтөп торор, тәүҙә бер аҙ пауза яһар һәм үҙенең был мәсьәләгә мөнәсәбәтен, был эште нисегерәк итеп башҡарырға кәрәклеген белдерер. Иң мөһиме: әгәр ҙә ире тик ул әйткәнсә эшләһә генә, был ғәмәле уға уңыш килтерер. Киреһенсә осраҡта был көндәрҙә уларҙың ғаилә кәмәһенең төбө ҡомға терәлеп торор, ир менән ҡатын өнһөҙ аңлашыу мәлдәре кисерер. Әммә бындай мәлдәр оҙаҡҡа һуҙылмаҫ, тыныс ҡына ултырыуҙы ялҡаулыҡ тип һанаған Ғөбәйҙулла тағы ла берәр эш-ғәмәл уйлап сығарыр ҙа тағы ла бер көн килеп ҡатынының ҡолағына ғына «Әбей, әсәһе…» тип шыбырҙар. Шунан һуң барыһы ла киренән, өр-яңынан башланыр.

Уларҙың ғаилә тормошоноң уңышы ла Маһиҙә инәйҙең кәңәштәренә, ҡотло ҡулына бәйле икәнен күптәр белмәне лә шикелле. Ғөбәйҙулла ауылдың иң абруйлы ғаилә башлығынан, ил уҙаманынан һаналып, кистәрен ҡунаҡҡа барғандарында, был төбәктең яҙылмаған ҡануны буйынса, ғорур баҫып һәр саҡ алдан атланы. Мөһабәт ине уның һын-һыпаты, булмышы – һыпы, алпанлап атлап килеүҙәре, башҡалар һүҙе менән әйткәндә, дастуйный ирҙеке ине. Был саҡта ул ике баҫаһы урынға бер баҫты, юлындағы соҡор-саҡырсыҡтарға, бәләкәй ҡалҡыулыҡтарға иғтибар ҙа итмәне. Әллә юрый, әллә ысынлап артынан: «Бабай, бабай…» – тип эйәргән ҡатынын ҡыуып еткертмәҫкә теләп, ара-тирә аҙымдарын ҡыҙыулатып та алғыланы. Ҡатыны нимә генә тип өндәшһә лә, артына һис бер тапҡыр әйләнеп ҡараманы ир тип аталған кеше.

Ишетмәмешкә һалышты. Был саҡта артҡа боролоп ҡарау нишләптер был төбәк ир-уҙамандары өсөн «бисәүәхитлек»кә, йәғни ирҙәргә хас булмаған ҡылыҡҡа иҫәпләнә. Был саҡта урамдағы барыһының да күҙ-ҡарашы алдан барыусыға төшә. Уның ҡарауы, иренән ун биш – егерме аҙым артта ҡалып, атлай-йүгерә эйәргән ҡатыны Маһиҙә инәйгә иғтибар итмәнеләр ҙә шикелле. Ни тиһәң дә, ир кеше ғаиләнең бүрке, донъяның күрке бит инде. Уға ҡарап ирҙең ғаиләһе, ҡатыны, балалары хаҡында фекер йөрөтәләр.

Алдан ғорур атлаған Ғөбәйҙулла, ситтән ҡарағанда, йола ҡушҡанға ғына оло ғаиләнең башлығылай күренгәндер бындай саҡтарҙа, мир күҙе алдында үҙ маркаһын һаҡларға, дәрәжәһен төшөрмәҫкә теләгәндер. Ысынында инде ысын уылас уның артынан йүгерә-атлай эйәргән бәләкәй генә Маһиҙә инәйҙә ине. Ул үҙ донъяһы менән оҫта һәм аҡыллы итеп идара итә белгәнгә күрә лә Ғөбәйҙулланың аҙымдары ышаныслы. Ир кеше үҙ ҡатынынан бер башҡа юғары торорға тейеш, тигән яҙылмаған ҡанунды был төбәк ҡатындары аңдарына тыумыштан уҡ һеңдереп үҫә. Ауылдың, ғаиләнең ҡото, бәрәкәте ошо ҡанун үтәлеше менән һаҡлана ла инде.

Ире ниндәй генә булыуына ҡарамаҫтан, үҙенең ғаилә именлеге, балалары хаҡында уйлаған аҡыллы ҡатын бер ваҡытта ла ирен башҡалар, бигерәк тә балалары алдында хурламаҫ, кәмһетмәҫ. Был аҡылды ла Маһиҙә инәй бик яҡшы итеп үҙләштергәйне. Сөнки, башҡалар алдында ирен хурлаған, битәрләгән ҡатын үҙ балаларының юлын яба, тип әйтә халыҡ аҡылы. Был аҡылдың мәғәнәһен ҡатын үҙенсә аңланы. Хурлыҡлы булып иҫәпләнгән ирҙән тыуған балалар кемгә кәрәкһен дә, уларға кем ярҙам итһен инде? Ирен хурлаған ҡатындың балалары йүнләп үҙ ғаиләһен ҡора алмай, ундайҙарҙы яуаплы вазифаларға тәғәйенләп тә бармайҙар, перспективалы эшкә лә алырға ашыҡмайҙар. Хурлыҡҡа ҡалған ирҙең үҙенә лә, балаларына ла ышанмайҙар. «Үҙ балаларының юлын яба» тигәне тап ошонан килеп сыға. Шуға күрә Маһиҙә инәй үҙ балаларын тәрбиәләгәндә «Атайығыҙ» тигән һүҙҙе байраҡ итеп күтәрҙе һәм шул һүҙ менән балаларын кәрәк саҡта ҡурҡытып тотто, кәрәк саҡта аталарын өлгө итеп тә ҡуйҙы. Һөҙөмтә оҙаҡ көттөрмәне: атай кеше ғаиләнең иң өлгөлө ағзаһына әүерелеп, балалары өсөн идеалға әүерелде. Әсәһенең балаһына «Атайыңа әйтәм» тигән һүҙе иң ауыр язаға тиң ине.

Өй эсе балаларҙың шатлыҡлы тауышы менән тулған донъяла шау-гөр килеп йәшә лә йәшә бит инде. Йортҡа көтөлмәгәндә оло ҡайғы килде. Ғаиләлә баш бала – Мәндүҙә, ун беренсеһе лә ҡыҙ бала, уға иң өлкән апаһына оҡшатып Мәхмүзә тип исем ҡушҡайнылар. 1976 йылдың сыуаҡлы йәйе ине. Ошо йәй аяныслы рәүештә ике йәшлек Мәхмүзәне ун өс йәшлек ағаһы Әнүр менән донъялыҡтан алып китте. Улар биш минут эсендә бер-бер артлы әсәләренең ҡулында йән бирҙе. Ағыулы бәшмәк ашағандар, тигән булдылар. Әммә һуңынан был сәбәп иҫбатланмағас, табиптар ниндәй генә башҡа сәбәптәр табып аҡланырға, баштарынан себен осорорға теләмәһен, балаларҙың вафаты уларҙың үҙ вазифаһына һалҡын ҡарауынан, профессиональ кимәлдәре түбәнлегенән килеп сыҡҡаны бар донъяға мәғлүм ине. Атай менән әсәй кешенең ошо саҡтағы кисерештәрен тик үҙҙәре генә белә. Ергә уйылып китерҙәй инеләр. «Үлгән артынан үлеп булмай, әле балаларығыҙ күп, ҡалғандарына Хоҙай ғүмер бирһен. Ҡыйын булһа ла, түҙәһегеҙ инде...» – тинеләр ауылдаштары уларға. Кешегә теләк теләгәндә «Бала ҡайғыһы күрһәтмәһен» тиҙәр. Донъяла барлыҡ ҡайғылар онотолһа ла, ваҡыт уларға дауа була алһа ла, бала ҡайғыһы йөрәктә мәңгелектә ҡала икән. Юҡҡа ғына «Бала

ҡайғыһы – йөрәктә» тимәгәндәр. Оло ҡайғы менән тетрәнгән ғаиләне әжәл тағы ла һағалап торған икән. Маһиҙә инәй ҡолап түшәккә ятҡас, инде ир ҡорона ингән улдары Әхмәтте килеп саҡты уның аяуһыҙ ҡаяуы. Типһә тимер өҙөрлөк ир-егеттең йөрәге көтмәгәндә тибеүҙән туҡтаны. Шундай уҡ тетрәнеү, шундай уҡ ҡайғы шаңдауы тағы бер тапҡыр ҡабатланды бер үк йөрәктәрҙә. Был юлы инде улын һуңғы юлға Маһиҙә инәй түшәгендә ятҡан көйө оҙатты.

* * *

«Ирҙе маҡтап тәрбиәләргә кәрәк» тигән аҡылды Маһиҙә инәй әсәһе Маһикамалдан отоп алып ҡалғайны. Әсәһе, унан айырмалы рәүештә, үҙ ваҡытында мәҙрәсәлә уҡып, ғәрәпсә уҡый-яҙа белгән, ғүмеренең аҙағынаса намаҙлығынан айырылмаған диниә зат булды. Донъяуи аҡыл да унда мөлдөрәмә тулы ине. «Беҙҙең башҡорт ирҙәре бер ҡатлы сабый менән бер ул, ҡыҙым. Әр һүҙе әйтһәң, кәмселеген әйтеп төрттөрөп алһаң, үсегеп, ҡыйтыҡ ат һымаҡ сығынлап баралар, алып ҡасырға әҙер генә торалар. Шуға күрә уларҙың күңелен үҫтереп, һәр саҡ маҡтап, ҡупайтып торорға кәрәк. Атайың Хәйрулла ла тап шулай ине. Урынлы-урынһыҙға, кәрәкһә-кәрәкмәһә лә, маҡтап бер һүҙ генә әйтһәң, үҙендә тау-таш аҡтарырлыҡ көс, дәрт, ғәйрәт таба торғайны. Беҙ ирҙәребеҙҙең ана шул холҡон белмәйбеҙ. Талапты баштан уҡ үтә ҙур итеп ҡуйып, билдәрен алдырабыҙ. Биле алынған ир һәүереккә әйләнә лә ҡуя. Ә бына башҡорт иренә кейәүгә сыҡҡан татар бисәһе ошо хәкиҡәтте бик яҡшы белә һәм уның ыңғай сифатын үҫтерә белә. Ә беҙ иһә, ирҙәребеҙҙең бәләкәй генә кәмселегенә йәбешеп, үҙен юҡҡа сығарырға тырышабыҙ…» – ти ине ул йыш ҡына.

… Шул ҡолауынан бөтөнләйгә ятты ла ҡуйҙы Маһиҙә инәй. Тәүге айҙарҙа ошолай ятыуынан үҙе лә риза һымаҡ ине. «Иҫ белгәнемдән алып эш тә эш. Һуғыш йылдарында ҡырға сығып башаҡ сүпләгәндән башлап аяҡ эйеп ултырғаным булманы. Тамаҡ – ризыҡҡа, үҙем йоҡоға туйманым. Ял итеп алырға ла кәрәк. Рәхәт кенә, кеше йомшап ҡына тик кенә ятыуым. Әллә ҡасан пенсия алһам да, әле саҡ хаҡлы ялға сыҡтым. «Юлдаш» радиоһынан кәнсирт тыңлап тик ятам, көнө-төнө бер туҡтауһыҙ йырлайҙар»,– тине ул хәлен белешергә килгән әхирәттәренә, күршеләренә, һыр бирмәҫкә тырышып. Тәүге осорҙа ғына шулай. Әммә тора-бара тик ятыу ҙа, туҡтауһыҙ ағылып торған йыр ҙа ялыҡтыра икән. Хәйер, бер урында тик кенә ятыуҙың һағышын шулай ятыусы үҙе генә беләлер.

Түшәктә ятҡан Маһиҙә инәйҙең янынан бер ваҡытта ла кеше өҙөлмәне. Үҙ аяҡтарында йүгереп йөрөгән сағында кешеләргә ул нисек кәрәк булһа, ауыр хәлгә тарығанында кешеләр ҙә уға шул тиклем кәрәк булып сыҡты. Үҙ ҡыҙҙарынан, улдарынан, килендәренән, ейән-ейәнсәрҙәренән, бүләр-бүләсәләренән тыш, ауырыуҙың хәлен белергә бик күптәр килде. Һәр ҡайһыһы күстәнәс тотоп инә, килгәс тә сәй ҡайнаталар, Маһиҙә инәй урындыҡта ятҡан килеш, улар шундағы өҫтәл артында күмәкләп мәжлес ҡоралар. Килеүселәрҙең араһынан инәй бигерәк тә өс өй аша йәшәүсе Сәғиҙәне яҡын күрҙе. Сәғиҙә – Маһиҙә инәйҙең ире Ғөбәйҙулланың затынан булған Ғәлиулланың хәләл ефете. Ире үлеп ҡалғас, етенсе йыл инде өйөндә яңғыҙы ғына көн күрә ине. Шуға күрә лә Ғөбәйҙулла менән Маһиҙә өсөн ул килен тип аталды. Сәғиҙәнең дә биш балаһы күптән инде үҫеп етеп, баш-күҙләнеп, һәр ҡайһыһы төрлө яҡҡа һибелеп, үҙ ғаиләләре менән йәшәй ине. Улар күрше йәшәгәнлектән, ике ғаиләнең балалары татыулашып бөткәйне.

* * *

Ғөбәйҙулла тракторына ултырып урманға киткәс, ошо мәлде оло түҙемһеҙлек менән көтөп алған Мәһиҙә инәй түрбаш яҡта ҡашығаяҡ йыуған киленен саҡырып алды. Сәғиҙә уға сәй яһап килтерҙе лә урындыҡ янындағы бүкәнгә ултырҙы. Мәһиҙә инәй тәүҙә радиоалғысты бөтөнләйгә һүндереп үк ҡуйҙы, бер уртлам ғына сәй һемергәс, «һүҙем бик оҙонға һуҙылыр» тигән ишара менән тамағын ҡаты итеп ҡырып ҡуйҙы. Һүҙен бик алыҫтан, хәтирәләрен яңыртыуҙан башланы.

– Әсәйем мәрхүмә беҙгә, үҙенең дүрт ҡыҙына: «Үрелеп алған алма булығыҙ, бер ваҡытта ла һеҙҙе эйелеп алмаһындар. Эйелеп алған алма татлы, әммә ул – барыбер ҙә өҙөлөп төшкән алма. Тик берүк үҙегеҙҙе ҡәҙерегеҙҙе белмәҫлек йән өҙөп алмаһын», – тип бик фәһемле һабаҡ бирә торғайны. Ғөбәйҙулла ҡайнағаң менән бер-беребеҙ өсөн үрелеп алған алма кеүек инек, Сәғиҙә киленем. Үрелеп өҙөп алған алма әсерәк, әммә аҙаҡтан алманың тәмен татыр өсөн иң тәүҙә унын әсеһен дә тәмләр кәрәк икән. Еңел табылған бәхет тә шулайҙыр, күрәһең, унын ҡәҙере лә еңел юғала. Тормоштоң да әсеһен, михнәтле ғазабын татымайынса тороп, унын тәмен дә тоймайһың инде ул. Әсәйем мәрхүмә ҡалай дөрөҫ әйткән, тип ятам мына. Ғөбәйҙулла ҡайнағаң менән тормошобоҙҙо башлаған саҡта бер нәмәбеҙ ҙә юҡ ине беҙҙең. «Бер нәмәм дә юҡ минең, Мәһиҙә. Бәхетебеҙҙе бергәләп, мантышып табырбыҙ»,– тигән һүҙҙәре һаман да иҫемдә. Ҡайным мәрхүм бик эшмәкәр, егәрле кеше булған, тип һөйләйҙәр. Ҡәйнәм мәрхүмә, Ғөбәйҙулла атаһына оҡшаған, тип ҡайнымды иҫкә ала торғайны. Бер ҡат кейеменән башҡа бер нәмәһе лә юҡ ине Ғөбәйҙулланың. Кейем тигәне лә: куфайка ла күлдәк-салбар, итек тә кәпәс инде ул. Хәҙерге йәштәр һымаҡ кейенеп йөрөмәк ҡайҙа, кәп ҡайҙа…

Һүҙенең ошо еренә еткәс, Мәһиҙә инәй ауыҙы кибеп китеүҙән туҡталып ҡалды ла, ыйылып өҫтәл ситенә ҡуйылған сынаяҡты алып, бер тапҡыр ғына уртланы ла һүҙен яңынан дауам итте.

– … Шулай итеп, эсе лыҡа кеше менән тулған бәләкәй генә өйгә килен булып төштөм. Ашарға таҡы-тоҡо, колхоздан килгән көндәлек нурмы менән генә көн күрәбеҙ. Тамаҡ ризыҡҡа туймай, бәләкәй өйҙә йүнләп йоҡларлыҡ та түгел. Ғөбәйҙулла көнө-төнө колхоз эшендә, таң һарыһынан өйҙән сығып китә лә эңерҙә генә ҡайтып инә. Бер йыл самаһы йәшәгәс, тәүге балабыҙ Мәндүҙә тыуҙы. Өй эсендә бөтөнләй һыйышмай башланыҡ. Шулай йәшәп ятҡанда тоттом да Ғөбәйҙуллаға: «Туҡалаҡ ҡына булһа ла, үҙ өйөбөҙ булһын ине ул. Үҙ иркебеҙгә, үҙебеҙ теләгәнсә әшкәүешләп йәшәр инек, исмаһам. Әллә үҙебеҙгә өй һалайыҡмы?»– тинем. Ирем һүҙемде күтәреп алды. Шунан икәүләп колхоздан егергә үгеҙ алып тороп, урманға өйлөк уҫаҡ ағасы ҡырҡырға киттек. Арбаға Мәндүҙәне һалып алғанбыҙ. Урманға барғас, сәңгелдәген ағасҡа элеп ҡуйҙыҡ та ике ҡул бысҡыһы менән ағастарҙы йығырға тотондоҡ. Шул саҡта тәүге тапҡыр айыу тауышын ишеттем. Ул кешегә оҡшатып ҡысҡыра ла, эт булып өрә лә, һайыҫҡан булып шыҡырыҡлай ҙа белә икән. Сәңгелдәктә ятҡан ҡыҙыбыҙға тейеп ҡуймаһын, тип ҡотобоҙ алынды. Күҙ алдыбыҙҙа һәр саҡ үҙебеҙ иркенләп йәшәргә хыялланған тормош торҙо. Үҙ өйөбөҙҙә үҙ көйөбөҙгә наҙлашып, һөйөшөп йәшәргә ынтылыу тойғоһо көслө ине, шуға күрә был ауырлыҡтар тойолманы ла тиерлек. Тәүге ике көндә өйлөк бүрәнәләрҙе ҡырҡып ҡайттыҡ. Уларҙы ауылға әлеге лә баяғы үгеҙҙәр менән ташып, үҙебеҙҙең тәүге өйөбөҙҙө һалдыҡ. Бик ҡәҙерле ине беҙгә ул өй. Үҙеңдең йортоңа ни етә инде ул? Ул арала икенсе ҡыҙыбыҙ, өсөнсөгә улыбыҙ тыуып өлгөрҙө. Тағы ауырға ҡалдым, тағы ла…

Илдәге тормош та ыңғай яҡҡа үҙгәрҙе, колхозсыларҙың тамағы икмәккә туйып, уларға эш хаҡы ла түләй башланылар. Тик ирем менән йорт һалып, үҙебеҙ өсөн үҙ өйөбөҙҙә үҙ көйөбөҙгә генә бер аҙ йәшәп алырбыҙ, тигән ниәтебеҙ килеп сыҡманы барыбер. Уның ҡарауы, йыл һайын тиерлек тыуып торған балаларыбыҙҙың шау-гөр тауышына күмелде бәләкәс кенә оябыҙ. Бер аҙҙан башта иркен тойолған туҡалаҡ өйөбөҙгә лә һыйышмай башланыҡ. Шунан һуң Һаҡмар аръяғына ҡарағайҙан ҙур өй һалып сыҡтыҡ. Был саҡта инде, уныһын инде, килен, үҙең дә беләһең, балаларыбыҙ ун бер булып китте. Йәш сағыбыҙҙа Ғөбәйҙулла менән икәүләп хыялланған үҙ көйөбөҙгә йәшәү теләге һаман да бар ине беҙҙә. Хәҙерге йәштәр, ана, һыңар балаһын да йүнләп ҡарай алмай. Ә беҙҙең өйҙә улар ун бер йән булды. Ә бармаҡтың ҡайһыһын тешләһәң дә ауырта. Хатта бер йылда бер юлы һигеҙ балабыҙ мәктәпкә сығып китер ине. Нишләйһең инде, юрғанды башҡа ябынһаң – аяҡ, аяҡҡа тартһаң, баш асылып китә. Түҙҙек. Бәхетемә, ирем дә тырыш, эшһөйәр. «Ярай, балалар үсеп, баш-күҙләнеп, үҙ аллы йәшәп киткәс, үҙебеҙ өсөн әҙерәк йәшәп ҡалырға өлгөрөрбөҙ»,– тип баяғы әмәлде иң һуңына, ҡартлыҡ көнөбөҙгә ҡалдырып торҙоҡ. Барыһын да балаларыбыҙға тип эшләнек. Әле килеп, кинйәкәүебеҙҙе өйләндереп, өй һалып, башҡа сығарып, еңел һулыш алырға иткәйнек, мына, килеп ятылды. Донъяны ныҡлап төҙөгәс, балаларҙы кеше итеп бөткәс кенә үҙебеҙ өсөн йәшәп ҡалайыҡ, тиһәк, буманы. Килеп сыҡманы. Бабай менән Хаж сәфәренә лә барып ҡайтырға хыяллана инек. Ғүмер тигәнем ҡуңалтаҡ итек кейеп, шығыр-шоғор үтте лә китте. Үрелеп алған тормош алмаһының ауыҙҙарҙы өтөр әсеһен генә татырға насип иткән икән Хоҙай миңә…

Ошо ергә еткәс, күҙҙәренә төйөлгән йәштәрен тыя алмаған Маһиҙә инәй һөйләүенән ҡапыл туҡтап, түгелеп-түгелеп иланы ла ебәрҙе. Уның һыҡтауы Сәғиҙә килененә лә күсте, ул да күҙенә йәш алды. Сәғиҙә хәленән килгәнсә түшәктә ятыусыны йыуатырға тырышты:

– Аһ-аһ, ни тип әйтеүең был, еңгәй? Ҡуй, юҡты, Маһиҙә еңгәй, ваҡытынан алда донъя менән хушлашып ятаһың. Кеше ишетеп ҡалмаһын, ана, ниндәй ирең, алтын ашыҡтай балаларың бар. Әле әллә кемдәрҙән һуң да йәшәрһегеҙ әле…

Сәғиҙәнең мыжыған кесе балаларҙы әрләп, илауынан туҡтатырға тырышыуына оҡшаған был һүҙҙәре түшәктә ятыусыға шундуҡ тәьҫир итте. Маһиҙә инәй, ысынлап та, аптыраулы ҡарашын үҙенең янында өлтөрәгән килененә төбәп, шымып ҡалды. Бүлмәлә бер аҙға ғына тынлыҡ урынлашты. Кем белә, бәлки, үҙен ошо рәүешле итеп йыуатыуҙарын теләгәнгә күрә лә шулай итәлер инде инәй. Олоғайған, бигерәк тә уның хәлендәге кеше сабыйға әүерелә инде ул.

– Күптән уйлап йөрөп, бөгөн һиңә әйтә торған һүҙем шул, Сәғиҙә киленем,– был юлы Маһиҙә инәйҙең тауышы ҡоро һәм ҡәтғи яңғыраны. – Күпкә бармам, ахыры, бөгөн төшөмдә үлгән балаларымды күрҙем. «Әсәй, ҡасан бында, беҙҙең янға, киләһең?» – тип саҡырып торалар. Баҡһаң, теге донъяла ла әсәй кәрәк икән. Быныһын да ташлап китеүе йәл, ирем, балаларым, тир түгеп йыйған донъям да тороп ҡала. Мин һине, ирең Ғәлиулла ҡәйнеш үлеп ҡалғандан алып, бик оҙаҡ итеп һынаным, киленем. Бирешмәнең, балаларыңды яңғыҙ аяҡҡа баҫтыра алдың. Беҙҙең ғаиләләр бер-береһен яҡын күреп, үҙ итеп йәшәне. Саҡырышып, ҡунаҡ янына алышып торҙоҡ. Балаларыбыҙ ҙа кесе йәштән бергә үҫеп, күптән бер туғандай күрә бер-берен. Шуға, киленем, минең һиңә әйтә торған һүҙем шул: мин үлгәс тә, ошо донъяға хужабикә булып кил. Башҡа

берәүҙең дә ошо донъяма аяҡ баҫыуын теләмәйем. Һе, әллә бабайыма күҙ һалыусылар юҡ тиһеңме? Йәш сағында ла күп инеләр, береһен дә уға яҡын килтермәнем. Хәҙер ҙә минең үлгәнде генә көтөп, бында йүгереп килергә әҙер генә тороусылар бар. Әммә мин уларҙан иремде лә, балаларымды ла, донъямды ла ҡыҙғанам. Тик һинең генә бында килеүеңде теләйем. Һиңә генә ышанам. Оло ҡыҙым Мәндүҙәгә, бабайҙың үҙенә лә был хаҡта әйттем инде…

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, ҡыҙҙар кеүек еңел һөйәкле, мөләйем йөҙлө Сәғиҙә урындыҡ ситенә ултыра төштө. Көтмәгәйне ул еңгәһенән бындай һүҙҙәрҙе. Көндәгесә, еңгәһе менән сөкөрҙәшеп сәй эсербеҙ, өй эсен йыйыштырырмын, тип килгәйне лә. Ә бында…

Ни тип әйтергә лә, көлөргә лә, иларға ла белмәгән Сәғиҙәгә һаман да тура ҡараған Маһиҙә инәй өҙөлөп ҡалған һүҙен дауам итте:

– Кире уйлама ла, мин бында барыһын да хәл итеп бөткәнмен. Иләре иләнгән, һуғыры һуғылған. Никахты минең ҡырҡымды үткәргән көндө уҡытаһығыҙ…

– Ыста, ней… Нисек инде улай, еңгәй, барыһын да хәл итеп бөткәнбеҙ, тиһең, һуң, еңгәй, ней бит, ниңә улай теге донъяға китергә ашығаһың? Ауыҙыңдан ел алһын был һүҙҙәреңде. Әле йәшәйбеҙ бит әле… – Уңайһыҙланыуын һәм оялыуын көскә еңә алған Сәғиҙә саҡ-саҡ ошо һүҙҙәрҙе әйтә алды.

– Мин мең тапҡыр уйлап, бер тапҡыр әйтәм, килен. Бер бөгөн түгел, өс йыл буйы уйланым был турала. Уйланып, нисәмә таң ашырҙым. Уйнап һөйләмәйем, мине үҙең беләһең. Тәүҙә һине тауыш итеп алып, бабай менән күҙләштереп һөйләшергә лә уйлағайным, тыйылдым. Бөгөн генә үлергә йыйынмайым да. Ыңһырлама, башҡаларға ҡалдырыр өсөн йыймағанмын мин был донъяны. Киләһең, тип әйткәс, киләһең. Әйттем – бөттө…

– Ғөбәйҙулла ҡайнағаға… Юҡ, еңгәй, был минән булмай. Беҙҙең йәш араһы ла байтаҡ ҡына…

– Йәш араһы, имеш, нимә, һиңә бала табырға түгел бит. Бабайым иҫән-һау, Хоҙай насип итһә, уның әле йөҙгә тиклем йәшәрлеге бар…

– Кеше көлөр бит, еңгәй. Минән бумай, ана, балаларым, һеҙҙең балалар нимә тип әйтер?

– Кешенең һүҙенә ҡарама, һөйләрҙәр ҙә, телдәре арығас, туҡтарҙар. Балаларыбыҙ күптән инде бергә. Төнә өлкән улың Әхәт инеп сыҡты. Үлгән Әнүр улымдың класташы бит. Үҙ улымды күргәндәй булдым. Инәй тип өҙөлөп тора янымда. Белгең килһә, Әхәт улыңды күргәс, һине үҙемдең урынға күрергә теләгән уйым нығынды…

– Барыбер, еңгә, мин һиңә өҙөп кенә яуап бирә алмайым, балалар менән кәңәшләшергә лә кәрәк…

– Мин һиңә, хәҙер үк кил, тип әйтмәйем. Әле уйла, ваҡытың бар әле. Бер-ике айҙан тағы ла был мәсьәләгә әйләнеп ҡайтырбыҙ…

– Юҡ, балаларым риза булмаҫ ул барыбер…

– Ыңһырлама…

– Уйлармын…

* * *

Ошо һөйләшеүҙән һуң Сәғиҙә ҡапыл ғына Маһиҙә инәй янына инмәҫ булды ла ҡуйҙы. Үҙенән елдәр иҫкәндәй тойолдо. Хәйер, бындайын етди тәҡдимдән һуң ниндәй килен әрһеҙләшеп, ҡабат-ҡабат был йорт тупһаһын аша баҫып үтә алһын инде. Дөрөҫөн әйткәндә, Сәғиҙә ауылдаштары алдында оло уңайһыҙланыу,

оялыу тойғолары кисерә ине был көндәрҙә. Маһиҙә еңгәһе уға был тәҡдимде яһап өндәшкән саҡта тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Йәш сағында Ғәлиуллаһы уны әйттерергә тип килгәндә лә, ошоға оҡшашыраҡ тойғоно кисергәйне ул. Тик ул сағында уңайһыҙланыу, оялыу тойғолары был тиклем үк тәрән түгел ине. Бары тик тиҙҙән килен сифатында барып инәсәк йортҡа барып инеүгә бәйле күңел тулҡынланыуы ғына кисергәйне ул мәлдәрҙә. Хәйер, был тойғоно кейәүгә сығыусы һәр бер ҡыҙ кисерә.

Ә бында иһә хәл-күренеш бөтөнләй башҡасараҡ. Сәғиҙә ошо ауылға килен булып төшкәндән алып араларынан ел дә үтмәгән, ҡатышып йәшәгән ут күршеһе, серҙәш еңгәһе уны үҙенең урынына иренә ҡатынлыҡҡа димләй, әйттерә бит, ни тиһәң дә. Башҡа һыймаҫлыҡ ҡына түгел, ҡапыл ғына асылына төшөнөп етә алмаҫлыҡ хәл, ваҡиға. Борон да өлкән ҡатындар иренә сираттағы йәш бисәне үҙҙәре һайлашып, димләшеп алып бирешкән. Бында иһә хәл бөтөнләй икенсе төрлө: нисә тиҫтә йыл күңелгә-күңел йәшәгән еңгәһе Сәғиҙәне үҙенең урынына ҡатынлыҡҡа килергә өгөтләй. Маһиҙә еңгәһе инде нисә йыл буйы түшәктә ятып, уға ошо һүҙҙәрҙе әйтергә ҡыймай, уны һынамсыл күҙәтеп ятҡан. Тимәк, Сәғиҙә ошо йортҡа, түшәктә ятҡан еңгәһенә булышырға, өйөн йыйыштырырға тип килеп, асылда һынау аша үткән. Бына бит нисек! Оялмаҫлыҡ ерҙән оялырһың. Сәғиҙә быға ике ятып бер төшөнә инмәгән тәҡдим. Оло йөрәкле икән дә Маһиҙә еңгәһе, ниндәй батырлығы, ҡыйыулығы етеп, ошондайын тәҡдимде яһай алған. Тәүәккәллектең дә ниндәйе кәрәк бының өсөн. Сәғиҙә ирекһеҙҙән үҙен Маһиҙә еңгәһе урынына ҡуйып ҡарай ҙа, аптырауҙан баштары әйләнеп китә. Валлаһи, ул бындай аҙымға бара алмаҫ ине.

Уға нисектер Маһиҙә еңгәһенең тәҡдиме хаҡында бар ауыл белә, күптәр хәбәрҙар һымаҡ тойола. Өйө ҡаршыһындағы магазинға тип сыҡҡанында ла бөтә кешенең ҡарашы уға төбәлгән һымаҡ. Кешеләр ҙә уға шикләнеп кенә хәбәр ҡушҡан, уны һынап ҡараған кеүек. Хәҙер-хәҙер береһе яңылыштан ғына Маһиҙә еңгәһе хаҡында һүҙ ҡушһа, ул түгелеп илап ебәрер һымаҡ. Ҡыҫҡаһы, Сәғиҙә был көндәрҙә ғүмерендә бер ҡасан да кисереп ҡарамаған тойғолар донъяһында аҙашып йөрөгәндәй хис итте үҙен. Еңел түгел ине уға бындай көсөргәнеште үҙе менән күтәреп йөрөтөүе. Бер көн түҙмәне, ауылдағы иң яҡын серҙәше, һүҙе һыйған Зөлхизә әхирәтенә түгелде лә ҡуйҙы. Унығы ла, Маһиҙә еңгәһе менән алдан һөйләшеп-килешеп ҡуйғандай, Сәғиҙәгә икеләнерлек урын да ҡалдырманы.

– Был – һинең яҙмышың, Сәғиҙә, Маһиҙә еңгә үҙе һине һайлағас, икеләнерлек, уңайһыҙланырлыҡ бер сәбәп юҡ. Риза икәнлегеңде белдер еңгәйгә…

– Һуң, Зөлхизә, мин нисек инде тере кешегә: «Мин һинең урыныңа килергә ризамын»,– тип әйтергә тейеш һуң? Маһиҙә еңгә бит өҙмәй ҙә ҡуймай, ауыҙымдан ризалығымды йолҡоп алырҙай ҡылана…

– Ризамын, тип әйт һуң. Исмаһам, күңеле тынысланыр. Уның хәлен бит үҙең яҡшы беләһең…

– Үҙ балаларым алдында ла уңайһыҙланам, Зөлхизә. «Ҡартайған көнөңдә нимәгә кәрәк ул һиңә бабай?» – тип әйтеп ҡуйһалар…

– Аңлаһалар, әйтмәҫтәр. Алмалай сағыңда яңғыҙ ҡалып, бер үҙең уларҙы аяҡҡа баҫтырҙың. Ғәлиуллаңдың иҫтәлегенә хыянат итмәнең. Инде нимә? Үҙең өсөн дә йәшәргә кәрәк бит был донъяла, әхирәт? Ғүмер бер генә. Ике йәшәһәк, ярай, быныһында һиңә ошоноһо ла етеп торор, тип әйтер инем…

– Ғөбәйҙулла ҡайнаға менән беҙҙең йәш араһы ла байтаҡ ҡына…

– Ир менән ҡатындың, әбей менән бабайҙың йәш араһы булмай ул. Ғөбәйҙулла ағайға тирә-йүндә һоҡланмаған кеше юҡ. Өйөбөҙ тау башында ултырһа ла, мин ауыл эсендә йөрөгән хәбәрҙе вис ишетеп ултырам. Мин белгәндән генә беҙҙең ауылда Ғөбәйҙулла ағайға өс яңғыҙ ҡатын тамшанып йөрөй. Ишетһен ҡолағың!

– Ыста, шулай уҡмы?

– Атыу, әле Ғөбәйҙулла ағайҙың иң ауыр мәле. Йонсоп та китте. Еңгәй ятып киткәнгә лә байтаҡ ваҡыт үтте. Һин икеләнеп-өсләнеп йөрөгән ваҡытта берәр әрһеҙерәге янына барып, һүҙен алып ҡуйһа. Ғөбәйҙулла ағай кеше һүҙен йыға белмәй торған йомшаҡ күңелле кеше…

– Һин бигерәк инде, Зөлхизә…

– Мин әйттем, һин оноттоң, әммә оттоң. Бындай форсат бүтән һиңә сыҡмаясаҡ. Сыҡҡан көндә лә, барған бабайың Ғөбәйҙулла ағай ише булмаясаҡ…

Улар байтаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙы. Күңеле бушап ҡалған Сәғиҙә еңел тын алды. Иң яҡын әхирәте Зөлхизә Маһиҙә еңгәһенең һүҙҙәрен бермә-бер ҡабатлай. Ҡабатлап ҡына ҡалмай, әле Сәғиҙә хатта уйларға ла баҙнат итмәгәнде әхирәте теле менән әйтеп бирҙе. Уның: «Был – һинең яҙмышың, Сәғиҙә, Маһиҙә еңгә үҙе һине һайлағас, икеләнерлек, уңайһыҙланырлыҡ бер сәбәп юҡ…» – тип әйтеүе Сәғиҙәгә үҙенең ҡаршыһында торған кәртәне ашатлап сығырға ярҙам итте. Ни тиһәң дә, Зөлхизә әхирәтенә Сәғиҙә оло рәхмәтле ине. Ҡатын үҙ йортона кисләтеп кенә ҡайтты. Төпкө яҡта элеүле торған, Ғәлиуллаһы менән йәш саҡтарында бергә төшкән фотоға текәлеп, оҙаҡ ҡына уйланып торҙо. Нисектер быға тиклем төшөндә Маһиҙә инәйҙең яһаған тәҡдименә ризалыҡ биреү генә түгел, яҡын да килмәҫтәй тойолған Ғәлиуллаһы был юлы фотоһында ризалағын биргәндәй, хатта уның йылдар артында ҡалған тауышы ла яңғырап киткәндәй тойоло: «Ҡалайтаһың инде, Сәғиҙә, һин был аҙымға барырға тейешһең, һин икебеҙ башлаған эште аҙағынаса алып барып еткерҙең. Балаларыбыҙҙы кеше иттең, бирешмәнең. Хәҙер инде үҙең өсөн дә йәшәргә хаҡлыһыңдыр…» – ти ине Ғәлиуллаһының нишләптер бөгөн йәнләнеп, теремекләнеп киткән ҡараштары. Сәғиҙә еңел һулыш алды ла «бисмилла»һын әйтеп, йоҡларға ятты. Тыныс йоҡланы ул был төндө.

* * *

Түшәк хужабикәһе килененә уйланыу мөҙҙәтен, ике-өс айҙан һуң, тип әйтһә лә, уны көтөп ике аҙна ятты ла, уныһы килеп күренмәгәс, түҙмәне, ейәнсәрен ебәреп, янына Сәғиҙәне саҡыртып та алды. Өй эсендә икәүҙән-икәү генә ҡалғас, һәр саҡтағыса тураһын ярҙы.

– Нимә, килен, килмәҫ булдың да ҡуйҙың ул? – Был юлы инде Маһиҙә инәйҙең тауышы бик йомшаҡ, үтенесле-ялбарыулы, мәғәнәле ине. – Мин, әллә һиңә төнә ҡатыраҡ итеп әйтеп, өркөтөп ҡуйҙым инде, тип ҡурҡып бөттөм, һатта инде. Миңә асыуланмағанһыңдыр ул?

– Нишләп асыулана, ти, еңгә,– Сәғиҙә уға яҡыныраҡ килеп, ярым шыбырлауға күсте. – Килергә уңайһыҙланып йөрөнөм…

– Уңайһыҙланырға һин ун биш йәшлек ҡыҙмы ни? Биш бала әсәһе бит һин. Ҡыйпысыҡлама…

– Әллә нисек бит, еңгә,– Сәғиҙә уңайһыҙланыуын һаман да еңә алмай ине. – Ғөбәйҙулла ҡайнаға, Мәндүҙә бикәсем нимә тинеләр һуң?

– Нимә тиһендәр инде, һәр ваҡыт үлем тураһында һөйләнеп тик ятаһың, тип әрләп ташланылар инде…

– Ә минең турала нимә тинеләр һуң?– Сәғиҙәнең бите алһыуланып китте.

– Бабайым: «Ул бит йәш, миңә киләме инде, әбей?»– тип икеләнеүен белдерҙе. Ҡыҙым: «Сәғиҙә еңгәй ней беҙҙең бәләкәй саҡтан алып иң яратҡан еңгәйебеҙ инде, ҡаршы түгелмен. Әгәр ҙә атайыбыҙ янында ул еңгәй йәшәһә, ул ҡараулы, күңелебеҙ тыныс булыр ине, еңгәй үҙе ризамы һуң?» – тине.

– Шулай тинеләрме? Ҡалай ҡыҙыҡ килеп сыҡҡан…

– Нимәһе ҡыҙыҡ?

– Һуң, еңгә, һин мине үҙеңдең урыныңа димләп ятаһың түгелме? Шуныһы ҡыҙыҡ бит. Ошоға тиклем йәшәп, һис ишетмәгән хәл бит был…

– Бына мин тиҙҙән үлермен, өсөмдө, етемде, ҡырҡымды үткәреп ултырырһығыҙ, ҡырҡымды уҡытҡас, бабайым менән никах уҡытырһығыҙ. Бына шул саҡта минең дөрөҫ эшләгәнемде аңларһығыҙ.

– Мин тиҙҙән үлһәм, ти ҙә тораһың, еңгә, аша һөйләшеп тик ятаһың түгелме һуң? Гел үлем тураһында һөйләйһең, ҡайнаға менән бикәсем дөрөҫ әйтә…

– Аша һөйләмәйем, дөрөҫөн әйтәм. Үлем түшәгендә ятҡанда ундай уйҙарҙы ла уйлайһың инде ул, киленем. Көндән-көн, һулыу һайын үлемдең һиңә яҡыная барғанын нығыраҡ тояһың, әммә бер нәмә лә эшләү мөмкин түгел. Еңел түгел, әммә барыһына ла күнергә тура килә…

– Тыуымдан ҡалмағас, үлемдән ҡалмайбыҙ. Бөтәбеҙ ҙә үләбеҙ инде ул, еңгә!

– Шуға әйтәм бит, киленем, миңә тыныс күңел менән үлер өсөн һинең һүҙеңде алып ҡалырға кәрәк. Һин аңла мине, киленем, башҡа бер кемгә лә мин үҙемдең урыныма ҡалырға ризалығымды бирә алмайым…

– Ундай ышанысың өсөн рәхмәт, еңгәй, һуң, мин хәҙер һиңә нимә тип әйтергә тейешмен инде?

– Һүҙеңде бирәһеңме?

– Тел һөйәкһеҙ, нимә тип әйтергә һуң?

– Мин үлгәс, бабайым янына, ошо донъяға киләһеңме һин? – Маһиҙә инәй «һин» тигәнгә айырым баҫым яһаны.– Һин генә килергә тейешһең бында. Донъя көтөргә, берәренең һоғо теймәһен, Ғөбәйҙулла ҡайнағаңдан да егәрлерәк кешене таба алмаҫһың. Мин уның менән илле йылдан ашыу йәшәгән кеше буларaҡ әйтәм.

– Мин йортһоҙ кеше түгел бит, еңгәй, үҙ йортом, үҙ донъям, унда ҡайтып йөрөгән балаларым да бар…

– Балаларың ике өйгә лә ҡайтып йөрөрҙәр. Улар минекеләр менән былай ҙа татыу. Кисә генә Өфөнән Әнүәр улым ҡайтып китте. Беләһеңме ул миңә нимә тине?

– Нимә тине?

– Һинең Әхәт улың Өфөлә һәр урында «Әнүәр – минең бер туған ағайым» тип үҙе менән таныштырып йөрөй икән. Белгең килһә, улар күптән бер туғанға әүерелгән.

– Нимә, һин, еңгә, Әнүәргә беҙҙең һөйләшеү тураһында бер һүҙ ысҡындырғайныңмы әллә?

– Ю-у-у-ҡ, нишләп әйтәйем, ти, килен, бер кемгә лә әйтмәнем. Балдый тиһеңме мине әллә һин? Беҙҙең һөйләшеү хаҡында дүрт кеше генә белә: һин дә, мин дә, Ғөбәйҙулла ҡайнағаң да, Мәндүҙә бикәсең…

– Әхәт менән Әнүәр бала саҡтарынан уҡ дуҫ инде, еңгә, Әхәт үҙе баш бала, исмаһам, бер туған ағайым булһа, тип хыяллана торғайны. Уның Әнүәрҙе бер туған ағайым тип атауы аңлашыла инде ул, еңгә. Бында мин аптырарлыҡ бер нәмә лә күрмәйемсе.

– Мин улай ғыналыр тип уйламайым, килен. Улдарыбыҙ бер-береһен «бер туған» тип атай икән, беҙҙең ғаиләләрҙең яҙмышын Хоҙай үҙе әшкәртә. Әнүәр үҙе лә: «Әхәт миңә бер туған ҡустымдар кеүек яҡын…» – ти.

– Хоҙай әшкәртә, тиһеңме?– Сәғиҙә өсөн был һүҙҙәр көтөлмәгәндә әйтелгән һымаҡ тойолдо, ул еңгәһенә аптыраулы ҡараш ташланы. – Һин, еңгә, ул тиклем борсолма! Мин бит, еңгә, былай ҙа ҡаршы түгелмен. Тик һинең туҡтауһыҙ үлем һүҙен ҡабатлап тороуың ғына оҡшамай…

– Шуға әйтәм дә инде, килен, мин үлгәс, Әхәт улыңдың бер туған ағай тураһындағы хыялын тормошҡа ашырырға тейешһең инде…

– Йә, ярар, аңланым бит инде, еңгә. Сит кеше ишетеп ҡалмаһын…

– Рәхмәт, киленем, инде иркенләп, рәхәтләнеп үлергә генә ҡалды инде…

– Ауыҙыңдан был һүҙҙәреңде ел алһын, еңгә…

Ана ҡайһы яҡтан килеп «ҡаманы» Маһиҙә инәй Сәғиҙә киленен. Сигенергә, икеләнергә, уйланырға һис кенә лә урын, форсат, сәбәп ҡалдырманы. Сәғиҙә көтмәгәндә үҙенән-үҙе еңгәһенә һүҙ биргәнен дә һиҙмәй ҡалды. Һүҙ, аҡыл, ихтыяр көрәшендә ауылда берәүҙе лә алдына сығармаған, teләһә ниндәй мәсьәлә буйынса ла һәр кемде инандыра, үҙенең яғына ауҙара алған, тормош академияһын «Герой-әсә» ордены менән тамамлаған Маһиҙә инәй түшәгендә ятҡан килеш тантана итте, оло байрам тойғоһо кисерҙе. Сәғиҙә килене уға сәй яһап, еңгәһенең үтенесе буйынса унда бальзам тамыҙып алып килгәнсе, үрелеп радиоалғысын тоҡандырып ебәрҙе. «Юлдаш» каналынан концерт бара ине. «Аҡсарлаҡлы күлдә» йырын тапшыралар икән. Ҡушылып йырлап та ебәрҙе:

*Пар силәктәремде сайҡай-сайҡай,*
*Аҡсарлаҡлы күлдән һыу алдым.*
*Аҡсарлаҡлы күлдән һыу алъанда*
*Ниңә генә һиңә күҙ һалдым?*

– Еңгәй, әллә моңайып та киттең инде? – Батмус менән урындыҡ янына сәй-шәкәр, башҡа ашамлыҡтар тотоп килеп еткән Сәғиҙәнең йөҙөнә ҡояш ҡунған.

– Ғүмер үтте бит, килен, моңайырһың да, моңайыу ғына түгел, урбайырһың да,– Маһиҙә инәй үрелеп радиоалғыстың тауышын баҫты. – Ғөбәйҙулла ҡайнағаң менән яңы танышҡан саҡтар иҫкә төштө. Беҙ, бер колхозға ҡараған өс ауыл йәштәре, урманда бүрәнә ҡырҡып яттыҡ. Беҙ, Таулыҡая ауылы йәштәре, Буранғол ауылындағы тиҫтерҙәребеҙ менән элек тә ныҡ аралашып, байрамдарҙа бутҡа ашарға ҡунаҡҡа саҡырышып торҙоҡ. Мин кәшәүәр инем, йылғаға һыу алырға төшкәндә Ғөбәйҙулла тигән егет атын һуғарырға төштө. Уға тиклем дә уның матур итеп йырлағанын, ҡурай тартҡанын тыңлағаным бар ине. Шунда таныштыҡ инде. Ошо йырҙағы кеүек…

– Һеҙҙең өйләнешеү ҙә ҡыҙыҡ ҡына килеп сыҡҡан, тип һөйләйҙәр,– Сәғиҙә урындыҡ янындағы өҫтәлгә батмусын ҡуйып, ашамлыҡтар теҙҙе. – Нисегерәк һуң?

– Нисек тип, ҡапыл килеп сыҡты инде. Туй үткәрергә, ҡапылдан йәшәй башларға бер нәмәм дә юҡ. Аҙ ғына баш-күҙ алам да шунан һине әйттерергә килермен, туй үткәребеҙ, тип килешкәйнек Ғөбәйҙулла менән,– Маһиҙә инәй сәй уртлап алды. – Шунан ауылдағы бер мәрәкә яратыусы кеше Ғөбәйҙуллаға: «Һин нимә ҡарап йөрөйһөң ул? Әле генә Таулыҡаянан ҡайттым, силсәүит рәйесе һинең Маһиҙәңә яусы ебәрергә йөрөй»,– тип шыттырып, тегенең күңеленә ҡотҡо һалған. Шунан ней, быныӊ күҙенә аҡ-ҡара күренмәй, юлында осраған тәүге атҡа һикереп менгән дә Таулыҡаяға сапҡан. Килеп етте лә,

ай-вайға ҡарамай, туғандарын саҡырып, ҡапыл йыйналып, ул заманса туй үткәреп, ҡырпаҡ ҡарҙа силсәүит биргән атты кашауай санаға егеп, Буранғолға алып ҡайтты инде…

– Ысынлап та, бик ҡыҙыҡ килеп сыҡҡан икән, утһыҙ ерҙә төтөн сыҡмай…

– Өтәлән холҡон, бер аҙ кәлсәклеген генә иҫәпкә алмағанда, бик ыңғай, яҡшы күңелле, тырыш, егәрле кеше ул ҡайнағаң, килен…

* * *

Донъялыҡтан шулай еңел генә итеп ысҡынырмын, йән тартҡылашыу ғазаптарынан анһат ҡына ҡотолормон, тип уйламағайны Маһиҙә инәй. Оло яуға әҙерләнгәндәй килгәйне ул был мәленә. Йәнен фәрештәләр ҡулына анһат ҡына тоттороп ебәрмәҫкә ине уның ниәте. Уның ай күргәндәй, ҡояш алғандай тойолған ғүмере ус төбөндәгеләй күренде уға ошо саҡта. Иң тәүҙә күптән инде гүр эйәһе булған әсәһе, атаһы, туғандары, тыуған ауылы күҙ алдына килде, артабан сабый сағы, буй етеүе, Ғөбәйҙуллаһы менән танышҡан, өйләнешкән, ғүмер иткән, сабыйҙары тыуған, башы башҡаланған мәлдәре – был күренештәр уның күҙе алдынан бер нисә секунд эсендә генә йүгереп үтте. Шул тиклем дә ҡыҫҡа ғына икән дә был ғүмер тигәндәре…

Әжәл килеүен, уға йәнеңде бирмәй тартҡылашыуыңды үтә ҡурҡыныс кисереш тип һөйләүселәр төптө яңылышҡан икән дә. Ҡайһылай рәхәт, аңлатып бөтмәҫлек ләззәтле икән йәнеңдең мең ғазаплы, һыҙланыулы тәнеңдән айырылып, ҡотолоп, һауаға, иркенлеккә күтәрелеп сығыуы. Уларҙың ауылы лөғәте менән әйткәндә, «этем рәхәте», «уппағәҙәрем» еңел икән был үлем тигәндәре. Осҡалаҡты уларҙың ауылында ниңәлер фирҙәүес тиҙәр. Шуны осорған кеүек, бармағың осона йәнеңде осҡалаҡты ултыртҡан кеүек ултыртаһың да һамаҡлайһың:

*Фирҙәүес, фирҙәүес,*
*Атайыңдың һары тунын*
*Кей ҙә ос…*

Ошо һүҙҙәрҙе әйтеүең була, бармағыңдың осона барып етеп, артабан китер юлы ҡалмаған осҡалаҡ ҡанаттарын елпеп осоп та китә. Йән биреүҙәрең дә тап шулай, бала саҡта осҡалаҡ осорған кеүек кенә икән дә…

Йәне тәненән айырылып сығырын бар булмышы менән тойған Маһиҙә инәй янына бабайы Ғөбәйҙулланы, балаларын саҡыртып алды. Ғәзиз балалары, ейән-ейәнсәрҙәре, бүләр-бүләсәрҙәре, кейәүҙәре, күршеләре, туғандары, башҡа ауылдаштары уның менән күҙмә-күҙ ҡарашып, берәм-берәм бәхилләште. Өфөләге Әнүәр улына, тағы ла Өфө аръяғында йәшәүсе ҡыҙы Бибигөлгә шылтыраттырҙы. Улар ҙа юлға сыҡҡан, тик ҡайтып өлгөрмәҫтәр инде…

Бына уға Сәғиҙә килене менән дә бәхилләшер мәл етте. Юғалып барған тауышынан һүҙҙәре өҙөлөп-йолҡолоп ҡына, ишетелер-ишетелмәҫ сыҡты.

– Бәхил бул, килен, балаларымды, бабайымды ташлама. Һөйләшкәнсә, ҡырҡымды уҡытҡас, йәме? Тот ҡулымды!

– Бәхил бул, еңгәй, урының ожмах түрендә булһын, балаларың, бабайың өсөн борсолма… – Сәғиҙә еңгәһенең һыуына барған уң ҡулын ике усына алды.

Ғөбәйҙуллаһы ауылдың башҡа ҡарттары янында ясин уҡырға ултырҙы. Кемдер берәү илай башланы, әй, шул үҙе икән – тиҙ генә күҙенә йәш алып барған моңло тауышлы икенсе ҡыҙы Нурлыгөл илай икән. Иламаһа ла ярар ине инде, әсәһенә шул тиклем рәхәт, шуға илайҙар тиме? Маһиҙә инәй ҡыҙын тыйырға, йыуатырға ынтыла, ниҙер әйтергә лә самалай, тик теле генә әйләнмәй…

… Бик матур итеп, боронғо йырҙы башҡарған һымаҡ итеп уҡый намаҙҙы бабайы. Ошо тауыш уны йәш сағында үҙенә ғашиҡ иттергәйне. Хәҙер инде шундай наҙлы итеп ойота – әллә әүен баҙарына, әллә башҡа төрлө, бығаса ике ятып бер төшөнә инмәгән ләззәтле донъяға олғаштыра…

… Бына шул моңло тауыш Маһиҙә инәйҙе түшәгенән сабый бала ише еңел генә күтәреп алды ла түбә таҡтаһына тиклем күтәреп үк ҡуйҙы. Инәй был хәлен тойоуҙан ғәжәпкә ҡалды. Ул бит инде нисәмә йыл аяҡтарын да йүнләп ҡыбырҙата алғаны юҡ. Иң ҙур уңышҡа өлгәшкән хәрәкәте – коляскаға ултырып өй эсе буйлап йөрөү. Хәҙер килеп… Шулай еңел генә аяғына баҫып этенде лә һауа күтәрелеп үк китте. Ыста. Ул бит һаман да урындыҡта ята түгелме һуң? Улай булғас, ниңә бында түбә таҡтаһында тора? Төш күрә, буғай. Ул ғына етмәне, бына ул түбә таҡтаһын, өй ҡыйығын үтәнән-үтә сығып, һауаға уҡ күтәрелеп китте түгелме?..

… Шул тиклем рәхәт уға, еңел, ләззәтле, тәненең, быуындарының һыҙлағаны, аяҡтарының зәңкеп ауыртыуы бөтөнләй һиҙелмәй. Был ни ғилләʔ Үҙенең ихатаһы, йорто тирәһен йәшен тиҙлегендә зыр әйләнеп сыҡҡан Маһиҙә инәй тағы ла юғарыраҡ күтәрелде лә ауыл өҫтөнән шыҡыйып осто. Үҙенең хәленә үҙе аптыраны ул. Нисек инде етмеш дүрт йәшлек әбей кеше ошолай еңел генә һауала осоп йөрөй ала? Әҙәм ышанмаҫлыҡ аптыраҡ. Ул алапай елфрүз кеүек һауала осоп тик йөрөй. Етмәһә, бығаса тәҡәтһеҙ ауыртҡан, һыҙлаған урындарын бөтөнләй тоймай ҙа тиерлек. Туҡта, ҡайҙа һуң уның аяҡтары, ҡулдары, бите? Юҡ бит. Улай ғына түгел, уларҙың урынында торғанын һәрмәп ҡарарға ҡулдары ла юҡ түгелме? Бына уның ирендәре, теле, тештәре, тик ниңә тештәренең ҡыҫыуына ирендәре, теле ауыртмай һуң? Улай булғас, ниңә былар барыһы ла бар кеүек тә, тотоп, тешләп, һәрмәп ҡарайым тиһәң, юҡ…

… Ул бит иректә. Ысын мәғәнәһендәге иректә. Һауалағы ҡош кеүек. Кем белә, бәлки, был кисерештәре ысынлап та төш кенәлер? Төш кенә икән, ирек, азатлыҡ бер эләккән сағында йөрөп ҡалһын әле. Юғиһә, биш йылдан артыҡ бер урында тик ятып шытып киткән бит ул. Бына ул Буранғол ауылын һауанан осоп үтте лә урман-ҡырҙар, тауҙар аша тыуған ауылы Таулыҡаяға яҡынлаша башланы. Бына ауылы өҫтөндә оса. Бына уның тыуған йорто, уйнап үҫкән урамдары, йылға буйы, туғайлыҡтар, ҡалҡыулыҡтар, бына Арҡыса буйы, ауыл ситендәге зыярат. Бына әсәһенең ҡәбере, күптән инде бында булғаны юҡ. Биш йыллап барҙыр. Туҡта, улар бит нәҡ биш йыл элек ире Ғөбәйҙулла менән әсәһенең ҡәберенә килгәйнеләр. Ә нишләп биш йыл буйы тағы ла бында килеп әйләнмәне һуң? Эйе, ул ике ҡулына ике ботлоҡ биҙрә менән һыу күтәреп ҡолап китте, шул ятыуынан тора алманы. Эйе, барыһы ла иҫенә төштө. Хәҙер бына ул түшәгендә ята һәм төш күрә. Хәҙер бына күҙҙәрен асып ебәрәсәк тә, барыһы ла үҙ урынына ҡайтасаҡ. Тик ниңә күҙҙәрен аса алмай һуң ул? Улар йомоҡ булғас, ниңә был күренештәрҙе ул ысын итеп күрә һуң? Етмәһә, үҙе осоп йөрөй. Маһиҙә инәй әсәһенең ҡәберен йәнә бер тапҡыр осоп урап үтте лә йәнә бер тапҡыр тыуған ауылына күҙ атты. Ана, кешеләр ҡәҙимге тормош менән йәшәп ята. Урамда һирәк-һаяҡ кешеләр йөрөгәне күренеп ҡала. Туҡта, тыуған ауылымда берәр таныш кешене осратмаммы икән? Бәлки, иҫәнлек-һаулыҡ һорашырмын, ауыл хәлдәрен белешермен. Инде ҡасандан бирле тыуған ауылымда булғаным юҡ…

… Маһиҙә инәй ауыл урамында инде олоғайып бөткән Хәмдиә әхирәтен бер ҡарауҙа уҡ танып алды. Тап үҙе, өйрәктәй йәйелеп, алпанлап атлауына тиклем үҙгәрмәгән. Ҡулында ауыр ғына сумка. Магазиндан ҡайтып бара икән.

– Хәмдиә әхирәт, ни хәл? – Әхирәтенең ҡаршыһына сығып баҫҡан Маһиҙә

инәй уға ике ҡулын һуҙып килә башланы. – Бына мин Таулыҡаяға килдем әле. Әле зыяратҡа инеп, әсәйемдең ҡәберен күреп сыҡтым…

Ай-һай, ҡалай эреләнгән Хәмдиә, әхирәтенең һаулығын алмау ғына түгел, үҙен дә күрмәмешкә һалышып үтте лә китте. Әллә һаңғырауланған, әллә күҙҙәре насар күрә инде. Маһиҙә инәй үҙенән алыҫлаша барған әхирәтенә хәҙер инде ҡысҡырып өндәште. Иң ҡаты ҡолаҡ һаңғырау ҙа ишетерлек итеп ауыл урамын яңғыратты.

– Хәмдиә, тим, хәлдәрең нисек, тием?..

Әхирәте тағы ла уның өндәшеүенә иғтибар итмәне. Хәҙер инде Маһиҙә инәй уның үтер юлына арҡыры сығып баҫты ла килеп еткәнен көтөп тора башланы. Һе, ҡайһылай эреләнеп киткән был Хәмдиә, үҙе күҙгә текәлеп өҫкә менеп килә, үҙе ырыя ғына ҡарай бит әле. Йәнәһе, кем әле һин минең юлыма сығырға, тип әйткәндәй уның ғәмһеҙ ҡараштары. Аралары ике-өс аҙым ҡалғас, Маһиҙә инәй ике ҡулын һуҙып уға ҡаршы атланы.

– Һаумы, әхирәт?..

Был юлы инде әхирәте уның һаулығын алмау ғына түгел, юлына ҡаршы сығыусыны ураманы ла, Маһиҙә инәйҙе лысҡылдата тапап үтте лә китте. Сытыйманы ла, исмаһам. Юҡ, әхирәтен тапап үтмәне ул, сөнки үҙе аша үтеп киткәндән һуң да Маһиҙә инәй ерҙә баҫып торған килеш ҡалды, тик Хәмдиә генә уға иғтибар итмәне. Маһиҙә инәй үҙенә Хәмдиә әхирәтенең ҡағылғанын бөтөнләй тойманы ла. Үҙенең был халәтенә хайран ҡалды. Тимәк, уның тәүге фаразы дөрөҫ: ул бит төш күреп ята. Осоп йөрөүе, тыуған ауылына, әсәһенең зыяратына килеүе, Хәмдиәне күреүе – былар барыһы ла төш кенә. Маһиҙә инәй күҙен асырға, уянырға итте, тик ниңәлер күҙҙәре асылмай. Юҡ, уның күҙҙәре асыҡ, ул донъяны күрә, тик ысынбарлыҡҡа ҡайта алмай ыҙалана түгелме? Туҡта, ул бит үҙ өйөндә ята ине, тимәк, күҙен асыр өсөн уға Буранғолға ҡайтырға кәрәк…

… Һауаға еңел генә күтәрелде ул. Буранғол яғына елдәй иҫте. Осоп барған килеш аҫҡа ҡараны. Ауылға ҡарай һуҙылған шоссе юлдан аҡ машина елдерә. Ниңә был машина шундай шәп тиҙлектә бара һуң? Юлындағы ваҡ таштарға, ямғыр йыуып хасил иткән соҡорсоҡтарға ла иғтибар итмәй. Ҡана, ҡарайым әле: кемдәр ултыра һуң был машина эсендә? Маһиҙә инәй йәшен тиҙлегендәй хәрәкәт менән аҫҡа төшөп, машинаның эсендә ултырыусыларға күҙ һалды. Бәй, Әнүәр улы менән Бибигөл ҡыҙы бит. Өфөнән ҡайтып киләләр. Ниңә шул тиклем ҡыуалар һуң улар? Нимәгә шул тиклем ашығалар? Аварияға эләгеп-фәлән ҡуймаһалар ярай ҙа. Машиналағылар өсөн йәнен усы эсенә алған Маһиҙә инәй балалары артынан эйәрҙе. Аҡ машина, Буранғолға килеп ингәс, уларҙың өйҙәренә табан боролдо. Ихатаға бик күп кешеләр йыйылып киткән икән. Ниңәлер барыһы ла энә йотҡан кеүектәр. Нимәгә йыйылғандар һуң улар бында?

Әнүәр улы менән Бибигөл ҡыҙы машинанан төштөләр ҙә, шунда йыйылған кешеләр менән һаулыҡ та һорашып тормаҫтан, өйгә йүгереп инеп киттеләр. Маһиҙә инәй ҙә уларҙың артынан ҡалышманы. Бына өй эсе, бына уның урындығы, унда берәү ҙә юҡ. Ҡайҙа һуң ул? Маһиҙә инәй балалары артынан эйәреп төпкә яҡҡа үтте. Бында ла, тыштағы кеүек үк, байтаҡ ҡына кеше йыйылып киткән. Бер яҡта ауыл аҡһаҡалдары, икенсе яҡта Маһиҙә инәйҙең йәштәштәре, апайҙары, еңгәләре ултыра. Урталыҡта кәфенлеккә уралған кемдер ята. Кем үлгән һуң? Ҡайһылары күҙенә йәш алған. Нимә булған һуң бында? Әнүәр улы менән Бибигөл ҡыҙы урталыҡта ултырған аталары Ғөбәйҙулла янына килде.

– Атай, беҙ ҡайтып еттек, – тине улар, аталарын ҡосағына алғандай. Маһиҙә инәй бабайының таныш тауышын ап-асыҡ ишетте:

– Әсәйегеҙ һеҙҙең ҡайтып еткәнде көттө, тик өлгөрмәнегеҙ, балаларым. Һеҙҙе көтөп ултырабыҙ. Бына ҡарағыҙ, хушлашығыҙ ҙа, хәҙер зыяратҡа алып китәбеҙ…

– Аh-аh… Нимә һөйләйһең һуң һин, бабай? Бына бит мин тере, эргәңдә баҫып торам. – Маһиҙә инәй бабайының яурынына ҡулы менән ҡағылырға итә, тик ҡағыла ғына алмай. – Әнүәр улым, Бибигөл ҡыҙым, атайығыҙға ышанмағыҙ, бына мин бында торам, теремен…

Әммә уның һүҙҙәренә ҡолаҡ һалыусы кеше генә булманы. Хатта ишетмәнеләр ҙә кеүек. Балалары аталары күрһәткән ергә, кәфенлектең ситен ҡайырып асҡан урынға, ҡараны. Маһиҙә инәй ҙә күҙ һалды унда. Күргәненән терт итеп ҡалды. Үҙе ята түгелме һуң кәфенлек эсендә? Кемде-кемде, ул үҙен һис һүҙһеҙ таныны. Танымай буламы һуң: шул йөҙөнә нисәмә мең тапҡыр көҙгө аша ҡарап торғаны бар.

… Бер нисә тапҡыр кәфенлектә ятҡан үҙ тәненә инеп, үҙен уятырға самалап ҡарағандан һуң, был ғәмәле килеп сыҡмағас ҡына, үҙенең хәлен аңланы Маһиҙә инәй. Ул бая һауала осоп йөрөгән арала тәүге тапҡыр тән һыҙлауы ҡоллоғонан ҡотолоп, азатлыҡҡа сығып, онотолоп киткән икән. Ғүмер тигән әмәле тамамланған икән үҙенең. Үлем тигәндәре шулай рәхәт кенә була икән дә. Уға еңел, рәхәт, ә нишләп балалары, ире, туғандары, ауылдаштары шул тиклем ҡайғылы һуң? Аңлашылды хәле: уны, йәғни йәнһеҙ тәнен, хәҙер зыяратҡа алып барып ҡуясаҡтар. Шуға илайҙар. Иламаһындар ине, ул бит бында, иректә, ожмахтың иң түрендәгеләй итеп тоя үҙен. Ҡыҙыҡ, ул бит үҙе лә һауала осоп ҡына үҙенең тәнен һуңғы юлға оҙатырға барасаҡ. Нисек инде, үҙен үҙе һуңғы юлға оҙатырға барасаҡ…

… Бына уның кәфенләгән тәнен кейеҙгә уранылар ҙа ат арбаһына һалдылар. Янына ат ҡыуыусы малай менән Ғөбәйҙуллаһы ултырҙы. Бына ат алдан китте, артынан ирҙәр эйәрҙе, ҡыҙ-ҡатындар өй янында тороп ҡалды. Ана, Мәндүҙә, Нурлыгөл, Бибигөл, Гөлкәй ҡыҙҙары күҙ йәшенә быуыла. «Иламағыҙ, балаларым, мин бында бит, һеҙҙең янығыҙҙа ғына. Тегендә бары минең тыуған тәнемде, йән һауытымды ғына алып киттеләр. Белгегеҙ килһә, әсәйегеҙ тәүге тапҡыр шундай рәхәтлектә йөҙә. Әжәлеңде ҡаршылау бик ауыр, тиҙәр, дөрөҫ түгел…»

Ҡыҙҙарының араһында тағы ла бер ҡатын сеңләй. Ә быныһы кем һуң ул? Аh-аh, яратҡан, һөйкөмлө, сибәр Сәғиҙә килене бит. Иҫенә төштө: моҡ заман элек һымаҡ тойолһа ла, ул бит ошо килененә бәхилләшеү һүҙҙәрен әйткәйне. Ҡасан әйтте һуң? Ҡасан, тип ни, бөгөн. Шулай шул. Эйе, ул бит үҙе был киленен үҙенең урынына ҡалдырып китте. Эйе, эйе, тап уның ҡырҡын уҡытҡан көндө уның бабайы менән килененә никах уҡырға тейештәр. Туҡта, ә нишләп ҡырҡын уҡытҡан көндә һуң?..

… Маһиҙә инәйҙең ләззәт тойғоһо менән ҡыҙҙарының күҙ йәше араһында уйҙары бутала, фекерҙәре ҡамаша. Әлегә уның йән һауыты һалынған ат зыяратҡа барып еткәнсе баяғы ике урталыҡта ҡалған һорауына яуапты эҙләп табасаҡ әле ул. Әлегә уға зыяратҡа барып, балаларының ҡәберҙәрен күрергә кәрәк…

Маһиҙә инәй был һорауға яуапты бер нисә көндән һуң тағы ла әсәһенең зыяратына барғас ҡына тапты. Үҙенең ошондай хәленә яуабы ла тап шунда ине.

Ярай әле, был турала уға әсәһе һөйләп ҡалдырған, юғиһә үҙ хәлен аңлай алмайынса, һаман да ике донъя араһында ҡаңғырып йөрөр ине әле. «Мәрхүмдең йәне, үҙе вафат булғас та, хәтерҙән айырылмайынса ҡырҡ көн буйына донъялыҡта ҡала. Ҡырҡын уҡытҡан көндө, донъялыҡтан айырылып, мәңгелеккә олғаша, илле беренсе көндө сират күперенә барып етә…» – тигәйне шул уның ғүмер буйына намаҙлыҡтан айырылмаған әсәһе. Әсәһе әйткән ана шул һүҙҙәрҙе ул күптән онотһа ла, хәҙер иҫенә килеп төштө. Үҙенең хәлен аңланы Маһиҙә инәй, юғиһә Хәмдиә әхирәтен ана нисек итеп әрләп ташлағайны. Күңеленән генә ул әхирәтенән ғәфү үтенде.

Ҡырҡ көнлөк хәтер ғүмерен Маһиҙә инәй рәхәтләнеп, донъя гиҙеп үткәрҙе. Бармаған урыны, күрмәгән кешеләре ҡалманы. Өйрәнгән ғәҙәте буйынса аяҡтарына баҫып, атлап китергә итә лә осоп киткәнен һиҙмәй ҙә ҡала. Бабайы дингә килеп, намаҙ уҡыһа ла, Маһиҙә инәй балаларынан, ейән-ейәнсәрҙәренән, бүләр-бүләсәрҙәренән, донъя мәшәҡәтенән бушай алманы, намаҙ уҡырға өйрәнергә форсат таймәне. Хәҙер бына форсаты ла, ваҡыты ла табылды, әммә өй тирәһендә мең мәшәҡәт менән янған тиктормаҫ бабайы Ғөбәйҙуллаға был теләген аңлата ғына алманы. Аңламаҫһың инде был бабайҙы, үҙе вафат булған әбейен юҡһына, үҙенә урын таба алмай үрһәләнә, ябығып, һурылып китте, үҙе янында ғына йөрөгән әбейен күрергә лә, уның, доға уҡырға өйрәт, тигән үтенесен ишетергә лә теләмәй. Шымшыраҡлап, танауын тартып тик йөрөй.

Уның ҡарауы, Маһиҙә инәй һауала рәхәтләнеп китеп осҡан ҡоштарҙың ҡанаттарына ултырып кәйелгәндә зекер әйтергә өйрәнде. Кисә үлмәһә, бөгөн белмәҫ ине. Баҡтиһәң, ҡоштар ҙа зекер әйтә белә икән. Бер мәл шулай осоп барған аҡҡоштоң ҡанатына ултырып ойоп киткәйне, әллә төшөндә, әллә өнөндә «Аллаһ!» тип ҡабат-ҡабат яңғыраған һүҙҙәрҙе ишетте. Ныҡлабыраҡ тыңлаһа, аҡҡош үҙ телендә ошо һүҙҙәрҙе ҡабатлай икән. Тыумыштан зирәк аҡыллы, һиҙгер күңелле Маһиҙә инәй ҡоштоң был һүҙҙәрен бик асыҡ ишетте. Эйе, «Аллаһ!» һүҙен башҡа һүҙҙәр менән бутарлыҡ түгел шул. Аҡҡошҡа ҡушылып Маһиҙә инәй ҙә зекер әйтергә тотондо: «Аллаһ! Аллаһ! Аллаһ! Аллаһ!..»

Тағы ла әсәһенең әйткәндәре иҫенә килеп төштө: «Донъяла һәр тере йәнде Аллаһы Тәғәлә яралтҡан, балам. Ҡоштар ҙа осҡан саҡта үҙҙәрен донъяға яралтҡан Хоҙайға рәхмәт әйтеп, уның исемен ҡабатлай. Шуға күрә беҙ ҙә уның исемен бер туҡтауһыҙ ҡабатларға тейешбеҙ. Беҙҙең йөрәктәр ҙә «Аллаһ!» тип тибергә тейеш, балам…»

* * *

…Маһиҙә инәйҙең ҡырҡына бик күп кеше йыйылды. Һәр хәлдә, төпкө яҡтың стенаһына ҡағып ҡуйылған ағас сөйгә ҡунаҡлаған хужабикә өй эсендә бабайын, балаларын, кейәүҙәрен, ейән-ейәнсәрҙәрен, бүләр-бүләсәрҙәрен, туғандарын, күршеләрен, әхирәттәрен, ауыл ҡарттарын күрҙе. Сағиҙә килене лә ҡыҙҙары менән аш-һыу әҙерләшеп йүгереп йөрөй. Бына барыһы ла йыйылып бөткәс, бабайы Ғөбәйҙулла үҙ үҙене менән ясин уҡырға кереште.

Эх, ошоноң тауышы. Йәшлек мәленән алып Маһиҙә инәй өсөн танһыҡ, яғымлы ауаз. Ошо тауышты ишетер өсөн донъялыҡҡа ожмахтан да ҡасып килерлек шул. Бабайының өн-ауазын башҡа һис бер тауыш менән бутарлыҡ түгел.

– Бисмилләәһи-ррахмәәни-ррахим. Йәә сиин. Үәл-Ҡурәәнил-хәкиим. Иннәкә

ләминәл-мурсәлиин. Ғәләә сыираатыим-мустәҡиим. Тәңзиилә Ғәзиизи-ррахим. Литүңҙира ҡаумәм-мәә үңҙира әәбәә-үһүм фәһүм ғаафилүүн. Ләҡад хәҡҡаль-ҡаулү ғәләә әкҫәриһим фәһүм ләә йүьминүүн. Иннәә джәғәлнәә фии әғнәәҡиһим ағләәләң фәһийә иләл – әҙҡаани фәһүм муҡмәхүүн. Үә джәғәлнәә мим-бәйни әйдииһим сәддәү-үә мин хальфиһим сәлдәң фәағшәйнәәһүм фәһүм ләә йүбсыируун. Үә сәүәәүн ғәләйһим әәңҙәртәһүм ләә йүьминүүн. Иннәмәә түңҙиру мәни-ттәбәғә-ҙҙикра үә хашийә-ррахмәәнә билғайби фәбәшшириһү бимағфиратиү-үә әджриң кәриим. Иннәә нәхнү нүхйил-мәүтәә үә нәктүбү мәә ҡадәмүү үә әәҫәәраһүм үә күллә шәйин әхсайннәһү фии имәәмим-мүбиин…

Тик ни ғәжәп: элек ғәрәпсәне йә башҡа телде белеү түгел, хатта урыҫсаһын да яҙа-йоҙа һуҡалаған, үҙ телендә генә һүҙ атҡарған Мәһиҙә инәйгә бабайы ясин уҡыған ғәрәп теле аңлайышлы булып тойолдо. Тойолоп ҡына ҡалманы, ул аятта әйтелгән һәр һүҙҙең, һәр һөйләмдең мәғәнәһен асыҡ төшөнә башланы бит. Бер класс белеме лә булмаған көйөнә. Ғәжәпләнеүеңдән йыһанды мең урарлыҡ бит. Туҡта, ғәрәпсәһенә лә, башҡа телдәргә лә барымы булған әсәһе был хаҡта нимә тип һөйләй торғайны әле? Эйе, иҫенә төштө: ул, ғөмүмән, ҡырҡ тәүлек буйына ғүмере эсендә ике ятып бер төшөнә инмәгән ғәмәлдәрҙе башҡарырға өйрәнде. Тән ғазаптарынан арынған йән хәтере барыһын да яңынан аңына ҡайтарҙы. Әсәһенең ғәрәп теленә бәйле биргән һабағын да. Ҡыҙ сағында ул әсәһенән:

– Әсәй, ә сират күперен үтер алдынан һорауҙар ниндәй телдә бирелә ул?..– тип һорағайны.

– Ниндәй телдә, тип ни, ғәрәпсә инде,– тип яуап биргәйне әсәһе.

– Улайһа, мин уларҙың һорауын аңлай алмай, яуап бирә алмаһам, тамуҡ утында янып ҡуймайыммы? – тип һаман да ныҡышты шул саҡ Мәһиҙә.

– Ҡырҡ көнлөк хәтер ғүмерең эсендә өйрәнәһең инде, ғәрәпсәһен дә, башҡаһын да. Барса кешелек бер ата, бер әсәнән яралған. Әҙәм менән Һауанан…

Әле килеп әсәһенең шул әйткәндәре иҫенә төштө Мәһиҙә инәйҙең. Әле генә бабайы уҡый башлаған «Йа син»ды ул түбәндәгесә аңланы:

– Бисмилләһир-рахмәнир-рахим! Йа син. Хикмәтле Ҡөрьән менән ант итәм. Әлбиттә, һин, рәсүлдәрҙән,тура юлда. Ҡөҙрәтле, рәхимле Алланың был күндергәне. Ата-бабаһы өгөтләнмәгән, шуға ғафил булған халыҡты өгөтләү өсөн. Әйтелгән һүҙ күпселегенә раҫ килде, ә улар иман килтермәй. Беҙ уларҙың муйынына эйәген күтәреп торған ҡалын ҡалып һалдыҡ, шуға улар саңҡайып тора. Беҙ уларҙы алдынан да, артынан да кәртә менән ҡаманыҡ, шуға улар күрмәй. Өгөтләһәң дә, өгөтләмәһәң дә, барыбер улар иманға килмәй. Һин иҫкә алғанда Ҡөрьәнгә эйәргән, Әр-Рахмандан күңеле ҡурҡып торған кешене генә өгөтләй алаһың. Уны ярлыҡау һәм мул әжер менән һөйөнсөлә! Беҙ үлеләрҙе терелтәбеҙ, элек эшләгән эштәрен, ҡалдырған эҙҙәрен яҙып барабыҙ. Асыҡ төп нөхсәгә Беҙ бөтә нәмәне теркәгәнбеҙ…

… Доғалар уҡылып, хәйерҙәр таратылып, аш-һыуҙан ауыҙ ителгәс, өй эсе бер аҙға тынып ҡалды. Мәһиҙә инәй бигерәк тә ошо мәлдә түҙемһеҙләнеп көттө. Бабайы доғаһының һуңғы һүҙҙәрен әйткән саҡта булмышында аңлатып булғыһыҙ хис – осорға ынтылыш, ҡымйырлау тойғоһо барлыҡҡа килде. Әсәһе әйтеп ҡалдырғанса, хәтерҙән айырылыу мөҙҙәте еткәнлеген бик яҡшы аңланы ул. Хәҙер-хәҙер атылып сығып осоп китәсәк тә мәңгелеккә айырыласаҡ, тик туғандарының, тормошта ҡалғандарҙың ғына хәтерендә ҡаласаҡ. Уның

хаҡындағы хәтер бер яҡлы ғына  һаҡланасаҡ, йәғни бына-бына ул ошо донъя менән үҙен бәйләгән бөтә нәмәне онотасаҡ. Донъялыҡта ғына уны иҫләйәсәктәр. Әгәр ҙә Маһиҙә инәй васыят итеп әйткән һүҙҙәр, уның һуңғы теләге үтәлмәй ҡалһа, мәңгелеккә онотолоу даръяһына нисек итеп олғашыр ул? Олғаша алырмы? Нимәһен ҡарап шул тиклем һуҙа уның бабайы? Башҡа саҡта өтәлән ҡыланған, яндырай бабайы ниңә быҙмырлай? Шуны ғына көткәндәй, Ғөбәйҙулла тамағын ҡырҙы.

– Ағай-эне, туғандар, эйе, йәмәғәтем Маһиҙә Хәйрулла ҡыҙының үҙе тере саҡта әйтеп ҡалдырған бер васыяты бар ине. Шуның буйынса беҙ бөгөн һәр ике яҡтың туғандары, балалары шаһитлығында Сәғиҙә киленебеҙ менән миңә бата уҡытырға тейешбеҙ. Никах аятын башҡарыр алдынан был мәсьәләгә үҙ фекерен әйтергә  теләүселәр рәхим итһен…

Бүлмәлә ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа тынлыҡ урынлашты. Тынлыҡты Сәғиҙәнең өлкән улы Әхәттең тамаҡ ҡырыуы өҙҙө.

– Әсәй, һин атайыбыҙҙың иҫтәлегенә тоғро булып ҡалдың. Беҙҙе аяҡҡа баҫтырҙың, рәхмәт. Ҡыштарын ауылыбыҙға ҡайтҡанда һарай яғынан өй тупһаһына тиклем  һалынған  тик бер генә эҙҙе күреп эсем  яна торғайны. Һин үҙең өсөн дә йәшәргә тейешһең хәҙер. Ғөбәйҙулла олатайҙы бала саҡтан ихтирам итәм, исмаһам, икәүләшеп самауыр янында  серләшеп сәй эсеп ултырғанығыҙҙы күреп йыуанайыҡ, – тине ул  тәрән тулҡынланыу менән.

– Беҙ бала саҡтан бергә, бер ғаилә булып үҫтек. Әхәт ҡустым миңә бер туған ҡустым кеүек яҡын, һәр хәлдә, беҙ Өфөлә башҡа  кеше менән үҙебеҙҙе күптән инде бер  туған итеп таныштырабыҙ. Хоҙай беҙгә бер ғаилә булып йәшәргә үҙе бойорған… – Был һүҙҙәрҙе Маһиҙә инәйҙең улы Әнүәр әйтте.

– Был васыят һүҙҙәрен әсәйебеҙ иң тәүҙә миңә әйтте, – тип күҙ йәшен тыя алмай һүҙ башланы Мәндүҙә,– ошо хаҡта ул  биш йыл буйы уйлап ятҡан, бик һынамсыл  һәм отҡор күҙле ине әсәйебеҙ. Уның ҡулын тотоп ҡалыусы Сәғиҙә еңгәйебеҙгә лә ышанабыҙ. Беҙгә ни нимә, атайыбыҙ ҡараулы булһа, шул еткән…

– Сәғиҙә еңгәйҙе беҙ бала сағыбыҙҙан яҡын күрҙек, яраттыҡ, – Маһиҙә инәйҙең икенсе ҡыҙы Нургөлдөң  тауышы был, ул түгелеп  илап ебәрҙе. – Сәғиҙә еңгәй, һин элек яратҡан еңгәйебеҙ инең, хәҙер яратҡан апайыбыҙ булырһың. Һаумы, апай, тип өндәшәбеҙ һиңә бөгөн…

Нургөлдөң һүҙҙәре барыһының да күҙен  йәшләндерҙе. Маһиҙә инәй ҙә тәрән тулҡынланыу кисерҙе был саҡта. Илай ғына алманы, уның  ҡарауы, рух балҡышы кисерҙе ул. Иң мөһиме: барыһы ла ул теләгәнсә  килеп сыҡты. Мәңгелеккә ул үҙенең донъялыҡтағы тамамланышының ошондай  аңлауында олғашасаҡ. Йәшәүенең мәғәнәһенә әүерелгән балаларының, бабайы Ғөбәйҙулланың донъялыҡта, үҙе киткәндән һуң, етем ҡалмаҫын тәрән итеп тойғанға күрә лә уның рухы шат. Хәҙер-хәҙер уның  хәтере донъялыҡтан айырыласаҡ, үҙе мәңгелеккә осасаҡ. Бала сағында бармаҡ осона ултыртып осорған осҡалаҡфирҙәүес кеүек…

Бына өй эсендәге ҡарттарҙың берәһе бата уҡырға тотондо. Бүлмә эсенә түбә таҡта аша ап-аҡ нур  ҡойолдо. Маһиҙә инәйҙең йәне тойоп туймаҫлыҡ, аңлатып бөтөп булмаҫлыҡ ләззәткә сорналды. Уның донъялыҡҡа, ғүмеренә, туғандарына бәйле хәтере лә шундай уйҙар менән өҙөлдө: эх, ғүмер тигәндәре. Үрелеп алған алма кеүек кенә икән. Тик ожмах ләззәтен татыр өсөн үрелеп алған алма-ғүмереңдең әсеһен дә тәмләргә кәрәк икән…

---



Шамил
ХАЖИӘХМӘТОВ

# ӘЛЕ ҮӘ 30 МЕҢ ЙЫЛ ӘҮӘЛ

## хикәйә

Ҡояш ашыҡмай ғына йылға аръяғына, һөҙәк битләүҙәрен ҡуйы ағаслыҡ ҡаплаған алыҫтағы тау теҙмәләре артына тәгәрәп төшә, шул тарафтарҙан еңелсә томан күтәрелә. Ҡып-ҡыҙыл, түп-түңәрәк ҡояш байыр алдынан тирә-йүнде йәнә бер байҡар өсөн күк йөҙөндә туҡталып ҡалғандай тойола ошо мәлдә Ринатҡа. Киске шәфәҡтең иң киткес гүзәл һәм серле бер халәте! Их, рәссам бул да был ғәжәйеп төҫтәр балҡышын киндергә төшөр ине!

Донъя буйлап байтаҡ гиҙгән, шулай ҙа һаман көнгә уңмаған йәшел палатҡаһы түңәрәк ҡалҡыулыҡта ҡоролған. Мәтрүшкә, хуш еҫле бүтән хәтфә үләнсәскә менән ҡапланған туғайҙар, гүйә, талғын ғына ҡалҡыулыҡтан аҫҡа, йылғаға, табан йүгерә.

Ниһайәт, ер ҡояшты офоҡ ситенән тәгәрәтеп төшөргәс, тирә-яҡтағы тау бүлкәстәре аҡ ҡар һымаҡ томанға төрөнгәс, киске тәбиғәттең ошо мөғжизәһенә онотолоп ҡарап торған Ринат иҫенә килеп тертләп китте. Уға ниңәлер был ситят ерҙәге беренсе төнө көтөлмәгәнсә үтер һымаҡ. Әгәр ул таныш булмаған планетаға барып төшһә, үҙен бар донъянан көслө магнит майҙаны менән айырған һымаҡ буласаҡ, имеш. Һәм ул, әлеге магнит һағы булмағанлыҡтан, беренсе төндән һәм яңғыҙлыҡтан үҙен бәләкәй генә усаҡ менән араларға хәл итте. Ҡоро-һарыны тоҡандырырға бер шырпы етте, һәм оҙаҡламай йылан һымаҡ нәҙек оҙон ут телдәре ҡараңғылыҡтан конус формаһындағы урын яулап алды, конустың һөңгө кеүек осо ҡайҙалыр үргә барып ҡаҙалды. Тиҙҙән усаҡ шарт-шорт килеп янырға тотондо, тирә-яҡҡа осҡондар һикереште. Ялпылдаған ялҡын телдәренә Ринат оҙаҡ ҡына ҡарап ултырҙы, шунан палатҡаға инде, башын тышҡа сығарып, утҡа һонолоп ҡарап күпмелер ваҡыт ятты һәм үҙе лә һиҙмәҫтән шул килеш йоҡоға сумды.

*Шамил Хажиәхмәтов (1941) — Өфө районының Алексеевка ҡасабаһында тыуып үҫкән. Нефть техникумын һәм нефть институтын тамамлағас, инженер-төҙөүсе булып эшләй. Журналистика ветераны, нәшриәт белгесе. Әҙәбиәт майҙанына етмешенсе йылдарҙа аяҡ баҫып, прозаның төрлө жанрҙарында емешле эшләй. Өфөлә, Мәскәүҙә сыҡҡан тиҫтәнән ашыу китап авторы.*

Барса ҡала кешеләре һымаҡ, һәр минуттың ҡәҙерен белеп, көндәлек тормошон тәғәйен бер тәртипкә һалырға күнеккән Ринат уянмай-нитмәй үҙенең һигеҙ сәғәтен теүәл йоҡланы ла ҡуйҙы. Ябалаҡтың төнгө ухылдауын да ишетмәне, таң һыҙылғанын да тойманы, ҡояштың тәүге нурҙарын да, үләндәрҙәге ысыҡ тамсыларының көҙгө ярсыҡтарылай һикерешеп уйнағанын да күрмәне.

Брезент тиҙ йылынды, оҙаҡламай палаткала томра була башланы. Ринат ояһынан сыҡты, куртка еңе менән тирләгән битен һөрттө, ниндәйҙер мөғжизә аңдыны – ул йоҡлаған арала ул-был булманымы икән? – әммә кисәге яп-ят ер бөгөн уға улай уҡ сит күренмәй ине инде. Йәшел үлән күҙ алдында ысығын ҡойоп алсаҡ йылҡылдай, тауҙар көн яҡтыһында нисектер тәпәшерәк һәм илгәҙәгерәк күренә, ике яҡлап тауҙар уратып алған баҫыуҙан трактор гөрөлдәгәне ишетелеп ҡала.

Ҡалҡыулыҡ итәгендә, йылға ярында, Ринат кескәй генә шишмә тапты, котелогына көрөшкә менән һыу тултырҙы, һүнгән усағын терелтеп, сәй ҡайнатты. Мәтрүшкә сәйе ифрат та тәмле ине. Ҡалала уҡ әҙерләп килтергән бутербродтар менән ҡабаланмай ғына сәй эскәндән һуң, ул яҡындағы ауылға йүнәлде.

Ауыл ярым ташландыҡ хәлдә. Урам буйлап барышлай йәшелсә-емеш, картуф баҡсаларында ҡаҙынған ҡарт-ҡороно ғына күрҙе, уларҙың аяҡ аҫтында ыбыр-сыбыр ейәндәре бутала. Йәштәр, хатта урта йәштәгеләр бөтөнләй күренмәй. Улар ҡалаға сығып китеп бөткәндер, заводта, нефть промыслаларында эшләйҙәрҙер, шабашкала йөрөйҙәрҙер. Ринат ауылдарҙағы был күренеште белһә лә, әле, үҙе килеп төртөлгәс, ғәжәп итте, хатта күңеленә шом йоғондо.

Ауылда магазин иҫкесә лавка тип йөрөтөлә. Унда тоҙ, шәкәр, туҡмас бар. Ринат аҙна самаһына етерлек байтаҡ кәрәк-яраҡ һатып алып, тоҡсайына тултырҙы. Ә бына һөттө ауылда саҡ-саҡ тапты – һыйырҙы һирәк кеше тота икән.

– Эре мал аҫырау өсөн беҙҙең көс ҡалманы инде, – тип аңлатты был хаҡта остағы йортта көн итеүсе бер бабай, – донъя ҡыуыу урынына беҙгә ана тегендә йышыраҡ күҙ һалырға ваҡыт, – ул арыраҡ һирәк ҡайынлыҡ араһында ағарып күренгән ҡәбер таштарына ымланы.

Ауылдың ҡартайғанын Ринат шунан да белде: уға, ҡырҡ биш йәшлек иргә, бер нисә тапҡыр, эй, егет, тип өндәштеләр бит хатта. Тимәк, ул бындағы оло кешеләргә йәш булып күренә.

Лавка алдында уның иғтибарын бер малай менән бер ҡыҙыҡай йәлеп итте. Үҙ-ара мөғәмәләренән аңғарыуынса, ағалы-һеңлеле шикелле былар. Малайға ун ике йәштәр самаһы, ҡыҙыҡайға алтынан да артыҡ түгелдер. Икеһе лә бик етди һәм әллә ни һөйләшеп бармайҙар. Ҡараштарында, бер ҡайҙа ла ашыҡмай-ҡабаланмай лавка болдоронда ҡояшта ҡыҙынып ултырыуҙарында ниндәйҙер өмөтһөҙлөк, битарафлыҡ сағыла. Ринат, һөтөн түгеп ҡуйыуҙан ҡурҡа-ҡурҡа, балалар янынан яй ғына үтте, яҡыныраҡ булыр тип, түңәрәк ҡалҡыулыҡ түбәһендә ултырған йәшел “өй”өнә тыҡрыҡтар аша туранан атланы.

Кисен Ринат тағы усаҡ янында ултырҙы, үҙенә ябай ғына киске ризыҡ яраштырҙы: быҡтырылған консерва итенә ҡушып картуф турап ҡайнатты. Әммә өйрә бешеп сыҡҡас, уны ярты сеүәтә лә ашай алманы, дөрөҫөрәге, ашағыһы килмәне, ас түгел, имеш. Йоҡлау өсөн махсус тоғон палаткаһынан сығарҙы ла, эсенә инеп ятып, күккә, алыҫ йондоҙҙарға баҡты. Тирә-йүндәге тере йәндәр тынысланды, аҫтағы йылға шауы ғына киске сәғәттең берҙән-бер тауышы булып ҡалды...

...Бынан сирек быуат әүәл ул ошо йылға буйлап шат күңелле, сая һәм ҡыйыу

туристар төркөмө менән һалда төшкәйне. Ҡайсаҡ төнөн дә ағалар, өҫкә ауырҙай булып ултырған шомло текә ярҙар янынан үтәләр. Бындай урындарҙа иң ҡыйыу егеттәр ҙә шымая, баштарын артҡа ташлап меңйәшәр ҡаяларға текәлә лә уйға сума. Ғәжәп серле һәм ҡурҡыныс ине ул ҡаялар.

Тап ошо урында улар данлыҡлы боронғо мәмерйәне ҡарау өсөн бер көнгә ялға туҡтағайны. Ул саҡта мәмерйәне бөгөнгө ише һаҡламайҙар ине, һәм туристар ҡаршылыҡһыҙ инеп, ҡараңғы, дымлы тау өңөн иркенләп байҡап сыҡҡайнылар.

Ринат мәмерйә стеналарында көслө фонарҙар яҡтыһында шәйләнгән һүрәттәргә битараф ҡалды. Шуға ла ул иң беренсе булып мәмерйәнән сыҡты ла палаткалары торған йылға буйына төштө. Байтаҡ ваҡыт үтеп, барыһы ла килеп еткәс, ул күптән дуҫлашып йөрөгән һәм ошо поход тап уның өсөн ойошторолған ҡыҙ менән бәхәскә инде.

– Һүрәттәрҙе ҡатын-ҡыҙ ҡулы төшөргән,– тине ҡыҙ бик инанған рәүештә.

– Бисә, тимәк, авторы?– тип аптыраны Ринат,– һин инде бигерәк...

Ринат ул саҡта төҙөлөштә ташсы булып эшләй ине, йәш ине, ғорур ине, хәбәренә йыш ҡына жаргон һүҙҙәр ҡыҫтырып ебәреүҙе ғәҙәти хәл тип иҫәпләй ине.

– Эйе, ул һүрәттәрҙең авторы, һинеңсә әйтһәк, бисә кеше булған,– тип яуапланы ҡыҙ һалҡын ғына, – ҡатын-ҡыҙ затынан.

Саҡ ҡына өҫкә кәксәйеп торған, эйәһенә һауалыраҡ төҫ биргән нәфис танаулы, ҡабарынҡы иренле һәм көслө ҡуллы ҡыҙ ине был. Ҡулдарын терһәгенә тиклем курткаһының тәрән кеҫәһенә тығып йөрөргә ғәҙәтләнгән. Походта ул ҡурҡыуҙың һәм арыуҙың ни икәнен дә белмәй, шул уҡ ваҡытта көндәлек тормошта ифрат үҙ һүҙле һәм тиҫкәре. Быҡын сәбәбе, бәлки, марафондалыр, тип уйлай Ринат аптырап, сөнки ул ҡыҙ спорттың был ауыр төрөн, ниңәлер, ныҡ ярата ине.

– Боронғо заманда ул томана наҙан йән эйәһе нисек картина яҙа алһын?– тип өҫтәне Ринат.

– Йән эйәһе тиһеңме?– Ҡыҙ уның һүҙҙәрен мыҫҡыллы ғына ҡабатланы ла: – Ҡатын-ҡыҙ борон, һин әйткәнсә, томана наҙан йән эйәһе булмаған,– тип ҡаршы төштө.– Ул ирҙәр менән тиң булған, ҡайсаҡ социаль статусы буйынса юғарыраҡ та торған, белгең килһә.

– Бөгөнгө һымаҡмы?

– Бөгөн ҡатын-ҡыҙ ирҙәр менән ҡағыҙҙа ғына тиң. Ә бында,– ул һуҡ бармағы менән Ринаттың киң маңлайын төйҙө,– тигеҙлек тураһында уй юҡ. Булмаҫ та, ахыры.

– Бәлки, барҙыр, һин ҡайҙан беләһең минең баштағы уйҙарҙы?

– Ҡуй, Ринат. Әгәр һин ҡатын-ҡыҙ тураһында яҡшы фекерҙә булһаң, уларҙы “бисә” тип кәмһетергә телең әйләнмәҫ ине.

– Ошо һүрәттәрҙе тәүтормош осоронда йәшәгән ҡатын-ҡыҙ төшөрә буламы?– тип кенә ҡабатлап һораны Ринат. Уның был һөймәлекле танау менән бер ҙә араларын боҙғоһо килмәй ине. – Ирҙәрҙән уҙып нисек күтәрелә алһын ти ул?

– Һаман үҙенекен тылҡый,– тип ярһыны ҡыҙ. – Уға ниңә көсләшеп күтәрелергә? Уны бит тәбиғәт үҙе үк бейеккә күтәреп ҡуйған. Әгәр ҙә ул саҡтағы таш күңелле ир-ат үҙҙәренең бисәләрен артабан да тыңлап йәшәгән булһа, мин дә мин тип күкрәк һуҡмаһа, бөгөн ерҙәге тормош күпкә яҡшыраҡ, ғәҙелерәк, камилыраҡ, тынысыраҡ булыр ине. Күпме кеше ғүмерен ҡыйыусы һуғыш та булмаҫ ине.

– Ризыҡ табыусы ир-ат булған бит,– тип дауам итте Ринат. Уның да бәхәс

ҡомары уянғайны. – Шуға ла ир-атҡа социаль статус буйынса өй түрендә урын талап ителгән.

– Ә ниңә ғаилә усағын һүндермәү, бала тәрбиәләү ҡорһаҡ ихтыяжынан түбән торорға тейеш әле ул? Ашарға табыусы, имеш. Бөгөнгө балалар әсәй наҙын күрмәй урамда, баҡсала, интернатта үҫә, шунан аҙаҡ, ниңә былар беҙ теләгәнсә яҡшы булып үҫмәне һуң, тип аптырайбыҙ.

Ринат ҡыҙҙы тормош тәжрибәһе етмәүҙә ғәйепләп, бармаҡтарын бөгә-һанай, йәнәһе лә, замана балалары бына тигән, уларҙы һис әрләргә кәрәкмәй, тип үҙе лә һиҙмәҫтән ҡыҙыу бәхәскә инеп китте. Алдында күңеленә яҡын әлеге лә баяғы һөймәлекле танаулы ҡыҙ баҫып торғанын бөтөнләй онотто. Ә ҡыҙ, ғәҙәтенсә, ике ҡулын да терһәктәренә тиклем куртка кеҫәләренә тыҡҡан килеш, Ринат ҡыҙған һайын ирештереп көлдө генә. Уға, филфактың өсөнсө курсында уҡыған ҡыҙға, эшсе егетте һүҙ бәхәсендә еңеүе ҡыйын түгел ине. Кәйефе тамам ҡырылып, үпкәләп, егет тора-бара нағышлы-биҙәкле оҙон һөйләмдәр менән яуаплай башланы, йәнәһе, университетта уҡымаһа ла, ул да төшөп ҡалғандарҙан түгел. Әммә һөйләгән хәбәренең, һорау-яуабының тоҙо барыбер ҙә шул уҡ нәмәгә килә лә төртөлә: бисә – ни әйтһәң дә бисә инде, уның менән һөйләшеү – ваҡыт ҡына әрәм итеү.

Бына бер мәл ҡыҙ киҫкен хәрәкәттәр менән палатканан рюкзагын һөйрәп сығарҙы ла арҡаһына артмаҡланы һәм асыулы ҡиәфәт менән өҫкә табан, юлға ҡарай атлап китеп барҙы. Ышаныслы аҙымдар менән бара ине ул. Яйлап ярһыуы баҫыла төшкән Ринат үрләскә, зәңгәр офоҡҡа тоташырҙай булып уҡталған зәңгәр курткалы ҡыҙға оҙаҡ ҡарап ҡалды. Боролмаға инеп юғалғансы. Үпкәләтте шул уны Ринат.

Йылы, сағыу ҡояшлы ошо көндә киҫкен аҙымдар менән йыраҡлаша барған әлеге үҙ һүҙле сая ҡыҙҙың ике йылдан үҙенең ҡатыны буласағын Ринат белмәй ине әле.

Йылғаның һалҡын һыуы Ринаттың тәнен яҙылдырып ебәрҙе. Ярға сығып, дымлы яҫмаҡ ташҡа баҫты. Таштың сит-ситтәрен һыу меңәр йылдар буйы йыуып тигеҙләп-шымартып бөткән, шунлыҡтан ялан аяҡ уның шыма өҫтөндә тороуы ла ҡыйын, аяҡ тайып бара. Хозур тәбиғәткә һоҡланып бер аҙ ҡарап торғас, үҙенең палаткаһына ҡарай атланы. Был тирәлә үлән бейек, урыны-урыны менән яурынға етә. Палатка янында малай менән ҡыҙыҡай ултыра. Ринат уларҙы ауылға ризыҡ артынан барғанында лавка болдоронда күргәйне. Былар уның транзисторлы приемнигын тыңлайҙар. Әйтерһең дә, өйҙәренә ҡайтҡандар ҙа иркенләп ултыралар.

– Радионы ҡабыҙырға һеҙгә кем рөхсәт итте?– тип һораны Ринат ҡәнәғәтһеҙ генә.

– Һаумыһығыҙ!– тиеште балалар яуап урынына.

Бына һиңә кәрәкһә, ул иҫәнләшмәне, ә былар иҫәнләшә! Малай һеңлеһенә асыулы ҡараны ла:

– Мин һиңә, кеше әйберенә тейергә ярамай, тип әйттем бит,– тип шыбырҙаны.

– Әле генә ебәрҙем дәһә,– тип аҡланды ҡыҙ. – Боҙолмаҫ... Ағай, беҙ бүтән ебәрмәбеҙ радиоғыҙҙы.

– Ярар,– тип көлдө Ринат.– Улайһа, әйҙә, танышайыҡ. Мине Ринат ағай тиҙәр, ә һеҙ кемдәр булаһығыҙ?

– Мин – Зөлфиә, – тип яуапланы ҡыҙ йәһәт кенә, ағаһынан алдараҡ өлгөрҙө.

– Ғафар,– тине малай, олпат күренергә тырышып.

Ҡыҙсыҡ Ринатҡа йылмайып ҡарай ине. Кейгән күлдәге ябай ғына ситса, ҡат-ҡат йыуыуға төҫөн юйып бөткән. Малайҙың өҫтөндә – джинсы туҡыманан тегелгән килешле салбар, әммә ҡыҫҡа күлдәге матур салбарынан сығып өҫкә күтәрелеп тора, һәм малай уны әленән-әле ҡайыш аҫтына тыҡҡыслап маҙалана.

– Ә һеҙ беҙҙә нишләйһегеҙ?– тип һораны ҡыҙсыҡ.

– Тын алам,– тип яуапланы Ринат.

– Ҡалала тын алмай ғына йәшәйһегеҙме ни?– Ҡыҙсыҡтың ҙур ҡара күҙҙәре мут йылмайҙы.

– Мин ҡалала кәрәк саҡта ғына тын алам, ә бында ләззәтләнәм.

– Тағы ни эшләйһегеҙ?– Ҡыҙыҡай ҡапыл үҙенең ялан аяҡтарынан оялды ла ағаһының артына йәшеренә һалды.

– Тауҙарға ҡарайым, уйланам,– тип етди яуапланы Ринат.

– Ул да ләззәтме?

– Эйе, ул да ләззәт. Мин быға тиклем отпускымды әлегеләй яҡшы үткәргәнем юҡ ине,– ул балаларҙы йәнә бер күҙҙән үткәрҙе лә һораны: – Һеҙҙең атай, әсәйегеҙ ҡайҙа? Улар өйҙән былай йыраҡ китергә рөхсәт иттеме һуң?

Малай ҡашын йыйырҙы ла өндәшмәне, ҡыҙыҡай икеләнеп кенә ағаһына ҡараны:

– Беҙҙең атай балниста,– тине, тәрән көрһөнөп өҫтәне:– Дауалана.

– Ауырып киттеме ни? Ә-ә, аңлашыла,– тине һуҙып ҡына Ринат.– Насар атай... булып сығамы инде, улайһа?

– Юҡ, беҙҙең атай – яҡшы атай,– тип яуапланы ҡыҙыҡай, бәхәскә урын ҡалдырмаҫлыҡ итеп.

– Дауаланғас, яҡшы атай була тиме?– тине малай ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына.

–Яҡшы булғаны өсөн дауалана,– тине ҡыҙ. –Ул трактор йөрөттө, кешеләргә утын, бесән килтерҙе, баҡсаларын һөрҙө. Ә кешеләр уға араҡы эсерҙе, араҡы эскәнгә атай ауырыны.

– Ә әсәйегеҙ?– тип һораны Ринат, һағайып.

– Әсәйем дә һәйбәт,– тип яуапланы ҡыҙыҡай, уйлап та тормай.– Ул эсә, өйгә һирәк ҡайта, атай юҡлыҡҡа ҡайғыра. Атай, һауығып сыҡҡас, дауаланырға әсәйҙе ебәрәсәк.

– Эскәс, өйгә ҡайтмағас, ул нисек яҡшы булһын?– тип һеңлеһенә ҡаршы төштө малай.– Беҙҙе ашатмай. Ҡулына аҡса эләгеү менән лавкаға бара ла араҡы ала, сдачаға ике кәнфит бирәләр... Беҙгә үҫергә кәрәк. Тамаҡ туймағас, нисек үҫәһең?

– Дөрөҫ түгел!– тип ағаһын бүлде ҡыҙыҡай. – Беҙ туйғансы ашайбыҙ. Әсәй картуф ултырта, ул йыл әйләнәһенә етә. Ике кәзәбеҙ бар, һөтөн һауып эсәбеҙ. Беҙ туҡ, Ринат ағай.

– Ә бына айыу, һинеңсә, яҡшымы?– Ринат ҡыҙҙы ҡеүәтләп йылмайҙы.

– Яҡшы,– тип килеште ҡыҙыҡай.– Кешеләргә теймәй, уны ҡыйырһытырға кәрәкмәй. Әйҙә, үҙенең еләктәрен, балын ашап йөрөһөн, балыҡ тотһон.

– Үткән йыл колхоз умарталығын туҙҙырҙы,– тип хәтеренә төшөрҙө малай.

– Умарталыҡҡа керергә ярамағанлығын ул ҡайҙан белһен?– тип аптыраны ҡыҙыҡай. – Айыу ҙа бәләкәй балалар кеүек: йәшерелгән шәрбәтте табып ашамайынса туҡтамай.

– Ә бүреләр? Улар ҙа яҡшымы?– Ринат ҡыҙыҡһынып ҡыҙыҡайға ҡараны.

– Улар уҫал,– Ҡыҙыҡай бер аҙ уйланып торҙо.– Мин барыбер уларҙы йәлләйем. Бүреләрҙе үлтерәләр, балаларын да ҡыҙғанып тормайҙар. Бөтә ерҙә кешеләр булғас, улар ҡайҙа йәшәргә тейеш? Уларға ла ашарға кәрәк.

– Ҙурайғас, һин шулай уҡ яҡшы кеше буласаҡһыңмы?– тип һораны Ринат.

– Эйе,– тине ҡыҙсыҡ, – мин ныҡ яҡшы кеше буласаҡмын. Мәктәпте бөткәс, эшләйәсәкмен. Ҙур кешегә яҡшы булыуы еңелерәк.

– Ҡайҙа эшләргә теләйһең?

– Магазинда. Магазинға килгән һәр бәләкәй балаға бушлай бирәр кәнфит бирәсәкмен. Земфира апай шулайта. Ул беҙгә гел бирәр кәнфит бирә. Ғафар ояла, алмай. Мин уның кәнфитен дә алам, шунан магазиндан сыҡҡас бирәм.

– Ашаймы һуң?

– Ашай,– Зөлфиә кинәнеп көлдө.– Беҙ икебеҙ ҙә тәмлене яратабыҙ.

*Дарь-е бәләкәй энеһе менән һеңлекәшенең кәмәлә ҡаяташҡа яҡынлашҡанын күр[1] ауыҙынан ҡарап тора. Унда, әлеге ҡаяташта, иртәле-кисле, төнө буйы һыу урғыла, ҡайнай, ашҡына, унда һыу хужаһы – хужо йәшәй, тиҙәр.*

*Балалар ҡаяташҡа етте лә ирендәрен һыуға терәп ҡысҡыра, һөрәнләй башланы. Улар хужонан әсәләрен кире биреүен һораны. Әсәләре ярҙа тәмле тамырҙар йыя ине, тайып китеп, һыуға йығылып төштө лә сыға алманы – хужо уны үҙенә алды. Хужо һыуға батҡан кешенең мәйетен гел ҡәбиләгә ҡайтарып бирә торғайны, ә әсәләренекен бирмәне. Ә балалар, әгәр хужо теләһә, уларға әсәләрен тере килеш ҡайтарып бирәсәк, тип уйлайҙар ине.*

*Түңәрәк һары ҡояш үҙенең өйөнә ҡайтырға юлланғас, балалар һыуға ҡыҙҙырылған ит киҫәктәре ташланы ла:*

*– Бөйөк хужо, беҙгә әсәйебеҙҙе кире бир. Беҙгә унһыҙ ҡыйын,– тип ҡысҡырҙы.*

*Ҡаяташ аҫтындағы һыу шомло тулҡынды, әммә өндәшмәне.*

*– Итте аҙ алып килдек, ул ҡәнәғәт түгел, ул асыулы... Әйҙә, бөгөн ашамайыҡ та иртәгә күберәк алып киләйек,– тине малай һеңлекәшенә.*

*Ҡояш тауҙар араһына йоҡларға төшөп китте, балалар кәмәләрен ҡайтыу яғына борҙо.*

*Дарь-еның атаһы ла бар. Ул ҡырҡ тапҡыр йәшел, йылы һәм туҡлыҡлы йәйҙе, ҡырҡ тапҡыр һыуыҡ ҡышты ҡаршылаған һәм оҙатҡан. Атаһы ниндәйҙер мөғжизә арҡаһында ғына был йәшенә етә алған һәм бөгөн кемдәр менән бергә тәпәй баҫҡанын да, усаҡҡа кемдәр менән ҡоро-һары ташлағанын да, ҡайһы тиҫтерҙәре менән һунарсылыҡ иткәнен дә күптән оноҡҡан инде. Уларҙы, тиҫтерҙәренең күбеһен, барлыҡ һыу, ер, тауҙар, урмандар батшаһы – Бөйөк хужо күптән үҙенә алып бөттө. Иптәштәренең береһен һыу хужоһы малай көйө генә алды, икенсеһен носорог һөҙөп үлтерҙе, өсөнсөһөн мамонт тапаны, байтаҡтары аслыҡтан, ауырыуҙан ҡырылды. Ҡышҡы усаҡ янында астан үлгән иң һуңғы тиҫтере Дарь-еның атаһына былай тине: “Тештәрем булһа, таштарҙы ла кимерер инем”.*

*Дарь-еның ҡарт атаһы ҡояштай сағыу буяуҙар яһай белә. Йәйенке таш өҫтөндә йыртҡыс ҡанын һалып йылыта ла уға төрлө үлән, тау тупрағы өҫтәп бутай.*

*Рәгу-е уны мәмерйәләр буйлап йөрөтә һәм ҡәбилә тамғаларын ҡайһы таштарға төшөрөргә кәрәклеген күрһәтә. Рәгу-е йылы йәйҙе утыҙ биш тапҡыр ҡаршы алған һәм оҙатҡан. Йәш сағында унан ҡәбилә хужоһы шөрләй торғайны. Рәгу-е таяҡ менән йыртҡыс тиреһе уралған ағас киҫәген туҡмай һәм бар хужолар менән дә ҡурҡмай һөйләшә, аслыҡ килһә, йылға буйына төшә, ҡысҡыра, һөрәнләй, бубу-е барабанын ҡаға, Бөйөк хужоға мөрәжәғәт итә. Хәҙер Рәгу-е ла ҡарт инде, аяҡтарын да көскә йөрөтә, ҡәбилә хужоһы уға итте лә әҙ бирә.*

*– Һыу хужоһы миңә асыулы,– тип зарлана Рәгу-е Дарь-еның ҡартайған атаһына,– ул һинең ҡатыныңды үҙенә алды, ә һинең ҡатының тилбер хужабикә ине. Ул мине рәнйетмәй торғайны, ҡорһағым гел туҡ йөрөнө.*

---

[1]*Күр – мәмерйә. –* ***Ш. Х.***

*Дарь-еның атаһының ҡыҙыл төҫтәге тамъалары ҡәбиләне яусыл һәм уҫал ҡәбиләләрҙән һаҡланы, әммә ҡарт барыбер итте әҙ алды. Ҡәбиләнең яңы хужоһы көслө, таһыллы һунарсы ине, әлеге яусыл ҡәбиләләрҙән һис ҡурҡманы.*

*Атаһының ҙур таштаръа ҡанлы һүрәттәр төшөрөүен Дарь-е ҡарап торҙо. Тамъа-һүрәттәр уъа оҡшай. Ул осло таяҡ алды ла, осон буяуъа манып, атаһына ярҙамлашты.*

*– Яҡшымы?– тип һорай атаһы.*

*– Яҡшы түгел,– тип яуаплай Дарь-е.– Һыу менән һыуыҡ уларҙы юйып, юҡҡа сыъарасаҡ. Ә мин бик күп ҡыштар үтһә лә был һүрәттәрҙең нисек тә һаҡланыуын теләйем.*

*– Уларҙың һаҡланыуы һиңә нимәгә кәрәк?– тип һораны ҡартайъан атаһы.– Һине ҡараңъылыҡ хужоһы барыбер үҙенә аласаҡ бит.*

*– Белмәйем,– тине Дарь-е.– Әммә шулай булыуын теләйем.*

Ҡояш йылға аръяғындағы тауҙар түбәһенә барып терәлде лә, тәгәрәп батырға кәрәклеген онотҡандай, туҡтап ҡалды, әйтерһең, көн оҙоно туплаған йылыһын тотош биреп бөтөрөргә теләне. Түбәндән, йылғанан, тулҡын-тулҡын булып һалҡын тыны күтәрелә башланы. Ринат утҡа йәнә бер нисә ботаҡ ташланы ла котелокты Ғафарға һондо.

– Шишмәнән һыу алып мен әле.

Малай һуҡмаҡ буйлап елдереп аҫҡа төшөп китте. Зөлфиә күлдәгенең итәген тубыҡтарынан аҫҡа ололарса тартып ҡуйҙы ла көрһөнөп:

– Ғафар атай-әсәйҙе яратмай, үҫкәс бөтәһе өсөн дә уларҙан үс аласаҡмын, ти,– тине.

– Бәлки, ул дөрөҫ әйтәлер?– тине Ринат һаҡ ҡына.

– Ғафар – насар малай,– тип ҡаршы төштө Зөлфиә.– Ул атай менән әсәйҙең ауырыу икәнен белә бит. Ауырыу икән – дауаланырға кәрәк. Атай дауалана инде, ҡайтҡас, әсәйҙе балнисҡа ебәрәсәк. Беҙ йәнә бергә йәшәйәсәкбеҙ.

“Таяҡ менән дауаларға кәрәк атайыңды,– тип уйланы Ринат.– Башындағы иҫәрлеге өс сеанстан һуң сығыр ине”.

– Зөлфиә, һин йәлләүсән ҡыҙыҡай, әммә шуны ла бел: ҡайһы бер кешеләрҙе йәлләргә кәрәкмәй, был уларҙы боҙа ғына.

Ҡыҙыҡай маңлайын йыйырҙы – яуап эҙләне шикелле. Ринаттың әйткәндәре, билдәле, уға оҡшаманы. Был хәленән уны ағаһы ҡотҡарҙы – һыулы котелок тотоп йүгереп тигәндәй менеп тә етте.

– Эсегеҙ. Шул тиклем һалҡын, теште ҡамаштыра.

Ринат эсеп ҡараны, һыу, ысынлап та, тәмле һәм теште зәңкетерлек һалҡын ине.

*Дарь-е алдан бара һәм факел менән юлды яҡтырта. Уның артынан ҡарт атаһы атлай, үҙе ҡото осоп бейек таш стеналаръа ҡарай.*

*– Был мәмерйәләрҙә уҫал хужолар йәшеренеп яталыр әле,– тине ҡарт Дарь-еъа, тирә-яъына ҡаранып байтаҡ килгәс,– һин уларъа ҡамасауламаһаң яҡшыраҡ булыр ине, улым. Асыуланыуҙары бар бит.*

*Ниһайәт, Дарь-е атлауынан туҡтаны, факелын баш осона күтәрҙе лә бейек, киң мәмерйәне байҡаны.*

*– Бына ошонда яһайым тамъаларҙы,– тине ул үҙ-үҙенә һәм атаһына. Бәхәсләшмәҫлек итеп өҙөп әйтте.*

*– Ҡәбиләгә һунарсылар кәрәк,– тине ҡарт атаһы.– Хужо һине һунаръа йөрөтмәй тотмаҫ.*

*– Һин унан ҡурҡаһыңмы?– тип ҡыҙыҡһынды Дарь-е.*

*– Бөтәһе лә ҡурҡа. Көслө һунарсылар ҙа уның менән һуҡмаҡта осраша ҡалһа, уға тештәрен күрһәтергә[1] мәжбүр була. Ул ҡатын-ҡыҙҙан табышты бүлеү вазифаһын тартып алды, усаҡ янында барыһына ла итте хәҙер үҙе өлөшкә бүлеп ултыра.*

*Дарь-е уны өндәшмәй генә тыңланы. Эйе, һунарҙан һуң дөйөм табышты әүәле ҡатын-ҡыҙ бүлә һәм ҡәбиләләге бер кемде лә ҡыйырһытмаҫҡа тырыша торғайны. Хәҙер был эште хужо үҙенә алды, һөҙөмтәлә йыш ҡына ҡайһы берәүҙәргә ит киҫәге урынына үҙенең йөнтәҫ ҙур йоҙроғон һоноп ҡуя. Бындай осраҡта һин уның йоҙроғон яларға тейеш булаһың. Быны аңлап-төшөнөп етмәгәндәргә сут-ое[2] эләгә. Бер ваҡыт Дарь-е ла хужонан яза алды – әлеге ҙур йөнтәҫ йоҙроҡ уны иҫәнгерәтә һуҡты, башын, гүйә, ҡапыл ут ялмап алғандай тойолдо.*

*– Тамға-рәсемдәрҙе мин ошонда ҡалдырырға теләйем,– тине Дарь-е.– Хужо миңә ҡамасаулай икән, мин үҙем хужо буласаҡмын.*

*– Хужо һинән ғәйрәтлерәк тә, таһыллыраҡ та,– тип ҡурҡып китте ҡарт атаһы. – Әммә һинең башың уның башынан көслөрәк.*

*– Тик уны нисек еңергә? – тип һораны Дарь-е.*

*– Һин хужо булырға теләйһеңме? – Ҡарт атай хәүефләнеп тирә-яғына ҡаранды.*

*– Эйе, теләйем,– тине Дарь-е ҡаты итеп.*

*– Был һиңә нимәгә кәрәк?*

*– Кәрәк. Миңә был рәсем-тамғаларҙы ҡуйырға бер кем дә ҡамасауламаҫҡа тейеш.*

*Ҡарт атай оҙаҡ итеп йылға өҫтөнә текәлеп торҙо. Ә йылға арғығындағы ҡара урманда ишле һәм көслө курми-е ҡәбиләһе кешеләре йәшәй.*

*– Ныҡлап уйла, – тине ул, ниһайәт. – Хужоны һин кешеләрҙең тамағын туйҙырһаң һәм урман баҫҡынсыларынан һаҡлай алһаң ғына еңергә мөмкинһең.*

... Ринаттың кәкре бысаҡ менән нисек итеп консерва банкаһын асыуын, ундағы итте һыуы ҡайнап торған котелокка бушатыуын балалар ҡыҙыҡһынып ҡарап торҙо.

– Һеҙ икәүләп бер һауыттан ашарһығыҙ,– Ринат балаларға аш һалды, ҡалаҡ, берәр телем икмәк тотторҙо.

– Ә һеҙ?– тип һораны ҡыҙсыҡ.

– Ҡурҡма, мин үҙемде онотмам,– Ринат үҙенә ашты тимер көрөшкәгә һалып алды ла сәй ҡалағы менән ашарға тотондо.

Былар барыһы ла ҡыҙыҡайға мәрәкә күренде, ахыры: үҙе бер аҙ ашап, сеүәтәне ағаһына тапшырғас рәхәтләнеп көлдө.

Ринат сәй ҡалағы менән ашауҙан ялҡты һәм әҙәп һаҡлап ултырыуын ташланы ла ашын күтәреп һемерҙе лә ҡуйҙы. Күҙ ҡырыйы менән генә шуны күрҙе: балалар сеүәтә төбөндәге ашты һуңғы тамсыларына тиклем икмәк менән һыпырып ашап ҡуйҙылар. Башына, бәй, былар бит ас, тигән уй килде. Һәм ул котелокты элгән таяҡтан ысҡындырып алып, ҡалған ашты сеүәтәгә ҡойҙо. Малайҙың күҙҙәре ялтлап китте, ҡалаҡҡа тотондо, ә ҡыҙыҡай ризыҡҡа бүтән ҡағылманы – әллә ағайым ашаһын тине, әллә туйғайны.

---

*[1]теш күрһәтеү — хәҙерге Ағиҙел йылғаһының үрге ағымында йәшәүсе тәүтормош ҡәбиләләрендәге ихтирам һәм баш эйеү билдәһе. Артабанғы эволюция теш күрһәтеүҙе йылмайыуға әйләндергән. — **Ш. Х.***

*[2]сут-ое — яза. Уның формалары төрлөсә булған, әйтәйек, танауға сиртеүҙән алып үлтереүгә тиклем. — **Ш. Х.***

– Ә һеҙ иртәгә иртәнсәк нимә ашарһығыҙ һуң?– тип һораны ул.

– Иртәнсәк сәй ҡайнатам,– тип яуапланы Ринат. – Аш иртәгәгә тиклем барыбер әсей.

Хәйер, ул иртәгәһен ҡояш ҡалҡҡансы уҡ тороп, ҡалған ашты күмерҙә йылытып ашап, йылғаға балыҡ ҡармаҡларға төшөргә ниәтләнгәйне. Ҡыҙыҡай уға ышанды, тартынып ҡына ҡалағын ҡулына алды һәм ағаһына ҡушылып ашарға кереште. Аш сеүәтәнең төбөндә генә ҡалғас, малай һуңғы ҡабымды ҡалағына ҡойҙо ла, бер аҙ икеләнеп торғандан һуң, һеңлеһенә һондо.

Ринат быны күрмәмешкә һалышты. Уға нисектер ҡыйын булып китте.

*Дарь-е балыҡ тоторға әүәҫ, оҫта ине. Шунлыҡтан хужо уны ул көндө балыҡҡа ебәрҙе. Үҙе һунарсылар менән урманға китте, әммә табышҡа өмөтө юҡ – йыртҡыс сос, уяу хәҙер.*

*Ҡустыһы менән һеңлекәше ағас олонон соҡоп яһалған кәмәнең башында тора һәм һырғый ҡолғалар ярҙамында кәмәне шаршыла тоторға тырыша. Дарь-е, осона осло таш бәйләнгән оҙон һөңгөнө һелтәүгә әҙер тотоп, кәмәнең осона баҫҡан. Бер аҙҙан һыуҙа балыҡ күләгәһе шәйләнде. Дарь-е киҙәнеп һөңгөһөн сәнсте һәм йылан һымаҡ борғоланған ҙур балыҡты таяҡ осона ҡаҙап сығарҙы. Балалар шатлыҡтан ҡысҡырып уҡ ебәрҙе.*

*– Һөңгөнө миңә бир әле, мин дә һелтәп ҡарайым,– тине ҡустыһы дәртләнеп. Әммә малай, һыуға күпме генә төртһә лә, бер балыҡты ла сәнсә алманы.*

*– Һиңә үҫергә, күп нәмәгә өйрәнергә кәрәк әле,– тине Дарь-е, һөңгөһөн ҡустыһынан кире алып.*

*Кискә тиклем Дарь-е байтаҡ балыҡ сәнсеп алды, әммә тотош ҡәбилә өсөн был ғына аҙ. Балыҡ сәнсеү күп көс түгеүҙе талап итә, һәм Дарь-е арығанлыҡтан көн аҙағына аяғында саҡ баҫып тора ине.*

*Ә урманға киткән һунарсылар буш ҡул менән әйләнеп ҡайтты. Ҡатын-ҡыҙ Дарь-е тотҡан балыҡты ҙур яҫмаҡ таштар өҫтөндә ҡыҙҙырҙы. Ҡәбилә хужоһы һыу хужоһының бүләген ҡәбиләнең бөтә ағзаларына бүлде, ә Дарь-еға, оҙаҡ ҡына уйланып торғандан һуң, балыҡ башын һурырға бирҙе, Дарь-е уны ҡустыһына һондо. Малай әсәһе үлгәндән һуң яй үҫә ине, ашау етмәй, күрәһең. Әммә хужо Дарь-еның был ҡылығын өнәмәне, балыҡ башын малайҙың ҡулынан тартып алды ла асыуланып һыуға ташланы.*

*– Ирҙәр күп ашарға тейеш,– тине ул, асыуланып,– шул саҡта ғына беҙҙең балыҡ та, ит тә буласаҡ.*

Ринат шәрбәт какаоны көрөшкәләргә бүлеп ҡойҙо ла балалар алдына ултыртты. Малай менән ҡыҙыҡай ауыҙҙарын бешерә-бешерә тәүҙә берәр йотом йотто, унан өрөргә керештеләр, йәнә уртланылар һәм бер-береһенә, унан Ринатҡа аптырышып ҡаранылар.

– Ринат ағай, ҡайһылай тәмле. Нимә ул?– тип осондо ҡыҙсыҡ.

– Какао. Бер ҡасан да эсеп ҡарағанығыҙ юҡмы ни?

– Юҡ,– тип башын ҡаҡты ҡыҙсыҡ һәм йәнә эсе көрөшкәгә йәбеште. – Уф, тәмле, эйеме, Ғафар...

– Эйе, – тип килеште Ғафар һеңлеһе менән, көрөшкәнән айырыла алмай.– Мин быны көнө буйы эсә алыр инем.

Ринат уларҙың көрөшкәләрен икенсегә тултырҙы, тегеләр быны ла эсеп бөткәс, ризыҡ әрәм булырға тейеш түгел, тине лә ҡалғанын да өләшеп ҡуйҙы. Балалар нисектер ҡабаланмай, олпат итеп ултырҙы – ҡунаҡтар бит! Улар һыйланған арала Ринат шишмәнән һыу килтерҙе. Балалар, һый ләззәтен һуҙып,

бәләкәй йотомдар менән һаман какао эсә ине әле. Ҡәнәғәт һәм туҡ балаларҙың арығанлыҡтары күренеп тора, йоҡолары килә, шуға ла Ринат бер ҡосаҡ йәш үлән йолҡоп килтерҙе лә палатка эсенә индереп йәйҙе.

– Инеп ятығыҙ. Иртәгә иртәнсәк ҡайтырһығыҙ.

Малай йоҡомһорауын нисек тә еңергә, бирешмәҫкә тырыша ине, ә ҡыҙыҡай башын ағаһының яурынына терәү менән ултырған килеш йоҡлап китте. Ринат берсә йәлләп, берсә күңеле тулып йоҡлаған ҡыҙыҡайға ҡарап торҙо ла һаҡ ҡына күтәреп алып – ә ул еп-еңел, ауырлығы ла һиҙелмәй – палаткаға индерҙе. Өҫтөнә курткаһын япты, шунан, түҙә алмай, бармаҡ остары менән баланың маңлайын, яңаҡтарын һыйпаны. Ҡыҙсыҡ бер мәлгә генә уянды ла уның ҡулын тотоп алды, тәрән итеп көрһөндө һәм Ринаттың ҡулын ҡыҫҡан килеш кире ойоп китте. Малай ҙа һеңлеһе эргәһенә инеп ятты.

Ҡояш күптән йылға аръяғына батҡайны инде. Аҫтан аҡ томан быуҙары күтәрелә һәм ағастар, ҡыуаҡлыҡтар араһына тарала, туғайлыҡҡа һарыла. Тауҙа олғаша алмаған бейек көмбәҙҙәге яҡтылыҡта тәүге йондоҙ ҡабына. Тирә-йүн шул ҡәҙәре һил, бер тауыш юҡ, әйтерһең дә, был донъяла улар өсәү генә: ул һәм тәрән йоҡоға талған ике бала. Ринат йоҡо тоғона төрөндө лә усаҡтағы ялҡынһыҙ ғына баҙлаған алһыу торомбаштарға текәлде.

*Йылъа ҡәбиләһе сыбыҡ-сабыҡ, йәш үлән йәйеп ярҙа йоҡланы. Йәш һунарсылар ҡаҡ ергә һибелеште, хужо кәмә аҫтына һыйынды.*

*Дарь-е усаҡ янына урынлашты ла ҡаты уйҙарға сумды, унда йоҡо ҡайғыһы юҡ ине. Уның бер яҡ ҡабырғаһына атаһы һыйынды, икенсе яҡлап – балалар. Дарь-е уларҙың өҫтөнә йөнө ҡойолоп бөткән тире япты. Шым ғына ятты, ҡуҙғалманы, әйтерһең дә, йыртҡыс хайуанды һағалап көткән һунарсы. Башына ҙур уй, бик тә кәрәкле фекер килә сәген самалай ине ул.*

*“Балыҡ – яҡшы ризыҡ, ҡәбиләнең төп аҙыҡтарының береһе,– тип уйлана ул, көткән ҙур фекере башына йәһәтерәк килһен өсөн еңел-елпе уйҙарын осороп, – ул кешене тешләмәй, тапамай, уны бала-сағa ла, ҡарттар ҙа, хатта әбейҙәр ҙә ҡурҡмай тота алыр ине, әммә осло һөңгөнө һыуға ташларға уларҙың көстәре һәм оһоло етмәй. Әгәр һыуҙағы балыҡты мамонтты йәки носорогты аулаған һымаҡ үлтермәй, ә бала ҡулы менән ҡортто йәки күбәләкте тотҡан кеүек тере көйө тотҡанда? Бала бит күбәләккә ҡулын һуҙып тора ла, килеп ҡунғас, усын йома ла ҡуя, мәхлүкте шулай хәйләкәр эләктерә. Һ-м-м... Ҙур ус һымаҡ нәмә яһап һыуға һалып ҡарағанда? Балыҡ шуға йөҙөп килеп кергәс, ус ябылһын да ҡуйһын. Ул ус еңел булырға һәм килеп кергән балыҡты кире сығармаҫҡа ла тейеш. Тик ул усты, “мур”ҙы, нимәнән эшләргә һуң?*

*Йүнләп йоҡлай алмаһа ла, иртүк уянды Дарь-е, һикереп торҙо ла йылғаға йүгерҙе. Яр ситендәге нескә тал ботаҡтарын һындырып алып, “мур” үрҙе һәм, үҙ асышына үҙе ышанмай, эшенә байтаҡ ҡарап ултырҙы.*

*– Дарь-е, нимә ул?– тип һораны бейек ярға килеп баҫҡан хужо, шунан әйелә биреп уның ҡулындағы сәйер нәмәгә текәлде.*

*– Былмы? Был... – Дарь-е уны нимә тип атарға белмәй тотлоҡто.– Был талдан үрелгән ҡоролма-ус. “Мур-ҙа”.*

*– Мурҙа?– тип аптыраны хужо.– Нимә ул “мур-ҙа”? Эй, ташла һин ул иҫәрлегеңде, һунарға йыйын. Халыҡ ашарға теләй. Өсөнсө көн инде ас ятабыҙ.*

*– Бөгөн мин балыҡ тотам. Кем күпме теләй, шунса ашаясаҡ. Күп итеп тотам!*

*– Ярай, ҡарап ҡарарбыҙ,– хужо ризаһыҙ ғына килеште. Уның Дарь-еға ышанмағаны тауышынан һиҙелә,– мин туймаһам, кисен һине яза көтә. Бел шуны.*

*Дарь-е кәмәне һыуға этеп төшөрҙө. Өҫтән ҡустыһы менән һеңлекәше сабышып төштөләр – ҡайһы арала уянғандар, уның бындалығын ҡайҙа белгәндәр, тиң.*

*– Беҙ асыҡтыҡ,– тине улар бер тауыштан.*

*– Саҡ ҡына сабыр итегеҙ. Кискә мин һеҙгә туйғансы балыҡ ашатырмын.*

*Улар өсәүләп йәшәгән мәмерйәләренән алыҫҡа йөҙөп китте. Дарь-е ишкәкте ҡустыһына бирҙе, үҙе мурҙаны һыуға төшөрҙө. Оҙаҡламай тәрән һыу ҡатламы аша ике ҙур балыҡтың мурҙа янына килеп, уны төрлө яҡлап өйрәнә-тикшерә торғас, этешә-төртөшә эскә ингәндәрен күреп торҙо.*

*– Тартығыҙ!– тип бойорҙо Дарь-е балаларға. Тегеләр йәнлек тиреһенән үрелгән бауҙы өҫкә тартыуға мурҙа һыуҙан килеп сыҡты. Мурҙа эсендә ике ҙур балыҡ бәргеләнә ине. Малай аптырап мурҙаға текәлде, ҡыуанысынан ҡысҡырып уҡ ебәрҙе, унан мурҙаның сыбыҡтарын айырғылап, балыҡты кәмә төбөнә ҡойҙо.*

*Улар мурҙаны һыуға күп тапҡырҙар ташланы һәм, эсенә балыҡ ингәс, кәмәгә тартып мендерҙе. Киске яҡҡа кәмә балыҡ менән тула яҙҙы.*

*– Ағай, һин йылға хужаһы,– тине арыған малай, ишкәкка тотоноп кәмәне ҡайтыр яҡҡа борғас.– Ана, күпме балыҡ тоттоң. Быға тиклем бер кем дә былай тота алғаны юҡ ине.*

*– Шым,– тип тыйҙы уны Дарь-е,– һине йылға хужаһы ишетеүе бар. Ишетер ҙә асыуланыр һәм беҙҙе йылғаға батырыр.*

*Һунарсылар был юлы ла буш ҡул ҡайтҡан. Улар ас һәм асыулы. Әммә ҡәбилә туҡтаған урын һунарсыларҙы ҡыҙҙырылған балыҡ еҫе менән ҡаршы алды. Ҡарттар ҙур-ҙур ут-усаҡтар яҡты, ҡатын-ҡыҙ ҙур яҫмаҡ таштар өҫтөндә балыҡ ҡыҙҙырҙы. Балыҡ күп ине. Хужо тәүҙә ғәжәпләнде, ышанманы, балыҡты күргәс, йөҙө яҡтырҙы һәм оло ҡәнәғәтлек менән таш өҫтәл артына ултырҙы ла ризыҡты тарата башланы.*

*– Һин яҡшы балыҡсы,– тине ул, ниһайәт, Дарь-еға,– һин мурҙа уйлап таптың, хәҙер беҙ туҡ буласаҡбыҙ.*

*– Эйе, мин оҫта балыҡсы, тик һин, хужо, минең ҡарт атайға балыҡ бирергә оноттоң.*

*– Ул ҡартайған инде,– тип ҡаршы төштө хужо. – Уға балыҡтың башы менән һөйәктәре лә еткән, тартынмаһын, беҙҙең алдан йыйып алһын да ашаһын.*

*– Минең атайға йылы балыҡ бир!– тине Дарь-е тыныс, әммә тауышын күтәреберәк.– Һин мине ишетәһеңме, хужо?*

*Хужо янындағы һөңгөһөн алып Дарь-еға ташланыуҙан саҡ тыйылып ҡалды. Бөтә ҡәбилә халҡының балыҡсыға ихтирамлы ҡарашын шәйләгәс кенә, ниәтенән һүрелде. Юҡһа, яҙаның иң ҡатыһын бирә ине. Шулай ҙа Дарь-еның ҡарт атаһына бер балыҡ ырғытырға мәжбүр булды.*

Ринат усаҡтың сағыу торомбаштарына ҡарап ята һәм һис йоҡлай алмай. Ахырҙа йоҡо тоғонан сыҡты, кедыларын кейеп, яурынына штормовкаһын һалды ла йылғаға төштө. Яр буйында һалҡынса, дымлы. Һыу эреле-ваҡлы таштар өҫтөнән шуҡ һикерә, шаулай һәм түбәнгә атлыға. Йылға өҫтөнә шомло булып тау шәүләһе төшкән.

“Кеше үҙенең үҫеш эволюцияһында тәбиғәттең төрлө ҡаршылыҡтарын еңеп һаҡланып ҡалған, үрсегән һәм төр булараҡ бөгөн дә йәшәп ята,– тип уйланы Ринат.– Ә ҡеүәтле, көслө, ҙур мамонт, мәҫәлән, ер йөҙөнән юҡ булған. Был нимә, ер тарихындағы оло бер ғәҙелһеҙлекме, әллә тәбиғи процесмы?– Ул эйелде лә аяҡ аҫтынан ҙур ғына йомро таш алып, бар көсөнә йылғаға бәрҙе. Оҙаҡ ҡына

тынлыҡтан һуң йылға өҫтөндә тоноҡ һирпелеү тауышы ишетелде.– Әгәр ҙә бынан меңәр-меңәр йылдар әүәл йәшәгән таш быуаттың бер генийы ҡәбиләләштәренең аңламауынан яфаланып беҙгә, бөгөнгө кешеләргә, билдә-тамға рәүешендә үҙенең сәләмен ебәргән булһа? Һәм ошо сәләм, һыуға ырғытылған әлеге таш һирпелеүе һымаҡ, кеше аҡылына барып етһә? Мин тауышты ишеттем. Ә ул? Ә ул, беҙҙең боронғо ата-баба, сәләмен ебәргәндә нимәгә ышанған, нимәгә өмөт иткән икән һуң?”

*Мамонтҡа һуңғы һунар уңышһыҙ осланды. Ҙур һәм ифрат көслө хайуан, – күрәһең, өйөр хужоһы тура килгәндер: ике йәш һунарсыны тапаны, ағастан ҡорольан һаҡлағыс ҡаршылыҡты туҙҙырҙы, шунан йылғаға төшөп, оҙаҡ итеп һыу эсте, һыуһынын ҡандырғас, яй ғына атлап үрге туғайлыҡҡа менеп китте.*

*Ул көн балалар ҡысҡырышманы, ололар мыжыманы. Ҡәбилә мәйеттәрҙе тауға мендерҙе лә таш менән күмде. Ҡатын-ҡыҙ шунда ҡалып оҙаҡ ыңғырашты, иланы, ҡулдарын тешләне, йөҙҙәрен тырнаны. Хужо кешеләр араһында башын эйеп йөрөнө, йәш һунарсылар уға асыҡтан-асыҡ уҫал итеп ҡараны, өҫтәүенә ах-фиш-е[1] түбәнгә китте, шунлыҡтан ҡәбилә асыҡты.*

*– Һеҙ етеҙерәк ҡыланманығыҙ,– тип асыуланды хужо йәш һунарсыларға.– Мамонт һеҙҙе фурл-е[2] кеүек ҡыуып таратты ла ҡуйҙы. Ә һин, Дарь-е, иң беренсе булып ҡастың.*

*Дарь-е хужоға табан атланы.*

*– Мамонт иң тәүҙә миңә ташланды,– тине ул асыу менән. – Сөнки мин уға беренсе булып һөңгө сөйҙөм. Ә ни өсөн һин шым ғына иң артта торҙоң? Урман хужоһынан ҡурҡтыңмы?*

*– Мин ҡурҡтыммы?– тип ҡысҡырып ебәрҙе лә хужо ауыр суҡмарын күтәрҙе.*

*– Һуҡ!– тине Дарь-е,– һиңә ике мәйет әҙме? Һуҡ!*

*– Юҡ инде,– хужо суҡмарын төшөрҙө. Дарь-еның һүҙҙәре уға ныҡ тәьҫир иткәйне, әйтерһең дә, маңлайына һөңгө ҡаҙанылар. – Һунарсылар былай ҙа аҙ. Мин һиңә язаны аҙаҡ бирермен. Уңайы сыҡҡас.*

*Хужо сигенде лә, йылыраҡ таш һайлап, шуға сүгәләне. Ул өшөһә йәки һунарсыларға ҡысҡырһа, биле ауырта башлай, шуға ла билен йылытырға тырыша.*

*– Кешеләр ас, иртәгә урман хужоһы йәнә һыуға барасаҡ,– тине ул һунарсыларға,– уға шунда һөжүм итергә кәрәк. Дарь-е, һин уны нисек үлтерергә кәрәклеген уйла. Уйларға һинең бер төнөң бар.*

*Дарь-е ҡарт атаһы эргәһенә китте. Атаһы ут янында ята һәм үҙенең ҙур мәмерйәһенә инеп барыусы ҡояшты күҙәтә ине. Ҡарт йәш сағында, ҡояш икәү, тип уйлай торғайны. Береһе күк йөҙөндә йөрөгән арала икенсеһе йоҡлап ял итә, шунан икенсе яҡтағы мәмерйәнән килеп сыға. Рагу-е, ул саҡта көслө ир, уны ошо уй-фекере өсөн саҡ ҡараңғылыҡ хужоһына ебәрмәне. Шунан ары ҡарт ике ҡояш тураһындағы хәбәрен бер кемгә лә һөйләмәне.*

*– Һин ныҡ асһыңмы, атай?– тип һораны Дарь-е.*

*– Ас тип, нишләйһең, балыҡ йылға тамағына эркелде, мамонт һунарсыларҙы тапаны. Түҙергә генә ҡала. Миңә, улым, хәҙер ризыҡ әллә ни кәрәк тә түгел. Ҡояш йылыһы ла етә. Бутәнсә уның ҡайнар сағын күрмәмдер, ахыры, ҡышын ҡараңғылыҡ хужоһына китермен.*

*– Ҡабаланма, атай, ҡараңғылыҡ хужоһына,– тине Дарь-е,– һин миңә*

---

[1] *Ах-фиш-е — бөгөнгө уҡ балыҡ, сөгә (стерлядь) балығының атаһы. Ағиҙел йылғаһының үрге тамағындағы башҡа балыҡты боронғо ҡәбиләләр “вакти-е” тип йөрөткән. —* ***Ш. Х.***

[2] *фурл-е — бала-саға. —* ***Ш. Х.***

*кәрәкһең әле. Мин ҡәбиләне туйындырырға һәм үҙемдең тамға-һүрәттәрҙе төшөрөп ҡалдырырға тейешмен. Был эштә һинең ярҙамың кәрәк.*

*– Ниәтең изге,– тине ҡарт.*

*– Мамонттың йылғаға барыу юлын быуып, һуҡмаҡҡа йыуан ағастар өйәбеҙ. Ҡаршылыҡҡа осрағас, ул кире боролорға мәжбүр буласаҡ. Тимәк, сигенер юлына ла кәртә һалырға кәрәк. Ул саҡта мамонтҡа мурҙа килеп сыға. Шулаймы?*

*– Шулай түгел, улым. Мамонт бит балыҡ түгел.*

*– Улайһа, нишләргә?*

*– Уйла. Һинең башың эшләй. Һиңә көслө һунарсылар тештәрен күрһәтә. Киләсәктә һин хужо буласаҡһың.*

*Дарь-е төнөн йоҡламаны. Ул сыбыҡ-сабыҡ өҫтөндә тәрән уйҙарға сумып төндөң йомро һалҡын айына ҡарап тик ятты. Иртәнсәк иртүк һикереп торҙо ла бар ҡәбиләне һөрәнләп, тормағандарын типкесләп уятып сыҡты. Хужо үҙенең соҡоронда иҫ белмәй йоҡлай ине. Дарь-е аяҡ осо менән уның арҡаһына төрттө.*

*– Хо-о!– тип ҡурҡып уянды хужо. Ул, мамонт ҡыуып еткән дә уға тояғы менән баҫҡан, имеш, тип төш күреп ята ине. – Дарь-е, һин күп балыҡ тоттоңмо?– тип һораны ул, бер аҙҙан аңына килеп.*

*– Мин мамонт өсөн мурҙа уйлап таптым,– тип яуапланы Дарь-е.– Бөгөн беҙ туйғансы ит ашаясаҡбыҙ.*

... Ғафар менән Зөлфиә иртәгәһенә көнө буйы килмәне. Уларҙың юҡлығына борсола башлаған Ринат палатканың ауыҙын кәптерҙе лә ауылға йүнәлде. Лавкалағы кешеләрҙән ул балаларҙың ҡайҙа йәшәгәнлеген һорашты – йылға арьяғындағы өйгә күрһәттеләр.

Ринат йылға аша һалынған күпер аша сыҡты ла күрһәтелгән өй ҡапҡаһы алдына килеп туҡталды. Йорт эре ҡарағай бүрәнәләрҙән буралып, бейек һәм күркәм ине. Башы ҡалай менән ябылған. Тәҙрәләрҙең йөҙлөгө биҙәкләп-семәрләп эшләнгән. Хужаларҙың өйҙө оҙаҡ йылдарға тоҫмаллап, үҙҙәренә генә түгел, балаларына, ейән-ейәнсәрҙәренә лә етерлек итеп һалғанлыҡтары күренеп тора.

Балалар баҡсала булаша ине. Ғафар картуф ҡаҙа, Зөлфиә сүпләй.

– Бына һеҙ ҡайҙа икән!– тине Ринат, улар янына килеп.

Балалар аптырашты.

– Беҙҙе нисек таптығыҙ?– тине күҙҙәре маңлайына менгән Ғафар.

– Кешегә тел нимә өсөн бирелгән?– Ринат тула яҙған биҙрәгә ҡараны.– Был ҡәҙәре картуфты нишләтәһегеҙ?

– Һеҙгә алып барырға йыйынғайныҡ,– тине Зөлфиә.– Һуған да йолҡорға ине, тауыҡтар алты йомортҡа һалған.

Ринат биҙрәне алды ла өйгә йүнәлде. Балалар, эштәрен ташлап, уның артынан эйәрҙе. Өй эсе ауыр тәьҫир ҡалдырҙы. Ҙур бүлмә уртаһында – бер аяғы һынған, йышылмаған таҡталар һалынған өҫтәл, тупаҫ, арлы-бирле генә эшләнгән бер нисә ултырғыс. Мөйөштә – һалам тултырылған матрас ырғытылған һике, ундағы мендәр тышының байтаҡтан бирле йыуылмағаны күренә.

– Һин ҡайҙа йоҡлайһың?– тип һораны Ринат. Һорағас ҡына һорауының урынһыҙ икәнен аңланы. Малай башын эйҙе. Ринат уның тәғәйен генә йоҡлау урыны булмағанын аңланы. Кухняла өҫтәл бөтөнләй юҡ, ултырғыстар ҙа күренмәй. Бер нисә тимер сеүәтә, алюмин ҡалаҡтар, ҙур бер бысаҡ тәҙрә төбөндә туҙышып ята.

Ринат ошо меҫкен көнкүреште байҡаны, ә үҙе балаларға ҡарамаҫҡа тырышты.

– Йортто атайың үҙе һалдымы?– тип һораны ул малайҙан.

– Үҙе,– тине Ғафар ғорур ғына.– Ул саҡта әҙ эсә ине, әсәй бөтөнләй эсмәй ине. Кистәрен икәүләшеп йырлаша торғайнылар.

– Атай менән әсәйҙең йырлағанын белмәйемсе,– тине ҡыҙ.

– Һин ул саҡта иҙәндә имгәкләп кенә йөрөй инең. Шулай булғас, нисек иҫләйһең?

Ғафар бер ҡулына биҙрә, икенсеһенә алты йомортҡа һалынған тырыз тотоп тышҡа йүнәлде, һәм улар өсәүләп бәләкәй баҡсаға һуған йолҡорға сыҡтылар.

Баҡсаға тултырып картуф сәселгән. Ситән-кәртә буйлап ҡына бер түтәл бейек йәшел һуған үҫә. Ғәжәп, картуф араһында ла, һуған түтәлендә лә бер сүп үләне юҡ.

– Баҡсаны кем ҡарай һуң?– тип һораны Ринат, аптырап.

– Үҙебеҙ,– тип йылмайҙы ҡыҙыҡай.– Беҙ баҡсаны яратабыҙ. Ул беҙҙе ашата.

*Дарь-е ҡәбиләне кисә ике һунарсыны мамонт тапаған урынға алып килде.*

*– Ошонда соҡор ҡаҙығыҙ!– тип бойорҙо ул һәм һөңгө осо менән ҙур ғына майҙанды уратып һыҙып сыҡты.*

*Һунарсылар һөңгөләре менән мамонт йөрөгән һуҡмаҡты соҡорға кереште, уларға таш ҡырғыстары менән ҡарттар ярҙамға килде, ҡатын-ҡыҙ, балалар соҡолған тупраҡты услап һуҡмаҡтан ситкә ташыны. Ҡояш нурҙары елкәләргә төшкәндә, мамонт өсөн мәмерйә әҙер ине.*

*– Был – мамонт өсөн мурҙа,– тине Дарь-е.*

*– Мамонт унда төшөрмө һуң?– тип икеләнде хужо.– Икенсе яҡтан үтеүе лә бар бит.*

*–Ҡаҙа-ҡаҙа беҙҙең хәлдәр бөттө,– тине бер йәш һунарсы, соҡорға ҡарап.– Асыҡтыҡ. Мамонт һинең был мурҙаңды күрер ҙә боролор ҙа китер. Һыуҙы ул икенсе урынға барып эсәсәк.*

*Дарь-е йәш һунарсыны тыңламаны ла – ул соҡор өҫтөнә ағас ботаҡтары һалды, оҙон үлән менән ҡапланы.*

*– Нишләп һин беҙҙең эште йәшерәһең?– тине хужо.*

*Дарь-е һаман үлән йолҡоуын һәм уны ботаҡтар өҫтөнә ташлауын белде. Мурҙа йәшел үлән менән тамам ҡапланғас, ул ҡәбиләнән ҡысҡырып һораны:*

*– Мамонт һыу эсергә ошо һуҡмаҡтан барамы?*

*Халыҡ өндәшмәне. Дарь-е хужоның күкрәгенә усы менән һуғырға мәжбүр булды.*

*– Һин – мамонт, ти, һыу эсергә теләйһең, ти, бар, төш йылғаға, ә беҙ һинең арттан барабыҙ.*

*Күкрәген киреп, хужо мамонт һуҡмағынан атланы. Бер нисә аҙым яһап соҡор өҫтөнә менеүе булды, ботаҡ һынды ла хужо соҡорға осто.*

*– Хужо ҡайҙа булды? – Дарь-е тирә-яғына ҡаранды, аптыраған ҡиәфәттә устарын боттарына һуҡты.– Күрҙегеҙме уны?*

*– Хо-о! — Соҡорҙан ҡысҡырҙы хужо.— Мине ҡараңғылыҡ хужоһы үҙенә алды. Бында ҡараңғы, һыуыҡ. Дарь-е, ҡотҡар, сығар мине бынан.*

*Дарь-е ике ботаҡты ситкә алып, һөңгөһөн аҫҡа ҡаҙаны, һәм хужо шуның буйлап өҫкә күтәрелде.*

*– Хо-о! – тине хужо, яҡтыға сағылған күҙҙәрен йомғолап. – Яҡшы мурҙа уйлап тапҡан беҙҙең Дарь-е. Беҙ бөгөн ит ашаясаҡбыҙ, былай булғас.*

*– Ҡояш өйөнә ҡайта,– тине Дарь-е. – Минең янда хужо менән һунарсылар ғына ҡалһын, башҡалар йылға буйынан ҙур таштар ташығыҙ.*

*Ташты әллә ни күп ташып өлгөрә алманылар, өҫтән, туғай яғынан, мамонттың үкергәне ишетелде. Ул, күрәһең, туйғансы ашаған һәм хәҙер йылғаға һыу эсергә төшөп килә. Һунарсылар йәһәт кенә һуҡмаҡтың ике яғына, ҡыуаҡлыҡтар артына йәшеренде. Үҙҙәре, бойороҡ көтөп, Дарь-еға баҡты.*

*Мамонт ауыр баҫып, яй ғына мурҙа эргәһенәрәк етте лә башын эйҙе, ағас һайғауҙар, ботаҡтар өҫтөндә ятҡан йәшел үләнде еҫкәне, шунан баҡырып ебәрҙе. Нимәлер оҡшаманы, ахыры, нимәнәндер шикләнде. Улай ҙа йылға яғына бер-ике аҙым атланы, атлауы булды, ағас һайғауҙар шартлап һынды, һәм ауыр кәүҙәле хайуан дөбөр-шатыр соҡорға ҡоланы. Мурҙанан арҡаһы менән ап-аҡ һуҡҡы тештәре генә күренә ине.*

*— О-ло-ло!– тип һөрәнләне Дарь-е, мамонт соҡорға төшөү менән, һәм таш тотоп һуҡмаҡҡа йүгереп сыҡты. Ташты ике ҡуллап баш осона күтәрҙе лә йыртҡыстың маңлайына тоҫҡап бәреп тә ебәрҙе. Уның артынан ташты хужо, башҡа һунарсылар ташларға кереште, хайуандың арҡаһына бихисап һөңгөләр осто. Мамонт башын сайҡап үкерҙе, ҡараңғы мурҙанан сығырға маташты, әммә сығыу әмәле юҡ ине уға. Оҙаҡламай бер күҙе һытылды, ауыҙ-моронон ҡан ҡапланы, хәрәкәттәре яйланды, тауышы баҫылды. Йәш һунарсылар таш ташлауын, һөңгө сөйөүен дауам итте, әммә Дарь-е уларҙы туҡтатты.*

*– Етте, булды. Мамонт ҡараңғылыҡҡа китте. Барығыҙ, кешеләрҙе саҡырығыҙ.*

*Мамонттың үле кәүҙәһен бер яҡлап талдан ишелгән бауҙар менән тартып, икенсе яҡлап һайғауҙар менән эткеләп бөтә ҡәбилә менән саҡ һөйрәп сығарҙылар, төн уртаһына тиклем уны тунап, итен, тиреһен мәмерйәгә ташынылар. Хайуандың бауырын хужо тигеҙ өлөштәргә бүлеп, тәүге киҫәкте Дарь-еға һондо. Һунарсылар иткә туйҙы һәм Дарь-еға ҡарап тештәрен күрһәтте. Хужоға уларҙың был ҡылығы оҡшаманы – уның ҡапыл биле ауырта башланы, ашау ҡайғыһы китте.*

*Бауырҙы эйгәс, һунарсылар мамонтты тотоу өсөн ҡаҙылған мурҙаны “соҡор” тип атарға хәл итте.*

*Ҡояш көндән-көн һүңыраҡ сыға һәм түңәрәк күк буйлап әҙерәк йөрөй. Кешеләр бер-береһе менән бик аралашмай, йәш һунарсылар ҙа бергә бигүк йыйылмай, ҡыҙҙарға тештәрен күрһәтмәй. Хужо, йылға ярындағы соҡорға төшөп, барыһынан да йәшеренеп ятты. Ут янына сыҡҡанда кешеләр унан ҡурҡыр булды. Быңдай асыулы мәле уның йылына бер була. Ҡәбиләнең ашарына бар, асыҡмайҙар. Әммә барыһы ла белә: оҙаҡламай урман ҡәбиләләре киләсәк тә уларҙың ҡышҡылыҡҡа әҙерләгән аҙыҡ сырсаларының яртыһын алып китәсәк. Улар йыл һайын килә һәм киптерелгән балыҡты, ыҫланған итте, туҡлыҡлы тамырҙарҙы кәрзиндәргә тултырып алып китә тора.*

*– Быйыл ҡыш йәнә ризыҡҡа ҡытлыҡ буласаҡ,– тине атаһы Дарь-еға,– ҡараңғылыҡ эйәһе ҡәбиләнең ҡартын да, йәштәрен дә күпләп үҙенә аласаҡ. Улым, урман кешеләренә ҡаршы берәй суго-е уйлап тап, юҡһа уларҙан күпме ҡыйырһытылып йәшәргә була? Уйлап тапһаң, һин беҙҙең хужо буласаҡһың.*

*Дарь-е мәңгелек ҡараңғылыҡҡа киткәндәрҙе илтеп өҫтәренә таш өйгән бейек тау башына менде лә өс көн, ике төн шунда уйланып ултырҙы. Атаһы уға ашарға килтерә лә, улына ҡамасауламаҫ өсөн, шундуҡ китә. Өс көн үткәс, Дарь-е тауҙан төштө лә хужоға:*

*– Мин урман кешеләрен туҡтатырлыҡ ҙур суго-е уйлап таптым. Ҡәбиләне йый, аңлатырға теләйешмен,– тине.*

*Хужо ҡәбиләне йыйҙы, һәм Дарь-е урман кешеләренең бөлдөргөс талауынан ҡотолоу өсөн ҡорған хәйләһен һөйләп бирҙе.*

Ринат котелок тултырып яңы картуф бешерҙе, йоҡа ғына итеп һуған тураны ла балаларҙы үҙ янына ултыртты.

– Бөгөн беҙҙә батшалар ғына ашай торған төшкө аш,– тине ул тантаналы рәүештә һәм Зөлфиәгә күҙ ҡыҫты.– Какао ла була. Вәт.

Әммә балалар ниңәлер бигүк тамшанып ашаманы, ҡапҡыланылар ҙа йылғаға һыу инергә йүгерҙеләр, Ринат йәшел үләнгә һуйлайҙы. Әммә, күҙен йомһа ла, серемгә китә алманы. Бер мәл күҙен асһа, ҡырында төҫө уңған күлдәк, таушалған туфли кейгән ҡатын баҫып тора. Ҡулында бөтәрләнеп бөткән косынка ла бар. Йәш күренә, хатта һөйкөмлө, әммә йөҙөнә, муйынына, күҙ тирәһенә сырыштар ятҡан, ирендәрендә – ғәйепле йылмайыу ишараты.

Ринат ҡалҡынды, тубыҡ сәнсеп ултырҙы һәм һағайып ҡатынға баҡты – нимә эшләп йөрөй был?

– Минең исемем Фәйрүзә,– тине ул ҡыйыуһыҙ ғына.

Ринат өндәшмәне, ҡатын йәнә исемен ҡабатланы, күрәһең, ишетмәне, тип уйланы.

– Ринат,– тип көттөрөп кенә яуапланы ир.

Фәйрүзә аяҡ аҫтына ҡаранды: баҫып торорғамы, әллә ултырырғамы, ултырһам ҡайҙа, нисек ултырырға, тип аптырай ине шикелле, шунан үләнгә сүгәләне.

Аҫта балалар сыр-сыу килә. Ғафар сума ла яр сите ҡырсынында баҫып торған һеңлеһенә ҡарай йөҙә. Уныһы әсе итеп сыйылдай, сырылдай, көлә, устары менән һыуға сәпелдәтә, ағаһына һыу сәсрәтә. Малай, һеңлеһе янына йөҙөп килеп еткәс, ҡапыл һыу аҫтынан ҡалҡып сыға ла кинәнеп көлә.

–Минең балалар,– тине ҡатын нисектер ғәҙәти генә.– Мин уларҙы бик һирәк күрәм,– көрһөндө, шунан ҡайҙалыр ситкә ҡараны.

– Уларҙы йышыраҡ күрергә һеҙгә нимә ҡамасаулай һуң?– тине Ринат, уның күҙҙәренә тура ҡарап.

– Беләһегеҙме... – Ҡатын йәнә ауыр көрһөндө.— Мин сирле, ваҡыт-ваҡыт больницаға барып врачҡа күренеп торорға кәрәк, шуға ла районға йыш йөрөргә тура килә. Балалар йәл, мин үлеп-маҙар китһәм, улар кемгә хәжәт?

Ринат йәнә ҡатындың күҙҙәренә ҡараны. Ҡатын уның ҡарашын күтәрҙе. Ғәжәп, Ринат тулҡынланған, асыуланған һайын, ҡатын ышаныслыраҡ, етдиерәк, тынысыраҡ була барҙы.

– Ирегеҙ һеҙ сирләгән шул уҡ сир менән ыҙаланамы?

– Һеҙ нимә! – Ҡатын көлгәндәй итте. – Минем ирем – алкоголик, ҡалала больницала дауаланып ята.

– Ҡайҙа эшләйһегеҙ?

– Мин фельдшер, тик сирем эшләргә мөмкинлек бирмәй.

– Улайһа, ниңә һеҙгә инвалидлыҡ буйынса пенсия түләмәйҙәр?

– Беләһегеҙме...

– Ә үҙегеҙ беләһегеҙме балаларығыҙҙың ас йөрөгәнен? – Ринат асыуҙан кипкән ирендәрен яланы.– Районға киткәндә ниңә ашарға ҡалдырмайһығыҙ? Уларҙың үҫкән сағы, йәш организмға ризыҡ кәрәк, витамин кәрәк.

Ҡатын ҡараштарын ергә текәне, ҡулындағы косынкаһын бөтәрләне, яурындары һелкенде. Ринат, ҡатыраҡ әйттем, ахыры, тип уйлап, хәлде төҙәтергә ашыҡты:

– Ғәфү итегеҙ... Һеҙ бит ҡатын кеше, һеҙ әсә, һеҙ...

Ҡатын башын күтәрҙе, һәм Ринат уның күҙҙәренең ҡоро икәнен күреп шаҡ ҡатты. Тимәк, иламаған, уның һүҙҙәре бөтөнләй ҙә тәьҫир итмәгән, ә ул ғәфү үтенеп торған була! Яурындары көлөүҙән һелкенә, имеш.

– Беҙҙең Мөғәллимов тигән уҡытыусы була торғайны. Директор ҙа ине үҙе. Шул беҙгә сығарылыш кисәһендә былай ти: һеҙ хәҙер гражданка булдығыҙ,

һеҙгә киң юл асыҡ, фермаға булһынмы, ҡалағамы, кейәүгәме – үҙегеҙ хәл итегеҙ, йәнәһе,– ҡатындың йәнә яурындары һелкенде.

– Юҡ-бар һөйләп ултырмағыҙ,– тине Ринат, тамам асыуы килеп. Ул аңлайышһыҙ был кеше менән артабан да һөйләшеүе мәғәнәһеҙ, бушҡа икәненә төшөндө. – Минең янға нимә тип килдегеҙ? Минән һеҙгә ни кәрәк?

Ҡатын көскә тынысланды.

– Зинһар өсөн, әрләмәгеҙ. Эйе, мин насар әсәй, ә бына күршеләрем һәйбәт. Балаларҙы улар ҡарай, ашата, күҙ-колаҡ була. Уларға ҡасан да булһа хаҡын түләйәсәкмен. Бына дауаланып бөтәм дә…

– Минән һеҙгә нимә кәрәк?– тине Ринат ҡабатлап.

– Миңәме? Миңә...– Ҡатын Ринатҡа һынсыл ҡараны. – Мин балаларҙы күрергә килдем. Унан... бәләкәй генә үтенесем дә бар.

– Һеҙҙең икенсе килеүегеҙгә тиклем балаларҙы ҡарап торайыммы?– тип көлдө Ринат.– Ярар, мин бында тағы аҙна тирәһе булам әле. Борсолмағыҙ улар өсөн.

– Рәхмәт, – ҡатын ҡалҡынырға йыйынды. – Минең һеҙгә икенсе үтенесем бар. Миңә тиҙ арала районға барырға кәрәк. Больницаға. Һүҙ йәшәү йәки үлем хаҡында бара. Аңлайһығыҙмы?

– Бик тә аңлайым. Күпме кәрәк?

– Миңә юллыҡ ҡына. Теге яҡҡа – был яҡҡа. Биш һум.

Ринат кесәһенә тығылды.

– Бына унлыҡ. Тик хәҙер үк китегеҙ. Балаларҙың күңелен яраламағыҙ. Аҡса юлға кәрәк, тип алдашмағыҙ. Һеҙ бит попуткалар менән бараһығыҙ. Һеҙҙән кем аҡса һораһын?

Ҡатын тубыҡланған көйө аҡсаны алды ла шытырҙатып усына ҡыҫты, йөҙө шундуҡ ҡырыҫланды.

– Ярай, ул тиклем дә шаулама,– тине ул, нисектер тупаҫ, хатта ерәнгес итеп.– Ҡара һин уны! Тыныслан, хәҙер үк китәм.

Ул еңел генә аяғына баҫты ла көслө һәм һығылмалы аҙымдар менән юлға ҡарай атланы. “Балаларына әйләнеп тә ҡараманы, үҙе, уларҙы күрергә килдем, ти бит әле. Әйтерең бармы, ҡасандыр сибәр ҡыҙ булғандыр. Хәҙер ҙә төҫ ташламаған, ана, атлап барышы нисегерәк. Хәйер, миңә уныһы нимәгә?..”

*Улар иртүк килде, ҡояш менән бергә. Ыҫыҡ та кибеп өлгөрмәгәйне әле. Урман кешеләре һөнгөләре менән һелтәнә һәм ҡысҡыра-һөрәнләй, файду-е[1] килтереүҙе талап итә.*

*Хужо уларъа өҫтән, шунда көтөп торогоҙ, сырсаны йыябыҙ ҙа хәҙер килтереп еткерәбеҙ, тип яуапланы. Ә был ваҡытта мәмерйә алдында Дарь-е ҡартайъан атаһы менән һунарсыларҙың йөҙҙәрен, күкрәктәрен саъыу буяуҙар менән буяй ине. Рәгу-е ҡатындаръа ла, ирҙәргә лә аъас туҡмаҡ, тире тарттырылъан барабандар тарата.*

*– Ныъыраҡ һуъыъыҙ!– тип бойора Дарь-е.– Бар көсөгөҙгә ҡысҡырыъыҙ. Тауыш шәберәк сыҡһын.*

*Урман кешеләре үлән өҫтөнә таралышып ултыръан да файду-е килтергәндәрен көтә. Һәм ҡапыл улар өҫтөнә өҫ-баштары ҡанъа буялъан, йыртҡыс хайуандар кеүек үкерешкән, аҡырышҡан кешеләр төшә башламаһынмы! Унан да бигерәк эстәренә бәйләнгән бубу-елары оло тауыш сыъара.*

*– Һыу кешеләре таш аҫтарынан үҙҙәренең мәйеттәрен сыъаръан!– тип*

[1]*Файду-е — тәүтормош ҡоролошонда һалымдың бер төрө. –* ***Ш. Х.***

*ҡысҡырып ебәрҙе урман хужоһы, быңдай мәхшәрҙе күргәс. – Улар күп, һо-ой, ниндәй күп.*

*Өҫтән “канъа батҡан” ҡурҡыныс йылъа кешеләренең яңынан-яңы төркөмдәре эркелешеп төшә торҙо, төшә торҙо. Ҡарттар, әбейҙәр, бала-саъа ине былары. Бубу-еларының шомло тауышы тамам ҡоттары алынъан урман кешеләрен бөтөнләй һуҡыр яһаны ла ҡуйҙы. Иң ҡыйыу тигән һунарсылары ла аяҡ быуындары ҡалтырап, ҡулынан һөңгөһөн төшөрөп ебәрер хәлгә етте. Шулай ҙа урман кешеләренең хужоһы бер аҙҙан үҙен ҡулъа алды һәм бөтә көсөнә ҡысҡырып ебәрҙе:*

*– Һөңгөләрегеҙҙе йәпләп алыъыҙ!*

*Урман кешеләре һөңгө остарын тырпайтып алъа атланы, әммә йылъа кешеләренең бөтмәҫ көтөүе уларъа ҡаршы аъылды ла аъылды. Иң ҡарт һунарсы хужоъа:*

*– Былар беҙҙең арттан йәшәгән ергә тиклем эйәреп барасаҡ, урмандарыбыҙҙы тәләф итәсәк, ҡатындарыбыҙҙы алып китәсәк, – тип әйтергә мәжбүр булды.*

*— Ух-о-о! – тип ыңъырашты хужо.– Беҙҙе ҡатынһыҙ ҡалдырһалар, беҙ йәш һунарсыларҙы ҡайҙан алырбыҙ? – тине һәм башына тотондо. – Тимәк, был ҡыраъайҙарҙан ҡасыръа кәрәк. Шул саҡта ъына беҙҙең йәшәгән ерҙе таба алмаҫтар. Ҡатындарыбыҙҙы, бөтә ҡәбиләне аяҡтарыбыҙ ъына ҡотҡара ала!*

*Урман кешеләре һөңгөләрен, таяҡтарын, яурындарындаъы тиреләрен ташлап, бөтә көстәренә ҡасыръа тотондо, йылъа ҡәбиләһенең йәш һунарсылары, улар артынан йүгереп ҡараһа ла, ҡыуып етә алманы. Хәйер, етергә тигән маҡсаттары ла юҡ ине. Ҡурҡытып ебәрҙеләр, шул таман.*

– Мөғәллимов Арнольд Хәйерович! – Ҡарт күрешергә оҙон һәм тар усын һуҙҙы.

Иртәнге ҡояш тауҙарҙы, туғайҙы, палатканы һәм тубығынан сумып йәшел үлән араһында баҫып торған ҡартты нурға ҡойондора. Ҡара костюм, ап-аҡ күлдәк һәм сыбар галстук Ринатты аптыратты. Бынау тәбиғәт ҡосағында шундай кейемдә йөрөп ҡара әле! Ул үҙенең ялан аяҡтарына ҡараны ла уңайһыҙланып китте.

– Бындағы мәктәптең элекке директоры,– тип өҫтәне ҡарт.

– Арнольд Хәйерович, тимәк,– Ринат, артабан ни ҡылырға белмәй, аяҡ бармаҡтарын ҡыбырҙатып ҡуйҙы, үҙенең кабинетында ултырғандай хис итеп.– Ултырығыҙ, рәхим итегеҙ! – тине.

Ҡарт тирә-яғына ҡаранды ла йоҡо тоғона сүгәләне. Уның сәсе тап-таҡыр ҡырылған башынан, гүйә, тирә-яҡҡа яҡты һибелә.

– Турисмы?– Ҡәтғи генә һораны Арнольд Хәйерович.

– Турист түгел, сәйәхәт итеүсе отпускник.

– Документтарығыҙ бармы?– Ҡарт һынсыл ҡарашын Ринаттың күҙҙәренә ҡаҙаны.

– Нишләп булмаһын, бар,– Ринат йылмайҙы, сөнки һорауҙы шаярыу һымаҡ ҡабул итте.

– Булғаны яҡшы,– ҡарт башын һелкте.– Һәр эштә тәртип булырға тейеш. Ә бына минең күршеләр тәртип тигәнде белмәй. Бала таптылар ҙа урамға сығарып ташланылар, ә үҙҙәре әллә ҡайҙа йөрөй.

– Һеҙ ниндәй балалар тураһында һөйләйһегеҙ?– Ринат һағайҙы.

– Ғафар менән Зөлфиә тураһында. Беҙ уларҙы иртәнән бирле эҙләйбеҙ. Улар һеҙҙә йәшеренеп ятмаймы?

– Мин уларҙы  кисәнән  бирле күргәнем юҡ. Берәй төрлө ярамаған эш ҡылғандармы әллә?

– Райсобестан килделәр. Өсөнсөгә киләләр инде. Ә улар юҡ. Ваҡыттарын алалар, бензин яндыралар. Тәртипһеҙлек!

– Ниңә ул тиклем ҡабаланырға?– тине Ринат һаҡ ҡына.

– Ниңә ҡабаланмаҫҡа?– Арнольд Хәйерович тирләй ине, әммә пинжәген, ниңәлер, сисмәне. – Балалар яңғыҙ, үҙҙәре ашарға бешерә. Өйҙәрен яндырып ебәрһәләр? Эргәлә генә минең өй.

– Ә башҡа күршеләр нисек уйлай?– Ринат сәйнүгеен ҡыҙыу күмер өҫтөнә ултыртты.

– Уларға нимә,– Арнольд Хәйерович, йәне көйөп, ҡулын һелкте.– Йәлләйҙәр. Минең өй янып китһә, мине кем йәлләр икән?

Ринат көрөшкәгә эҫе сәй ҡойҙо ла ҡунаҡҡа һондо:

– Эсегеҙ. Мәтрүшкә менән.

– Минең үҙемә лә йәл балалар,– Арнольд Хәйерович көрөшкәне ҡулына алды, ҡарашы йомшара төштө. – Беспризорник булып йөрөргә тейеш түгелдәр, закон да бар ҙаһа. Балалар йорттарын, интернаттарҙы, колонияларҙы ни өсөн төҙөйбөҙ һуң? Тимәк, кәрәк, тимәк, тормош шуны талап итә.

– Һеҙ һуғышта булдығыҙмы?– Ринат һүҙҙе икенсе яҡҡа борорға ниәтләне.

– Эйе,– тине пенсионер.– Атышып йөрөмәһәм дә, һуғыш йылдарында ҡулдан винтовка төшмәне. Охранниктар  фронттағы һалдаттар һымаҡ уҡ кәрәк саҡ. Сөнки ул осорҙа тәртип менән закондың баһаһын беләләр ине. Беҙҙең бөтә тормош һыналған ыҙандан барҙы.

– Һеҙҙе уҡыусыларығыҙ яратҡандыр?– Быныһын инде Ринат етди һораны.

– Белмәйем. Уҡыусылар фекере менән ҡыҙыҡһынғаным булманы, – ҡарт көрөшкәнән бер нисә йотом сәй һемерҙе.– Улар мине артымда “баҡыр котелок” тип йөрөттө. Минең дөрөҫ ҡарашым, ҡаҡшамаҫ ныҡ ихтыярым өсөн шулай атағандарҙыр, тип уйлайым.– Арнольд Хәйеровичтың сырайы йәнә яҙылды.– Бер уҡыусым фәнни-тикшеренеү институты директоры булып китте. Бер ауылға ҡайтҡайны, осрашҡас, ошондай хәлде иҫенә төшөрҙө: йәнәһе, дәрестә ул минән, парашютты ниңә ебәктән тегәләр, тип һораған. Мин бит бөтәһен дә белә алмайым, уның һорағанын да хәтерләмәйем, ә ул иҫләй! Ғалим булып алды, ә миңә үпкәһе ҡалған. Етмәһә, һеҙ шул дәрестә ниндәйҙер ваҡ ҡына бер сәбәп табып бәйләндегеҙ ҙә кластан ҡыуып сығарҙығыҙ, ти. Ҡыуғанмын икән, тимәк, шулай кәрәк булған. Бында ебәк парашюттың ни ҡыҫылышы?

— Да-а, ысынлап та... — тине Ринат һуҙып ҡына, директорҙың хәбәрен тыңлап бөткәс. Директор уға йәл булып китте. Ә ул һаман тирләй, ултырған һайын ныҒыраҡ бышлыға, тир бөртөктәре йөҙөн, елкәһен ҡаплай, шулай ҙа үҙенә ҡойған ҡайнар сәйҙе эсеп бөттө, көрөшкәһен аяҡ аҫтына ҡуйҙы.

– Вазифағыҙ буйынса һеҙ кем?

– Элекке ташсы,– тип яуапланы Ринат.– Документтар буйынса – хәҙер архитектор.

Ринат йылмайҙы, әммә ҡарт уның йылмайыуын күрмәне, тырт ҡына ҡалҡынды ла ҡырт ҡына һораны:

– Һеҙ ысынлап та балаларҙы күрмәнегеҙме?

– Бөгөн күрмәнем.

Арнольд Хәйерович аҫҡа төштө лә йылға яры буйлап китеп барҙы.

Ринат палатканың инеү япмаһын асты: Ғафар менән Зөлфиә бер-береһенә һыйынышып мөйөштә ултыра ине.

*Кисен Дарь-е үҙенең ҡәбиләләштәренә ит киҫәктәре таратты. Байтаҡтан бирле туйғансы ашамаған ҡарт-ҡоро, бала-саға лыҡа тулы ашҡаҙан менән йоҡларға ятты. Тәүҙә ҡыйыуһыҙ, шым ғына, унан көслөрәк, ышаныслыраҡ итеп Дарь-ены хужо тип атай башланылар. Иртәгәһен иртәнсәк ул бөгөнгө көндө ял көнө тип иғлан итте. Кешеләр йылға буйына тәмле тамырҙар йыйырға, йәшел үләнгә ятып йоҡларға таралышҡас, Дарь-е ҡарт Рәгу-ены эҙләргә юлланды. Ул тауҙа, мәңгелек ҡараңғылыҡҡа киткәндәрҙең һөйәктәре араһында ултыра, ағас дөмбөр менән тире бубу-еға һуға һәм күккә ҡарап нимәлер һөйләй ине.*

*— Һинең ҡарт ғүмереңде мамонттың ҡалын, йылы тиреһе ҡаплаһын,— тип сәләмләне Дарь-е ҡартты.*

*— Эйе, мин ҡартайҙым инде, – тип көрһөндө Рәгу-е һәм һуғыуҙан туҡтаны.– Кеше хәҙер минән ҡурҡмай. Әле генә иң Бөйөк хужо менән һөйләштем, тик ул мине насар ишетә – сөнки бөгөн күккә күтәрелде, шунда йөрөй – ҡайнар ҡояш аҫтында ҡышҡылыҡҡа йылы йыя.*

*– Ашағың киләме?– тип һораны Дарь-е.*

*– Кисә мин һинең ҡулыңдан туйҙым инде, – Рәгу-е бер аҙ йәнләнә төштө, – тик һаман ашайһым килә.*

*Дарь-е ҡартҡа ҙур ғына ит киҫәге бирҙе. Ҡарт уны эләктерҙе лә ҡабаланып тештәре менән өҙгөләй-йолҡҡолай башланы. Өлөштө йыпырып бөткәс, ул йәш хужоға боролдо ла:*

*– Ҡарт Рәгу-енан һиңә нимә кәрәк? – тип һораны .– Яҡшы һунар ойоштороп өсөн урман хужоһы менән һөйләшеүемде теләйһеңме?*

*Дарь-е баш һелкте.*

*– Рәгу-е, беҙҙең ҡәбилә ҡарттарҙы ҡыйырһыта. Әүәле улар ҙа бит ҡурҡыу белмәҫ һунарсылар ине, хәҙер өлөштәренә ит урынына һөйәктәр генә эләгә. Ҡыш көндәрен ашарға аҙ бирәләр, ҡалдыҡтарҙы ырғыталар ҙа, әйҙә, һеҙҙе төн хужоһы ашатһын, тиҙәр.*

*– Был насар, – тине Рәгу-е уйсан ғына. – Йәш һунарсылар ҡараңғылыҡ хужоһынан ҡурҡмайҙар шул. Ваҡыты еткәс, ул барыбер йәштәрҙе лә үҙенә саҡырасаҡ бит – быға тиклем бирәү ҙә унан ялтанып ҡалғаны юҡ әле.*

*– Һин шул йәштәргә әйт, Рәгу-е, Бөйөк хужоның уларға асыулы булыуын, һеҙ ҡараңғылыҡҡа киткәндә насар ҡылыҡтарығыҙҙы иҫегеҙгә төшөрөр әле, тиң.*

*Рәгу-е ҡул ғына һелтәне.*

*– Йәштәр ҡурҡмаясаҡ барыбер. Унда ҡояш та юҡ, һунар ҙа юҡ.*

*Дарь-е Рәгу-е янына ултырҙы ла күҙҙәренә ҡараны.*

*– Бөйөк хужоның үҙенең ҡояшы, үҙенең мамонттары бар. Ул үҙен тыңлағандарҙы һәм яҡшыларҙы йәш итә ала. Насар ҡылыҡтары булғандарҙы ҡарт көйө ҡалдыра, уларҙы усаҡ янына ла ебәрмәйҙәр, ит тә бирмәйҙәр. Көсһөҙҙәрҙе рәнйеткән йәки ҡәбиләләшен үлтергән кешене Бөйөк хужо көн һайын утҡа тотоп ҡыҙҙыра.*

*— Хо-о! – тип ҡысҡырып ебәрҙе Рәгу-е ҡурҡышынан. – Тере кешене усаҡта ҡыҙҙырамы? Һин ул турала ҡайҙан беләһең?*

*– Беләм,– тип яуапланы Дарь-е.– Бөйөк хужо минең төшөмә килде, үҙенең һүҙҙәрен һиңә тапшырырға ҡушты.*

*– Ә нишләп Бөйөк хужо минең үҙемә килмәне? – тип һораны Рәгу-е.*

*– Төндәрен һин йоҡламайһың бит, ә ул күҙҙәре асыҡ ятҡан кешеләргә килмәй.*

*– Улайһа, нимә эшләргә һуң миңә?*

*– Кешеләргә Бөйөк хужоның һүҙҙәрен әйт. Ә мин һиңә ит бирееп торасаҡмын. Һин ҡәбиләнең иң туҡ кешеһе буласаҡһың.*

Рюкзак яурындарҙы ярайһы уҡ ныҡ баҫа ине. Ринат һуңғы тапҡыр үҙен һыйындырған, йәнен һәм тәнен тынысландырған оло ерҙең бәләкәй генә бер өлөшөн: аҡланды, тау армыттарын, йылғаны күҙенән үткәрҙе лә яй ғына атлап ауылға йүнәлде.

Ғафар менән Зөлфиәнең өйҙәренә етмәҫ элек үк ул асыулы тауыштар ишетте. Ҡапҡа янында күплө машина тора. Күршеләге өйҙәрҙән сыҡҡан кешеләр ике ирҙең йорт ишеген ватып инергә маташҡандарын күҙәтә. Ә уларҙы Ринатҡа таныш пенсионер Мөғәллимов менән күн куртка кейгән йыуан ҡатын дәртләндерә.

Ахырҙа теге икәү күпмелер ваҡытҡа монтировкаларын ергә ташланылар ҙа тәмәке тоҡандырҙылар, ауыр эш араһында ял итергә булдылар. Мөғәллимов ишек алдына килде лә алға эйелеберәк ҡысҡырҙы:

– Ғафар, ас ишекте, киреләнмә. Һеҙҙе ҡалаға алып китеү тураһында райсобестың бойороғо бар. Ә бойороҡҡа буйһонорға кәрәк.

– Китегеҙ! – Соландан малайҙың тоноҡ, әммә асыулы тауышы ишетелде.– Беҙ бер ҡайҙа ла бармайбыҙ.

– Энекәш, ас,– тине күн курткалы ҡатын юха ғына тауыш менән. – Һеҙгә ҡалала һәйбәт буласаҡ. Эйе, бойороҡ булғас, уны үтәргә кәрәк.

– Һеҙҙең бойороғоғоҙ миңә кәрәкмәй, беҙ Зөлфиә менән үҙебеҙҙең өйҙә йәшәргә теләйбеҙ,– тип яуапланы Ғафар тыныс ҡына.

– Имеш, кәрәкмәй,– ҡатын ике иргә бороладо.– Иплəп әйткәнде аңламағас, ватығыҙ.

Ирҙәр монтировкаларын алды ла тағы ишекте ҡайырырға тотондо. Ишек шытырҙаны, яңаҡтан ҡайырылып сыға ла башланы.

– Минең балта бар, керһәгеҙ – үлтерәм!– тип ҡысҡырҙы Ғафар.

Ватыусылар туҡтарға мәжбүр булды. Эстән Зөлфиәнең илағаны ишетелде.

– Балтаңды ташла, Ғафар.

Ринат яурынындағы ауыр рюкзагын ергә ултыртты ла болдорға менде.

– Туҡтағыҙ әле, иптәштәр,– тине ул, ирҙәргә һәм ҡатынға мөрәжәғәт итеп.– Һеҙҙең балаларығыҙ бармы?

– Бар, икәү,– тине аптыраған ҡатын.– Беҙҙең эшкә ҡыҫылмауығыҙҙы үтенәм.

– Егеттәр, туҡтағыҙ әле,– Ринат йәнә ирҙәргә бороладо. – Ул балалар һеҙҙең дошмандарығыҙмы әллә? Бауығыҙ ҡайҙа?

– Нимәгә ул бау?– Ирҙәр аңламаны.

– Нимәгә тип... балаларҙы бәйләргә инде.

– Ике балаға ғына уларҙың көсө етер.–Ҡапҡа төбөндә торған бер ҡатын көтмәгәндә Ринатты хупланы. Бында байтаҡ кеше йыйылып киткәйне. – Өйҙә берәй хулиган ултырһа инде, күптән табандарын ялтыратырҙар ине.

– Беҙҙе машина көтә,– райсобестан килгән йыуан ҡатын Ринатҡа яратмай ҡараны.– Һеҙ беҙгә ҡамасаулап йөрөмәгеҙ, йәме.

– Бар, китеп тор әле. – Ишекте емереүселәрҙең береһе ныҡ ҡына итеп Ринатты ситкә этте. Ринат уның яурынынан тотто ла ихластан:

– Ҡайҙа, балалар менән һөйләшеп ҡарайым, ә? Аңларҙар, асырҙар, бәлки. Ниңә ишек ватырға?– тип үтенде.

Тынлыҡ урынлашты. Ирҙәр ҙә, курткалы ҡатын да, артабан нишләргә һуң, тип баҙабыраҡ ҡалды шикелле. Шунан файҙаланып, Ринат:

– Ғафар, мине индер, һөйләшәйек,– тине.

– Юҡ, индермәйем, Ринат ағай,– тине малай. – Һин дә улар яҡлы.

– Ышанмайһыңмы? Ышанмайһың, тимәк.

Ғафар өндәшмәне.

*Дарь-е тәрән көрһөндө лә бейек һәм шыма стенаны иғтибарлап ҡарай-тикшерә башланы. Ҡабаланмай. Таҙа стена уны ҡурҡыта ла ине. Артында*

*ҡустыһы менән һеңлекәше факел тотоп тора, ҡарт атаһы яҫмаҡ таш өҫтөндә буяуҙар бутай.*

*Йәш хужо яйлай. Ҡайһыһылыр уның яурынына төрттө. Әйләнгәйне, бер ҡыҙ тора. Ул ҡыҙ ҡәбиләлә лә иң етеҙ аяҡлы, уны бер кем дә ҡыуып етә алмай. Бер һунарсы егет уға, йәш хужоға, был шаталаҡ ҡыҙ төнөн янына ятҡырмай, тибешә, тип зарланды ла әле. Яңыраҡ ҡына урман кешеләренә китеп барғандарында, тегеләр көтмәгәндә һөңгөләренә тотонғас, Дарь-е нисектер юғалып ҡалғайны, аҙымын әкренәйтеп һағайғайны, әлеге ҡыҙ шул мәл ҡаршыһында ғына пәйҙә булды ла дошмандарына төртөп күрһәтте. Һәм Дарь-е аңына килде, һөңгөһөн алға һоноп алышҡа ташланды.*

*Аяҡтары оҙон булғанға шәп йүгерә ине ҡыҙ. Дарь-е уны ҡай саҡ күҙәтә, йүгергәнен дә күрә шул ыңғайҙа. Һәм, миңә атай булырға ваҡыттыр, тип уйлап ҡуя. Тик йәй буйы уның уйында ҡәбилә мәшәҡәттәре, мәмерйә стенаһына нисек итеп үҙ билдә-тамғаларын төшөрөп ҡуйыу булды, һөҙөмтәлә Етеҙҙе бөтөнләй иҫенән сығарҙы.*

*Хәҙер ул, ана, янында тора һәм таҙа стенаға ҡарай. Алға сығыбыраҡ торған киң маңлайы аҫтынан ҡараған күҙҙәре күктәге төнгө йондоҙҙар ише яна. Дарь-еға ҡыҙҙың күҙҙәре оҡшаны, уның яурынына ҡағылды ла үҙенә бороп тура ҡараны. Ҡыҙҙың ҡыҙғылт ирендәре сәскәләй асылды ла тиҙ үк ябылды. Ул йәһәт кенә тирегә төрөндө лә ҡарашын стенаға күсерҙе.*

*– Һин бөгөн минең янға килерһеңме? – тип һораны Етеҙ. – Мин һине... типмәм.*

*– Килермен, – тине Дарь-е. – Һин кешеләргә ит таратырһың, усаҡты һүндермәй тоторһоң, һин йылға ҡәбиләһенең инәһе булырһың.*

*Дарь-е ҡарт атаһы ҡулынан буяуҙар, бумала алды ла стенаға ҡарай ыңғайланы.*

– Ас, инһендәр! – тип һөрәнләне ҡыҙсыҡ ағаһына.

Әммә малай өндәшмәне, һәм Ринат көрмәкләшеү ишаратын ишетте, күрәһең, ҡыҙ элгесте ысҡындырыр өсөн ағаһын ишек янынан этә ине.

– Ярай, улайһа,– тине Ғафар. – Ринат ағай, ин, тик башҡалар барыһы ла болдорҙан ситкә китһен.

Малайҙың тауышын ишеткән ирҙәр болдорҙан төшөп, йыйылған кешеләр янына барып баҫты. Курткалы ҡатын Ринатҡа:

– Һеҙ һөйләшегеҙ әле, һөйләшегеҙ. Миңә уларҙы бөгөн үк ҡалаға алып барырға ҡушылған,– тине.

Ишек ҡыҫып ҡына асылды ла, Ринат эскә инеү менән, шарт итеп ябылып, элгескә эленде. Ринат бүлмәгә үтте, балаларға ҡараны һәм көсләп йылмайҙы. Малай ҡулында – ауыр балта, һеңлеһе йолҡоноп бөткән ҡурсағын тотоп уның артында баҫып тора. Өй эсен йәнә бер күҙҙән үткәреп, Ринат тәрән көрһөндө лә ултырғысҡа барып ултырҙы.

– Һеҙ кисә нишләп килмәнегеҙ? Мин һеҙҙе көттөм, уха бешерҙем, котелок тултырып какао әҙерләнем.

– Килә алманыҡ, – Ғафар, тынысланһа ла, ҡулынан һаман балтаһын төшөрмәгәйне.– Беҙ тегеләрҙе көттөк.

– Мин һеҙҙе уларға бирер инемме ни?

– Юлда эләктерерҙәр ине... Беҙ кисә кистән үк бикләндек тә һаман өйҙән сыҡмай ултырабыҙ,– тип яуапланы Ғафар.

– Хәҙер мине тыңлағыҙ, балалар,– Ринат малай менән ҡыҙҙы янына саҡырып алды.– Әйҙә, кәңәшләшәйек. Бер аҙнанан һеҙгә мәктәпкә барырға...

– Китаптар бирәсәктәр,– тине Ғафар, уның уйын аңлап.

– Китапты мәктәп хәстәрләр, – тип килеште Ринат.– Ә кейем-һалымды кем бирә?

– Күршеләр, ярҙам итәбеҙ, тине,– Ғафар һаман бирешергә теләмәне.

– Ярар. Ярҙам итһендәр ҙә, ти. – Ринат аҡбуры ҡойолоп, мөйөштәре аҡтарылып бөткән мейескә ымланы. – Утынығыҙ бөтөнләй юҡ. Өйөгөҙҙө ҡышын нисек йылытырға итәһегеҙ? Йәнә күршеләргә инәһегеҙме? Бер керерһегеҙ, ике – ҡыш буйы шулайтып йөрөп булмаҫ бит.

Малай өндәшмәне, уға һеңлеһе ярҙамға килде.

– Әсәй ҡайта. Дауаланып бөткәс – атай.

– Әсәйең был ҡышҡа ҡайтып өлгөрә алмаһа?– Ринат балаларҙы үҙенә яҡынайтып түшенә ҡыҫты ла икеһенең дә күҙҙәренә алмашлап ҡараны,– һеҙ үҫәһегеҙ, үҫер сағығыҙ, һеҙгә һәйбәт ашау, тәрбиә кәрәк. Ҡарышмағыҙ, барығыҙ ҡалаға, унда өйҙәгенән барыбер ҙә яҡшыраҡ буласаҡ,– тине.

Малай Ринаттың ҡулынан ысҡынырға ынтылды, ҡыҙҙың күҙҙәре ялтлап китте.

– Улайһа, былай эшләйбеҙ,– тип дауам итте Ринат ҡыҙыу ғына.– Мин һеҙҙең янға килеп йөрөрмөн, ял көндәре үҙебеҙгә алып ҡайтырмын. Һүҙ бирәм: әгәр детдомда һеҙгә ҡыйын булһа, оҡшамаһа, өйөгөҙгә кире алып киләм.

Малай Ринат ҡулынан һаман ысҡынырға тартылды, ә ҡыҙ тамам тынысланды, шулай ҙа Ринатҡа ышанмаған ҡиәфәттәрәк ҡарауын дауам итте.

– Минең ҡыҙымдың тәтәйҙәре күп, улымдың “Аэропорт” тигәне бар. Уйынсыҡ самолеттар түңәрәк буйлап оса, һин кнопкаға баҫып ҡына уларҙы осороп йөрөтәһең.

Хәҙер малай шымды һәм ҡыҙыҡһынып Ринатты тыңланы.

– Детдомда төрлө түңәрәктәр бар – шуларға йөрөрһөгөҙ,– тип дәртләнеп дауам итте Ринат, малайҙың иғтибарын яулауына ҡыуанып,– ә һин, Зөлфиә, ҡурсаҡтарға күлдәктәр тегергә өйрәнерһең, Ғафар самолет моделдәре яһар. Йә, нисек, барабыҙмы ҡалаға?

*Дарь-е стенаъа мамонттарҙың, носорогтарҙың, ҡыраъай аттарҙың һүрәттәрен төшөрҙө, Етеҙҙең һынын мәмерйәнең иң төпкөл өлөшөнә күсерҙе. Ҡыҙҙың башы түңәрәк таш түшәмгә тейҙе, оҙон аяҡтары иҙәнгә терәлде.*

*Етеҙ ҡатын уъа күп балалар табып ҡалдырҙы. Ҡыштың һыуыҡ көндәренең береһендә уны ҡараңъылыҡ хужоһы үҙенә алды.*

*Хәҙер инде ҡартайъан Дарь-е әлеге түңәрәк түшәмле мәмерйәгә килә лә, факелы менән яҡтыртып, Етеҙҙең һүрәтенә баъа һәм ҡәбилә тормошо хаҡында һөйләй.*

*– Урми-е ҡәбиләһе кешеләре беҙгә килде, күп итеп йылы тиреләр килтерҙе,– тип хәбәр итә ул.– Баҫҡынсы ниәт менән яныусы ят кешеләрҙән яҡлауҙы үтенәләр.*

*Етеҙ өндәшмәй.*

*– Мин яҡлашырмын, ахыры,– тине бер аҙ өндәшмәй торъандан һуң Дарь-е. – Эйе, мин уларъа ярҙам итермен. Мотлаҡ. Хәҙер беҙ ерҙе өңөп эшләнгән ҡыуышта йәшәйбеҙ, түшәмен аъас менән ябабыҙ. Беҙҙең балаларҙы ҡараңъылыҡ хужоһы һирәгерәк ала башланы. Ҡәбиләлә йәш һунарсылар күбәйҙе. Ишетәһеңме, Етеҙ?..*

Болдорға өсәүләп сыҡтылар. Балалар баштарын эйеп Ринатҡа ҡатар атланы. Ҡапҡа төбөнә йыйылған әллә күпме кеше, ике яҡҡа айырылып, уларҙы машина янына үткәрҙе. Ишекте ватырға маташыусы ирҙәрҙең береһе балаларҙы кузовҡа мендерҙе, үҙе улар артынан күтәрелде. Икенсеһе кабинаға инеп ултырҙы..

Ринат райсобес ҡатынының еңенән тартты ла:

– Детдомда авиамодель, йомшаҡ уйынсыҡтар тегеү түңәрәктәре бармы?– тип һораны.

– Нимә? – Ҡатын аптыраны.– Унда ниндәй түңәрәктәр булһын? Ашатҡан-эсергән өсөн рәхмәт әйтһендәр әле. Алкаштарға иғтибар былай ҙа артыҡ күп.

– Мин балаларға, түңәрәктәр бар, тинем.

– Уны әйтергә һеҙҙең телегеҙҙән кем тартты?– тине ҡатын һалҡын ғына.– Хәйер, белмәйем. Барҙыр ҙа...

Ул кабинаға инде. Машина ҡуҙғалды. Ринат, балаларҙың ҡулдары, йөҙө күренмәҫме тип, көплө кузовтың кескәй тәҙрәһенә ҡараны. Әммә быяла аша бер нәмә лә күренмәне . Машина урамдың арғы осона ашыҡты.

Ерҙә 30 мең тапҡыр ҡыш йәйҙе алмаштырҙы, төньяҡтан боҙҙар шыуышты, улар һалҡынлыҡ алып килде, йәнә кире ҡайтты. Кеше ҡырылып бөтмәне, тере ҡалды, ахырҙа ер йөҙөндәге бар тере йәнгә хужа булып алды. Ул бронза, тимер, дары уйлап тапты һәм йәшәү, көн итеүҙе еңеләйтеү өсөн бөтә көсөн һалды.

Мамонт мәңгелек ҡараңғылыҡҡа китеп барҙы, бихисап башҡа кейек-хайуандар, ҡоштар, үләндәр китте унда һәм китә торҙо. Ә бына Дарь-еның мәмерйә ҡабырғаһына яһаған һүрәттәре һаҡланып ҡалды, әллә күпме һуғыштарҙы, һыу баҫыуҙарҙы, һөжүм итеүҙәрҙе үткәрҙе.

Ә бына Етеҙҙе кешеләр, ниңәлер, яратманы. Улар таштағы һынды таш менән бәргесләне, ҡылыс менән ҡырҙы, утта яндырҙы. Уның рәсемен юҡ итеү өсөн әллә күпме көс түкте. Һәм... боронғо йылға ҡәбиләһендәге иң аҡыллы, иң етеҙ, иң оҙон аяҡлы ҡатынды, ер йөҙөндәге бар халыҡтың тәүәсәһен (праматерь), юҡҡа сығарҙы. Меңәр йылдар буйы һуғыштар барыуы, ҡан һәм күҙ йәштәре түгелеүе, ҡатындарҙың өнһөҙ ризалығы арҡаһында ирҙәрҙең һуңғы ҡырағай хайуандарҙы ҡырыуы, һуңғы үләндәрҙе тапауы, ерҙәге бөтә тереклекте мәңгелек ҡараңғылыҡҡа ебәрергә янауы шул арҡала түгелме икән һуң? Юғалтылған тәүәсәһен кире ҡайтарыу өсөн кешеләргә... әүәлгегә, утыҙ мең йыл элгәрегә, ҡайтып йәшәргә кәрәк булмаҫмы?

Балаларға арналған был күңелһеҙ тарих бер сама тамамланды һымаҡ. Аталары эсеп үлде, әсәләре райондан китте лә оло держава киңлектәрендә юғалды. Ринат ҡатынының ризалығы менән балаларҙы детдомдан алды, үҙенеке итеп яҙҙырҙы. Улар яҡшы уҡый, иптәштәре, класташтары менән бик дуҫ йәшәй. Ғафар авиация институтына инергә хыяллана, Зөлфиә – тегенсе булырға. Ул – аҡыллы, хәтерле ҡыҙ бала, йыш ҡына төнөн йоҡлай алмай, түшәгендә илап сыға...

---



**Сәғирә**
**ШӘРӘФЕТДИНОВА**

# КӨҘГӨ КҮКРӘҮ

### хикәйә

Көҙ сыуаҡ килде. Октябрь айында ла көндәрҙең йылы тороуы ғәжәп... Һутҡа тулышҡан емештәренә көсө етмәгән ағастар байып барған ҡояш нурында ҡойона.

Ана, алмағастар! Тос алмалар тупылдашып ергә тәгәрәй. Емештәрен йыйырға ашыҡманы Сәфинә быйыл. Әйҙә, ултырһындар йәм булып. Ә мышарҙы ҡатын юрый ҡырау һуҡҡанын көтә. Һыуыҡ тейгән мышарҙың тәмлелеге һуң!

Баҡсала көҙ күренешен күҙәтеү Сәфинәлә илһам тыуҙырҙы. Кеҫәһендә йөрөткән блокнот, ҡәләмен алып, ҡатын буласаҡ картинаһының эскизын һыҙғылап та ҡуйҙы. Исеме отошло булмаҡсы: “Алмалар ҡойолғанда”. Ҡыҙыҡ, картина яҙырға тотонһа, тәү сиратта исеме тыуа ла ҡуя.

Сәфинә өйгә инергә ашыҡманы. Ҡараштарын тау һыҙаттарына күсерҙе. Салтау итәгендәге ҡыҙғылт-һары ағастарға, тауҙың түбәһенә үк үрләп үҫкән шәмдәй төҙ шыршыларға, һырғый ҡарағайҙарға тәү күргәндәй һоҡланып ҡараны ҡатын. Тиҙҙән, бик тиҙҙән был илаһи күренеште мәңге таралмаҫ тойолған аҡ томан ҡаплар. Ҡышҡа инмәйенсә Салтау үҙенең “томанлы” кәпәсен һалмаҫ инде хәҙер. Һуҡыр ямғырҙары иңрәтеп алыр. Ҡош болғансығы үҙе ни тора! Ҡыуышып килгән ике миҙгел шулай ығышмаһа, миҙгел тыуамы? Яҡты уйҙарға сорналып ултырған Сәфинәне күрше йорттан ишетелгән көй һиҫкәндерҙе. Моң көсө ҡатынға йәшен тиҙлегендәй тәьҫир итте: йөҙөнә ут ҡапты, йөрәге дарҫлап типте, сәбәләнеп берсә торҙо, берсә ултырҙы.

Ә йыр дауам итте:

*Ниңә элек күрмәнем,*
*Белмәнем бит, белмәнем*
*Был донъяла һин барын,*
*Яғымлы, наҙлы йәрем!*

Шиғырҙың һәр юлында һуңлап килгән ҡайнар һөйөүҙең үкенестәре менән бергә татлы һағыштар, бәхетле минуттар ятҡанын белә Сәфинә. Үҙе генә белә, үҙенә генә мәғлүм. Моңло көй тулҡындары йәненә һырылды ла, бүтән сыҡмаҫҡа

---

*Сәғирә Шәрәфетдинова — күптәнге авторыбыҙ. Белорет районының Шығай ауылында йәшәй, мәктәп интернатында тәрбиәсе булып эшләй.*

булыптыр, күңел сөңгөлдәрендә әллә ҡасан баҫырылып ятҡан хистәрен ҡуҙғатып, хәтер йомғағын һүтте...

Сәфинә – ауылдың иң матур ҡыҙҙарының береһе. Егет-еләнгә иғтибар итмәй, әкиәти Дөлдөлгә атланып киләсәк батырҙы көтөп, хыялыйланып йөрөгән сағы. Үҙен эре, ҡаласа тота, тип ауыҙ йырыусылары ла табыла. Ни тиһәң дә, өсөнсө йыл баш ҡалала уҡып йөрөй. Художество-графика бүлегендә уҡыған курсташ егеттәре лә был сибәркәйгә битараф түгел. Ә Сәфинә иһә күҙ алмаларын түңәрәкләндереп, серле йылмайыу бүләк итә лә яңғыҙ йөрөүен белә. Ир-аттың иғтибары оҡшай ҡыҙға. Ниндәй ҡатын-ҡыҙға оҡшамаһын инде? Тап шул иғтибар уларҙы гүзәл зат, илаһи йән итә бит. Тормоштан йәм табып, көн тыуғанға ла, йондоҙ ҡабынғанға ла ҡыуана белгән Сәфинәне күптәр ихтирам итә.

Сәфинә күптәнге хыялын тормошҡа ашырырға йөрөй быйыл. Дуҫтарын үҙ яғына алып ҡайтыу — күптәнге ниәте.

Ниһайәт, өсөнсө курсты тамамланылар. Алдан килешкәнсә, сессия бөтөү менән, ҡыҙҙың ауылына юлланды йәштәр. Студенттар аҙна-ун көн йәмле Әреүәк буйҙарында йәшәне. Һуңынан, курстың кураторы үтенесе буйынса, колхоз яландарында, йәйләүҙәрҙә ауыл эшсәндәренә ярҙам иттеләр. Әле генә уҡыуын тамамлап колхозға белгес булып ҡайтҡан Рәфил исемле егет ҡунаҡтарҙы оҙатып йөрөнө. Сәфинәнән ике синыфҡа юғары уҡыған, ҡара сәсле, һомғол буйлы, баҫалҡы ғына үҫмерҙең тәүәккәллек, хатта күпселек ир-атҡа хас мин-минлелек сифаттары ҡиәфәтенән үк бәрелеп торған егет ҡорона инеүе ҡыҙҙы хайран итте. Мәктәптең бөтөн спорт ярыштарын башлап йөрөүсе, шулай уҡ райондың көслө саңғысылары иҫәбенә ингән Рәфил ҡыҙҙа элек тә һоҡланыу тыуҙыра ине. Ә был юлы күңелдәге саялыҡ осҡоно гөлтләп ҡабынды ла йәш йөрәкте елкендереп үк ебәрҙе.

Киске уйынға сыҡҡан әхирәттәренә егет тураһында һүҙ тишеүе булды, сәрелдәк Сәмиға: “Бөтөн арыу нәмә һиңә тигәнме, ҡалала йәшәп, ауылдыҡыларға көнөң ҡалмаһа. Рәфилде Мәҙинә лә, Сабира ла ярата...” — тип тәзелдәне. Мәҙинәләр өсөн был ҡәҙәр сарбайланма тип, Сәфинә ҡыҙҙы үсекләгәндәй:

— Ә һин? — тине.

— Миңә ни булған? Егет ҡарарҙай ерем юҡ тиһеңме? Һин дә хан ҡыҙы түгел!

Сәмиға тырт-мырт баҫып залдың теге осона үтте. Шул мәлдә, фырт кейенеп, клубҡа Рәфил килеп инде. Ҡаршыла торған Сәфинә менән ҡараштары осрашты. Ҡыҙҙың балҡып торған күҙ ҡарашынан ҡапыл йөҙәнеме, эргәһендә торған Шамил менән һөйләшергә кереште. Әленән-әле ҡыҙ яғына һирпелеп ҡарап ҡуя. Бейеү башланды. Эске һиҙемләү бөгөн егеттең ҡыҙҙы саҡырасағын аңғарта ине. “Саҡырһын ине, Сәмиғаны урынына ултыртыр инем!” — тип сабырһыҙланды ул. Курсташы Әнүәр Сәфинә эргәһендә бөтөрөлә башлағас, Рәфил ҡыҙҙың ҡаршыһына килеп баҫты. Йәштәр бер-береһенә күтәрелеп ҡарарға баҙмайынса вальс әйләнделәр.

Рәфил Сәфинәне оҙатып ҡуйҙы. Айлы кистәргә, яҡты хыялдарға, ҡайнар тойғоларға сорналған йәй йәштәрҙе ҡойон ише өйрөлтөп алып китте...

Августың аҙағы етте. Каникул бөтөүгә һанаулы ғына көндәр ҡалған. Һөйгәне менән айырылышыу минуттары еткән һайын тәҡәтһеҙ булған Рәфил үҙенә урын таба алмай.

Китер ҙә онотор — әҙме ни Сәфинә эргәһендә бөтөрөлөп йөрөүселәр? Икенсене яратып ҡуйһа? Рәфилдең мейеһен мең төрлө уй быраулаНЫ. Тәҡдим

яһар ине, Сәфинәнең кейәүгә сыҡмаясағын белә. Ҡыҙҙың ҡалала йәшәгеһе, шау-шыулы тормошонда ҡайнағыһы, ижад иткеһе, бейеклектәргә күтәрелгеһе килә...

Осрашыуға Рәфил уйсан һәм етди ҡиәфәттә килде. Сәфинәнең шаяртыуына ла ырыя ғына яуап бирҙе.

— Сәфинә, йәнем! Әгәр мин һиңә кейәүгә сығырға тәҡдим яһаған булһам, сығыр инеңме?

— Ә ниңә, һин кейәү булмаҫлыҡ егетме?

— Ҡасан?

— Хет бөгөн! — Сәфинә уйынлы-ысынлы һөйләй инеме, Рәфил аңламаны.

— Их, Сәфинә! Һине нисек һөйгәнемде белһәң ине... — Рәфил ҡыҙҙы ҡайнар ҡосағына ҡыҫты. Ирендәр өнһөҙ генә бер-береһен табышты. Баштар әйләнде, зиһендәр буталды. Сәфинә быға са бер ҡасан да татымаған ләззәт донъяһына сумды...

Тәүҙә ҡыҙ аңына килде. Уйындан уймаҡ сыҡҡанын аңлап, Рәфилдең күкрәген тос йоҙроҡтары менән төйгөсләне, үкһеп ергә ауҙы. Егет, һөйгәнен тынысландырырға теләп, сәстәрен һыйпаны, күҙҙәренән үпте. Пар аттар егеп киләсәк һөйгәнен көткән, аҡ сымылдыҡтарҙа ҡушыласаҡ никах төндәре хаҡында хыялланған ҡыҙ тотанаҡһыҙ хистәре өсөн Рәфилде лә, үҙен дә тиргәүҙән бушаманы. Тәүәккәл Рәфил никахты оҙаҡҡа һуҙманы. Үҙе барып Сәфинәне ситтән тороп уҡыу бүлегенә күсереп ҡайтты...

Инде нисәмә йыл ғүмер иткән Рәфилен һөйә алдымы, юҡмы — үҙе лә белмәй. Балаларына бына тигән атай, йүнсел хужа, ҡатыны өсөн өҙөлөп торған ир...

Йыр тулҡындары Сәфинәне һаман да хәтер бишегендә бәүелтте:

*Һине һөйөү — миңә ғазап,*
*Үҙең дә бит беләһең.*

Ул ғазапты Сәфинә үҙе эҙләп тапты түгелме? Туҡта! Нисегерәк булды әле ул?

Күңелен гелән тынғыһыҙлап торған ижад эшенә тотонорға мөҙҙәт еткәнлеген аңғарған мәле ине булһа кәрәк. Эйе, шул ваҡыт ине. Ул кисте ашҡынып көттө ҡатын. Иренең киске ашты ашап, гәзит-журнал ҡарап бөтөүен дә сабырлыҡ менән үткәрҙе. Ҡатынының күҙҙәре балҡып, күтәренке кәйефтә йөрөгәнен Рәфил ишектән ингәс тә аңғарғайны. Сәфинәнең үҙе һүҙ башлағанын көттө. Эргәһенә сүгәләгән йәмәғәтенең матур күҙҙәренә ҡараны ла онотолдо ир. "Ҡыҙ сағындағы осҡонло, нур сәсеп торған ошо күҙҙәр мине әсир итте лә инде. Ҡабат был күҙҙәрҙең ошолай балҡыуын күргәнем дә булманы шикелле. Хәйер, Сәфинә үҙе лә йән атлыҡтырып торҙомо һуң?" — тип уйлап ҡуйҙы Рәфил.

— Алтынға юлыҡтыңмы әллә?

— Унан да ҡиммәтен — идея таптым.

— Оһо, һин дә... идея уйлай беләһеңме ни? — Рәфил артығын ысҡындырғанын аңланы ла һүҙҙе тиҙерәк икенсе юҫыҡҡа бора һалды. Иренең төртмә һүҙенә артыҡ иғтибар итмәне Сәфинә, талаш-тартыштың бөгөн үҙ файҙаһына түгеллеген аңлай ине ул. Бер ни ишетмәгәндәй, һүҙ башланы:

— Иҙелбашында шәхси күргәҙмәмде ҡуйырға, тигән хыялым бар, Рәфил. Профессиональ рәссамлыҡҡа китеү уйы күңелдә күптән моронлағайны инде. Мәле етте, ахыры. Ҡомарлы эшкә ни етә?

— Һы! — Рәфил ауыҙын ҙур асып иҫнәне. Аптыранған, һүҙ осон таба алмаған осраҡта иҫнәү ғәҙәте бар уның. Өйҙә тынлыҡ урынлашты.

Башта Рәфил телгә килде:

— Тимәк, эшләргә тиһең инде?

— Эйе. Юҡһа, мүкләнгән таш һымаҡ булып барам.

— Ярай. Мин һиңә иртәгә үк эш табам. Мәктәп директоры менән һөйләшермен, рәсем дәрестәренән тыш, һынлы сәнғәт түңәрәктәрен дә бирер, — һүҙем бөттө тигәндәй, Рәфил йәнә бер иҫнәне лә арҡаһына боролоп ятты.

Был төндә икәүһе лә тыныстыҙ үткәрҙе. Сәфинәһенең һалҡын ҡанлылығы, өндәшмәүе һарыуын ҡайнатты, мин-минлеген ҡабартты.

Иренең эшкә арҡыры тороуы, аңламауы, киреһенсә, Сәфинәне сәмләндерҙе генә. Йәшлек саялығы әллә ҡайҙан сәсрәп килеп сыҡты ла ҡатынды күнегелгән тормошонан баш тартырға мәжбүр итте.

Буяуы ла йүнләп һеңмәгән яңы картиналарын аҡ сепрәккә төрөп әҙерләп ҡуйҙы ҡатын. Ҡабаланып ҡына өҫ-башын ҡараны. Автобус килеүгә сирек сәғәт ваҡыт булһа ла, туҡталышҡа китте. Артынан ниҙер ҡысҡырып ҡалған иренә әйләнеп тә ҡараманы.

Галерея директоры Федоров фамилиялы урыҫ сығышы менән Иҙелбашынан икән. Ҡаҡса кәүҙәле, ҡарамаҡҡа мөләйем ир һынлы сәнғәт эсендә йөҙөп ижад иткән кеше булып сыҡты. Бер аҙҙан ике рәссам һәүетемсә әңгәмә ҡорҙо. Тормош тәжрибәһен етерлек туплаған Геннадий Николаевич Сәфинәгә кәңәштәр бирҙе:

— Дөйөм алғанда, “Ҡуҙ өҫтөндә бейеү” бик һәйбәт картина. Тик камиллаштырыу өҫтөндә лә эшләү кәрәк. Буяуҙы төрләндереү ысулдарын ҡуллан. Бейеүсенең күлдәген ҡуйы күрәнгә буяһаң, нисек булыр? Юҡһа, ут төҫөн алған. Контраст төҫтәр ҙә ҡамасауламаҫ. Исем ҡуйғанда ла яуаплылыҡ тойорға кәңәш итер инем. Һүрәт исемде аҡларға тейеш, шулай бит? — Геннадий Николаевич рәссам ҡатындың эштәренә һоҡланды.

— Ә нишләп ижадта рәссам булып үҫәсәк кеше ауылда ҡалдығыҙ? — Өлкән рәссам һорауына үҙе яуап тапты: — Туҡтағыҙ! Бәлки, тап ауылда йәшәгәнгә лә шәп әйберҙәр тыуалыр! Барыһы ла халыҡсан, ябай, тәбиғи. Бай колорит, һутлы буяуҙар. Шәп, бик шәп! — Сәфинә Федоровты рәхәтләнеп, һәр һүҙен йотлоғоп тыңланы.

Ошо осорҙан башланды ла инде Сәфинәнең ҡомар эше. Бығаса күңеленең ниндәйҙер өлөшө китек булғанына, тормошто бар бөтөнлөгөндә тоймай йәшәй алыуына аптыраны.

Күргәҙмә асылыуға ай ярым ваҡыт ҡалды. Күңел эшенең оҙайлы, ныҡышмал, талапсан хеҙмәт икәнен белә Сәфинә, шуға күрә йәһәтләп ижадҡа тотондо. Хәҙер уны көндөҙ өйҙә осратыуы ҡыйын. Ире тәүҙә өндәшмәһә лә, бер нисә тапҡыр өйҙә тап итә алмағас, йәне көйҙө.

— Һин миңә бисәме, түгелме? Өй ипләнмәгән, мал ҡаралмаған, балалар тураһында һүҙ ҙә юҡ, — тип туҙынды. Яр аҫтынан яу сығарған кешеләй бер тынала түгелде лә Рәфил, иҫнәй башланы. Булдымы тигәндәй, Сәфинә иренә ҡараны:

— Эйе. Ошоғаса һин миндә өй ҡараған, бала баҡҡан, мал-тыуар араһында буталып йөрөгән ир бисәһен генә күрҙең. Ә кеше күңеле нимә менәндер мөлдөрәмә тулы булырға тейеш! Сәнғәт донъяһынан йыраҡ торғас, күңел талабымды аңламауың да бар. — Сәфинә шып-шым тыңлаған иренә ҡулдарын һуҙҙы. — Ҡара минең бармаҡтарыма, улар һәнәк, балта тотоуҙан шул тиклем тупаҫланған, хатта бер килке ҡәләм тота алмай йонсоном. Һин быларҙың береһен дә күрмәнең, күңел ҡысҡырыуымды ишетмәнең. Бәлки, кем белә, һиңә шулай ҡулайҙыр, рәхәттер. Әгәр минең тормошомдан ҡәнәғәт түгел икәнһең... — Сәфинә һүҙен әйтеп бөтмәне, моңһоу ҡарашын иренә төбәне лә тышҡа сыҡты.

“Ни әйтергә теләне? Әллә? Бының булыуы мөмкин түгел! Сәфинәһеҙ бер көн дә йәшәп булмаясаҡ! Нимәгә төрттөрә? Иғтибарым да етмәй китәлер! Ҡатынҡыҙ гөл һымаҡ, ти торғайны әсәһе. Эш, эш ти торғас, ысынлап та, ҡатынды онотоп ташлаған икәнме ни?”

Бисәһенең бер тынала үпкә-рәнйештәрен түгеүе ирҙең иҫен китәрҙе. Тормошта аҙ һүҙле, күп ваҡыт тыңлаусы ролен үтәгән Сәфинәһенең айныҡ фекере, асыҡ аҡылы, унан ғәййәр буйһонмаҫ фиғеле барлығын йәштән белһә лә, был ҡәҙәрен көтмәгәйне.

“Ана, бүтән ирҙәрҙе ҡараһын, эсеп-туҙып, ғаиләһен ҡарамай йөрөйҙәр, был туйып һикерә”. Сәфинәнең баш күтәреүе, тел сығарыуы Рәфилдең минминлегенә тейә, асыуын ҡабарта ине. Тамам тынысланып ингән ҡатынын күреүгә ирҙең һарыуы ҡайнаны. Исмаһам, иламаған да!

— Тимәк, хәҙер һин миңә бисә түгел! — Рәфил яһалма көлгән булды.

— Ә минең һиңә бисә генә булғым килмәй! — Тауышында көслө ихтыяр, сәм, кәрәк икән — үҙен яҡларлыҡ көс барлығы асыҡ яңғыраны.

Бүтәнсә көйөшмәнеләр. Был талашыу, юшҡын ҡалдырыу урынына, киреһенсә, был икәүҙең күңелендә ниндәйҙер яңырыу, бер-береһенә тартылыу көсөнөң нығыныуына ла сәбәпсе булды ла ҡуйҙы. Сәфинә илһамланып картина яҙҙы, ә Рәфил кистәрен ҡатынының һүрәт төшөргәнен күҙәтер булып китте. Ижад менән мауыҡмаған көндәрендә, нишләп эшләмәйһең, тип битәрләгән мәлдәре лә булғылай.

— Илһам көн дә килмәй бит, — тип шаяра Сәфинә.

— Һин әйт уға, көн дә килһен, — ти Рәфил һәм һөйөү наҙҙарына күмеп ҡатынын ҡосаҡлай.

Күргәҙмә асылыуға аҙна-ун көн ҡалғас, Сәфинә тағы ла ашҡыныбыраҡ эшкә тотондо. Һүрәт төшөрөү уның өсөн ауыр түгел, иң ҡыйыны — мольбертын асыу.

Ниһайәт, ноябрҙең тәүге шәмбеһендә күргәҙмә асылыуын хәбәр иттеләр. Кистән кейем һайлап башын ҡатырҙы. Ахыр сиктә ҡара төҫтәге, оҙон бәйләмә күлдәген кейҙе, тәңкәләрҙән теҙелгән сылбыр-ҡайышын быуҙы. “Ирҙәр коллективында эшләүсе ҡатындың тирә-яҡтағыларға яраҡлашыуы” тип, муйынына галстук рәүешле бәйләгән кескәй косынкаһын сисеп ырғытты.

“Артылыш” галереяһының күргәҙмә залында халыҡ көткәндән былайыраҡ, хәтһеҙ күп йыйылғайны. Район гәзите хәбәрсеһе менән әңгәмәләшкән арала Сәфинә эргәһенә Геннадий Николаевич менән көлһыу сәсле, бәһлеүән кәүҙәле, илле биш йәштәрҙәге таныш булмаған ир килеп баҫты.

— Таныш булығыҙ, Сәлим Шәрипович, — тине ҡунағына Федоров. — Иҙелбашының ижади потенциалын тәшкил итәсәк йәш рәссамыбыҙ Сәфинә Фәритова үҙе була инде.

— Һүрәттәре кеүек, үҙе лә сибәр минең яҡташ, — тине Ниязғолов, Сәфинә менән күрешеп.

Профессорҙың ижады менән таныш булһа ла, үҙен осратҡаны юҡ ине ҡатындың. Бала сағы эргәләге балалар йорто менән бәйле булғанлыҡтанмы, Сәлим Шәрипович үҙен был яҡ кешеһе тип һанай, тиҙәр. Ниязғолов та хәбәрсе менән барған әңгәмәгә ихлас ҡушылды. Һүҙ күберәк йәштәрҙең сәнғәткә һәлкәү килеүе, һәләтлеләренең бизнес донъяһына китеүе хаҡында барҙы.

— Бына әле Фәритованың һүрәттәрен иғтибар менән ҡарап сыҡтым. Тәрән психологизм хас, пейзаждарында тәбиғәттең киңлеге, яҡтылығы сағылған, кешеләрҙәге изгелек, йылылыҡ, ихласлыҡ ярылып ята, — тип фекере менән уртаҡлашты профессор.

Өфө ҡунағы, әүәлге танышындай, Сәфинәне терһәгенән тотто ла залға ыңғайлатты.

— Миңә “Ҡуҙ өҫтөндәге бейеү” картинағыҙ бик оҡшаны. Ҡарағыҙ әле бейеүсе ҡыҙҙың йөҙөнә! Күҙҙәрендәге зәһәр осҡондар ергә сәсрәп төшкән тиерһең, йөрәге күкрәктәрен ярып килеп сығырҙай, хәрәкәттәре бейеү ритмына һыймаған кеүек. Мөхәббәткә һыуһағанмы ул, әллә һөйөүгә нәфрәт белдерәме? Ҡыҙҙың һағышы бәғерен өтөп, ярым һүнгән усаҡҡа төшә лә, ҡуҙҙарға күсеп, уларға йән өрә... Кемделер һөйөүгә ышандырыу өсөн мотлаҡ ҡуҙ өҫтөндә бейеү кәрәкме?

Залдағы күпселек халыҡтың үҙҙәренә төбәлгән ҡыҙыҡһыныулы ҡараштарын күреп, ҡатын уңайһыҙланды.

— Ғәфү итегеҙ, Сәлим Шәрипович, минең эш – картина яҙыу, тәнҡит — бүтәндәрҙең хеҙмәте, — тип яуапланы.

— Шәп, тура, сая яуап, афарин, Сәфинә! — Профессор һыны ҡатып көлдө. Көлөүе балаларса эскерһеҙ, саф ине.

Күргәҙмәләге халыҡтың ҡымжыуынан ҡасып тигәндәй, Сәфинә кесе залға үтте. Тәҙрә пәрҙәһен тартты. Көн яртыһы берсә ҡар, берсә борғанаҡ менән болғанып тора, иртә менән ябалаҡлап яуған ҡарҙы әле ямғыр йыуа.

— Ә-ә, һеҙ бында йәшенгәнһегеҙ икән? — Тауышҡа Сәфинә әйләнеп ҡараны. Ҡатындың зәңгәр күҙҙәрендә һүрәтендәгесә зәһәр ҙә, шаштырғыс та осҡондарҙың бергә сәсрәп тоҫҡалыуы Ниязғоловты ҡапыл ҡаушатты.

— Һеҙҙең рөхсәт менән “Ҡуҙ өҫтөндәге бейеү”ҙе һатып алам. Бик уңышлы дебют, ҡыҙҙың матурлығы мадонналарҙыҡынан артыҡ булмаһа, һис кәм түгел. Символик мәғәнәһе лә халыҡса, — тине Сәлим Шәрипович.

“Шул һүрәттән башҡаны күрмәй микән?”– тип уйлап алды Сәфинә.

— Башланғыс ижад булһа ла, ҡыйыу тотонғанһың, әлбиттә, тәү сиратта – талант, ә талантты тейешле сиктәргә күтәреү өсөн талап кәрәк, — тип дауам итте Ниязғолов. Улар йылы ғына хушлаштылар.

Өлкән рәссам, профессор һынлы кеше менән осрашыу осраҡлы ла, тиккә лә булмағандыр. Ниязғоловтың йәш таланттарҙы асыуҙа ғына түгел, уларға рухи осош биреүҙә лә хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ булды. Ниязғолов Сәфинәнең дә ижадын күҙ уңынан ысҡындырманы. Һәр яҡлап үҫтереүгә күп көс һалды.

Йыр тулҡындары Сәфинәне һаман да хәтирәләр даръяһында йөҙҙөрә:

*Наҙлы ҡараштарың менән,*
*Зинһар, һөйөп ҡарама.*

Һүрәттәрен күргәҙмәгә ҡуйғандан һуң алты ай үткәс, Сәфинә Өфөнән хат алды. Унда йәш рәссамдарҙың эштәре В.Н. Нестеров исемендәге республика художество музейында ойоштороласаҡ профессиональ күргәҙмәгә ҡуйыласағы, уңышлы тип һаналған унлаған картинаһын Башҡортостан Рәссамдар берлегенә кисектермәй килтереп еткерергә ҡушылғайны. Көтөлмәгән яңылыҡтан баҙап ҡалған Сәфинә быға ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәне.

— Хатта, профессиональ күргәҙмә, тиелгән. Тимәк, ижадым ҙур һынылыш алдында. Туҡтама, эҙлән, көнө-төнө эшлә, — Сәфинә, шатлығынан һөйләнә-һөйләнә, кескәй ҡыҙын ҡосаҡлап өйөрөлттө.

Кискеһен Сәфинә яңылыҡты иренә еткерҙе. Тегеһе, ғәҙәттәгесә, өндәшмәүҙе хуп күрҙе.

Ебәргеһе лә, шул уҡ ваҡытта рухи азатлыҡҡа ынтылған, үҙ шөғөлөнән балҡып йәшәгән ҡатынын рәнйеткеһе лә килмәй. Ана, ул ниндәй бәхетле! Яҙған

әҫәрҙәре эргәһендә сабыйын баҡҡан әсә ише бөтөрөлөп йөрөй. Ижад иткәндәр, бәлки, шуға күрә лә сәйерҙер. Ябай кешеләрҙең күбеһе уларҙың күңел кисерештәрен аңлай, уларҙың телдәрендә һөйләшә белмәй...

Сәфинә лә, йә пейзаж төшөрәм, ти, ниндәйҙер предмет композицияларында бер рәссам ҡулы ҡағылмаған нәмәләр тураһында яҙырға хыялланам, ти. Төшөнөп ҡара! Бүтәндәр кеүек, Рәфил дә был юҫыҡта бер нәмә лә төшөнмәй. Ҡатынының ҡомарлы эшенә күптән инде күнегергә лә ваҡыт, ә ул үҙ-үҙен һаман да еңә алмай.

***

Күргәҙмәгә ашығып барһа ла, Ғиззәт Ағишев өлгөрмәне: ижадсыларҙы рәсми таныштырыу башланғайны.

Профессор Нияҙғолов Сәфинә Фәритова тигән рәссамдың ижадына байҡау яһай ине.

— Йөкмәткеле психологизм, төҫтәр пластикаһының байлығы, динамиканың көслөлөгө һәр картинала күҙәтелә. Рәссам күп яҡлы ижадында экспрессив формаларҙы дөрөҫ ҡулланыуы һүрәттәрҙе тағы ла йәнләндерә, — тип һөйләне ул һәм Фәритованың һүрәттәрен дәүләт музейында күрергә теләүен белдерҙе.

Профессиональ ҡыҙыҡһыныу Ағишевты урынында оҙаҡ сыҙатманы, күрәһең. Ул кешеләр ағымын йырып, Фәритова тигәндәренән интервью алырға ашыҡты. Әммә рәссам ҡатын һүҙсән булмай сыҡты. Хәбәрсенең һорауҙарына урыҡ-һурыҡ ҡына яуап бирҙе лә китеү яғын ҡараны. Ағишевҡа ла йылмайып, ғәфү үтенеп китеп барыуҙан башҡа сара ҡалманы.

Журналист рәссам ҡатындың картиналары тәңгәлендә туҡталып уйланып торҙо. Артына әйләнеп, теге өндәшмәҫ ҡатынды ҡараштары менән эҙләне. Рәссам зым-зыя юҡ булғайны.

Шул кистә Сәфинә ауылына ҡайтты. Ихтыярынан тыш тыуған тойғоларын аңлай алмай хитланды. Күңел асышы хафаландырҙы. Әллә... Хәбәрсенең ирен ситендәге үҙенсәлекле йылмайыуы күҙ алдынан китмәне лә ҡуйҙы. Үҙе лә һиҙмәҫтән, ҡатын картина яҙырға тотондо. Күп кешеләр аңлай алмаҫ инде был һүрәтен. Ул уны “Йылмайыу” тип нарыҡлар...

Ауыл рәссамы Фәритова тураһында республика гәзитендә матур ғына мәҡәлә донъя күрҙе. Хәбәрсе тырыштырған: ҡабартылған-күпертелгән ерҙәре лә байтаҡ. Сәфинә көлөмһөрәп уҡыны ла ырыя ғына ҡиәфәттә гәзитте ситкә алып ҡуйҙы.

Ағишевтың ҡулы еңел булды. Көҙгә Сәфинәне Башҡортостан Рәссамдар берлегенә ағза итеп алдылар.

Ижади эшмәкәрлегендә ул Рәсәйҙә генә түгел, сит илдәрҙә лә сығыш яһаны. Уңышлы эштәре Санкт-Петербургтағы Башҡортостан экспонаттар коллекцияһына эләкте. Өфөгә юлдар йыш төштө. Килгән һайын, йәш ҡыҙҙай, йөрәге дарҫлап типте, күңеле ярһыны, кемделер эҙләгәндәй, ҡараштары халыҡ ағымын барланы.

Уйламағанда-көтмәгәндә килеп осраштылар. Профессор Нияҙғоловтың алтмыш йәшлек юбилей кисәһе республика күләмендә үткәрелгән сараларға әйләнде. Өфөлә уҙғарылғанында Сәфинәгә лә булыу бәхете тейҙе. Кисәнең рәсми өлөшөнән һуң иркен аралашыуҙар, коктейль-өҫтәлдәр ойошторолғайны. Сәфинә залды күҙ уңынан үткәргән арала үҙенә төбәлгән ҡараштарҙы абайланы.

Йылмайып торған кеше Ғиззәт Ағишев ине. Тегеһе, үҙе лә һиҙмәҫтән аяғын кирә баҫып, өҫ-башын ҡаҡҡыланы, кәрәк-кәрәкһеҙгә сәсен бармаҡтары менән

тарап алды. Ғиззәтте күргәс, Сәфинәне ҡаты дерелдәүек биләне. Әйтерһең дә, ул сабырлығын һынағандай йәнде ҡура. Йөрәге ҡупты. Бармаҡ остарында һалҡынлыҡ тойҙо. Тойғолары менән анталашҡан арала эскерһеҙ йылмайып эргәһенә Ағишев килеп баҫты:

— Һеҙҙе бейергә саҡырырға мөмкинме?

Сәфинә, тартынһа ла, ризалығын бирҙе. Бына ул! Эргәһендә, хатта биленән алған, ҡулдарынан тотҡан. Ул күтәрелеп Ғиззәткә ҡараны. Ниндәй яҡын ул күңелгә, яғымлы йөҙө, ышанысլы тауышы, бәһлеүәндәй һын-һыпаты, серле йылмайыуы менән әсир иткән Ағишев.

Ошо кешенең ҡайнар ҡосағында иреп, наҙҙарында бәүелеп һөйөлһәң ине. Тулҡынланып торған ҡара сәстәренән һыйпағыһы, хатта һул битендәге буйынан-буйына тәрән итеп уйылған иҫке яра эҙҙәренән ирендәрен йөрөткөһө килә...

Үҙ уйҙарының хаяһыҙлығынан үҙе оялып, Сәфинә ситкә тартылды. Күңеле, гүйә, шарран асылып китер ҙә бөтөн донъяны вайран итер һымаҡ. Ғиззәткә бүтәнсә ҡарамаҫҡа тырышты.

Кисә тамамланыуға табан бара инде. Сәфинә ҡайтырға йыйынды. Юлдары бер яҡҡа икәнен белгән Ағишев ифрат ҡыуанды. Хәйер, ҡабаланмаҫҡа ла булыр ине, тик Сәфинәнән тороп ҡалғыһы, унан да бигерәк был һөйкөмлө ҡатынды оҙатҡыһы килде. Уйҙарына бирелеп, Сәфинә туҡталышын үтеп киткәйне. Ҡатын, яҡлау эҙләгәндәй, Ғиззәткә ҡараны. Сәбәләнгән юлдашын Ағишев йыуатырға тырышты.

Холҡоноң өтөклөгө был юлы ла үҙен һынатманы.

— Хафаланмағыҙ, урамда ташлап китмәйем бит инде. Әйҙәгеҙ, бер ергә барабыҙ.

Сәфинә күҙҙәрен ҙур асып Ғиззәткә аптырап ҡараны.

— Ҡайҙа?

— Көн тыуырға күп ҡалмаған. Ҡариҙелгә таң ҡаршыларға киттек. Унда иҫ китмәле гүзәллек!

— Һеҙҙе өйҙә көтмәйҙәрме ни? Ҡатынығыҙ?

— Бар, әммә көтөп торғаны юҡ!

Ғиззәт, был турала һүҙ бөттө тигәндәй, ҡулын һелтәне.

— Мин йылға ярында йәшәйем, — тип дауам итте Ағишев, — ана, күрәһеңме, йәшеллеккә сумып ултырған аҡ йортто, шуның туғыҙынсы ҡатында көн итәм. Тәҙрәм ҡаршыһынан көн һайын аҡ пароход сәләм биреп уҙа.

— Аҡ пароход? — Сәфинәнең күҙҙәре янып китте. — Аҡ пароходҡа ултырып алыҫтарға китеү хыялы мине бер ваҡытта ла ташламаны...

Шул саҡ алыҫтан пароход гудогы ишетелде. Ғиззәт менән Сәфинә бер-береһенә ҡарап көлөштөләр ҙә етәкләшеп яр буйына йүгерҙеләр.

— Әйҙә, пароходҡа!

— Мин риза! — Күҙ асып йомғансы ярһыу Ғиззәт күлдәк-салбарын сисеп ырғытты ла ғәжәпләнеп торған Сәфинәне күтәреп һыуға инеп китте. Тәрәнлектән ҡурҡҡан ҡатын сарбайланып ҡысҡыра башланы. Сәфинәне ярға кире сығарып ҡуйыуҙан башҡа сара ҡалмағайны. Ғиззәт үҙе йөҙөп китте. Шәп йөҙөүсе икән. Ҡомда ирҙе күҙәтеп ултырған Сәфинә таңғы һалҡындан бөршәйҙе. Ярһыуҙарын һыуҙа ҡалдырырға теләгәндәй, Ғиззәт сығырға ашыҡманы. Ярға баҫҡас ҡына юлдашының юҡлығын абайланы. Шигәйеп-шөбһәләнеп тирә-йүнен байҡаны. Йәшәмеш тирәкте ҡосаҡлап торған ҡатынды күргәс, эсенә йылы йүгерҙе. Сәфинә тирәк менән серләшә ине.

— Нишләп мин бында, әйт, тирәккәйем, һин бит күпте күргәнһең. Дөм ят кеше менән таң ҡаршыларға килгән иҫәр ҡатынды күргәнең юҡтыр! Нишләнем мин?

“Байып барған ҡояшыңдың көсөн нығытырға типме, эй, йәнем, уның күңеленә шаҡып инергә теләйһең? Ошо ҡатын һүнеп барған усағыңа йән өрҙө, тиһеңме? Бар эргәһенә, улайһа. Торма ҡатып! Ана, бисара зат ни ҡылырға ла белмәй өҙгөләнә”.

Ғиззәт, батырсылығын йыйып, Сәфинә эргәһенә килде. Сәстәренән еҫкәне. Ҡатынды үҙенә ҡарай борҙо ла:

— Кем һин? Ғүмерем буйы һине эҙләгән кеүекмен. Әллә ҡасандан белгән дә һымаҡмын. Кем һин? — тип эҫе тынын бөркөп Сәфинәнең ҡолағына шыбырланы.

— Мин — мөхәббәт! — Сәфинәнең тауышы.

— Һин ҡайҙан, йәнем? — Ғиззәт шыбырлай.

— Адресым юҡ!

— Нишләп мин һине элегерәк осратманым икән?

— Күңелгә керә торған асҡысың шулмы?

— Ышанмайһыңмы?

— Ул турала иртәгә баш ватырмын...

Көтөлмәгән ерҙән пәйҙә булған һөйөү алдында Сәфинә көсһөҙ ине. Ул күҙ йәштәре аша йылмайып Ғиззәткә һыйынды. Бер мәлгә тирә-йүнде ҡыҙылға мансып ҡалҡып килгән ҡояш та һүрән тойолдо, ҡоштар сутылдауҙан тынды, ағас баштарын ҡағып уҙған шипкерт ел дә иҫмәйерәк торҙо... Иҫтәренә килгәндә сыңғырт ҡына таң атҡайны. Ҡырҡҡа етеп килгән ике кеше илаһи гүзәллекте күҙәтеп, бер-береһенең йөрәк ҡағышын тыңлап оҙаҡ торҙолар. Ошо таңдың, миҙгелдең бүтәнсә ҡабатланмаҫына инанған был икәү бәхетле лә, моңһоу ҙа ине.

Көтмәгәндә Ғиззәттең яғымлы тауышы тынлыҡты ярҙы:

*Ниңә элек күрмәнем,*
*Белмәнем бит, белмәнем*
*Был донъяла һин барын,*
*Яғымлы, наҙлы йәрем!*

— Сәфинә!

— Әү!

— Мөхәббәт арҡаһында ғына бөйөк сәнғәт әҫәрҙәре тыуалыр ул? Шәп, тип әйтмәһәм дә, ошо шиғыр һине күргәс тә күңелдә яралғайны.

— Ә мин һиңә арнап “Йылмайыу” картинаһын яҙҙым...

— Бының булыуы мөмкин түгел! — Ғиззәт Сәфинәне ҡайнар ҡосағына алды ла ирендәренә үрелде.

Өфөнән ҡайтҡас, Сәфинә толҡа тапманы. Илерҙе, туланы ла аҙаҡ үҙен йыуатырға кереште. “Үтер, үтер, күр ҙә тор” тип күңеле һулҡылданы. Тик күҙҙәре лә, ҡолаҡтары ла телефон яғында ине.

*Көнөн-төнөн йөрәк яна,*
*Килә һине күрәһем!*

Бер көн, ысынлап та, телефон шылтыраны.

— Алло!

— Эйе, тыңлайым!

— Сәфинә, йөрәккәйем!

Ул! Сымдың теге осонда Ғиззәттең тап үҙе! Бының бүтәнсә ҡабатланыуы мөмкин түгел! Телефон трубкаһының әрнеп пипелдәүе ҡатындың йөрәген өттө.

Ул йәһәт кенә ижад монаятын барларға кереште. Подрамникка киндер тарттырҙы, ҡылҡәләмдәрен, майлы буяуҙарын сумкаһына һалды. Мейестән өрөп бер нисә ҡайын күмере алды. Ҡасандыр, илһамы етмәй, яҙылып бөтмәгән картинаһын эҙләп тапты ла тышҡа ашыҡты. Ҡабаланды, әйтерһең, телефон яңынан шылтырар ҙа, ыуалырға торған ҡайнар хистәре тулышып донъяны вайран итер...

Алтынаман буйҙарына барып етеүгә көн ҡапыл болотланы. Тау артынан ҡабарып ярпылай болот сыҡты. Юрған ише генә булһа ла, күктең салт өлөшөн ялмай-ҡаплай барҙы. Ә болоттар уҙған көмбәҙ яҡтырғандан-яҡтырҙы. Кинәт күк гөрһөлдәне. Сәфинә тертләп ҡуйҙы. Күктең шаңы алыҫтарға һуҙылып китте лә, дөбөрләп, кире әйләнеп ҡайтты. Һаҙағай уты ла күктә түгел, тап аяҡ аҫтында ялтлаған кеүек. Йәшен утының тармаҡланып, төрлө тарафтарҙа ялтырап китеүен күҙәткән Сәфинә ямғырҙа күшекмәҫ өсөн ҡайын аҫтына йүгерҙе. Тап һаҙағай уты етмәгән икән дәһә! Яҙылып бөтмәгән картинаһына һуңғы һыҙаттар табылыуына ифрат ҡыуанып эшкә тотондо.

Көҙгө йәшен йә эргәлә, йә тауҙар аръяғында дөбөрҙәп йөрөнө лә, нисек ҡапыл килеп сыҡҡан һымаҡ, ҡайҙалыр китеп юғалды. Октябрь айына хас булмағанса эҫе торған көн ямғырҙан һуң сафланып ҡалды. Ҡайын төбөндәге сумкаһына эйелгән ыңғайға, бөрөшһә лә, һутын юғалтмаған ер еләген күреп ҡалды Сәфинә.

Эй, тәбиғәттең бирмеше!

Еләкте өҙөп алды ла ауыҙына ҡапты ҡатын. Еләктең әскелтем-сөскөлтөм тәме ирененән байтаҡ китмәне. Ҡайынға һөйәлгән килеш оҙаҡ торҙо ул. Ҡараштары алыҫтарға, күгәреп ятҡан тау һырттарына төбәлде.

*Шул еләктең һуты, тим мин,*
*Ирен генә сылатырлыҡ,*
*Ғүмер буйы илатырлыҡ,* —

тип шыбырланы Сәфинәнең ирендәре. Күренекле шағир булып танылған Ғиззәт Ағишевтың шиғырынан ине был юлдар.

***

— Өләсәй, өләсәй! — Мышҡылдаған бала тауышына айныны Сәфинә. Ейәнсәре Ҡарлуғас икән.

— Нишләп илайһың, бәпкәм? Сеү, сеү!

— Һин илағанға илайым даһа, һине йәлләйем.

— Мин илайыммы ни?

— Баянан бирле күҙҙәрең илап тик тора.

— Шулайммы ни? Күҙемә сүп төшкәндер, моғайын.

— Улайһа, ҡайҙа әле, күҙеңә өрәйем дә сүбеңде сығарайым, йәме?

— Йә! — Сәфинә ейәнсәрен тупылдатып һөйҙө лә, ҡосағына алып, өйөнә ашыҡты.

# *Дуҫлыҡ күпере*

Вячеслав Ар-Серги (Вячеслав Витальевич Сергеев) менән мин 2007 йылдың октябрендә Мәскәүҙә, «Дружба народов» журналы ойошторған Рәсәйҙең һәм Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе илдәренең әҙәби-нәфис журналдарының баш мөхәррирҙәре конференцияһында таныштым. Баш мөхәррирҙәрҙән тыш, конференцияла күренекле яҙыусылар, тәнҡитселәр, «Литературная газета» аҙналығы, башҡа баҫма вәкилдәре, шул иҫәптән «Дружба народов» журналының редколлегия ағзалары, редакция хеҙмәткәрҙәре ҡатнашты. Мин унда булған һөйләшеүҙе ентекләп һөйләп тормайым, шуны ғына әйтәм: дүрт көн буйы барған был конференцияла байтаҡ кеше сығыш яһаны, һүҙ алыусылар араһында Вячеслав та булды. Йөҙөнән нур, ихласлыҡ бөркөлөп торған был һөйкөмлө удмурт шағиры аудиторияны ысын мәғәнәһендә яулап алды. Хәбәре ябай, аңлайышлы, шул уҡ ваҡытта фекерле ине, үҙенең милли әҙәбиәттәрҙе, шулай уҡ рус әҙәбиәтен дә яҡшы белеүен күрһәтте.

Беҙ уның менән тәүге көндө үк таныштыҡ, артабан һөйләшеп-аралашып йөрөнөк, һүҙ араһында ул үҙенең бер нисә тапҡыр Өфөгә килеүен, Мостай Кәрим менән яҡындан таныш булыуын белдерҙе. Иҫтәлеккә китаптарыбыҙ менән алышайыҡ тиһәк, алып килгән бер нисә бөртөк китапты икебеҙ ҙә таратып бөткән булып сыҡтыҡ һәм ҡайтҡас бер-беребеҙгә почта аша һалырға һүҙ ҡуйыштыҡ. Оҙаҡламай ул «Дубрава на луне» тигән русса шиғырҙар китабын автограф менән ебәрҙе, мин – үҙемдекен.

Икенсе осрашыу инде Өфөлә, Зәки Вәлиди исемендәге Милли китапханала, Динис Бүләков тураһында иҫтәлектәр китабының презентацияһын уҙғарған саҡта булды. Ул унда яҡташыбыҙ, Татарстандың халыҡ шағиры Роберт Миңнуллин менән килгәйне. Һөйләшеү-аралашыу ҡыҫҡа булһа ла (улар, төнгә ҡалабыҙ, тип ҡайтырға ашыҡты), ихлас үтте.

Уның шиғриәте – мин, нигеҙҙә, алда атаған йыйынтығы буйынса фекер йөрөтәм – үҙе һымаҡ ябай һәм аңлайышлы, ихлас һәм алсаҡ. Үҙ халҡының ысын патриоты булараҡ, ижадында фольклор мотивтары көслө, тарихи темаларға мөкиббән, телгә иғтибарлы, форма йәһәтенән эҙләнеүҙәре лә бар. Сағыштырмаса йәш булыуына ҡарамаҫтан (1962 йылғы), ул 2003 йылдан бирле «Удмурт Республикаһының халыҡ яҙыусыһы» исемен йөрөтә, «Дружба народов» журналының редколлегия ағзаһы булып тора һәм йыш ҡына унда художестволы һәм публицистик әҫәрҙәрен баҫтыра, ундан ашыу шиғыр һәм проза китаптары авторы. Улар байтаҡ телдәргә тәржемә ителгән.

Бөгөн мин талантлы удмурт шағирының бер шәлкем шиғырҙарын журнал уҡыусыһына тәҡдим итәм. Шиғриәт һөйөүселәргә оҡшар, тигән өмөттәмен. Уларҙы руссанан башҡортсаға (Вячеслав Ар-Серги үҙ телендә лә, русса ла яҙа) Салауат Әбүҙәр ауҙарҙы.

**Әмир ӘМИНЕВ.**



Вячеслав АР-СЕРГИ

# ЙӘНЕҢДЕ ҺАҒЫШТАР ӨТКӘНДӘ...

## *Бәлки...*

*Май менән яҙылған портреттар...*
*Яҡшыраҡ йыраҡтан ҡарарға.*
*Уларҙы биҙәгән һыҙаттар*
*Салынмай бик яҡын арала.*

*Бары тик ғәжәйеп төҫтәрҙең*
*Тулҡыны өҫтөңә ағыла.*
*Ә, бәлки, кешеләр йөҙөнән*
*Ялғанлыҡ битлеге һалына.*

*Үҙемдең һүрәтте күргәндә*
*Төрлө шик биләне күңелде.*
*Мин яҡын баҫам да һорайым:*
*«Был минме, әллә мин түгелме!»*

*Артҡараҡ сигенәм һүрәттән,—*
*Тылсымы бар кеҙек араның,*
*Һәм төҫтәр ташҡыны эсенән*
*Үҙемә мин үҙем ҡараным.*

*... Бәлки, тим, шуғалыр,*
*Йәнеңде һағыштар өткәндә,*
*Күҙеңде йомаһың, ҡәҙерлем,*
*Һин мине иркәләп үпкәндә...*

## *Әсә йыры*

*Ябай кейем, бәлки, бөхтә...*
*Төштәремә керә ҡайһы саҡ.*
*Аҡ яулыҡтан, талғын йырын һуҙа,*
*Мейесендә бейей ут-усаҡ.*

*Шишмә кеҙек удмурт йыры аға,*
*Камаға ул барып ҡушылыр.*

*Күңелеңде һағыш сорнап ала —*
*Илаһи мәл, бәлки, ошолор...*

*Аҙымдары меңәр юлда ҡалған,*
*Ҡаҙандан ул үтмәһә лә ары.*
*Ер күсәре — уға тыуған түпһа,*
*Һәм ошонда тыуған йырҙары.*

*Ул йырҙарҙа балҡып ҡала ине*
*Һағыштары үткән йылдарҙың.*
*Ҡасандыр беҙ икәү йырлағайныҡ,*
*Йырлаусы юҡ хәҙер уларҙы.*

*Ҡәберендә — удмурт ҡайындары,*
*Ишетелеп ҡала «ля-минор».*
*Ҡайындарға күсеп моңайыусы,*
*Моғайын, тим, әсә йәнелер...*

## Бурыстар

*Бурыстарға батып тыуа кеше,*
*Ергә тыуыу — үҙе бурыс кеүек.*
*Бурыстарың көн дә арта бара,*
*Арта бара,— гүйә, ташҡын күбек.*

*Уның бурысы бар... Бурыслы ул...*
*Бөтә донъяһына бурыслы гел.*
*Аҡһаҡалдар юҡҡа әйтмәгәндер:*
*Гонаһ менән тыуған — изге түгел.*

*Шуғалыр ҙа илап тыуа кеше,*
*Күнмәгәндәй яҙмыш ҡушҡанына.*
*Ғүмер буйы бурыс түләйәсәк*
*Һөйгәненә, илгә, дошманына...*

*Мин тыуғандан бирле бурыслымын,*
*Бурыстарым тулған шығырым.*
*Тик бурысҡа алынмаһын ине*
*Минең моңом, минең шиғырым.*

## Баҡсасы

*Үҙемдә мин һине үҫтерҙем*
*Мөхәббәтем тиеп атарға.*
*Һоҡланалар икән һоҡланһындар,*
*Ҡул һуҙырға бирмәм яттарға.*

*Тәүге тапҡыр һине күреү менән*
*Орлоҡ булып йәнгә сәселдең.*
*Бәүелделәр һөйөү елдәрендә*
*Толомдары һары сәсеңдең.*

*Минән һиңә бүләк — ал раузалар,*
*Үҙ-үҙеңде алдың ҡулыңа...*
*Һөйөү менән һуғарырмын һеҙҙе,*
*Мөхәббәтем, мәңге һулыма!*

## Йондоҙсоҡ

*... Сәғәт төнгө ике —*
*Ҡыҙы һаман ҡайтмай...*
*Ҡайҙа йөрөй икән?—*
*Үрһәләнә атай.*

*Пәрҙә аша бик йыш*
*Төнгө күккә баға.*
*Тик өндәшмәй йондоҙ,*
*Бары керпек ҡаға.*

*Беләһең бит, йондоҙ,*
*(Ғәйеп түгел, кисер).*
*Тиҙҙән ҡыҙы ҡайтып,*
*Һиңә серен сисер.*

*Алдан күреп тора,*
*Алдан һиҙә атай:*
*Ҡыҙы — берҙән-бере —*
*Үҙен-үҙе алдай.*

*Ҡыҙҙар ҡабалана —*
*Ҡыҙҙар дөрләр уттай.*
*Ләкин үтеп китһә,*
*Йәшлек кире ҡайтмай.*

*Шул саҡ, бәлки, ҡарап*
*Улар һағышына,*
*Ышанасаҡ атай*
*Һөйөү барлығына...*

## Һинең һүрәтеңә

*Күҙҙәреңә һинең*
*Һыйған бөтә ғаләм.*
*Ләкин ишектәрең*
*Асыҡ түгел, beләм.*

*Ҡулдарымда сәскә*
*Яҙғы сафлыҡ бөркә.*
*Һиңә илтер юлдар*
*Ябыҡ миңә, иркәм.*

*Баҫып торам ярҙа,*
*Торам шундай оҙаҡ.*
*Тик асылмай ишек,*
*Ах, тутыҡҡан йоҙаҡ.*

*Күпме һыуҙар аҡты,*
*Күпме йылдар үткән.*
*Ҡулдан тотҡан бәрәү...*
*Тик һин түгел, бүтән.*

*Һин ҡарайһың миңә,*
*Йылмайыуың яҡын.*
*Йәнгә минең йылы,*
*Йәндә минең ялҡын.*

*Хуш еҫ бөркә сәскә,*
*Әллә һинең тының?*
*Сәскә гөлләмәһе, —*
*Гүйә, һинең һының...*

**Салауат ӘБҮЗӘР тәржемәләре.**

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ**

# ХӘСӘН НАЗАР ШИҒРИӘТЕ

Шиғриәт – үҙе ғәжәп бер рухи донъя, һүҙ сәнғәте, моң ҡеүәһе, тел күрке. Уның өсөн Хоҙай биргән һәләт, талант хәжәттер. Башҡорт поэзияһында шундай таланттарҙан мин үҙем иң беренсе сиратта Аҡмулла, Бабич, Мостай Кәрим, Назар Нәжми, Рауил Бикбаев, Рәшит Назаров исемдәрен атар инем. Өс таған өсөн өсөнсөгә Назарҙарҙан Хәсән Назар исемен өҫтәп ҡуймаҡсымын.

Хәсән Назарҙың шиғриәте күләм йәһәтенән Аҡмулла һәм Бабич ижады кеүек үк бәләкәйерәк күренһә лә, идея-эстетик, поэтик балҡышы менән сағыу һәм һәлмәк. Хис-тойғоға ҡарағанда уй-фекер, аҡыл ҡөҙрәте менән арбай ул беҙҙе күберәк.

Шул тойом һәм ҡараштарым менән уртаҡлашып ҡарарға булдым Хәсән Назар хаҡындағы ошо мәҡәләлә. Уны нәшер ителгән йыйынаҡ биш йыйынтығы буйынса әҙмә-әҙлектә күҙәтеүгә ҡорҙом.

### *Биографияһы*

Хәсән Назарҙың тормош юлы, үҙ әҙәби тиҫтерҙәренеке кеүек үк, әллә ни ҡатлаулы түгел: мәктәп, колхозда эшләү, белем алыу һәм редакция, журналистика хеҙмәте.

Хәсән Мөҙәрис улы Назаров 1942 йылдың 15 ғинуарында Башҡортостандың Ейәнсура районы Таулыҡай ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуған. Улы тыуғанда инде атаһы Бөйөк Ватан һуғышында йөрөй, күп тә үтмәй, фронтта һәләк булып ҡала. Сабый балаға һуғыш йылдарының, яуҙарҙан һуңғы йылдарҙың тәүге осорон, аслы-туҡлы саҡтарын, өҫтәүенә етемлек тойғоһон кисереп үҫергә тура килә. Мәктәп йылдарының 5–7-се кластарын күрше ауылға – Ҡужанаҡҡа йәйәүләп йөрөп уҡыуҙары ла еңелдән булмай.

Үҫмер булып көс-кәр инә башлағас, колхоз эшенә тотоноп китә, ҡулынан ниндәй эш килә – шуны башҡара: ерен дә тырмата, һабанын да һөрә, иген һуғыу эштәрендә ҡайнай. Бер-ике йәй мал көтөү эшендә лә булып ала.

Йәше еткәс, армияға алына. Хәрби хеҙмәтен СССР-ҙың Европа өлөшөндәге төньяҡ-көнбайыш төбәгендәге урманлы-һаҙлы Жиздра буйҙарында үтә. «Жиздрамы? Бында ғүмере үткән, Циалковский эскән һыу булыр»,– тип иҫкә ала был төбәкте үҙенең «Шәмсыраҡ» исемле поэмаһында шағир. Аҙаҡ ул үҙ алдына уҡып, урта мәктәп программаһы буйынса имтихандар тапшыра.

Армиянан ҡайтҡас, Хәсән Назарҙың артабанғы ғүмере журналистика эше менән бәйле. Башта ул Бөрйән районында «Таң» гәзите редакцияһында эшләй. Был район тормошо, урман эше буйынса мәҡәләләр, очерктар яҙа, шиғырҙарын баҫтыра. Үткән быуаттың етмешенсе йылдары башында инде Өфөгә күсеп, «Совет Башҡортостаны» гәзите, «Ағиҙел» журналы редакцияларында эшен дауам итә. Бер үк ваҡытта ситтән тороп Мәскәүҙең А. М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтында уҡый. Билдәле фронтовик шағир Дмитрий Ковалев алып барған ижади семинар, арҙаҡлы профессорҙарҙың лекциялары, Мәскәүҙең мәҙәни мөхите, ғөмүмән, Пушкин лицейы рухындағы институт донъяһы шағир һәм шәхес итеп танытыр яҙмышында ҙур роль уйнай. Былар артабан шиғриәтендә төп һыҙаттарҙың береһе булыр интеллектуаллек юҫығын билдәләрҙәй йоғонто яһай. Һүҙ һәм фекер ҡеүәһен, үҙ рухи донъяһы, милли ерлегеңә тамырланыу менән бергә, күңел һәм зиһен офоҡтарының киңлеге лә ҡеүәтләй бит. Яҙыусыларҙың, шағирҙарҙың, ғөмүмән, интеллигенция вәкилдәренең оло шәхес, юғары интеллект эйәһе булыуының үҙ рухи биографияһы ла формалашыр. Ижадта шуны тойоу айырыуса мөһим. Яҙыусының, шағирҙың китабынан китабына ижадының нисек үҫешен, камиллашыуын күҙәтеү, һәләт, талант дәрәжәһен аныҡлау, художестволы оҫталығын билдәләү – мөһим шарттарҙың береһе.

Ҡырҡ йылдан ашыу ғүмерен башҡорт журналистикаһына биргән – асылда «Башҡортостан» гәзите, «Ағиҙел» журналы редакцияларында эшләгән Хәсән Назар әҙәбиәт донъяһына егерменсе быуаттың 60-сы йылдар аҙағында – аҡыл йыйып, күпмелер тормош тәжрибәһе туплап, журналистика өлкәһендә йөҙгән көйө һуңлабыраҡ инеп китте. Уның өсөн, үҙе әйткәненсә, шиғриәт – ғәжәп серле, илһамлы, илаһи донъя ул. «Ә нимә ул шиғыр?» тигән һорауҙы ҡуя ла рухты тотор аҡыл бит ул, моң ул, һынланыш, барыһынан элек ул – яҙмыш, тип яуап бирә. Аҙағыраҡ: «Мин ғүмерем буйы бер китапты – яҙмыш китабын яҙам»,– тип тә аныҡлай. Әйҙә, үҙе ҡуйған һорауға яуаптар эҙләп шиғри йыйынтыҡтарына мөрәжәғәт итәйек.

## «Бөркөттәр төйәге»

Бер усҡа һыймалы, ыҡсым ҡулъяулыҡтай йоҡа ғына китап, 60 битле. Күләменә күрә шунса йыйнаҡ 43 шиғыр һыйған. Йәш шағир Хәсән Назарҙың тәүге йыйынтығы, шиғриәт һөйөүселәргә тәүге күстәнәсе. Исеме бик яңғырауыҡлы – «Бөркөттәр төйәге». Ә бөркөттәр түбәндән осмаҫ, төйәктәре лә башлыса тауҙарҙа, ҡаяларҙа булыр. Улар күккә бейеклектән, тау түбәләренән ашып саңҡыр.

Китап исеме, шулай итеп, баштан уҡ шиғриәт һөйөүселәрҙе юғарыраҡ тонға көйләй:

*Аҡ биләүҙә көн тумала*
*Сағылтау түбәһендә.*
*Уйһыуға күсә күк томан,*
*Яҡтыра тирә-йүндә.*
*Ғәжәп бер ни ҙә юҡ һымаҡ,*
*Тик күңел тулы шатлыҡ:*
*Уяуға илһам килтерә*
*Таңғы нур, таңғы сафлыҡ.*

Хәсән Назарҙың тыуған ауылы ла Таулыҡай исемле бит. Ул Урал тауҙарының көньяҡ-көнбайышлап һөҙәкләнеп уйһыулыҡтарға күсер төбәгендә биләндәрҙе берләштереп ята. Автор үҙе әйткәнсә, «Кеше йәнле һиндә тауҙар, уларҙы – күңел һиҙә – аҡыллы сабырлыҡ менән сабырлы аҡыл биҙәй».

*Эй ауылым, ер моңона*
*Һуғарҙың йөрәкте һин.*
*Илатып та, йырлатып та*
*Йәшәргә өйрәттең һин.*

Бына шулай «Таулыҡай» шиғырының дүртәр юллыҡ строфаларынан тауға, биләнгә, үҙәнгә, ергә, моңға, йөрәккә, күңелдәргә бәйле исем-атамаларҙа уҡ киләсәктә бөтә поэзияһы өсөн хас буласаҡ мөһим мотивтар ҙа, гүйә, бер бөтөн теҙем булып ишетелеп ҡала кеүек. Кем белә, бәлки, улар йәш шағир уй-тойғоларында бер бөтөн һымағыраҡ йәшәгәндер ҙә.

Бына **йөрәк** һулҡылдауын ғына тыңлап ҡарайыҡ әлеге китабынан: «Таң ата, таң! Ҡыуаныстан йөрәк ҡуя һамаҡлап»; «Йөрәгемде ҡалдырҙым меңдәрҙә, мең йөрәкте алып үҙемә»; «Йөрәгем бит һиндә ҡалыр, һинең иҫән-һаулыҡҡа»; «Йөрәк тибә ярһып, дарҫлап»; «Тормош ҡороп, уны ҡыйратмаҫҡа, йөрәген таяу итеп көн иткән»; «Ғәйрәтләнә генә барыр һаман, йөрәгенә сәме уйылһа»; «Йөрәк, һыр бирмәҫкә тиһәң, илдең күкрәгенән ситкә тайпылма»; «Урғып сыҡҡан шул шишмәгә иңкәлде талған йөрәк» һ.б.

Ә **күңел** төҫмөрҙәре бына нисегерәк: «Ғәжәп бер ни ҙә юҡ һымаҡ, тик күңел тулы шатлыҡ»; «Кешеләр бар – талған саҡта күңелем таяныр ҡая».

**Моңдары** һуң ниндәй: «Моңдарын алдым бүләккә, ҡырҙарын бишек итеп»; «Әй, йәшлек! Һиндә моңдарҙың ихласы, ысындары»; «Ниңә моңға күмеләм был саҡ, көтмәҫтән күңел тулып»; «Тыуған моңдар, һеҙҙе тыңлап, һәр саҡ уйланам мин тормош хаҡында»…

Шөкөр, 1971 йылда донъяға сыҡҡан «Бөркөттәр төйәге» тигән ошо йыйынтығын поэзия һөйөүселәр, ижади йәмәғәтселек хуплап ҡаршыланы. Матбуғатта бер нисә рецензия баҫылды. Остазы Рәми Ғарипов «Ағиҙел» журналында шағирҙың беренсе китабын хуплап, маҡтап ҙур ғына рецензия баҫтырҙы.

Эйе, йәше менән дә автор өлгөргән, олпатланған ине. Китабы йоҡа ғына булһа ла, йөкмәткеһе менән һәлмәк, шиғри эшләнеше менән ярайһы юғары ине. Башлап яҙышыусы түгел, өлгөрөп етеп килгән талантлы шағир аяҡ баҫа ине оло әҙәбиәтебеҙгә.

Бына был тәүге китабы сығыуына ҡырҡ йыл ғүмер үткәндән һуң Хәсән Назар поэзияһы хаҡында яҙырға йыйынып, «Бөркөттәр төйәге» йыйынтығын ҡайтанан уҡып сығып танышҡас, ошо беренсе йыйынтығы менән үк өлгөргән шағир кимәленә яҡын булғанына төшөнөп хайран иттем.

Берҙән, ул бик үҙенсәлекле шиғриәт – аҡыл поэзияһы. Хис-тойғо, үтә ҡупшы тасуири биҙәктәр түгел, күҙәтеү үткерлеге, аҡыл ҡеүәһе уны хосусиәтле итә. Уның поэтикаһында сағыштырыу, эпитет, метафора, синекдоха ише төрлө тасуири саралар үтә сикле. Шағир хис-тойғоға түгел, аҡылға, инаныстарға өҫтөнлөк бирә.

Тәүге китабының йөкмәткеһенә ҡарағанда, шағир тәбиғәтле шәхес әле үҙ даирәһендә ҡайнай. Тыуған ауылы, Таулыҡай тәбиғәте, кешеләре гел тиерлек үҙҙәренә тартып тора. Хәсән Назар тыуған яғын, тәбиғәтен, кешеләрен шиғри юлдарға һалғанда йыш ҡына үҙенсә фекерләгән, үҙенсә ҡорған, һаран, әммә үҙенсә поэтик биҙәктәрен һәм сифаттарын тапҡан.

Бына, миҫал өсөн, «Усаҡ яна…» шиғырын алайыҡ.

*Усаҡ яна… Яҫҡып төтөн үрләй,*
*Шартлап ҡуя уттың быуыны.*
*Сая егет һымаҡ, ялҡын бейей,*
*Һығылдырып зифа буй-һынын…*

*… Йәнде биләй ашҡыныулы өмөт,*
*Яҡты өмөт – үҙе йыр хәс тә.*
*Был донъяға һөйөп-һағынып*
*килдем,*
*Һағыныуым ҡалыр киткәс тә.*

Бына ошондай һаран һәм тапҡыр әйтелгән күҙәтмә, сағыштырмалар шиғырҙы ут-ялҡынлы, эстән көйрәмәле итә.

Йәки бына «Ишеттем мин бөгөн

яңы бер йыр» юлдары менән башланған шиғырының һуңғы ике куплетын уҡыйыҡ:

*Ғүмерҙең шул ғәмһеҙ минуттарын*
*Хәтерләтте ошо яңы йыр.*
*Бәлки, тағы күптәр күңелендә*
*Шул уҡ кисерештәр яңырыр.*
*Шундай яҡын миңә ул күптәрҙең*
*Ынтылышы, рухы, ырымы:*
*Игеҙәк яһай, ахыры, йөрәктәрҙе*
*Тыуған ер тойғоһо, ер моңо.*

Был юлдарҙа ла, халыҡ йырҙарындағылай, ялтыр биҙәктәр юҡ, ниндәйҙер йыр моңо шағир күңелендә күпме ассоциациялар, хәтерләүҙәр уятҡандай. Әммә шулар ҙа һиҙгер күңелдәрҙе моңға, хәтирәгә сорнарға етә ҡала.

«Ауылымда» тигән тәүге шиғырынан моң сығанағына иғтибар итәйек:

*Моңдарын алдым бүләккә,*
*Ҡырҙарын бишек итеп.*
*Тайҙар өйрәттем меңгегә,*
*Сүкетеп, ер һиңкетеп.*

Строфала бер бөртөк тә биҙәк юҡ, шағирҙың үҙ автобиографияһынан алған эпизод белдермәһе генә бар. Әммә ошонан да хәтерләмә бер картина тыуа. Сираттағы строфаны уҡыйбыҙ:

*Саң-саң иткән салғы сыңын*
*Тыңлай сауҡалыҡтары.*
*Уйнай хәтфә аҡланында*
*Сапсан ҡолонсаҡтары.*

Бында иһә аллитерациялар – оҡшаш һүҙҙәр, сыңдар яңғырашы шиғырға саңҡыл өн бирә, күңелдәргә сиртә.

Хәсән Назар бөтә поэзияһын, поэтикаһын тиерлек халыҡ шиғырының традицион үлсәмдәренә ҡора, шиғырҙарының халыҡ йырҙарындағыса көйләп-йырлап тороуҙарына өлгәшә. Бында хикмәт шағирҙың халыҡ йыры үлсәмдәрен файҙаланыуында ғына түгел – поэзияһын халыҡсанлыҡ рухы менән һуғара белеүендә, шуны бар булмышы менән тойоуҙа.

Шағирҙың тәүге китабынан уҡ **рух** тойғоһо һыҙылып-һыҙланып үтә. Ул шиғыр юлдарында «аяҙлана ир-егеттең рухы, арғымаҡта бәйге сапҡанда»; «Ҡаҡшатма һис рухың, зарланма һин – ул ғәйрәткә бары киҙәнеү» рәүештәрендә лә ишетелә.

Китаптың тыуған ауылы Таулыҡайға бағышланған «Ауылымда» шиғыры менән асылыуы үҙе үк күп нәмә тураһында һөйләй:

*Исемең дә, тыуған ауылым,*
*Үҙе бер моң – Таулыҡай.*
*Тап һине йырлаған төҫлө*
*Мөҡәддәс сазлы Туҡай.*

Тыуған ергә, тыуған ауылға булған һөйөү республикабыҙға, киң илебеҙгә һөйөү-инаныу уй-тойғоларынаса үҫеп, үрелеп китә.

«Бөркөттәр төйәге» шиғырында Башҡортостан образының үҙенсә бер поэтик сағылышын күрәбеҙ:

*Бер тарафта – сәхрә-болонлоҡтар,*
*Бер тарафта – тауҙар төбәге.*
*Йәйрәп ята ғорур Башҡортостан –*
*Батырлыҡ һәм ырыҫ төйәге.*

Һуңғы строфаһы иһә шиғри аккорд кеүегерәк яңғырай:

*Башҡортостан! Һинән гүзәл яҡты*
*Осратманым, күпме ер үтеп.*
*Һин үҙең дә – Ватан киңлегенең*
*Ғорурлығы, сая бөркөтө!*

«Бөркөттәр төйәге» китабы буйынса жанрҙар төрөн аныҡлараҡ билдәләүе ҡыйын. Медитатив поэзия өҫтөнлөк ала.

Хәсән Назар әлегә – лирик шағир. Шиғырҙары ике, дүрт, һигеҙ юллыҡтарҙан алып ун ике юлдар менән сикләнә. Күпселек шиғырҙарына ыҡсымлыҡ, эске уй-тойғолар үҫеше, йыш ҡына поэтик тапҡырлыҡ хас. Ике юллыҡтары афористик мәғәнәле. Бына, миҫал өсөн, «Уҡ» шиғыры:

*Уҡ баһаһы – атылғандан һуң,*
*Һүҙ баһаһы – әйтелгәндән һуң.*

*Мәрәйлектә – мәргәнлек ирке,*
*Мәргәнлектә – егетлек күрке.*

*Уҡ ҡөҙрәте – ян керешендә,*
*Ир ъәйрәте – ил кәңәшендә.*

Шиғырҙарының рифмалашыу тәртибе традицион 2-се, 4-се юлдарҙың уртаҡ яңғырашында. А-б-а-б тәртибендә сатраш рифмалашҡан строфалар осрай. Һигеҙ юллыҡтарҙың тәбиғәт һәм кеше мөнәсәбәттәренә ҡоролғандары бар («Таң ҡыйылып...»). Өс строфалы шиғырҙар ишле генә («Әсәйем», «Туғайҙа», «Һыҙылып китте тын урамда», «Һыҙыла күк көмбәҙендә»). Дүрт юллыҡ шиғырҙар байтаҡ.

«Бөркөттәр төйәге» китабына 1972 йылда «Ағиҙел» журналында сыҡҡан рецензияһында Рәми Ғарипов Хәсән Назар шиғриәтен Рәшит Назаров шиғриәте менән сағыштырып ҡарап, уларҙың ике төрлө поэтик үҙенсәлектәре хаҡында бик ҡыҙыҡлы фекерҙәр әйтә: «Хәсән Назаров хаҡында һөйләгәндә, ирекһеҙҙән, уның ҡәләмдәшен, шул уҡ һалдат юлын үткән Рәшит Назаровты иҫкә төшөрәһең. Фамилиялары менән оҡшаш булһалар ҙа, бер-береһенән улар бөтөнләй айырылып торған икеһе ике характер. Хатта уларҙың шиғриәттәрен бер-береһенә ҡапма-ҡаршы торған антиподтар итеп ҡарарға ла булыр ине.

Әйтәйек, тегеһе – Рәшите – ярһыу, ә быныһы сабырыраҡ тәбиғәтле. Тегеһе киң ҡоласлы образдар менән уйлаһа, быныһы тормош һәм тәбиғәттең бик ваҡ деталдәренә лә ентекләп ҡарай белә. Әйтәйек, береһенең ҡулында – телескоп, икенсеһендә – микроскоп. Тегеһе бер аҙ ҡырыҫыраҡ булһа, быныһы баҫалҡыраҡ. Рәшит ярһыу тойғоло, хатта космик образлы романтик булһа, Хәсән – эске кисерештәр менән тулы сабыр моң шағиры, нескә лирик. Тәүгеһе шиғыр структураһын ҡороуҙа эре, сағыу мозаика менән эш итһә, баҙлап торған төҫтәр ятаһа, икенсеһе йомшаҡ, ағымлы акварель менән эш итә, ярым күләгәле, береһенән икенсеһенә талғын ғына, һиҙҙермәй генә күскән төҫтәрҙе үҙ итә. Бөтә шиғыр туҡымаһында Рәшиттәге мажор урынына быныһында минор ноталары өҫтөнлөк ала. Быларҙың ҡайһыһы яҡшыраҡ һуң? Минеңсә, икеһе лә яҡшы – имәне лә, ҡайыны ла». (Рәми Ғарипов. Әҫәрҙәр. III том. 105-106-сы биттәр).

Шағирҙың был йыйынтығын уҡып сыҡҡас, шиғырҙарҙан бына был тапҡыр, кинәйәле, тос мәғәнәле юлдар күңелдә ҡала, төрлө ассоциацияларға юлыҡтыра, тәьҫоратлы кисерештәр уята, шағирҙың үҙенсәлекле тауышын, табыштарын тоҫмаллата:

*Тик һыу ғына эскәндә лә үҙе,*
*Телдәремә минең бал яҡҡан.*

(«Әсәйемә»)

*Ҡаһармандар ята ҡуйынында,*
*Һыуытмаҫҡа тиеп был ерҙе.*

(«Күгүләнгә күмелә түмәләстәр»)

*Япраҡтар йыя бер сабый*
*Әллә ни ҙур эш итеп.*
*Аңлап уны, һөйөп үтәм*
*Ҡәҙерле моңдаш итеп.*

(«Көҙгө көн...»)

*Ашыға һәр кем әйтергә*
*Йылы һүҙ, изге кәңәш.*
*... Әсәкәйем баҫып тора*
*Сабырлыҡ менән йәнәш.*

(«Һалдатҡа оҙата ауыл...»)

*Бөркөт яулай яңы бейеклекте,*
*Ҡаяларҙа томан ҡуйырһа.*

(«Үҙе түгел, аты абынһа ла...»)

Бындай асышлы, моңло, фәһемле юлдарҙы байтаҡ килтерергә мөмкин. Шағир асылын билдәләр һыҙаттар сағыла уларҙа. Тап шулар артабан ватансыл уй-тойғоларға барып тоташыр, үҫер, көсәйер, киң һулыш алыр.

Хәсән Назар поэзияһын бөркөт саңҡыуына ла оҡшатырға мөмкин. Сағыу саңҡыу өнлө ул.

Шуныһы мөһим: һәр шиғыр камил

бер әҫәр булып, сәнғәтсә бер бөтөнлөктә, тәрәнлектә тыуған. Уларҙы уҡығас, «йырҙың йыртығы юҡ» тигән һүҙҙәр иҫкә төшә. Шағир үҙ ижадын ошо үҙенсәлектә, ошо рухи үҫештә дауам итәсәк, оло уй-кисерештәр даръяһына етәсәк.

## «Шоңҡар сөйәм»

Хәсән Назарҙың был икенсе китабы тәүге «Бөркөттәр төйәге» китабын сығарыуға егерме йыл үткәндән һуң ғына донъя күрҙе. Егерме йыл – ижад өсөн, әлбиттә, шаҡтай ғүмер. Әммә кеше ғүмеренең, яҙмыштарҙың төрлө осорҙары, осоштары, донъя, тормош ҡороу мәшәҡәттәренә сумған, ауырлыҡтар кисергән дәүерҙәре булыр. Донъя көтөү, ғүмер итеү, урыҫ мәҡәле әйткәнсә, баҫыу юлын үтеү түгел. Әммә төп сәбәп тормоштоң, дәүерҙең күңелдәрҙе сайраҡтан, идеалдарҙан алдатҡан, рух азатлығын, азатлыҡ рухын быуған йылдарына ла бәйлелер, тип уйлайым мин. Шағир риторикаға бирелеп алдауҙан, алданыуҙан өндәшмәй тороуҙы өҫтөнөрәк тә күргәндер, ихтимал. Һәр орлоҡ үҙ тупрағын да, үҙ миҙгелен дә көтә бит.

Күптәр яҡшы белә: ауыл кешеһенең ҡалаға килеп төпләнеп китеүе, фатирлы булыуы, ғаилә ҡороп ебәреүе әкиәттәге суртан әмере буйынса ғына бармай шул. Йәнә ижад, ҡәләм эшенең үҙ яйы, үҙ хәстәрҙәре лә күп булыр. Илһам да көйһөҙ ҡунаҡ менән бер.

Атаҡлы авар шағиры Рәсүл Ғамзатовтың шундай шиғыр юлдары бар:

*Ҡәләмеңде ашыҡтырма, дуҫым,*
*Тотанаҡлыҡ уны үткерләй.*
*Өлгөрмәгән сейәләрҙе өҙөп*
*Әсетелгән шарап көс бирмәй.*

Был шиғыр юлдарын, ғөмүмән, XX быуаттың бөйөк шағиры Рәсүл Ғамзатовтың башҡа шиғырҙарын тәржемә иткән, шиғри тәржемә менән дә ихлас шөғөлләнгән Хәсән Назар ысын ижадтың ни икәнен тәрәнерәк беләлер.

«Шоңҡар сөйәм» китабына башта бирелгән «Редакциянан» тигән белешмәлә былар хаҡында ла һүҙ әйтелеүе осраҡлы түгелдер.

Хәсән Назарҙың икенсе китабы шаҡтай һәлмәк, ул йөҙ биттән ашыу. Уға беренсе китабынан да айырым өлгөләре индерелгән, әммә яңылары, иң шәптәре уға төп тон һәм моң бирә.

*Йылдарымдың инде артта ҡалды*
*Шуҡ егетте уйсан иткәне.*
*Аҙмы тойҙом донъя елдәренең*
*Йөрәк аша нисек үткәнен, –*

ти икән шағир, беҙ быны яңы китабына күҙәтеү яһау буйынса анығыраҡ белә алабыҙ.

Беҙҙең халыҡта «Ауыл балаһы ҡалала йәшәһә лә, уйҙары йыш ҡына ауылда булыр» тигәндәй әйтем һүҙе бар. Бына ошо уй-һағыш «Шоңҡар сөйәм» китабында ла күңелдәрҙе моңландырып һыҙыла-һуҙыла килә.

*Юл кейеме өҫкә кейелгән,*
*Әйтмә, әсәй, кире һал, тиеп.*
*Ярһыу аттар инде егелгән,*
*Өгөтләмә, әсәй, ҡал, тиеп…*
*Юҡ, туҡтатма, әсәй, улыңды,*
*Минең өсөн кем һуң юл ярһын!*
*Өмөттәрем еккән аттарҙы*
*Бәхеттәрем генә туғарһын.*

Ысындан да, күпме моң-һағыш ята бындай юлдарҙа – уларҙың нескәлеген күңел менән генә тойорға мөмкин. Шиғыр ниндәй ҡойоп ҡуйып эшләнгән: тәүге строфала һәр юл, һәр һүҙ эске моң яңғырашлы, үтә рифмалы. Икенсе строфалағы «Өмөттәрем еккән аттарҙы бәхеттәрем генә туғарһын» тигән фразаларҙы ла аҡылға ҡарағанда күңел тәрәнерәк тоялыр, моғайын.

*Ил төйнәгән «Урал»дары*
*Бәъерҙәргә урала.*
*Уйып һала «Уйыл»дары –*
*Уйһыҙ-моңһоҙ ҡыурама!*

Бындай куплеттар, башҡорт классик йырҙарындағылай, эске, төпкө

яңғыраштары менән үк шиғырҙы йырмоңға һуғара.

*Ә һуң моң үҙәге һүҙҙәр,–*
*Ынйы итеп теҙергә!..*
*«Баҡыр ъына был донъялар*
*Аҫыл уйлы ирҙәргә!»*

Был куплетта һүҙҙәр моңо ғына түгел, йәтеш килтерелгән халыҡ йыр юлдары ла шиғыр менән йырҙы ҡушарлай.

Әгәр шағир теләй икән, бер строфала образды ла ҡойоп ҡуя ала. Мәҫәлән:

*Бала саъым яҙҙы йөрәгемә:*
*Ер – ҡәҙерле, ъәзиз, ер – изге!*
*Ә йыһан ул – Ерҙең бөйөклөгөн*
*Саъылдыра торъан бер көҙгө.*

Йыһан – ерҙең көҙгөһө: образ әҙер.

Әйберҙәргә мәҙхиә шиғырҙарын алайыҡ. Көндәлек тормошта ҡулланылған иң кәрәкле әйбер-ҡорамалдарға шағир образ ҡоя ла ҡуя. Улар тағы халыҡ йырҙары, халыҡ уй-хәстәре менән ҡушарланған булыр күпселегендә.

Бына **«Бәке»** шиғыры. Үҙе йыр эпиграфлы:

*Алтын һаплы көмөш бәкем*
*Һынды талдар киҫкәндә;*
*Өҙөлөп иҫкә һин төшәһең*
*Таң елдәре иҫкәндә.*

Бәке – тормошта кәрәк-яраҡҡа хеҙмәт итә. Унһыҙ кеше, гүйә, тере ҡулһыҙ. Бәкенең йәнә тормошта, йолаларҙа символик мәғәнәләре лә бар бит әле. Ул йыш ҡына – кейәүҙәрҙең ҡәйнешкә туғанлыҡ бүләге, иҫтәлек әйбере. Алтын һаплы көмөш бәкеләр – сувенир күрке. Ә шиғырҙа бәке – тотош бер быуын яҙмышын дөйөмләштереүсе образ-символ.

**«Шырпы»** шиғырын лайыҡ. Шағир әйткәнсә, «уйлай ҡалһаң, оло мәғәнә бар ошо ябай ғына шырпыла». Ауыл ерендә, урман-тауҙар, яландар ҡосағында, юлдарҙа шырпыһыҙ йөрөп ҡара – тере ҡулһыҙ, арманһыҙ булырһың. Ә шиғырҙа ул донъя күтәреүгә бәйле кинәйәле бер образға әүерелә.

**Сәңгелдәк.** Күпме әҙәм балалары тирбәлеп үҫкән сәңгелдәккә бәйле күпме йырҙар тыуғандыр, әммә сәңгелдәккә махсус шиғырҙар бағышланғанын әллә ни күргән дә, хәтергә һалған да юҡ кеүек.

Был шиғыр тураһында халыҡ шағиры Назар Нәжми, үҙе бер романға торошло әҫәр, тип баһаланы. «Бәке» шиғырына ҡарата ла шулай тине.

**Сыбыртҡы.** Ул да – атлы, һыбайлы кешегә кәрәкле әйбер. Сыбыртҡының кинәйәле мәғәнәләре лә барҙыр. Әммә бына уға бағышланған шиғырҙы күргән юҡ ине. Үҙе әллә күпме фәһемле мәғәнәгә эйә, имеш.

Һәр хәлдә, Хәсән Назарҙың әйберҙәргә мәҙхиә шиғырҙары үҙҙәре бер күңел ҡылы булыр, уйландырыр нәмәләр.

Ташты ташҡа һуғып сатҡы саҡтырып була, әйберҙәрҙе тотоноп, хәжәттәрен күп күргән, күнегеп бөткән өсөнмө, шағирҙарҙың уларға атап шиғыр яҙғандарын иҫләмәйем. Был – Хәсән Назар ижадындағы шиғриәтебеҙгә килтергән, тормошсанлыҡты еректергән үҙе бер үҙенсәлек ул. «Шоңҡар сөйәм» китабында **моң** мотивының шиғырҙан шиғырға ниндәйҙер бер эске көй булып һыҙыпһыҙылып үтеүен, күңелдәргә һарылыуын тояһың. «Туған моңдар» шиғырында яҙғанса, шағир ҙа, туған халҡы шикелле, «аманатын һөйләп йыр-моң аша, көс, таяныс алып өмөттән, тормош ҡороп, уны ҡыйратмаҫҡа, йөрәген таяу итеп көн иткән». «Ә һуң моң үҙәге һүҙҙәр, ынйы итеп теҙергә!»

Шағирҙың ҡайһы шиғырын ғына алма, һиҙгер күңел уның эске моңон тойоп ала. Моң йөрәк аша үтә. Шуға микән, Хәсән Назарҙың был икенсе китабында йөрәккә бағышланған шиғырҙары ла байтаҡ.

Шағир Рәми Ғарипов Хәсән Назар шиғырҙарын Рәшит Назаров шиғырҙары менән сағыштырып ҡарағаны

шикелле, беҙ ҙә Хәсәндең «Һинеке» тигән шиғырын Рәшиттең «Йөрәк» шиғыры менән сағыштырайыҡ әле. Билдәле булыуынса, Рәшит Назаровтың «Йөрәк» шиғыры романтик рухлы, күктәргә ашмалы. Ә Хәсән Назарҙың «Һинеке» тигән шиғырында йөрәк ике ғашиҡ кешенеке, күкрәктә типкән йөрәктәр.

*Минең йөрәк – һинең төйәк,*
*Һинеке бар булмышы.*
*Унда тик яҙғы ярһыуҙар,*
*Юҡ уның көҙө, ҡышы.*

*Тик һиңә айы, ҡояшы,*
*Тик һиңә бөтә наҙы.*
*Һин генә һағыштарымдың*
*Иң сыуаҡ, иң аяҙы…*

Ике йөрәктең ҡайнарлыҡтары, мөхәббәттәре бер-береһенә тиңдер, уртаҡ мөхәббәттер. Шуға ғишыҡ һүҙҙәре лә тәбиғи, йөрәктән сыҡҡанса типә-тиң тибә. Минор тонлы.

«Ҡояшлы һинең күҙҙәрең» шиғырын тыңлайыҡ:

*Болотло минең көндәрем,*
*Болотло – һин булмағас.*
*Болотло минең төндәрем,*
*Болотло – һин һуңлағас.*

Мөхәббәтле шағир һүҙҙәрҙе ҡалай һарып, типә-тиң килтереп теҙеп төшөрә. Анафорик стилистик фигуралы алғы һүҙҙәрҙе, эпифорик стилистик фигуралы артҡы һүҙҙәрҙе ҡалай оҫта һарып бирә: пар йөрәктәрҙең типә-тиң тибешен әйтеп-ишеттереп торғандай. Шуға яйлы рифмалары ла а-б-а-б сатрашлығы тәртибендә ҡойоп ҡуйғандай.

*Кисен һыҙғырып үтһәм бер,*
*Тәҙрәңде һин асҡан бул.*
*Юрый ғына ҡасҡан бул да*
*Йүгереп килеп сыҡҡан бул.*

Был строфа ла – шиғырҙы ритм-интонация, рифмалар системаһы йәһәтенән ҡойоп ҡуйған үрнәк. Һәр һүҙ, гүйә, йырлап-көйләп тора. «Аҡ сәскәле аҡландарҙа», «Киске иҙел», «Иҫеңдәме, күгүләндәр кисеп…» тигән шиғырҙарға ҡарата ла шуны уҡ әйтеп була. Уларҙа – мөхәббәтле йөрәк һағышы, йөрәк ҡағышы, йөрәк тауышы. Бына шулай шағирҙың поэтикаһы ысын мәғәнәлә һырлап-семәрләп ҡуйыла.

Шиғыр ул – гармония тип йәшәгән, шағир – рух илсеһе ул тигән ижадсы өсөн, йөрәк шикелле, күңел дә берҙәй үҙ.

Күңел – ул кешенең нескәрәк рухи донъяһы. Рухиәт даирәһе. Шиғри рухлы шәхестәр уны нескәрәк тоя. Шуға шағирҙың күңел тибрәнештәрен күҙәтеү ҙә фәһемле. Хәсән Назарҙың күңел ағыштары, ғәҙәттә, тилбер һәм һағышлы: «Күңелемә ҡырҙар аша моң тоташа эңерҙә»; «Ҡалды хәҙер, сыңрап күңел, юҡһынып гел йәшәргә»; «Һүҙ тапмаҫтан ҡалдым күңелемдә һин урғылтҡан моңло көйөмә»; «Күңелгә бит ҡеүәт кенә өҫтәй кинәндереп ерҙе арығаның».

Китапҡа исем биргән «Шоңҡар сөйәм» шиғыры шағирҙың рухи осош бейеклектәрен, күңел тойомдарын да аңлата, буғай.

*Ҡош һынала һауаларҙа,*
*Шунда төшә ҡомары.*
*Түҙмәй ҡулда, күккә әйҙәй*
*Ҡыйғыр ҡанат шоңҡарым.*
*Саңҡып ҡуя сая рухым,*
*Күктәргә тейә түбәм.*
*Шоңҡар сөйәм! Ҡош сөйөрҙәй*
*Иркен иректе һөйәм.*

Шоңҡар менән һунар, шоңҡар сөйөү – башҡорттарҙа борондан килгән йола, үҙенсә бер һөнәр.

*Атанан күргән – ҡош сөйгән,*
*Сәмемә күрә – самам.*
*Ир-егеттең үҙен дә бит*
*Шоңҡар итеп йондоҙғаса*
*Сөйә был бөйөк заман!*

Ана ниндәй ҡеүәттәргә өлгәшә,

йыһандарға ашмалы булып китә шоңҡар сөйөү төшөнсәһе. Йәнә «Шоңҡар сөйәм» төшөнсәһе шағир өсөн «затыма ҡарап – зауҡым» тигән һығымтаға, рух, күңел мәғәнәһенә лә эйә икән.

Шағирҙың был китабына ҡәләмдәштәренә яҙған тапҡыр пародиялары, А. Пушкиндан, А. Блоктан, Р. Ғамзатовтан, Ҡ. Кулиевтан, Л. Талалайҙан бына тигән шиғри тәржемәләр индерелгән.

### «Заман заңы»

Шағирҙың был 1995 йылда нәшер ителгән ҡатырға тышлы, 150-нән ашыу битле өсөнсө йыйынтығы – шаҡтай ҡалын китап.

Өс, өстән ары – көс, ти халыҡ мәҡәле. Өс таған төшөнсәһе бар. Өстөң тағы ниндәйҙер хикмәтле мәғәнәләре осрай телдә. Өс – ныҡлыҡ, баҙыҡлыҡ билдәһе лә. Башта уҡ мин Назар Нәжмиҙе, Рәшит Назаровты, Хәсән Назарҙы шиғриәтебеҙҙәге өс таған тип тә әйтеп үткәйнем. Таймаҫлыҡ өс таған улар.

Хәсән Назар был йыйынтығына «Ғәмәлдә мин бер китапты яҙам» исемле инеш мәҡәлә лә урынлаштырған. Ғүмеремде шиғыр итеп яҙам, ти ул.

*Шиғыр – дәрес түгел, йән һыуһыны,*
*Хирес түгел уға һәр кем дә.*
*Иманлыға ғына илаһи ул*
*Мәңгелекте ҡыуған Ҡөрьән дә.*

Яҙыусы менән шағирҙың айырмаһы шунда: яҙыусы йөрәге тормош аша үтә, ә тормош шағир йөрәге аша үтә. Ғүмер китабымда – рухым, унда – асылым, ти автор. Шулай әйткәндәрен шағирҙың ижад кредоһы тип ҡабул итәйек.

Китаптың беренсе бүлеген күҙәткәндә, шағирҙың үҙ тыуған яҡтарына, үҙ рухи донъяһына бағланышлы шиғырҙарын һайлабыраҡ урынлаштырғанын күрербеҙ. Улар араһында быға сыҡҡан китаптарынан алынғандарын, күпселектә яңыларын танырбыҙ. «Мин – мин инде» тигәненә ныҡыраҡ төшөнөрбөҙ.

Шағир донъяны, йәшәйеште күпмелер аңлай барған һайын, һорауҙары ла күбәйә. «Ниңә?» тигән шиғырында «Аҙ ғүмерле була урмандарҙа шыңғырап та торған ағастар», «Ниңә һирәк ысын азаматтар, аҫыл иргә ер аҙ ҡыуана?» тип һорауҙарын теҙә. «Көн менән төн хөкөмөндә үтә әҙәм ғүмере. Ҡайҙан белмәк – ҡәһәтеме, рәхәтеме тейерен?», «Һағалай ниндәй касафат? Белмәй йәне керһеҙҙәр…»

«Көн менән төн хөкөмөндә» шиғырында ҡуйылған шундай һорауҙарға ла яуаптар юҡ. Шағир аптырап: «Аҙап тулы был донъялар килмәҫме тиеп рәткә, Ерҙең, күктең аһтарын мин яҡын алдым йөрәккә»,– ти.

*Яҡшырҙымы яҡшырмаҫы*
*Минең әрнеү, көйөүҙән?*
*Яҡтырҙымы яҡтырмаҫы*
*Шәмсыраҡтар теҙеүҙән?*

*Тыңлап, тыңламамыш булды:*
*Серемде һатты берәү.*
*Аңлап, аңламамыш булды:*
*Кәремде ҡаҡты берәү.*

Яуапһыҙ һорауҙары һорауҙар инде, шиғырҙың эске айышына, моңһоу асылына иғтибар итегеҙсе, аянparam моңайып типкән, үҙәктәргә үтмәле бөтөн шиғыр юлдары моң-һағыш теҙеме бит. Бына поэтик аһәң ниндәй ҡеүәткә эйә!

Донъяла һорау өҫтөнә һорау:

*Көн менән төн хөкөмөндә*
*Үтә әҙәм ғүмере.*
*Ҡайҙан белмәк – ҡәһәтеме,*
*Рәхәтеме тейерен?*
*Иҙҙең, тормош, иңдәремде,*
*Йәлләмәй таштарыңды.*
*Тик әйтмәм, ал, тип, ҡара ер,*
*Ҡайғылы баштарымды.*
*Был донъяларға рәхмәтем,*
*Ләғнәтем – барыһы миндә!*
*Барыһы миндә,*

*Тик үҙем мин –*
*Көн һәм төн хөкөмөндә.*

Ана, уйҙар, һорауҙар ташҡыны ҡалай айҡалып төшә, һорауҙары баштан аша, ә яуаптары юҡ – ләм-мим, ниндәй фани донъя был?! Бында фәлсәфәгә бирелеүҙән фәтүә юҡ, осона сыҡҡыһыҙ һорау өҫтөнә яуапһыҙ һорауҙар ғына. Әй, донъя, фаниҙың фанийы шул! Бына донъяның бер аянысы ҡайҙа.

«Йәшәп ятам…» шиғырын абайлайыҡ. Эпиграфы: «Был донъялар беҙгә фани ғына» – әсә һүҙҙәре. Әсәһенең бала сағында әйткән был һүҙҙәрен буласаҡ шағир улы хәтерендә һаҡлаған. Бәлиғ булғас аңлаған:

*Төптәренә төштөм көнкүрмештең,*
*Ул – хаяһыҙ, ҡотһоҙ, киҫәкһеҙ.*
*Эт тә түҙмәҫ йән яраһын ямап,*
*Эт ҡайышы булып бөттөк беҙ.*

Ошо яуаптан да башҡа донъяға аныҡ яуап биреү ҡыйындыр ул. Ҡайҙан ҡыйма, ҡыйыңы килеп сыға торор. Реквием көйләүҙән башҡа сара юҡ («Реквием» шиғыры). Яман заман заңы – эт ҡаны, тигән беҙҙең халыҡ.

Юҡ, юҡ, заманалар заңы күп ҡырлылыр, төрлө зыңлылыр ул. Дәүерҙәренә ҡараптыр.

«Заман заңы» китабынан аңлашылыуынса, кешенең, шағирҙың үҙенең дә тормошҡа, йәшәйешкә ҡарата аңлауҙары кимәлендә һорауҙары ла, аптырауҙары ла гел арта бара кеүек. Нимә ул тормош? Йәшәү мәғәнәһе йәки мәғәнәһеҙлеге, фанилығы менән баҡыйлығы нисегерәк? Яҙмыш асылы ниҙә?

Бер ҡараһаң, фаниҙарҙан фани кеүегерәк шул донъя. Донъяны күрҙем, төшөнөп еттем, тигәндә генә, уның менән хушлашырға, донъянан үтергә ваҡыты етә. «Йәшәү – күҙ менән ҡаш араһы» тип әйтеүе менән шағир хаҡлылыр, моғайын. Йәки: «Сәңгелдәк менән табуттың арауығы был донъя». Шекспирҙың Гамлетын тетрәндергән трагизм кимәлендә әйтелгән был. Хәйер, Хәсән Назар «Гамлет монологы»н юҡҡа ғынамы ни ҡойоп ҡуйып тәржемә иткән.

«Ер аҫты, теге донъя» тигәндәре нисегерәктер, ҡоро хыял, йыуаныс ҡына түгелме икән?! «Бында хатта ҡәбер таштарынан серле сараһыҙлыҡ һарҡырай. Әллә ниндәй бер моң мәңгелектән сыға алмай, гүйә, йән һорай».

*Тормош ҡороу… Ҡора уны кеше,*
*Уттар йотоуға ла ҡарамай.*
*Тормош ҡороу… Ҡорой бер саҡ кеше,*
*Яҙмышты һин юра-юрама.*

*Барыһы фани… Пәйғәмбәрҙәр хатта*
*Сығалмаған унан йырылып.*
*Был донъяла, ҡалһа, хәтер ҡала –*
*Ғилем, доға, моңло йыр булып.*

Йәшәү – үлем бар. Ә теге донъя бармы, юҡмы? Мәңгелек һорауҙар, гүйә, мәңге яуапһыҙ йәшәп килә. Бер кем теге донъянан әйләнеп ҡайтып хәбәр һалғаны юҡ. Ғүмер баҡый булмаҫ та. Ошолар ҙа, ахыры, уяу йөрәктәрҙә йырҙы, моңдо, шиғырҙы мәңге йәшәтәсәк. Мөхәббәт менән бергә.

*Өҙөлөп тә китеп һайрай ҡоштар,*
*Тыңлайҙармы – уйлап бирмәй улар.*
*Яҡты донъяларға һөйөнөр бирәү,*
*Уҙған ғүмерҙәрен бирәү уйлар.*

*…Һайрай ҡоштар… Иртә-кисен улар*
*Зауыҡлы, саф өндәр, ай, сәсрәтә!*
*Әммә моңдар – бары кешеләрҙә,*
*Кешеләр бит йәшәй уй-хәсрәттә.*

«Һайрай ҡоштар…» тигән был шиғырҙағы көй-аһәңде «Илкәйем, иҙелкәйем» тигән шиғыр тағы көсәйтә, үҙәктәрҙе өҙөрлөк итеп, йәнеңде сыңратып фанилыҡ моңона сорнай:

*Ҡала шул – ил дә, иҙел дә*
*Ғүмерҙән ҡала икән.*

*Әллә ниндәй һағыш булып*
*Йөрәктән ала икән.*

Ғүмер моңо, яҙмыштар сыңы йәшәү ҡәҙерҙәрен белергә лә өйрәтә, иҫкәртә, күңелде сафландыра, ҡәрҙәшлек тойғоһон үҫтерә:

*Әйтмә һин кем икәнеңде,*
*Ниндәй юл ҡыуъаныңды.*
*Көйләп ебәр ауыл көйөн,*
*Танырмын туъанымды.*

Шул йырҙарҙы йөрәктәргә еткергән йырсыларға ла рәхмәтле шағир. Ошо хистәр менәндер ҙә ул, мәҫәлән, ҡабатланғыһыҙ йырсы Фәриҙә Ҡудашеваға арналған һимммәтле әҙәби-иллюстратив альбомды төҙөп сығарҙы, уға арнап ошондай юлдарҙы яҙҙы:

*Рәхмәт, йырсы! Күңелдәрҙә*
*Иретеп, гүйә, боҙҙо,*
*Һаҡлаштың ауыр йылдарҙа*
*Милли асылыбыҙҙы.*

Хәсән Назарҙың үҙенең дә затлы, зауыҡлы шиғриәте милли асылыбыҙҙы һаҡлауға хеҙмәт итерлек. Быны уның «Заман заңы» тигән ошо китабы ла, алдағы ижады ла раҫлаясаҡ. Шағирҙың йәшәү асылдарының, шиғриәт ҡиммәттәренең береһе шунда түгелме ни?!

Эйе, был яҡты донъяла кешенең кешесә йәшәп китеүе ҡиммәт, иң оло һиммәт. Донъя үҙенең яҡтылығы, яҡшылығы менән мауыҡтырғыс. Кешесә йәшәп, кешесә оло булып, был донъянан тыныс үтеүҙәре үҙе үк мәрхәмәт һәм мәртәбәләр.

Кеше, кешелек, ни генә тимә, рухы менән бөйөк. Ысындан да, дин өйрәтеүенсә, рух – мәңгелек төшөнсәләр, мәңгелек ҡөҙрәттер ул. Кеше, әҙәм – шул рухты йөрөтөүсе, йәшәтеүсе зат бит. Ә рух үлмәй, ғалимдар аңлатыуынса, рух күккә, биосфераға аша. Баҡыйлыҡ, бәлки, үҙе шулдыр. Кем яҡшыраҡ белә – йәшәү һәм үлем, материя һәм рух мәсьәләһендә материалистарға ҡарағанда идеалистар тәғлимәте, рухи заттар, иманлылар ҡеүәтлерәктер. Кеше рухы менән көслө, кешелек рухиәте менән үлемһеҙ һәм бөйөк.

Бына шундай философияға ла илтә рухиәт һәм шиғриәт. Әлбиттә, илаһи рухлыһы.

Интеллектлы шағирыбыҙ хатта асырғаныбыраҡ та «Тыңлау кәрәк беҙгә Бетховенды, аңлау кәрәк беҙгә Блокты, ташлау кәрәк беҙгә, уларһыҙ ҙа йәшәп була, тигән ҡылыҡты», – ти.

*Үҙ асылың асыр өсөн хатта,*
*Тарафтарҙы күр һин, бел тәүҙә.*
*Донъя – тәрән, донъя – ҡатлы-ҡатлы,*
*Тик беҙ бер ҡатлыбыҙ, һәлкәү ҙә.*

**Иман** тота донъяны. Хәсән Назар үҙен иман илсеһе итеп тоя «Заман заңы» шиғырында.

Заман, Ваҡыт, Кеше кешелек алдында һәр саҡ һорауҙарын, талаптарын ҡуя килә. Ваҡыт һәр замандың үҙ ҡанундарын да яҙа тора:

*Ваҡыт яҙа донъя ҡанундарын*
*Ҡылыс менән, һабан менән дә.*
*Ваҡыт ҡуя тормош талаптарын,*
*Яуап кәрәк һинән, минән дә.*

Ана шулай заман һәм заманалар заңы әлеге китапта төрлө мотивтар, һорау һәм яуаптар менән аралашып, үҙенсә зыңлап үтә.

Китапта бер бүлексәне бағышлауҙар тәшкил итә. Улар үҙ ижади рухына яҡын йәки дуҫ, ҡәләмдәш күргән шағирҙарға бағышланған: Рәшит Назаровҡа, Рауил Бикбаевҡа, Мостай Кәримгә, Назар Нәжмигә, Рәми Ғариповҡа, прозаиктарҙан Рәшит Солтангәрәевҡа. Һәр бер әҙиптең ижад рухына, холоҡ-ҡылығына ҡарай ниндәйҙер үҙ асылдарын табып, поэтик фекер, хөрмәтләү һүҙен мәргән итеп әйткән. Урыҫ эмигрант шағиры Бродскийға – абстракт диссидентлыҡ поэзияһына ҡарата бер шиғыры ла бар арала. Шиғыр яҙып булашҡан шиғырсыларға

йә талантттарға ҡарата көнсөлдәргә А. С. Пушкиндың «даһилыҡ һәм яһиллыҡ һыйышмай» тигән һүҙҙәрен килтереп бер шиғыр сәпәгән.

Хәсән Назарҙың поэтикаһына традицион жанрҙар һәм ҡәҙимге – классик шиғыр системаһы хас. Жанрҙары ҡәҙимге төрки шиғырҙары – мәҙхиә, бағышлау, тойоҡ, йыр, ҡобайыр, тағы килеп дүрт, биш, һигеҙ юллыҡтар. Строфалар системаһы икенән һигеҙгә тиклем юлдар эсендә тирбәлә. Һигеҙ юллыҡтарында ла уй-хис ағышына ҡарағанда аналитик фекер үҙәктә ятыусан.

Бер миҫал:

*Көндәр аша ерҙә, төндәр аша*
*Быуын-быуын үтә эркелеп.*
*Ята кеше бер саҡ сәңгелдәктә,*
*Табутта ул ята бер килеп.*
*Табутты ул гүргә алып китә,*
*Ҡайтыуҙар юҡ ҡара сөңгөлдән.*
*Ә сәңгелдәк һәр саҡ ерҙә ҡала,*
*Донъялыҡта ҡала сәңгелдәк.*

Рифмалар системаһы дүрт юллыҡтарҙа шулай уҡ традицион нигеҙҙәге икенсе менән дүртенсе юлдар рифмалашыуына ҡорола. Шул уҡ ваҡытта ара-тирә беренсе менән өсөнсө юлдарҙы ла рифмалаштырған классик сатраш рифма системаһының да бик төҙөк һәм матур яңғырашлы өлгөләре туп-тулы.

Хәсән Назарҙың ике юллыҡтары, Көнсығыш поэзияһындағы кеүек, йыш ҡына афористик мәғәнәле («Йырлай төн», «Уҡ» ише шиғырҙар). Шиғыр юлдарын үтәнән-үтә рифмалаштырып, тәрән моңға, йөрәк тибешен хәтерләткән тигеҙ ритмға көйләнгән, йырлап, тактлап торған бынамын тигән үрнәктәрен ижад итә.

Бына бер-ике миҫал, тәүгеһен бая килтереп үткәйнем инде:

*Яҡшырҙымы яҡшырмаҫы*
*Минең әрнеү-көйөүҙән?*
*Яҡтырҙымы яҡтырмаҫы*
*Шәмсыраҡтар теҙеүҙән?*
*Тыңлап, тыңламамыш булды,*
*Серемде һатты берәү.*
*Аңлап, аңламамыш булды,*
*Кәремде ҡаҡты берәү.*

Строфаларҙа һәр юл, һәр бер һүҙ үҙара рифмалы эске яңғыраш алып, шиғырҙы тактлап торған йыр-моңға әүерелдерә. Рифмалар системаһы а-б-а-б классик нигеҙле.

Йәки бына «Киске иҙел» шиғырының тәүге аккорды:

*Алҡынып китә ағын һыу,*
*Ярҙар ҡалҡынып ҡуя.*
*Ҡанаттарын яҙып, ҡаҙҙар*
*Талпынып ынйыы ҡоя.*

Ошондай эске яңғыраштар шиғырға моң, тон өҫтәй. Йәки «Йырлай төн» шиғырында:

*Мин уяу. Күңелем һаҡ. Йырлай төн.*
*Әйтерһең, ҡумыҙмы – сыңрай өн…*
*…Был – минең мөхәббәт ауазы,*
*Ҡанатлы күңелдең моң-сазы,–*

ише юлдарын уҡый бара, күңелдәр моң көйөнә һуғарыла, моңлана килә. Пар рифмалар яңғырашын һүҙҙәр айышы-моңо уҡ моң-сазға әүерелдерә. Бындай шиғыр, строфа үрнәктәрен моңло һүҙ сәнғәте тип атарға мөмкин. Ана шундай шиғырҙарҙан моң-шиғриәт тыуыла, фәлсәфилек һаркыла.

*(Аҙағы бар.)*

## ХАЛЫҠ ИЖАДЫ – ИҒТИБАР ҮҘӘГЕНДӘ

Башҡорт халыҡ ижадын йыйыу тарихының тамырҙары, ғилми сығанаҡтарҙан билдәле булыуынса, 922 йылға, Әхмәт ибн Фаҙлан исеменә, артабан дөйөм төрки ҡомартҡылары: Мәхмүт Ҡашғариҙың “Диван лөғәт әт-төрк” тигән, йәнә боронғо сығанаҡтарҙың береһе булған ҡомансафарсыса-латинса “Ҡоман мәжмүғәһе” исемле мәшһүр һүҙлектәргә барып тоташа, шулай уҡ XVIII быуат аҙаҡтарында рус сәйәхәтселәре И.И. Лепехин, П.С. Паллас, И.Г. Георги ҡатнашҡан экспедициялар менән бәйле. XIX быуатта был йүнәлештә композитор А.А. Алябьевтың, этнограф Р.Г. Игнатьевтың, крайҙы өйрәнеүсе һәм халыҡ йырҙарын башҡарыусы Г.Х. Еникеевтың, шағир П.М. Кудряшовтың, лексикограф В.И. Далдең һ.б., айырыуса профессиональ музыкант-фольклорсы С.Г. Рыбаковтың эшмәкәрлеген билдәләп үтеү зарур, йәнә XX быуат башында венгр ғалимы Вильгельм Проленың башҡорт йырҙарын йыйыуы мәғлүм.

Башҡорт халыҡ ижадын системалы рәүештә йыйыу һәм өйрәнеү иһә XX быуаттың 20-се йылдарында – Стәрлетамаҡта Башҡортостанды өйрәнеү ғилми йәмғиәте (һәүәҫкәр фольклорсылар Х. Ғәбитов, Ғ. Вилданов, С. Сәлимов) төҙөлгәс һәм 30-сы йылдарҙа – Ғилми-тикшеренеү институты асылғас – башлана. Институтта И.В. Салтыков етәкселегендәге беренселәрҙән булып ойошторолған сәнғәт секторы (Ғ. Әлмөхәмәтов, С. Ғәбәши, А. Ключарев, М. Буранғолов, Ғ. Әмири, Ғ. Сәләм, Х. Хамматов һ.б.) халыҡ ижадын йыйыу эшенә дәррәү тотона.

1951 йылда Өфөлә Тел һәм әҙәбиәт ғилми-тикшеренеү институты ерлегендә СССР Фәндәр академияһының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ойошторолғас, башҡорт фольклорын йыйыу һәм өйрәнеүҙең яңы этабы башлана. Иң тәүҙә Институтта 20–40-сы йылдарҙа тиҫтәләгән экспедиция, командировкалар мәлендә йыйылған материалдар нигеҙендә башҡорт халыҡ ижадының 3 томлы баҫмаһы әҙерләп сығарыла (1). Шул уҡ ваҡытта йыр, мәҡәл, йомаҡ китаптары донъя күрә (2).

1959–1963 йылдарҙа Кирәй Мәргән етәкселегендәге экспедициялар Ҡурған, Силәбе, Ырымбур, Куйбышев, Һарытау, Пермь, Свердловск өлкәләрендә йәшәүсе башҡорттарҙың халыҡ ижадын йыйыу һәм өйрәнеү маҡсатында ойоштороla. Улар ифрат бай материал туплай (3).

1964 йылда халыҡ ижадын йыйыу эстафетаһын С.Ә. Галин ҡабул итә, артабан: 70-се йылдарҙа – М.М. Сәғитов, 80-се йылдар башында – Н.Д. Шоңҡаров, унан һуң ике йыл рәттән Ф.А. Нәҙершина етәкселек иткән экспедициялар ойоштороla. Фольклорсылар Башҡортостандың бик күп

районларын гиҙеп сығалар һәм бай ғына фонд туплайҙар. 1973–1980 йылдарҙа, экспедициянан тыш, айырым хеҙмәткәрҙәр (Л.П. Атанова, Н.В. Нафиҡова) фольклор йыйыу маҡсатында Белорет (1973), Кумертау (1974), Туймазы (1976, 1977), Баймаҡ (1979) районларына үҙаллы сәфәргә сыға. Рәсәйҙә үҙгәртеп ҡороу осоро башланғас, бюджеттан экспедицияларға аҡса бүленмәй, шуға күрә күп осраҡта фольклорсылар әйтеп үтелгән ысул менән материал йыйыу яғын ҡарай. Б.С. Байымов – Баймаҡ (1990–2000), Әбйәлил (1990, 1999), Р.Ә. Солтангәрәева – Стәрлебаш, Ауырғазы, Салауат (1994), Мәләүез, Баймаҡ, Йылайыр (1995), Ғафури (1996), Г.Р. Хөсәйенова Баймаҡ (1990, 1995), Мәләүез (1995), Ғафури (1996), Благовар (1997), Учалы (2000) районларында материал йыялар. Профессиональ фольклорсылар менән бер рәттән халыҡ ижадын йыйыу менән өлкән быуын әҙәбиәтселәре Ғ.Б. Хөсәйенов, Ә.Х. Вахитов, телселәр С.Ф. Миржанова, Н. Х. Мәҡсүтова һ.б., урта быуын ғалимдары Ф.Ғ. Хисамитдинова, И.Ғ. Ғәләүетдинов, Л.К. Сәлмәнова, йәш быуын вәкилдәре Ф.Ф. Ғайсина, Г.М. Әхмәтшина, Г.В. Юлдыбаева, А.М. Хәкимйәнова, Р.Р. Зиннуровалар шөғөлләнә. Шуныһын да билдәләп үтергә кәрәк: халыҡ ижады өлгөләрен йыйыуға үҙҙәренең уҡытыусылары етәкселегендә (Ә.М. Сөләймәнов, Б.Ғ. Әхмәтшин, Ғ.М. Бүләкова, Н.М. Сиражетдинова һ.б.) юғары уҡыу йорттары студенттары ла ҙур өлөш индерә. Бөгөнгө көндә Өфө, Сибай, Стәрлетамаҡ, Учалы ҡалаларындағы юғары уҡыу йорттары ҡарамағында бай материал тупланған фольклор фондтары бар.

Өҫтә һанап үтелгән экспедициялар, командировкалар ваҡытында яҙып алып ҡайтҡан материалдар, нигеҙҙә, Өфө Ғилми үҙәгенең ғилми архивында һаҡлана. Күп өлгөләр “Башҡорт халыҡ ижады” тупланмалары томдарында баҫылып сыҡты.

Алда әйтеп китеүебеҙсә, 90-сы йылдарҙан алып Рәсәй үҙгәртеп ҡороу осорон кисергәндә, уның шауҡымы фән өлкәһенә лә ҡағылды. Аҡса бүленмәү сәбәпле, Рәсәй Фәндәр академияһына ҡараған институттарҙа экспедициялар ҡырҡа туҡтатылды. Өфө Ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ла экспедициялар интервалы 14 йыл тәшкил итте (1989 һәм 2003 йыл). Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был осорҙа беҙ байтаҡ материал юғалттыҡ. Ҡайһы районның ниндәй генә ауылына килһәк тә, беҙҙе үкенесле тондағы: ”Ниңә саҡ ҡына иртәрәк, исмаһам 5-6 йыл элек, килмәнегеҙ? Шундай бабай, әбей бар ине, үәт белә ине ул”, – тигән һүҙҙәр менән ҡаршы алдылар.

“Халыҡ ижады – ул мәңгелек шишмә”,– тигән әйтем йәшәй халыҡта. Халыҡ бар икән, уның, заманына күрә, ижады ла бар. Был ысынлап та шулай. Бер генә экспедициянан да буш ҡайтҡаныбыҙ юҡ. Яҙып алыр, өйрәнерҙәй ижад өлгөләре осрап тора. Бәйет, таҡмаҡ жанрҙары йәшәүен дауам итә, ҡайһы саҡта өр-яңы әҫәрҙәргә лә юлығабыҙ, совет осоронда иғтибарҙан ситтәрәк ҡала килгән мөнәжәт жанры халыҡ араһында нык таралыу алған. Әлбиттә, институтыбыҙҙың тәүге осор экспедицияларындағы материалдар – эпостарыбыҙ, бер нисә төн дауамында һөйләнелгән әкиәттәребеҙ юҡ, заманында һөйләм һайын сәсрәп торған мәҡәл-әйтемдәребеҙ, йомаҡтарыбыҙ, боронғо йырҙар, ер-һыу атамаларына бәйле матур легенда-риүәйәттәребеҙ ҙә һирәгерәк осрай. Шулай булыуға

ҡарамаҫтан, 2003 йылда экспедицияларҙы яңынан юлға һалған ваҡыттан бирле, бер йыл ҡалмайынса, халыҡ ижадын йыйырға сығабыҙ. Был мөһим эшкә бюджеттан әле лә аҡса бүленмәй. Беҙ йә грант аҡсаһына, йә институт етәкселеге ярҙамында башҡа мөмкинселек табабыҙ, ә урынға барып төшкәс, район етәкселеге көнкүреш мәшәҡәттәрен үҙ өҫтөнә ала. Бының өсөн беҙ Тәтешле, Әлшәй, Яңауыл, Асҡын, Борай, Балтас районддары етәкселәренә, халыҡҡа ҙур рәхмәтлебеҙ. Теҙмәнән күренеүенсә, 2004–2008 йылдарҙа беҙ республикабыҙҙың төньяҡ райондарына сәфәр ҡылдыҡ, сөнки ул яҡтарҙа, ХХ быуаттың 70-се йылдар уртаһында өс йыл рәттән Ғ.Б. Хөсәйенов етәкселегендәге археографик экспедицияларҙы иҫәпкә алмағанда, беҙҙең институттан фольклор экспедициялары бер ҙә булмаған.

2003 йылда экспедицияларға йөрөү традицияһы тергеҙелгәс, беҙ табып яҙып алып ҡайтҡан материалдарҙы баҫтырып сығарыу эшен йәйелдереп ебәрҙек. Һуңғы йылдарҙа ғына бер төркөм фольклорсылар халыҡ ижады өлгөләренән торған биш китап әҙерләп сығарҙыҡ (4). Тәүге өсәүһе Башҡортостан райондарында йыйылған һәм фольклор бүлеге хеҙмәткәрҙәренең шул йылда яҙып алған материалдарын ғына эсенә алһа, аҙаҡҡы икәүһе Башҡортостандан ситтә йәшәгән башҡорттарҙан яҙып алған әҫәрҙәрҙе туплаған һәм комплекслы экспедиция һөҙөмтәләре буйынса төҙөлгән. Свердловск материалдарынан торған йыйынтыҡ айырыуса иғтибарға лайыҡ. Уның тәүге өлөшөндә өлкән быуын коллегаларыбыҙҙың ХХ быуаттың 60-сы йылдарында йыйған материалдары урын алһа, икенсеһендә һуңғы йылдарҙа теркәлгән яҙмалар тупланды. Иң мөһиме – ул ике осорҙа йыйылған материалдарҙы сағыштырыу мөмкинлеген бирә. Киләсәктә лә экспедицияларҙа яҙып алынған халыҡ ижадын йыйынтыҡ итеп баҫтырып сығарыуҙы дауам итергә уйлайбыҙ, сөнки унда фольклорсы ғына түгел, тарихсы, телсе, этнограф та үҙенә кәрәкле мәғлүмәттәр таба ала. Былдай баҫмалар иң тәүге сиратта тәүсығанаҡ булараҡ ҡиммәт, артабан улар бөгөнгө көндә билдәле төбәктә халыҡ ижадының ниндәй жанрҙары, әҫәрҙәре йәшәүен дауам итеүен күрһәтеп тора, йәнә теге йә был әҫәрҙең бер нисә фольклорсының материалдары араһында ҡабатланыуы уның традициялылығын һәм тотороҡло һаҡланыуын билдәләргә ярҙам итә, ниһайәт, фольклорсының халыҡ ижады өлгөләрен йыйыу эшмәкәрлеген, методикаһын өйрәнеү өсөн дә уңайлы, файҙалы әсбап буласаҡ.

Алдағы бер нисә йылға пландарыбыҙ – республикабыҙҙың көньяҡ, көньяҡ - көнсығыш райондарына экспедициялар менән сығыу. Элек ул төбәк фольклорға бик бай булған, беҙҙең маҡсат – уның бөгөнгө көндәге торошон өйрәнеү. 2008 йылда үрҙә аталған төбәктә эш башланды. Билдәле фольклорсы, филология фәндәре докторы Р.Ә. Солтангәрәева етәкселегендәге төркөм 2008-2009 йылдарҙа Әбйәлил районында эшләп ҡайтты. Икенсе төркөм менән былтыр Бөрйән районына сәфәр ҡылдыҡ. Форсаттан файҙаланып, Әбйәлил һәм Бөрйән райондары халҡына, шулай уҡ экспедицияларҙың уңышлы эшләүе өсөн бөтә шарттар булдырған район етәкселәренә ҙур рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Яҡын киләсәктә һуңғы өс экспедицияның материалдарын эшкәртеү көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһе булып ҡала. Йәнә, бөтә Рәсәй фольклорсылары кеүек, институттың музыка кабинетында ХХ быуаттың 60-сы йылдарынан алып һаҡланған, һуңғы

йылдарҙа аудиотаҫмаларға яҙып алынған, йәғни фондта йыйылған бар материалды электрон мәғлүмәт һаҡлаусы ҡулланмаларға күсереү күҙ уңында тотола. Шулай уҡ булған материалды системаға һалыу, уның каталогын төҙөү ҙә көн үҙәгендәге мәсьәләләрҙең береһе булып ҡала. Әммә иң мөһиме – мөмкин тиклем йышыраҡ экспедициялар менән халыҡ араһына сығып, уның хәтерен яңыртып тороу, рухи байлығыбыҙҙы онотторорға форсат бирмәү. Элек балалар үтәгән был функция бөгөн беҙҙең өлөшкә төшә, сөнки үҫеп килгән быуында, элекке һымаҡ, халыҡ ижады әҫәрҙәрен башҡарыуҙы һорап, тыңлап ултырыу талабы юҡ, уларҙың донъяһын хәҙер компьютер биләй. Ә өлкәнерәк кешеләрҙең күңеленә асҡыс тапһаң, һөйләшеп ултыра-ултыра, ул байтаҡ нәмәләрҙе иҫенә төшөрә, сағыштырмаса бай ғына мәғлүмәт алып була.

Шулай итеп, башҡорт фольклористикаһының халыҡ ижады өлгөләрен йыйыу йүнәлешенең бай ғына тарихы бар һәм уның дауамы ла булыр, тигән өмөттәбеҙ.

**Гөлнур ХӨСӘЙЕНОВА,**
**Тарих, тел һәм әҙәбиәт**
**институтының фольклор ғилеме бүлеге мөдире.**

**ИҪКӘРМӘЛӘР**

1.Башҡорт халыҡ ижады: 1, 2-се том/Төҙ. редакторы, инеш мәҡәлә яҙыусы һәм аңлатмалар биреүсе Ә.И. Харисов. Өфө, 1954, 1959; 3-сө том/Төҙ. редакторы, инеш мәҡәлә яҙыусы һәм аңлатмалар биреүсе Кирәй Мәргән. Өфө, 1955.

2.Башҡорт халыҡ йырҙары/Төҙ. ред. Х.Ф. Әхмәтов, Л.Н. Лебединский, Ә.И. Харисов. – Өфө, 1954; Башҡорт мәҡәлдәре/Төҙ., инеш һүҙ авторы Кирәй Мәргән. Өфө, 1960; Башҡорт халыҡ йомаҡтары/Төҙ., инеш һүҙ авторы Кирәй Мәргән. Өфө, 1968.

3.Кирәй Мәргән. Йыр дәфтәре. Өфө, 1964.

4.Ҡара: Экспедиция материалдары.–2003: Йылайыр районы / Төҙ. Хөсәйенова Г.Р., Солтангәрәева Р.Ә., Сәлмәнова Л.К., Әхмәтшина Г.М., Юлдыбаева Г.В., Ғайсина Ф.Ф., – Өфө: БР ММ РУҒМҮ, 2006; Экспедиция материалдары.–2004: Әлшәй районы / Төҙ. Хөсәйенова Г.Р., Солтангәрәева Р.Ә., Юлдыбаева Г.В., Ғайсина Ф.Ф., – Өфө: БР ММ РУҒМҮ, 2006; Экспедиция материалдары.– 2006: Борай районы / Төҙ. Г.Р.Хөсәйенова, Солтангәрәева Р.Ә., Әхмәтшина Г.М., Юлдыбаева Г.В., Ғайсина Ф.Ф., Сәлмәнов А.С. Өфө, 2008; Рухи мираҫ: Свердловск башҡорттарының фольклоры/Төҙ. Нәҙершина Ф.А., Хөсәйенова Г.Р., Юлдыбаева Г.В., Ғайсина Ф.Ф. – Өфө, 2008; Һамар, Һарытау башҡорттарының рухи хазинаһы/ Төҙ. Солтангәрәева Р.Ә., Юлдыбаева Г.В., Ғайсина Ф.Ф., Батыршина Г.Р., Сәлмәнова Л.К.– Өфө, 2008.



Рамаҙан
ӨМӨТБАЕВ

# УЙЫН ҠОРБАНЫ

### хикәйә

Көньяҡ Урал өлкәһенең төпкөл районында оҙаҡ ҡына йылдар вазифалы урында эшләгән Ғилман Уралбаевты уйламаған-нитмәгән ерҙән мәркәзгә – ҙурыраҡ, яуаплыраҡ урынға күсерҙеләр. Комсомол йәшенән яңы ғына үтеүенә ҡарамаҫтан, ул етәкселек иткән, биләмәләре офоҡҡа олғашҡан был ҡырыҫ тәбиғәтле район һуңғы йылдарҙа йылдам ғына алға тәгәрәне. Матбуғатта районның исеме әҙмә-әҙ өҫкә күтәрелде. Уралбаевтың исеме йыш ҡына маҡталып, ҙур урындарҙа һөйләнгән докладтарҙан-докладтарға күсеп йөрөнө, ә исеме иһә һәр саҡ тигәндәй президиум өҫтәле артында булды. Был ғына ла түгел, алдынғы етәксе төрлө абруйлы йыйылыштарҙа, фекер алышыуҙарҙа йыш ҡына беренсе булып трибунаға күтәрелде.

Йыш маҡталыу арҡаһында тәкәбберлек сире ҡағыла башлаған, ҙурыраҡ урынға өмөт бағлаған Ғилман Уралбаев үҙенең мәркәзгә күтәрелеүен тәбиғи үрләү тип ҡабул итте. Әле был мәсьәлә хәл ителерҙән алда Урал өлкәһенең хужаһы Арыҫлан Зәйниевич Ханов, фекерен тикшереп ҡарау ниәте менәндер, аэропортҡа үҙен оҙата килгән ошо төбәк етәкселәре төркөмөнә көтөлмәгән бер һорау ырғытты.

– Өлкәләге иң ҙур районның йәш етәксеһе Ғилман Уралбаев байтаҡ заман бик уңышлы эшләп килә, – тине ул, ҡулдарын артҡа ҡуйған килеш. Табан аҫтында ниҙер эҙләгән кеүек, ул аяғына кейгән күн итегенең башы менән ҡомло ерҙе бер аҙ тызып алды. Уратып алған кешеләрҙең һәр береһен тигәндәй үткер ҡарашлы һоро күҙҙәре ялмап сыҡты, үҙенең әйтеп бөтөлмәгән фекеренең нисек тәьҫир итеүен һәр кемдең сырайынан төҫмөрләргә тырышты. Иң оло хужаның бер ни ҙә аңлатмаған был кинәйәле өҙөк һөйләменән ниндәй һығымта яһарға һәм ниндәйерәк һүҙ ысҡындырыу ятышлыраҡ булыуын самалап тороусы урындағы түрәләрҙең туҡ йөҙҙәренә етдилек һыҙаттары йүгерҙе, ҡулайыраҡ бер һүҙ ишетергә теләгәндәй, бер-береһенә текләшеп шымып ҡалды.

"Эйе, Арыҫлан Зәйниевич, Уралбаев районды ныҡышмалы рәүештә алға

*Күренекле дәүләт эшмәкәре, яҙыусы Рамаҙан Өмөтбаевтың (1924–1997) шәхси архивында бығаса баҫылмаған хикәйәләр, повестарҙың ҡараламалары табыла тора. Әле һеҙҙең иғтибарға уның йәнә бер хикәйәһен тәҡдим итәбеҙ.*

һөйрәй, дәртле, илһамлы эшмәкәр, яҡшы ойоштороусы, тип әйтерһең дә, хужа кеше үҙ һүҙенең аҙағын һин уйламаған яҡҡа бороп ебәрһә нишләрһең?” йәки “Былай ярайһы ғына эшләй, вазифаһын белә, буйһоноусыларға ғына түгел, үҙенә лә талапсан, ихтыярлы етәксе, ләкин халыҡ һүҙенә бик ҡолаҡ һалып бармай, дөрөҫмө, яңылышмы — үҙ фекерен гел генә алға һөрөргә ярата, алдына алған нәмәне нисек тә, ҡайһы саҡ артыҡ бер ни менән хисаплашып тормай, ғәмәлгә ашырырға тырыша, тип әйтеп ебәрһәң, бәлки, оло хужа уны үҙенә урынбаҫар итеп алырға уйлайҙыр. Ауыҙыңды үлсәп асмай ысҡындырған һүҙең өсөн ярыҡ ялғаш менән ултырып ҡалырһың. Аҙаҡтан дыуамал холоҡло Уралбаевтың иҙәнен ғүмерең буйы сәсең менән һеперергә тура килмәһен, малай”.

Бына ниндәй икеле-микеле һорауҙар борсоно йыйыналған затлы ағай-эне күңелен. Үҙенең ҡулы аҫтында эшләгән етәкселәрҙең был һүҙҙе дәррәү генә күтәреп алырға баҙнат итә алмай, икеләнеп ҡалыуҙарының сәбәбен үтәнән-үтә күргән Арыҫлан Зәйниевич түбәнгә аҫылынып төшкән ауыр әйәген ҡалҡытып, йәмшек табаға тартым яҫы битенә көләмһөрәү сырайы йүгертте:

— Әллә мин Уралбаевтың эшенә яңылыш баһа бирәмме?

Уны уратып алған төркөм тағы хәрәкәткә килде.

— Дөрөҫ, ғәҙел, — тигән баҙнатһыҙ ғына тауыш ишетелде аранан.

— Мәсьәләнең үҙәгенә ҡарағанда, Арыҫлан Зәйниевич... — тип һуҙҙы икенсе нескә генә тауыш, “ишетһә — ишетер, ишетмәһә лә ҙур зарар юҡ” тигән мәғәнәне аңлатҡандай.

— Бөркөт егет. Эләккән еренән өҙә тота торған етәксе, — тине әңгәмәнең ҡайһы һуҡмаҡҡа төшөргә тейешлеген барыһынан да алда төшөнөп өлгөргән урындағы ҙур тау предприятиеһының директоры Иван Боркин.

Үҙ фекерен кәнәш һорап дөрөҫләтеүҙе бер ваҡытта ла хуп күрмәгән хужа олпатлы кәүҙәһенә һылап тегелгән чесуча пинжәгенең салғыйҙарын ике ҡулы менән төҙәткеләне лә бер аҙ салшайған тулы, еүеш ирендәрен ялап алды. Нәҡ шул мәлдә самолет торған яҡтан дәррәү атлап бында йүнәлгән аҡ йөҙлө оҙонораҡ урынбаҫары, хужаның ҡолағына эйелеп, ниҙер шыбырҙаны.

Кинәт Арыҫлан Зәйниевичтың сырайы етдиләнде. Төйнәлгән ҡаштары аҫтында туҡтап ҡалған күҙҙәрендә утлы осҡондар төҫмөрләнгәндәй булды. Ризаһыҙлығы тышҡа бәреп сыҡҡан йөҙөн һытып, ҡулын һелтәүенә эргәһендә яуап көтөп, тыпырсынып торған ярҙамсы, ел осорғандай, шундуҡ юҡ булды. Хужаның етдилеге уны оҙата килгән етәкселәрҙең йөҙөнә күсте. Ситтәрәк, бер аҙ ҡыҙмаса булып алған шофер халҡының да, ниҙер һиҙенеп, тауыштары баҫылды. “Күрәһең, летчиктар хужаны ашығырға ҡуша”, — тип фекер йөрөттө оҙатыусылар. Бөтә халыҡ, ҡулдарын маңлайҙарына ҡуйып, ҡараштарын күк көмбәҙенә йүнәлтте. Нәҡ аэропорт өҫтөндә ниндәйҙер ҡөҙрәт менән хасил булған ҡолаҡсындай ғына ҡара болот “бына-бына хужаны оҙатабыҙ ҙа...” тип өмөтләнеп торған урындағы башлыҡтарҙың күңеленә шом һалды.

Улар араһынан кемеһелер: “Ҡәһәрең, Арыҫлан Зәйниевичтың аэропортҡа килгәнен генә көтөп торған кеүек...”— тип хужа тураһында хәстәрлек күрһәткән булды. Төбәк түрәләренең үҙен ни өсөн йәһәтерәк оҙатырға тырышҡанын үтә күреп белгәнгә, хужа болотҡа зарланыусы әҙәмде осҡонло ҡарашы менән өтөп алды.

Хужанан һуң ҡалған өҫтәлдәге тулы затлы аҙыҡ-әүҡәткә һәм зыялы түрәләргә генә фарыз эсемлектәргә маз булабыҙ, тип хыял ҡороп тороусыларҙың йөҙөнә лә теге ҡәһәрле болоттоң шәүләһе ятты. Шулай ҙа хужа был “өнһөҙ әңгәмә”не сомторларға уйланы. Арыҫлан Зәйниевич аяҡтарын турайтып, алғараҡ сығып торған ҡорһағын ике ҡулы менән ҡулсаға алды ла туп-тура һорау бирҙе:

— Бына шул. Ғилман Уралбаевты ҙурыраҡ вазифалы эштә файҙаланыу маҡсатында үҙебеҙҙең аппаратҡа яуаплы эшкә күсерергә, тигән тәҡдим бар. Быға һеҙ нисек ҡарайһығыҙ?

Әле яңы ғына серле һорауҙар ҡосағында икеләнеп торған оҙатыусылар төркөмө яңынан хәрәкәткә килде:

– Бик тә дөрөҫ ҡарар!

– Йөкмәтелгән оло, яуаплы бурысты аҡларлыҡ етәксе.

– Күптән кәрәк ине. Абруйлы, киләсәкле, бөтә яҡтан килешкән кеше. Маладис, Ғилман Ғөзәйерович, ҡотлайбыҙ! – тип геүләне халыҡ.

Берәүҙәре икеләнеү, икенселәре көнләшеү хисе кисергән етәкселәр Уралбаевтың аяғын ергә тейҙермәй үлтереп маҡтарға тотондо. Араларында үҙҙәренән бер ни менән дә артыҡ айырылмай, һүҙһеҙ генә баҫып торған Уралбаев уларҙың күҙ алдында бер башҡа үҫеп киткәндәй тойолдо. Барыһы ла уға боролоп, яҡты сырай, ихтирам тойғоһо күрһәтергә ашыҡты. Үҙ ғүмерендә Ғилманды тик исеме менән генә атап йөрөткән көнсығыш район етәксеһе иң беренселәрҙән уны ҡотлап, ике ҡулын ҡыҫа-ҡыҫа:

– Тәбрикләйем, Ғилман Ғөзәйерович! – тип йылмайҙы. Хәҙер инде оҙатыусыларҙың иғтибары китергә ашыҡҡан хужанан әле оло түрәлеккә тәүге аҙымын да атламаған Ғилманға күсте.

Хужаны ашыҡ-бошоҡ оҙатып ебәргәс, барыһы ла аш әҙерләнгән ҡунаҡхана бүлмәһенә ашыҡты. Оҙаҡҡа һуҙылған мәжлес кендеге Уралбаев булды. Йыйылыусылар ҙур эшкә тәғәйенләнгән Ғилман һаулығына тулҡынланып ҡотлау һүҙҙәре әйтте, һәр кем уға үҙенең дуҫлыҡ хисен белдерергә ашыҡты. Әллә ни төрлө сихәтле шараптар шауҡымы ҡунаҡтарҙың күңел ҡоршауҙарын ысҡындырып ебәргәйне. Затлы кешеләрҙең ихлас мәжлесе аҙыҡ-әүҡәттең таҡырайыуына тиклем һуҙылды. Ерҙән айға күтәрелеп өлгөргән бер нисә уҙамандың байрамды дауам итергә лә теләге юҡ түгел ине, ләкин ҡунаҡхана хужаһының телефон аша иҫкәртеүе кикереге ҡыҙарып алған кешеләрҙе ергә төшөргә мәжбүр итте. Ҡунаҡтарҙың йәндәре тартмаһа ла, тәндәре уларҙы тышта көтөп торған машиналарына йүнәлдерҙе.

***

Самолет креслоһына йәтешләп сумып ултырған Арыҫлан Зәйниевичтың күңеле тынысһыҙланды. Быдың өсөн сәбәптәр ҙә юҡ түгел ине. Беренсенән, уны Уралбаевтың эшмәкәрлегенә биргән ыңғай баһаһының урындағы етәкселәрҙә берҙәй хуплау тапмауы һағайта төштө. Был күренеш уның күңеленә ниндәйҙер тут һалған һымаҡ булды, башында Ғилманға ҡарата икеләнеү тойғоһо уянды. Ошоға тиклем Арыҫлан Зәйниевич эшкә тилбер, хәрәкәттәре йылғыр, ниндәй хәлдә лә юғалып ҡалмаған, ике телдә лә ярып, шыма һөйләгән был егет һүҙенә бирелеп, тәгәрәп хеҙмәт итер, ҙур эштә бер ҡанат, ышаныслы терәк булыр, юртаҡ янлап юрғалаған мисәүгә әйләнер, утыҙ ике теше лә бер екһеҙ ылдым эшмәкәр булып үҫеп китер, тип фараз ҡыла ине. Ә бына бөгөнгө яуаплы иптәштәр уның фекерен шик аҫтына алды түгелме? Уларҙың ауыҙҙарына һыу уртлаған шикелле баш баҫып тороуҙары шуны иҫбатлай бит! Әйткәндәй, былдай тәҡдимде индерерҙән алда уның тарафынан йәшерен генә ебәрелгән ышаныслы кешеһе, Уралбаев артынан шәүлә кеүек оҙаҡ ҡына тағылып йөрөгәндән һуң, ҡайтып ошондай йомғаҡ яһаны:

– Арыҫлан Зәйниевич, Уралбаевтың эшмәкәрлегендә һәм ойоштороу һәләтендә шик юҡ. Үҙе лә эшләй, халыҡты ла эшләтә белә. Белеме лә башынан ашҡан. Ләкин һөйләшеп фекер алышҡан, яҡындан белгән кешеләр уның холҡоноң тиҫкәре булыуын һөйләй, теләһә ниндәй етәксе лә уға барыбер, һис ниҙән шикләнеп тормай, туп-тура әйтә торған ғәҙәте бар, үҙ фекеренән бер ҡарыш та сигенә торған әҙәм түгел. Уның өсөн үҙенән юғары етәксенең абруйы юҡҡа хисап.

Арыҫлан Зәйниевич үҙе шул саҡта ирәбеләнеп китеп, Уралбаевтың тиҫкәре ҡылыҡтарына күкле-йәшелле биҙәктәр өҫтәп һөйләп ултырған кешеһен тупаҫ бүлеп:

– Был етешһеҙлек түгел. Киреһенсә, хәҙерге ысын етәксегә хас иң маҡтаулы сифат. Яңы йәмғиәт ҡороу өсөн силғау сәйнәп тороусы быҙауҙар түгел, тотҡан урынынан өҙә һуғып эшләгән ҡайнар йөрәкле етәкселәр кәрәк. Бына мин дә –

шул Ғилман Уралбаевтың береһе, тик ул хәҙергә тай ғына, ә бына мин, оло ат булыуыма ҡарамаҫтан, ошо көнгә тиклем теләһә ниндәй тәртәне һындырырлыҡ аҫаумын. Бар, эшендә бул, – тип кабинеттан ҡыуып та сығарғанын иҫенә төшөрҙө.

Был бәләкәй генә ваҡиға тотош өлкә яҙмышын усына һыйҙырған хужаның башын оҙаҡ биләп тора алманы. Самолет аҫтындағы сал Уралдың армыт-армыт теҙелеп киткән йәшел келәм ябынған ҡыраз һырттары, йылан кеүек бормаланып түбәнгә тәгәрәгән тау йылғаларының мөғжизәле таҫмалары, урмансыларҙың йәшел келәмде ярып, ҡыл тартҡан ише һалған киң һуҡмаҡтары, ә инде Уралды киҫеп үткәс, алтын баҫыуҙарҙа тиҫтәләгән комбайндарҙың бер-бер артлы, диңгеҙҙәрҙе айҡап йөҙгән караптар һымаҡ, саң-туҙан ҡалдырып бер туҡтауһыҙ алға шыуышыуы, иге-сиге күренмәгән бөтә ерҙә йәнгә дәрт өҫтәгән, күңелдә эш ҡомары тыуҙырған урып-йыйыу сәме Арыҫлан Зәйниевичтың йөрәгендә болоҡһоу хисе уятҡан уйҙарын ҡыҫырыҡлап сығарҙы. Был мөһабәт күренеш, йөк машиналарының ҡан тамырҙары ише төрлө яҡҡа таралып киткән юлдар буйлап кемуҙарҙан ярыша-ярыша ҡайҙалыр ашығып елеүҙәре иллюминаторҙан күҙен алмай ҡарап барған Арыҫлан Зәйниевичта эске кинәнеү һәм ғорурлыҡ тойғоһо уятты. Төп-төҙ кирбес торбаларын күккә олғаштырып, күгелйем төтөнөн бөрккән завод-фабрикалар, Себер яҡтарынан көнбайышҡа тиклем һуҙылған ер аҫты торбаларынан туҡтауһыҙ йүгергән миллионлаған тонна ер майы, үҙе артынан тиҫтәләгән вагондарға ил байлығын, халыҡ мөлкәтен тейәп төрлө тарафтарға йүгергән электровоздар һәм башҡа фәнни-техник мөғжизәләр ил ағаһы Арыҫлан ҡөҙрәте һәм көслө ихтыяры менән хәрәкәткә килмәйме ни? Уның бер бармаҡ янауы ла өлкәләге бөтә зыялы ирҙәрҙең йәндәрен өшөтөп, ҡалтыранырға мәжбүр итә түгелме?

Нәҡ ошо мәлдә хыял даръяһында йөҙөп, йоҡомһорап барған хужаның алдында тумалаҡ битле Ғилман Уралбаевтың һыны пәйҙә булды. Арыҫлан Зәйниевич ирекһеҙҙән уянып китте. Уның күҙенә һалҡын һауа өрҙөрөп торған вентиляторға ҡаршы тырыша-тырмаша үрмәләгән бөжәк салынды: бахырҡай, хәле бөтөп, бер аҙ ҡырталашты ла, ҡанаттарын йәйеп, өҫкә ҡалҡыныуы булды – шул мәлдә үк уны көслө ел ағымы өрҙөрөп алып китеп, иллюминаторҙың бер егенә тығып та ҡуйҙы. Әле генә күҙ алдында пәйҙә булған һәм ҡапыл юҡҡа сыҡҡан Ғилмандың һыны хужаға ошо бөжәктең яҙмышын хәтерләтте. Уралбаевты бөжәк менән сағыштырыу уға кинәнес өҫтәне.

Ошо бер ниндәй ҡоршау менән сикләнмәгән эске хакимлыҡ тойғоһо, йәненә тыныслыҡ бирмәй, уны юғарыға – ете ҡатлы асманға сөйҙө... Бына бөжәккә әйләнеп, мәңгегә юғалған Ғилман урынында ул йәнә тиҫкәре кешеләр һынын шәйләп ҡалды. Арыҫлан Зәйниевичтың тулы йөҙөнә нәфрәт шәүләһе ятты, ҡабарынған ҡиәфәте дәһшәтле, ҡөҙрәтле төҫ алды. “Ә, был һеҙме ни әле, үҙ фекерегеҙ менән эш итеүсе хәсрәт ҡапсыҡтары? Бында тик минең генә фекер хөкөм һөрә, һеҙҙеке – юҡҡа бәрәбәр. Белмәйһегеҙме ни, Арыҫлан ағағыҙ етәкселек иткән «аппарат тирмәне»нә ниндәй генә тос һалһаң да (теләһәң, ҡырсын таш һал), бураға ул барыбер он булып төшә. Ә он саңы өрөүҙән генә түгел, хатта минең тын алышымдан да йән-фарман осоп китә. Тирмәнем ярма ярмай, тик он ғына, саң ғына төшөрә. Аңлайһығыҙмы?” – Ул алдында теҙелеп торған кешеләрҙе утлы һәм уҡлы ҡарашы менән ялмап алды. Тегеләрҙең барыһы ла, ризалығын белдереп, баш һелкте. Хужаның тәкәббер битенә тыныслыҡ, эске тантана тойғолары һирпкән һыҙаттар йүгерҙе... Күңеле ирәбеләнеп киткән хужа: “Бына шулай ул!” – тип бармаҡ янап, был хыял уйынына нөктә ҡуйҙы.

***

Әйткән һүҙ – атҡан уҡ. Күп тә үтмәй, Арыҫлан Зәйниевич сираттағы пленумда Ғилман Уралбаевты яңы ҙур вазифаға раҫлап та ҡуйҙы. Уралбаев өсөн

аппараттың уның холҡона бөтөнләй тура килмәгән, аҙылмаған әллә ни төрлө ҡағиҙәләр менән сикләнгән яңы эш алымдарына күнегеү көндәре башланды. Бында килеп, таныш булмаған вазифа бурыстарына сумыу алдынан уны бер аҙ өйрәтерҙәр, эш ысулдарына төшөндөрөрҙәр, тип өмөтләнеүе тәүге көндәрҙән үк селпәрәмә килде. Ул эшләйәсәк ҙур ғына бүлек хеҙмәткәрҙәрен йыйып, яңы етәксе менән таныштырҙы ла, бер-ике ауыҙ дөйөм һүҙ әйткәндән һуң, Арыҫлан Зәйниевич ултырыштар залынан сығып китте. Ғилмандың урынбаҫарҙары, уның иркен кабинетын асып: «Бына был һеҙҙең өҫтәлегеҙ, бынығы һеҙ ултырып эшләйһе ултырғысығыҙ була»,– тип күрһәттеләр ҙә, шуның менән – вәссәләм. Шуларҙың олорағы, аппарат эшендә тешен ҡойоп, сарланып бөткәне: “Бында нығыраҡ тотоноп ултырмаһаң, осоп китеүең дә бар”, – тигәнде ишаралағандай, арҡа терәп ултырмалы креслоны зыр әйләндереп ебәрҙе – йәнәһе, бөгөнгө мәғриб иртәгә хужаның ҡөҙрәте менән мәшриҡҡә әйләнеп китеүе лә ихтимал.

Нисек кенә булмаһын, үҙ районында һыуҙа йөҙгән балыҡ һымаҡ иркен эшләргә күнеккән Уралбаевҡа төпкә егелеп, үҙенә төшкән йөктө ҡағыла-һуғыла тартырға тура килде, ләкин яңы эшкә күсеү арҡаһында кисергән йән ғазабынан ул тиҙ генә айный алманы.

Фатир мәсьәләһен хәл иткәнсе, ул баш ҡаланың иң ҙур ҡунаҡханаларының береһендә яңғыҙ кешелек бер бүлмәлә йәшәп торҙо. Ошо егерме икенсе һанлы махсус бүлмәлә башланды ла инде Ғилман Уралбаевтың тормош юлының иң юғары баҫҡысына үрелеү шатлығы ла, көтмәгәндә юғарынан кинәт аҫҡа тәгәрәп китә яҙыуы ла.

Был бик күңелһеҙ ваҡиғаның килеп сығыуын ул ҡырҡ ятып, ҡырҡ торғанда ла башына килтермәгәйне. Әллә байтаҡтан бирле яңғыҙ йәшәү тойғоһонан ҡотолорға теләпме, әллә районда тороп ҡалған ғаиләһен үтә зарығып һағыныуҙанмы – бер йәкшәмбе көндө ҡулына бер еңелсәрәк китап алып уҡырға тотонғайны. Уның иләҫ-миләҫ күңелен күтәрергә теләгәндәй, көҙгө иртәнге ҡояш һүрән генә нурҙарын Ғилман бүлмәһенең тәҙрәһенә мул һирпте. Карауатына һуҙылып ятҡан килеш китап донъяһына сумды ир. Әҙерәк уҡығас, иҫенә төштө: буфетта тәнәффес (был һүҙ тик шулай ғына яҙыла, уның башҡа яҙылышы юҡ – **Р.Ө.**) иғлан итмәҫтән элгәре бер аҙ ҡапҡыларға кәрәк. Өҫөнсө ҡатҡа күтәрелде. Иң тәүҙә кәштәләрҙә сират-сират теҙелеп торған төрлө-төрлө тәхил шарабы шешәләре уның иғтибарын йәлеп итте.

«Нимә бынауындай ҡояшлы, матур көндә сырайыңды һытып, күңеленде болоҡһотоп йөрөйһөң? Ана, йәнең теләгәнен ал, кәштәләге шешәләр һиңә ҡарап тилмерешеп ултыра. Әллә... берәр соҡор әрмән эсемлеге менән мыйыҡ майлап алаһыңмы?» – Ялтыр-йолтор шешәләргә оҙаҡ ғына тамаша ҡылып торған Ғилмандың салғыйына бер иблис сайыр һымаҡ йәбешмәһенме!

«Етмәһә, бөгөн ял көнөң...», – тип ҡыҫтай теге хәсис. «Юҡ, юҡ, аслан тотона күрмә, харап булып ҡуйыуың бар», – тигән баҙнатһыҙ ғына бызылдаған серәкәй ише тауыш уға киреһен әйтергә маташа. Уны иблис нисек кенә тартҡыламаһын, ул нескә билле серәкәй тауышын тыңламай булдыра алманы. «Бер ниндәй ҙә шау-шыу булмаһа, кискә табан, бәлки, иблис тауышына ла ҡолаҡ һалырбыҙ», – тип хәл итте ахырҙа яңғыҙлыҡтан алйыған Ғилман.

Арлы-бирле ҡапҡылағандан һуң, ир тағы ла карауатына ауҙы. Бер аҙ серем итергә өлгөрҙө, буғай. Тап шул саҡта мөйөштә ултырған телефон шалтыраны. Был ғәҙәти телефон шалтырауына һис тә оҡшамағайны, уның тауышы бик тә етди һәм, нисектер, борсоулы зыңғырланы. Ул урынына һикереп торҙо ла трубкаға йәбеште.

– Иптәш Уралбаевмы? – тине теге оста бер мөләйем ҡатын-ҡыҙ тауышы.

– Эйе, нәҡ үҙе тыңлай, – тип яуапланы Ғилман, нисек тә тулҡынланыуын һиҙҙермәҫкә тырышып.

– Хәҙер һеҙҙе Арыҫлан Зәйниевич менән тоташтырам, – тине теге ҡыҙ, һандуғас кеүек һайрап.

Ғилман трубканы ҡыҫыбыраҡ тотто. Нишләптер, эске тулҡынланыуҙан, күрәһең, трубка тотҡан ҡулы тирләй башланы. Күпме генә ашҡынмаһын, теге яҡ оста уның менән һөйләшергә ашығып барманылар. Трубкала мыш-мыш тын алыу, бер нисә тапҡыр хужаның ирендәрен шапылдатып ҡуйыуы ишетелде.

– Уралбаев, һин унда ниндәй эш башҡарып ултыраһың? – Хужа, һәр ваҡыттағыса, һүҙенә мөһөр баҫҡандай баҫым яһап һөйләшә. Иҫкәртеү белдергәндәй, Ғилман башта уның менән иҫәнлек-һаулыҡ һорашты.

– Хәҙергә артыҡ йомош юҡ, китап уҡып ултырам, – тип тыныс ҡына яуап бирҙе Ғилман. Аҙаҡтан бер ҡатлы яуабы өсөн үҙ-үҙен ҡаты ғына битәрләп алды. «Берәр яуаплы ҡағыҙ өҫтөндә эшләп ултырам, тип әйтергә булмағанмы ни?» – тип ҡаты үкенде. Сымдың теге яғында Ғилмандың был хатаһын шундуҡ эләктереп тә алдылар.

– Эшең бик ҡаты икән. Китап уҡып ғүмер үткәргәнсе, үҙеңдең яңы вазифаң буйынса берәр кәрәкле документ өйрәнеп ултырһаң булмаймы? – Арыҫлан Зәйниевич, бер аҙ тынып торғандан һуң, бойороҡ тауыш менән тағы өҫтәне. – Хәҙер һиңә машина барыр, шуға сығып ултырырһың.

Был көтөлмәгән фармандан Ғилман бер аҙ ҡаушай төштө.

– Нисегерәк кейенергә?

– Дипломатик приемға иҫәп тотма, ғәҙәттәге кейемең дә яраған, – тине хужа ҡоро ғына. Шунан, ашыҡмай, шыҡылдатып трубкаһын һалды.

Костюмын кейеп, плащын beләгенә элде лә тышҡа йүгерҙе Ғилман. Болдорҙа хужа ебәргән машинаны көтә башланы. Ләкин ҡаланың үҙәк урамынан ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла елдергән машиналарҙың береһе лә ҡунаҡхана эргәһендә туҡтарға ашыҡманы. Байтаҡ ҡына көткәндән һуң, ул тағы ла бүлмәһенә күтәрелде. Ингәс тә телефонға үрелеп, беренсе секретарь менән һөйләшергә самаланы. Ләкин Ғилманды уның менән тоташтырырға ашыҡманылар. Тәүгә шалтыратҡанында Арыҫлан Зәйниевич кәңәшмә үткәрә булып сыҡты, икенсеһендә, Мәскәү менән һөйләшә, тинеләр. Нишләргә белмәй тамам аптыраған Ғилман, кейенгән көйөнсә тәҙрә аша ҡарап, хужа ебәргән машинаны көтә башланы. Ләкин ҡуңыҙ кеүек ҡара, күҙгә һымаҡ ялтыр машина ҡунаҡхана тирәһендә күренмәне. Машина көтөп асыҡҡан, тирләп-бешкән, арып-талсыҡҡан Ғилман ултырған ерендә ойоп китте. Күпмелер ваҡыт үткәс, бүлмәне яңғыратып, ҡапыл телефон шалтыраны. Ул ҙур етеҙлек менән трубкаға ташланды, ләкин уның ҡат-ҡат өндәшеүенә яуап ҡайтарыусы булманы. Ә сымдың теге яғында үҙенең тапҡырлығына кинәнеп, әле яңы ғына тамағын туйҙырып алған хужа, киң йылмайып: «Әйҙә, әйҙә, көт әле. Асыға бир. Эшең таш түгел. Артҡы шәрифеңә үткәнсе көтөрһөң», – тип көлөмһөрәне.

Көн буйы машина көтөп хәлдән тайған Ғилманды хужаның шоферы ваҡыт киске туғыҙға яҡынлашҡас ҡына алып китте. Ағастар артында йәшеренеп, тыныс, күркәм тыҡрыҡты биҙәп ултырған мөһабәт йорттан хужа сыҡты. Ул, өндәшмәй-нитмәй ишекте асып, алғы урынына ултырҙы ла ҡуҙғалырға әмер бирҙе. Көн буйы һарайҙа тик тороп зарыҡҡан айғыр шикелле, ҡара машина киске уттар менән күмелгән ҡаланың төньяғына юл алды.

***

Бер аҙҙан машина ҡуйы шыршы урманы араһында йәшеренгән хөкүмәт дачаһына килеп етте. Ике яҡҡа тауышһыҙ ғына асылған ҡапҡанан улар аллея буйлап бейек мәрмәр колонналы йорт эсенә үттеләр. Уларҙы түшәмдән аҫылынып торған гәлсәр люстраның йәйғор ише төрлө төҫтәр һирпкән электр уты ҡаршыланы. Көнө буйы тамағына тәғәм ҡапмай ҡорһағы асҡан Ғилманды киске серле тынлыҡ баҫҡан залдың матурлығы ла, бейек стеналарҙа элеүле

һүрәттәр ҙә ҡыҙыҡһындырманы. Күҙгә һымаҡ ялтыратылған паркет иҙәндә киске ҡунаҡтарҙың аяҡ тауыштары мәмерйә эсендәге шандау булып яңғыраны. Коридор башындағы ишектән бөгөн өс кешегә һимеҙ һарыҡ итенән бишбармаҡ һәм тултырма әҙерләргә әмер алған, хужаның иң яуаплы йомоштарын башҡарыусыһы, үҙенең иң сетерекле эштәрҙә маһирлығы менән дан ҡаҙанған йоп-йомро кәүҙәле Ғарипов тәгәрәп килеп сыҡты. Асылған ишектән ҡаҙанда бешеп ятҡан һарыҡ итенең тәмле еҫе ас Ғилмандың танау тишектәрен ҡытыҡлап алды. Татлы бишбармаҡ тәмен тойоп, ауыҙына йыйылған һеләгәй һыуҙарын йотоп ебәргән Ғилман эсенән генә, бөгөн, исмаһам, бер тапҡыр ысын бишбармаҡҡа маз булабыҙ икән, тип шатланып та өлгөрҙө. Үҙенең бер ҡатлылығы менән хужаның уны һыйлар өсөн саҡырыуына инанып та ҡуйҙы. Ғарипов, аяҡ остарына баҫып ҡына, хужаның әмере үтәлеүе һәм бишбармаҡ ярты сәғәттән әҙер буласағы тураһында иҫкәртте. Хужа, бер ни өндәшмәй, ҡунағын эйәртеп, люстра менән яҡтыртылған иркен бильярд бүлмәһенә инде лә өҫ кейемен һала башланы, Ғилманға ла, эйәк ҡағып, сисенергә ишара яһаны. Һалдат казармаһындағы пирамидала торған мылтыҡтар шикелле теҙелгән бильярд кийҙарын ҡулына алып, хужа уларҙы улай-былай әйләндерҙе, ауырлығын һәлмәкләне, винтовка төҙәгәндәй, юғарыға тоҫҡап ҡараны. Шунан һуң Ғилманға ла кий алырға ҡушты.

— Әйҙә, уйын алдынан әрмәндәр яратҡан эсемлек менән тамаҡты сылатып алайыҡ әле, — тип ул мөйөштәге ҡарҙай ап-аҡ ашъяулыҡ менән ябылған түңәрәк өҫтәл янына атланы. Ашъяулыҡты асып ебәргәс, көнө буйы машина көтөп, ҡорһағы һыртына йәбешкән Ғилмандың ике күҙе биш булды. Ҡыҙыл фәс кейеп, баштарын тәкәббер сөйөп уртала ултырған бишәр йондоҙло ике шешә коньяктан башҡа, өҫтәлдә күҙҙең яуын алып ятҡан әллә ни төрлө затлы аҙыҡ-әүҡәт әҙерләнгәйне. Буталлы тәрилкәләрҙә йоҡа ғына теленгән, көмөш тамсылары кибеп өлгөрмәгән лимон тиһеңме, һәр төрлө балыҡтар менән йәнәш диңгеҙ еҫе бөркөп ятҡан ҡара һәм ҡыҙыл ыуылдырыҡ тиһеңме — бөтәһе лә бар өҫтәлдә. Ғилман был йортта элегерәк бер тапҡыр булғайны-булыуын. Урып-йыйыу эштәре тамамланғас, ошо уҡ хужа иген тапшырыуҙа тырышлыҡ күрһәткән биш-алты район етәкселәрен саҡырып ҡунаҡ иткәйне, ләкин ул саҡта бөгөнгө һый-хөрмәт ише нәмәләрҙең еҫе-ҡоҫо ла һиҙелмәне. Ул мәлдә яңы ғына оло түрәлек дәрәжәһенә өлгәшкән Арыҫлан Зәйниевичтың, күрәһең, ҡанаттары нығынып өлгөрмәгән сағы булғандыр, ул замандарҙа ашау-эсеү генә түгел, барлыҡ мөнәсәбәттәр ҙә ябайыраҡ ине. Ҡанаттар оҫҡанда нығый, тип белмәй әйтмәйҙәр икән шул.

Арыҫлан Зәйниевич асылған шешәнән эсемлекте үҙе ҡойҙо. Ул нескә билле бейек рюмканы ҡулына алды ла: «Әйҙә, Уралбаев, тотайыҡ»,— тип эсеп тә ебәрҙе. Ғилмандың коньякҡа тотонорҙан алда тәрилкәлә күҙ ҡыҙҙырып ятҡан затлы ашамлыҡҡа йомолоуы хужаны ныҡ ҡына ғәжәпкә ҡалдырҙы. Оло түрә ҡарһаланып ашарға керешкән «тәртипһеҙ бәндә»гә бер генә утлы ҡараш атты ла, һутлы ҡалын ирендәрен ҡыймылдатып, йылмайып ҡуйҙы. «Шул тиклем үлә яҙып ашарға керешеүенә ҡарағанда, был әҙәм бөгөн көнө буйы, әйтерһең дә, минең урағымды урған», — тип уйланы хужа. Шулай ҙа Ғилман, бер ғауым көйшәнеп алғас, алдындағы рюмканы түңкәреп ҡуйҙы. Супылдатып лимон һурып торған Арыҫлан Зәйниевич, шешмәле ҡабаҡтары аҫтындағы һоро күҙҙәрен мәкерле генә уйнатып: «Тағы берәрҙе ҡабатлайбыҙмы әллә?» — тип һораны. Былай ҙа башы шаулай башлаған Ғилман теләге юҡлығын ҡәтғи белдерҙе. Арыҫлан Зәйниевич икенсе рюмканы үҙе генә башҡарып ҡуйҙы. Инде бөгөнгө кисәнең кендеге һаналған бильярд уйынына ла сират етте.

— Шарҙарҙы кем теҙә? — тип һораны хужа, үҙенең Ғилман менән бер хоҡуҡта икәнен белдерергә теләгәндәй кинәйәле йылмайып.

— Уларҙы мин ҡуйырмын. Һеҙ шарҙарҙы ватаһығыҙ һәм беренсе шарҙы һалаһығыҙ, — тип яуапланы Ғилман.

«Ҡара, ҡара, бөтөнләй томана икән, атанан улды айыра белмәгән кеше булырға оҡшай был малай», – тип уйланы хужа, ирәбеләнеп.

– Элек был уйын менән шаярғаның бар инеме, әллә беренсе тапҡыр һуғаһыңмы? – тип һорап ҡуйҙы Арыҫлан Зәйниевич эре генә.

Ғилман шарҙарҙы өсмөйөш яһап теҙҙе лә: «Һуғыш ваҡытында бер аҙ шөғөлләнергә тура килгәйне», – тип ябай ғына яуап бирҙе. Таяҡтың башын аҡбур менән ағартып торған Арыҫлан Зәйниевич, уның шундай сәйерерәк яуабын ишеткәс, тағы аптыраулы ҡараш атты: «Белмәҫһең был әҙәмде, һуғыш мәлендә ул ниткән бильярд булыуы мөмкин? Бильяд менән һуғыш араһында мин аңламаған тағы ниндәй бәйләнеш бар һуң?» – тип уйлап та алды. Ул үҙе һуғышта булманы, бронь менән Өфөлә тороп ҡалғайны.

Мылтыҡ тотҡан һалдат һымаҡ, кий таяғын ҡыҫып, Ғилман хужаның өсмөйөш ватҡанын көтә башланы. Тап ошо мәлдә ул һуғыш ваҡытында үҙенең һуңғы мәртәбә бильяд уйнаған сағын иҫенә төшөрҙө. Сталинградҡа етерҙән алда Бутурлиновка станцияһы өсөн барған ҡаты бәрелештә ул һул аяғынан яраланды. Уның һымаҡ яраланғандарҙы Бекетово ҡалаһында комиссиянан үткәрҙеләр. Шунан һуң ҡаты яралыларҙы тәрән тылға оҙаттылар. Ғилман Себергә эләкте. Уның госпитале элекке бер алпауыттың үҙәк тимер юл станцияһынан етмеш-һикһән саҡрымда ятҡан матур тәбиғәтле поместьеһы булып сыҡты. Бына шуның флигелендә ҡуйылған бильярд өҫтәле һуғыш мәленә тиклем һаҡланған икән. Бында элек кенәздәр, байҙар ял итһә, һуғыштан алда урындағы етәкселәрҙең күңел асыу, кәйеф-сафа ҡороу урынына әйләнгән. Йәшел хәтфә менән көпләнгән ҙур бильярд өҫтәлендә йәшмә ташынан ҡырып эшләнгән сыбар шарҙарҙы төртөп өйрәнде лә инде Ғилман был уйынға. Ҡултыҡ таяғы менән йөрөүенә ҡарамаҫтан, был госпиталдә оҙаҡ ҡына дауаланыу сәбәпле, ул уйынды ярайһы ғына үҙләштереп өлгөрҙө. Яралы һалдаттар килә-китә торҙо, «Гришка-чемпион» ҡушаматын йөрөткән Ғилман бер кемде лә алдына сығарманы. Бына әле лә шул ҡасандыр баштан үткән ваҡиғалар тәьҫоратына бирелеп, уйға батып торған йәш түрәлә хужаның: «Бильярд менән шаярғаның бармы, әллә беренсе тапҡыр уйнайһыңмы?» – тип мыҫҡыл ҡатыш һорап ҡуйыуы уйын сәме уятты. «Тимәк, Арыҫлан Зәйниевич мине тиң күрергә теләмәй, үҙен сысҡан менән уйнаған бесәй итеп һиҙә». – Шундай ғәрлек тойғоһо уның күңелен ҡырҙы. «Әйҙә, әйҙә, башта ярышып ҡарайыҡ, кемдең нисек уйнағаны аҙаҡ күренер», – тип телләшкеһе килде Ғилмандың.

Арыҫлан Зәйниевич түңәрәк ҡорһағы менән бильярд өҫтәлен терәп, кий таяғын һул ҡулының бармаҡ араларынан бер алға, бер артҡа шылдырып тоҫҡап торҙо ла төртөп ебәрҙе. Өсмөйөштөң башында ятҡан шарға бәрелеп, уның һуҡҡан шары ҡыя китеп, лузаға «шаҡ» итеп инеп тә китте. Арыҫлан Зәйниевич, эске кинәнесен йәшерә алмай: «Беҙҙекеләр шулай уйнай ул!» – тип ысҡындырып ебәрҙе. Ләкин шул уҡ лузаға төшөргә әҙерләнеп ятҡан шарҙы икенсе төртөүендә индерә алманы. «Нисауа, уйын оҙаҡ, төн беҙҙеке. Бишбармаҡ ҡасмаҫ әле», – тип үҙен йыуатып алды хужа.

Сираты еткәс, Ғилман үҙендә эске тулҡынланыу тойҙо, хатта ҡулдары ҡалтыранды. Хужаны нисек кенә булһа ла еңергә тырышыу уға тыныс ҡына һуғырға бирмәне. Баяғы лузаға ҡаршы торған шарға, ҡулы шыуып китеү сәбәпле, Ғилман да тейҙерә алманы.

Башта икеһенең дә уйыны йүнгә һалынманы. Ғилман эске тулҡынланыуынан, мауығып китеүенән уйнай алманы. «Барыбер мин еңәсәкмен», – тип үҙ-үҙен йыуатып торҙо Арыҫлан Зәйниевичтың өҫтөнлөгөн асыҡтан-асыҡ тойоуҙан һәр саҡ яҙа һуҡҡан ир. Әҙерәк уйнағандан һуң, уйын бер аҙ тынысланып китте. Шул саҡ Ғилман үҙенә ҡапма-ҡаршы ятҡан лузаға шап иттереп шарҙы һалып ҡуйҙы.

– Был осраҡлы шар булды, ҡаңғырып ҡына барып төштө, – тип битараф ҡына

һөйләнде хужа, Ғилмандың мәргән һуғыуын танырға теләмәйенсә. Ләкин уның был һүҙе хәҙер уйын ҡомарына кереп алған Ғилманды туҡтата алманы, киреһенсә, дәрт кенә өҫтәне. Ул бильярд өҫтәлен бер нисә тапҡыр әйләнеп сыҡты ла икенсе башта ятҡан бер шарҙы яртылашҡа тоҫҡап төртөүе булды, шарҙар икеһе лә ҡапма-ҡаршы ятҡан лузаларға тәгәрәп төшөп тә китте. Дүртенсе шарҙы һуғып керткәс, Ғилман үҙенән күҙен алмай, уҫал ҡарашынан зәһәрле уҡ атып торған хужаһының йәмрәйгән йөҙөн күрҙе: тулы бите аҫҡа һуҙылған, ауыр эйәге һалынып төшкән, барлыҡ ҡиәфәтен нәфрәт ялҡыны солғап алған.

Арыҫлан Зәйниевичтың томалана башлаған мейеһенә: «Ни эшләй был ахмаҡ? Ул үҙенең зәғиф аҡылы менән үҙем биләгән өлкәлә бер кемдең дә мине оторға хаҡы юҡ икәнен белмәй микән ни? Әллә кисә генә мин ҡуйған вазифала артабан эшләргә ниәте юҡмы икән был эт ҡойҡаһының?» — тигән хәтәр уй килде.

Нәҡ шул мәлдә генә бильярд бүлмәһе ишегенән аш бүлмәһендә булашҡан Ғариповтың башы күренде. Ул хужаһының йөҙө ҡара һөрөм менән ҡапланғанын шундуҡ күреп, сырайын һытты, уның тумалаҡ битенә лә ҡайғы-хәсрәт, тәрән борсолоу һыҙаттары ятты. Шулай ҙа, стенаға беркетелгән ике ҡатлы бәләкәй кәштәнең өҫкө яғында яңғыҙ ғына ятҡан шарҙы күреп тороуына ҡарамаҫтан (Арыҫлан Зәйниевич уйнағанда үҙ шарҙарын тик өҫкө ҡатҡа ғына ҡуйғанын Ғарипов яҡшы белә ине), дөрөҫләүҙе кәрәк тапты:

— Иҫәп нисә?

Тәүге уңыштарҙан ҡанатланып өлгөргән Ғилман көр тауыш менән яуап ҡайтарҙы:

— Дүрткә бер.

— Дүрт кемдеке? — тип уйламайынса ысҡындырып ебәрҙе Ғарипов.

Шартлар сиккә еткән Арыҫлан Зәйниевичтың тартылған нәфрәт ҡылы түҙмәне, «зыңҡ» итеп өҙөлөп тә китте.

— Һинең ни эшең бар бында? Күҙҙән юғал! — тиеүе булды, Ғарипов, ысынлап та, юҡ булды ла ҡуйҙы һәм оҙаҡ ҡына күҙгә салынманы.

Ҙур кинәнес менән һуғырға әҙерләнгән Ғилманға ҡарата асыу уты дөрләп янған Арыҫлан Зәйниевич ҡулындағы кий таяғын мөйөшкә ырғытты ла түңәрәк өҫтәлдәге эсемлеккә тотондо. Был юлы ул таяҡҡа таянып тәрән уйға сумған «дошман»ын өҫтәл янына саҡырып та торманы.

Хужа йәнен үртәп, һерәйеп торған нескә билле рюмканы ҡулы менән йыға төрттө лә һыу эсә торған һауытҡа тултыра коньяк ҡойҙо. Шешмәк күҙҙәрен йомоп, башын ҡайҡайта биреп, ситенә тиклем тултырылған һауытты бер тынала һемергән Арыҫлан Зәйниевич бер нисә түңәрәк лимонды киң асылған ауыҙына ырғытты. Мул ғына һыйҙырышлы фужер, күрәһең, үҙенекен итте: уның ҡылдай тартылған нервылары йомшара төштө, күңел ҡоршауҙары бушаны. Ул иҙәндә ятҡан таяғын эйелеп алды ла үҙенең уйын сиратын файҙаланырға ҡарар итте. Ләкин эске көсөргәнеш һәм еңелә башлау ғәрлеге генә түгел, һуңғы эсеп ебәргән эсемлек тә үҙенең ҡара эшен башҡарҙы, буғай. Арыҫлан Зәйниевич мәргәнлеген бөтөнләй юғалтты. Уйын етегә бер иҫәбенә еткәс, бүлмәнең ишеге яңынан асылды. «Имен-аман хужа ҡулында эшләргә уйлаһа, был малай аҡылына кире ҡайтҡандыр. Арыҫлан ағаһының күңеле менән хисаплашмайынса булмай шул», — тип уйлаған Ғарипов ике яҡҡа асмалы ишек уртаһында икенсе мәртәбә пәйҙә булды. Ул шарҙар торған кәштәгә кинәт кенә күҙ ташланы ла йәлләү ҡатыш мөлдәрәмә ҡарашын уйын сәме менән алһыулаған Ғилмандың йөҙөнә һирпте. Аптырауҙан ни тип әйтергә белмәй, Ғарипов, ишекте ябып, күҙҙән юғалды. Был уның Ғилманға ҡарата һуңғы борсоулы иҫкәрмәһе булды.

Еңелгән көрәшкә туймай, тиҙәр. Әле һуңғы ышанысын юғалтмаған Арыҫлан Зәйниевич тағы уйнарға тәҡдим итте һәм, шарҙарҙы кий таяғы менән ҡамай-ҡамай, өсмөйөш ҡора башланы. Ғилман тәүге һуғыуҙа уҡ шарҙы индереп ҡуйғас,

өмөтөнән тамам ваз кискән хужа уйынды битараф ҡына дауам итте. Бик тиҙ генә Ғилмандың шарҙары бишкә етте, ә хужа, күпме генә тырышһа ла, икенән арттыра алманы. Ғилман тағы берәүҙе лузаға индергәс, Арыҫлан Зәйниевич тамам сығырынан сыҡты.

— Мин һине йүнле кеше тип һанап йөрөһәм, һиндә оят тигән нәмә бөтөнләй юҡ икән. Бында мине бер кем дә оторға тейеш түгеллеген белмәҫкә бөтөнләй тинтәк булырға кәрәк бит! — Хужа асыҡтан-асыҡ ярһырға тотондо. Таяғын нәҙек яғынан тотоп, йыуан башы менән өҫтәлдә тәгәрәп ятҡан шарҙарҙы ышырып, паркет иҙәнгә ырғыта башланы. Уның тулы бите, тутыҡҡан тимер ише, көрән төҫкә әйләнгәйне. Тар ҡамыттан ҡотолорға теләгән аҫау айғыр һымаҡ, ул ҡалын муйынын төрлө яҡҡа борғолап алды. Бильярд өҫтәлен таҙартып бөткәс, хужа янынан коньякка йомолдо. Шунан, ныҡлы баҫып, элгес янына килде. Ашыҡ-бошоҡ пинжәген эләктерҙе, плащын кейергә түҙемлеге етмәне — уны салғыйынан йолҡоп алыуы булды, төрлө яҡҡа әйләнеп ултырған ҡорос элгес иҙәнгә ауҙы. Асыуы тулышҡан түрә йәйенке плащын иҙәндән һөйрәп, йүгерә-атлай тышҡа атылды. Ул көтөп торған машинаның алғы ишеген шарт итеп асты ла үҙ урынына менеп ҡунаҡланы. Уның артынан сыҡҡан Ғилман, машинаның артҡы ишеген асып, ултырырға самаланы. Шул саҡ ғәрләнеүенән ярылыр сиккә еткән хужа ярым асылған артҡы ишекте бөтә көсө менән шаҡылдатып ябып та ҡуйҙы.

— Һин бильярдты бик шәп уйнайһың икән, йәйәү ҙә ҡайтырһың әле, —уның теш араһынан ҡыҫып сығарған һүҙҙәренән һуң машина, бәйҙән ысҡынған эт һымаҡ, ҡапыл урынынан ырғылды.

Тыуған хәл-ваҡиғаға ниндәй баһа бирергә белмәй аптырап ҡалған «бильярд чемпионы», газ ҡатыш ҡуйы төтөнгә күмелеп, ете төн уртаһында япа-яңғыҙы тороп ҡалды. Хәҙер ни эшләргә, бөтә транспорт күптән туҡтаған бит? «Ярар, булғанды кире ҡайтарып булмай, һис юғында кире дачаға инеп, Ғарипов менән ҡайғыны уртаҡлашып, исмаһам, бишбармаҡ ашап ҡайтырмын», — тип ул янынан ишеккә килде. Ләкин шул арала дача ишеге эстән шарт бикләнеп тә өлгөргән булып сыҡты. Ғилман бар көсөнә шаҡылдатырға тотондо. Бер аҙҙан эстә ут яндырҙылар. Быяла ишектән биленә пистолет таҡҡан милиционер кәүҙәһе һүрәтләнде.

— Һеҙгә нимә кәрәк? — тип һораны ул, танымаған һымаҡ.

— Миңә теге... иптәш Ғарипов кәрәк ине.

— Ғиндулла Урманович бер сәғәт элек ашнаҡсылар менән ҡайтып китте. Ә һеҙгә ҡайнар сәләм тапшырырға ҡушты.

Уның кинәйәһенә төшөнөп етмәгән Ғилман: «Рәхмәт инде, Ғиндулла Урманович сәләм булһа ла тапшырып киткән», — тип уйлап, ике яҡҡа асмалы ҡапҡа аша сыҡты ла төнгө ҡараңғылыҡҡа сумды. Ҡунаҡхананың ишеген асҡанда көнсығышта төҫмөрләнә башлаған йыртыҡ болоттар араһынан көҙгө таң һыҙаттары беленә ине.

***

Сисенмәйенсә карауатына ауған Ғилман Уралбаев кисәге күңелһеҙ ваҡиғаның һәр күренешен бер-бер артлы башынан үткәрҙе. Ләкин, уны нисек кенә әүәләмәһен, үҙенең тәртибен үтә ҡаты тәнҡитләрлек, үкенеп иҫкә алырлыҡ бер дәлил дә таба алманы. «Уйын — уйын инде ул. Кемдер ота, кемдер еңелергә тейеш, хәҙер инде уйнаусының вазифаһына ҡарап уйнарғамы ни?» — тип уйланы Ғилман һәм, ошо һығымтаны башына беркетеп, үҙ кабинетына инерҙән алда Ғариповтың хәлен белеп сығырға ниәтләне.

Хужалыҡ етәксеһе уны һалҡын ҡабул итте.

— Һин мине ниңә ташлап ҡастың? Көтөп торһаң булмай инеме ни? — Йәш түрә тәфтиш алырға самаланы. Күпте күргән Ғарипов артыҡ ғәжәпләнмәй, тыныс ҡына яуапланы:

– Мин һинең ише тинтәк түгел бит. Ундай тамашаларҙы минең баш күп кисергән. Уйынығыҙҙың аҙағы ни менән бөтөрөн абзыйҙың елкәһе баштан уҡ һиҙенгәйне инде, – ул йыуан муйынына бер нисә тапҡыр усы менән шапылдатып һуғып ҡуйҙы.

– Ә бишбармаҡ? – Һорауының нисек ысҡынып киткәнен Ғилман һиҙмәй ҙә ҡалды.

– Ниндәй бишбармаҡ тураһында һөйләйһең? Эй, ҡустым! Үҙ хужаңды уйында отоп, уның менән сәкәшә-сәкәшә коньяк төшөрөп, етмәһә, бишбармағын да ашап ҡайтырға уйлағайныңмы ни? Бәй, хужа менән йәнәш ултырып, бер ир-егет бишбармаҡ ашарға уйлаған! Бигерәк бер ҡатлы икәнһең, Ғилман дуҫ!

Уралбаевҡа башын эйеп сығып китеүҙән башҡа сара ҡалманы. Ошо ваҡиғанан һуң Арыҫлан Зәйниевич, ниндәй генә ашығыс йомош булмаһын, Ғилманды өсәр көн буйы ҡабул итмәне. Ахыры, аптырағас, Уралбаев ошо көндәрҙә хәл итәһе мәсьәләләрҙе теҙеп, хужаға секретарь аша ҡағыҙ ҙа биреп ҡарағайны, бер ниндәй яуап булманы.

...Әлбиттә, аппарат эше туҡтап ҡалманы. Ғилман урынына сараларға, йәш булыуына ҡарамаҫтан, түрәләр алдында һәр саҡ бөгөлөп тороуҙан яурындары бөкрәйә башлаған урынбаҫары йөрөй. Уралбаев эштән ҡайтҡандан һуң ҡунаҡхананан сыҡмай башланы. Бер кисен, яҡты киләсәккә өмөттө тамам өҙөп, тәҙрәнән ҡараһыу болоттар ҡаплаған күк көмбәҙен күҙәтеп ултырғанда, ҡапыл телефон зыңланы. Ғилман йүгереп барып трубканы күтәрҙе. Унан таныш тауыш ишетелде.

– Ниндәй эш башҡарып ултыраһың унда, Уралбаев? Кий таяғын нисек тоторға онотманыңмы әле? – тип мыҫҡыллы һораны тауыш. –Йәһәт кейен дә сыға тор. – Хужа, яуап көтөп тормайынса, трубканы ташланы.

Был юлы машина оҙаҡ көттөрмәне: Ғилман сығыуға, хужа үҙе ултырған ҡара машина килеп тә етте. Бер аҙ барғас, машина урман эсендәге баяғы дача эргәһендә туҡтаны. Эскә ингәс, хужа, үткәндәге һымаҡ, тағы ла уйнап алырға тәҡдим итте. Бөгөн түңәрәк өҫтәл буш ине.

Ғилман уйға батты. Нисек уйнарға һуң? Баштан уҡ отолоп ҡуйырғамы? Былай эшләһәң, уйындан ни файҙа? Уралбаев бер-бер артлы ике шарҙы индереп тә ҡуйҙы. Арыҫлан Зәйниевичтың ауыҙы ҡыйшая башлағайны инде, шул мәлдә Ғилман, бар көсөнә һуҡмай, бик оҫта ғына бер шарҙы луза тапҡырында туҡтата алды. Ҡыуанысын йәшерә алмаған хужа уны шундуҡ индерҙе, шунан – тағы берәүҙе... Ишектән Ғариповтың түңәрәк йөҙө күренде, иҫәп хужа файҙаһына икәнен аңғарғас, төҫөнә ҡәнәғәтлек сығарып, тағы юғалды. Бер аҙҙан официант ҡыҙ түңәрәк өҫтәлгә һый тулы һауыттарҙы теҙеп ҡуйҙы. Күрше бүлмәнән бишбармаҡтың башты әйләндерерлек еҫтәре сыға башланы.

Был юлы барыһы ла башҡаса булды. Биш уйында ла хужа еңде. Ҡараңғы төшкәс, кәйефе апаруҡ күтәрелгән хужа Ғилманды үҙ машинаһында ҡунаҡханаға илтеп ташланы. Хушлашҡанда Ғарипов: «Күреп торам, ҡустым, бильярд уйнарға өйрәнә башлағанһың икән», – тип шыбырҙаны.

Ваҡыт үтте. Был ваҡиға яйлап онотола барҙы. Ғилман бындағы сетерекле тормошҡа өйрәнде һәм башҡаса бындай «сәйәси» хата яһаманы. Кем менән үҙенде нисек тоторға, нисек һөйләшергә, кемдән отолорға, кемде мотлаҡ еңергә – барыһын да уйлап эш итте һәм башынан үткән һабаҡты бер ҡасан да башынан сығарманы.

**Баҫмаға Рауил ӨМӨТБАЕВ әҙерләне.**

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ ДӘҮЛӘТ ТЕЛЕ БУЛЫП ТАНЫЛЫУ ТАРИХЫНАН

Туған тел һәр халыҡтың милли үҙенсәлектәренең иң мөһим сағылыштарының береһе булған кеүек, башҡорт теле лә – халҡыбыҙҙың күп быуатлыҡ тарихының айырылғыһыҙ юлдашы. Уларҙың тарихи яҙмышы уртаҡ. Боронғо замандарҙан үҙ телендә уҡыу-яҙыу булмаһа ла, башҡорттар ҙа телгә тоғролоҡто бер төптән булған шиүәләрҙә (һөйләштәрҙә) һаҡлап килә алған. Бүтән төрки халыҡтар һымаҡ уҡ, уҡып-яҙыуҙа уларҙы ғәрәп, фарсы, иҫке төрки (сығатай) телдәре берләштергән, йәғни башҡорттарға яҙма әҙәби тел булып хеҙмәт иткән. Шул уҡ ваҡытта беҙҙе бөтөн бер милләт итеп танытҡан «Урал батыр», «Аҡбуҙат» кеүек эпостарҙың, халыҡ ижады жанрҙарының үҙ милли теле – башҡорт теле булған. Ғәрәп, фарсы, иҫке төрки кеүек яҙма телдәрҙән айырмалы, ул – әҙәби телдең һөйләү формаһы. Ошо күҙлектән фекер йөрөткәндә, ҡасандыр әҙәби тел ике: яҙма әҙәби тел һәм һөйләү теле формаһында йәшәгән. Тимәк, совет осорона – XX быуаттың 20-се йылдарына ҡәҙәр башҡорттарҙың әҙәби теле булмаған, тигән фекерҙең ғилми ҡараш менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы юҡ.

Башҡорттарҙың шул осорға ҡәҙәр үҙ туған телендәге милли әҙәби теленең булмауы, халҡыбыҙҙың әҙәби теле бөтөнләй булмаған, тигәнде аңлатмай. Беренсенән, ул уҡыу-яҙыуҙа бүтән әҙәби телдәрҙе (ғәрәп, фарсы, сығатай, артабан татар телдәрен) ҡулланған, шул телдәрҙә ижад иткән; икенсенән, уның үҙ милли телендәге әҙәби телдең һөйләү формаһы булған, башҡорт халыҡ ижадының күп быуатлыҡ тарихы ла шуны раҫлай. Дөрөҫ, башҡорт милли яҙма әҙәби теле – Октябрь инҡилабы, Совет власы йылдары емеше, йәғни кире ҡаҡҡыһыҙ аксиома, тарихи факт. Шуның менән бергә милли яҙма әҙәби тел иң элек башҡорт теленең дәүләт теле булып танылыуына бурыслы. Ошо йәһәттән дәүләт теле булараҡ башҡорт теле башҡорт милли яҙма әҙәби теленән олораҡ. Билдәле, был сағыштырыу башҡорт әҙәби теленең һөйләү формаһына ҡағылмай. Ул халҡыбыҙ быуаттар буйы ҡулланған ғәрәп, фарсы, сығатай әҙәби телдәренә ҡарағанда ла бер нисә быуатҡа “ҡартыраҡ” булып сыға.

Дәүләт теле булараҡ башҡорт теленең үҙ тарихы XX быуаттың тәүге сиреGенән башланып, туранан-тура Октябрь инҡилабынан һуң Совет власы үткәргән милли сәйәсәткә бәйле. Уның хоҡуҡи нигеҙен “Рәсәй халыҡтарының хоҡуҡтары тураһындағы декларация” тәшкил итә. Шуға күрә Үҙәк Совет власының Башҡорт хөкүмәте менән 1919 йылдың 20 мартындағы килешеүе нигеҙендә Автономиялы Башҡорт Совет Республикаһын танығанға ҡәҙәр әле башҡорт теленең Бәләкәй Башҡортостанда рәсми тел итеп нығытылыуы аңлашыла. Был йәһәттән дәүләт теле сифатында башҡорт теле автономиялы республиканың үҙенән – БАССР-ҙан өлкәнерәк булып сыға. Сөнки Башҡортостан

Хөкүмәтенең 1918 йылдың 21 ғинуарына тиклемге бер документында ла «Бәләкәй Башҡортостан» тип аталған биләмәлә башҡорт теленең дәүләт теле статусына тиң рәсми тел итеп йөрөтөләсәге билдәләнә. Бер нисә көндән һуң донъя күргән – Башҡортостан Хөкүмәте рәйесе Ю. Бикбов, хөкүмәт ағзалары З. Вәлидов, М. Ҡулаев һ.б. ҡул ҡуйған икенсе бер документа тағы ла аныҡыраҡ итеп: «Официальным языком Башкирии является башкирский (тюркский) язык, и временное применение в башкирских учреждениях русского языка не лишает башкирского языка этого права», – тип әйтелә.

1919 йылдың 20 мартындағы килешеүҙән һуң тел мәсьәләһенә бәйләнешле тәүге документ шул уҡ йылдың 3 декабрендә уҙған Башревком ултырышында БАССР-ҙа рәсми тел мәсьәләһененең махсус ҡаралыуы хаҡында хәбәр итә. Унда, Башревкомдың 1919 йылдың 20 сентябрендә үткәрелгән пленумы ҡарарына ярашлы, Башревком рәйесе Х. Йомағолов имза һалған ҡарар буйынса Юстиция халыҡ комиссарлығына рәсми телде тормошҡа ашырыу буйынса проект әҙерләү бурысы йөкмәтелә. Ҡарарҙы ғәмәлгә ашырыу йәһәтенән башҡарылған эш хаҡында Юстиция халыҡ комиссарлығының Башревкомға ебәргән хатында: «Государственными языками на территории БАССР признаются русский и башкирский языки», – тип әйтелә. Документтың 2-се пункты хөкүмәт органдары һәм учреждениелары бойороҡтарының һәм иғландарының халыҡҡа ике телдә еткерелергә тейешлеге тураһында һөйләй. Дәүләт телдәрен тормоштоң төрлө өлкәләрендә ҡулланыу буйынса ла айырым күрһәтмәләр бирелә.

1920 йылдың 1 мартында үткән ултырышында Башревком БАССР-ҙа башҡорт телен дәүләт теле булараҡ ҡулланыуға индереү мәсьәләһен ҡарай. Унда Юстиция халыҡ комиссарлығының доклады тыңланып, БАССР-ҙа дәүләт телдәре тураһында аныҡ һығымтаға килеү өсөн комиссия ойошторола. 24 мартта Башревком БАССР-ҙа дәүләт телдәрен индереү тураһындағы положениены раҫлау тураһында ҡарар сығара. Уның тәүге пунктында: «Государственными языками БАССР признаются башкирский и русский языки», – тиелгән. Башревком рәйесе З. Вәлидов, ревком ағзалары Ф. Төхвәтуллин, К. Каспранский ҡул ҡуйған ҡарар биш пункттан тороп, уларҙа дәүләт телдәрен ғәмәлләштереү юлдары билдәләнә. 2-се пунктта дәүләт органдары һәм учреждениеларының халыҡҡа еткерелергә тейешле бойороҡ һәм иғландары ике телдә баҫылырға тейешлеге хаҡында әйтелә. Ә урыҫ телендә аралашыусылар бөтә халыҡтың 25 процентын тәшкил итмәгән тәҡдирҙә, документтарҙың урыҫса ла донъя күреүе мәжбүри түгел. 3-сө пунктта хөкүмәт, йәмәғәт һәм кооперация учреждениеларында эш ҡағыҙҙарын дәүләт телдәренең береһендә алып барырға мөмкинлеге күрһәтелә. 4-се пунктта учреждениеларға килгән ғаризалар һ.б. документтар ниндәй телдә булһа, шул телдә ҡабул ителергә тейешлеге әйтелгән. Был осраҡта учреждениеларҙа эш ҡағыҙҙарының ниндәй телдә алып барылыуы кәртә була алмай. 5-се пункт буйынса, БАССР халыҡ мәхкәмәһе (суды) тураһындағы положениеға ярашлы, мәхкәмә ултырыштары дәүләт телендәренең береһендә алып барыла ала.

Шулай итеп, башҡорт телен дәүләт кимәленә сығарыу буйынса республиканың етәксе органдары эҙмә-эҙлекле эш башлай. Ләкин милли республикала дәүләт телен ғәмәлгә индереү үтә ҡатмарлы мәсьәлә булып сыға, тәжрибә етешмәүе ныҡлы һиҙҙерә. РКП(б) ағзалары булған башҡорт хеҙмәткәрҙәренең милли кадрҙар менән эшләү, башҡорт телен учреждениеларҙа дәүләт теле булараҡ ҡулланыу буйынса үткәргән кәңәшмә ҡарары шул хаҡта һөйләй.

1921 йылдың 17 апрелендә үткән был кәңәшмәнең көн тәртибенә бер мәсьәлә ҡуйыла: РКП(б)-ның X съезының милли мәсьәлә буйынса ҡарарын тормошҡа

ашырыу буйынса бурыстар. Кәңәшмә аҙағында партия съезы ҡарарҙарын ғәмәлгә ашырыу буйынса башҡарыласаҡ эштәр аныҡ күрһәтелгән ҡарар сығарыла: «а) ввести во всех учреждениях БАССР башкирский язык наравне с русским, т.е. сделать его государственным, б) обязать всех работников БАССР, не знающих башкирского языка, приступить к его изучению, для чего открыть курсы, в) пересмотреть все органы власти и хозяйства, как в центре, так и на местах с тем, чтобы они составлялись в большинстве из туземцев; г) широко привлечь представителей туземной интеллигенции и полуинтеллигенции к советской работе вплоть до ответственных постов, д) упростить все аппараты административной и хозяйственной жизни, приспособляя их к особенностям быта и пониманию башкир».

Кәңәшмә ҡарарына БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советы рәйесе М. Халиҡов имза һалған. Башҡорт теленең көндәлек тормошҡа дәүләт теле сифатында индерелеүе тарихындағы икенсе бер мөһим документта Ш. Хоҙайбирҙиндың ҡултамғаһы тора. БАССР Үҙәк башҡарма комитеты президиумының (БЦИК) 1921 йылдың 6 июнендә ҡабул ителгән ҡарарында «Объявить башкирский язык государственным языком БАССР наравне с русским» тиелгән. Артабан унда дәүләт теле булараҡ башҡорт телен ҡулланыуға индереү тәртибе билдәләнә. Ҡарар БАССР үҙәк учреждениеларында эш ҡағыҙҙарын ике: башҡорт һәм урыҫ телдәрендә алып барыуҙы күҙ уңында тота. Ә ауыл, волость, кантондарҙа ул шунда йәшәүселәрҙең милли нисбәтенә ярашлы ойошторолорға тейеш. Халыҡтың кәмендә 75 проценты башҡорт йәки урыҫ икән, эш ҡағыҙҙары ошо ике телдең береһендә алып барыла. Башҡорт телендә канцелярия хеҙмәткәрҙәре әҙерләү өсөн ҡыҫҡа сроклы курстар асыу БАССР Халыҡ мәғариф комиссарлығына йөкмәтелә. Ҡарарҙың телеграф аша ғәмәлгә индерелеүе күрһәтелә.

Башҡорттарҙы партия, совет һәм хужалыҡ эштәренә ылыҡтырыу бурысы РКП(б) Өлкә комитеты пленумында ла ҡарала. Уның ҡарарында, башҡорт теленең урыҫ теле менән бер ҡатарҙан дәүләт теле итеп танылыуы менән бергә, уны өйрәнеүҙе бөтә уҡыу йорттарында индереү, совет хеҙмәткәрҙәре өсөн башҡорт телен һәм Башҡортостан тарихын өйрәнеү курстары асыу ҡарала. БАССР Үҙәк башҡарма комитеты президиумы 1922 йылдың 16 октябрендә ҡабул иткән ҡарары менән башҡорт телен ғәмәлгә индереү буйынса махсус комиссия ойоштора. Президиум рәйесе Х. Ҡушаев ҡул ҡуйған ҡарар буйынса комиссияға Үҙәк башҡарма комитетынан Әшрәпов, Мәғариф халыҡ комиссарлығынан Тереғолов, Таһировтар индерелә. Күреүебеҙсә, РКП(б) Өлкә комитетының Х съезының милли мәсьәлә буйынса ҡарарына таянып, республиканың етәксе органдары башҡорт телен дәүләт теле итеү буйынса көсөргәнешле эш башлай. Тәүге ҡарауға партия съезының милли мәсьәлә буйынса ҡарары һәр кемгә аңлайышлы һымаҡ күренһә лә, уны Башҡортостан шарттарында хәл итеү күпкә ҡатмарлыраҡ булып сыға. Сөнки милли мәсьәлә буйынса партия ҡарары урындарҙа мотлаҡ рәүештә үтәлергә тейеш булһа ла, уны ғәмәлләштереү республиканың етәксе органдарының дөрөҫ эш итә белеүенә бәйләнгәйне. Тәүге осорҙа партия һәм совет органдарында етди генә ҡаршылыҡлы күренештәр килеп сыға, һәм ул башҡорт телен дәүләт теле булараҡ урыҫ теле менән тиң кимәлдә дәүләт учреждениеларында ҡулланыуға ҡайтып ҡала. Һүҙ БАССР Үҙәк башҡарма комитеты президиумының 1921 йылдың 6 июнендәге ҡарарының 2-се пункты, йәғни: «…во всех учреждениях БАССР вести делопроизводство на двух языках – башкирском и русском» тигән күрһәтмә тураһында бара. Был мәсьәлә Партия өлкә комитеты президиумының 1922 йылдың 16-17 ноябрендә уҙғарылған ултырышында ҡаралып, махсус ҡарар сығарыла. Президиум ҡабул

иткән ҡарарҙа тәүге документҡа етди генә төҙәтмәләр индерелә. Унда, үҙәк һәм кантон учреждениеларында эш ҡағыҙҙарын урыҫ һәм башҡорт телдәрендә алып барыу шарты үҙгәртелергә тейеш, тип табыла. Уның урынына: «Временно основное делопроизводство центральных и кантонных советских органов и предприятий всех ведомств на территории БАССР ведется на русском языке» тигән төҙәтмә ҡабул ителә. Урыҫ телен белмәгән башҡорттар менән бәйләнеште еңелләштереү өсөн һәр учреждениела штаттағы хеҙмәткәр иҫәбенә тәржемәселәр алырға кәрәклеге лә күрһәтелә. Эш ҡағыҙҙарын башҡорт телендә алып барыу башҡорттар күпселек тәшкил иткән волостарҙа ғына рөхсәт ителә. Башҡорт телен рәсмиләштереү буйынса ентекле проект эшләү өсөн өс кешелек комиссия ойошторолоп, уға Ш. Хоҙайбирҙин да индерелә. Партия өлкә комитеты ҡарарында: «Поручить секретарю обкома и Башсовнаркому призвать к порядку ответственных наркоматов, допустивших преждевременно неправильную реализацию башкирского языка, вызвавшую излишние недоразумения», – тип тә әйтелә.

Шулай итеп, башҡорт телен рәсмиләштереүҙә республиканың партия һәм дәүләт органдары араһында ҡаршылыҡлы хәл килеп тыуа: башҡорт теленең яңы статусы етди сикләүҙәргә дусар ителеп, ул башҡорттар күпселек булған волостарҙа ғына рәсми рәүештә ҡулланыла ала. БАССР-ҙа дәүләт телдәре статусының төп принциптары ғәмәлдән сығарыла, эш итеүҙән туҡтай.

Ошо рәсми документтан беҙ БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советы рәйесе М. Халиҡов менән Үҙәк башҡарма комитеты президиумы рәйесе Х. Ҡушаевтың башҡорт теленә ҡарата Партия өлкә комитеты етәкселеге сәйәсәте менән килешә алмағанын да беләбеҙ. Уларҙың үтенесе буйынса был фекер әлеге ҡарарға айырым рәүештә теркәлгән. Халиҡов менән Ҡушаев үҙәк һәм кантон органдарының эш ҡағыҙҙарын башҡортса ла алып барыуға сик ҡуйыуҙы дөрөҫ түгел тип һанауын, быны милли республикаларҙа Коммунистар партияһы үткәргән сәйәсәткә ҡаршы килеүен белдерә. Улар үҙ ҡарашын партияның X съезының милли мәсьәлә буйынса, VI өлкә партия конференцияһы, Советтарҙың II Бөтә Башҡортостан съезы, БАССР Үҙәк башҡарма комитеты ҡарарҙарына һәм башҡорт телен ғәмәлгә индереү буйынса ҡабул ителгән башҡа документтарға һылтанмаһы менән нығыта. Республикала иң юғары вазифалар биләгән был ике етәксе башҡорт телен аҡрынлап һәм системалы рәүештә бөтә учреждениеларҙа ла индереү талабын ҡуя. Дәүләт теле буларaҡ башҡорт теле урыҫ теле менән тиң йөрөтөлөргә тейеш, ти улар.

РКП(б) Өлкә комитеты президиумының үрҙә әйтелгән ҡарары ике көнлөк ҡырҡыу бәхәстә үткән ултырыштың һөҙөмтәһе була. Үкенескә ҡаршы, унда Партия өлкә комитеты секретары Б. Нимвицкий яһаған доклад документтар араһында һаҡланмаған. Шулай ҙа беҙ, фекер алышыу барышында уның һүҙ ҡыҫтырыуҙарынан сығып, докладтың эстәлеге хаҡында ниндәйҙер дәрәжәлә уй йөрөтә алабыҙ. Президиум ҡарарының айырым пункттары уның фекерен һүҙмә-һүҙ ҡабатлай кеүек. Был ултырыш асылда БАССР Үҙәк башҡарма комитеты президиумы рәйесе Х. Ҡушаев менән Халыҡ Комиссарҙары Советы рәйесе М. Халиҡовтың башҡорт телен дәүләт теле буларaҡ ғәмәлгә индерергә тырышыуын ғәйепләүгә ҡорола. Өлкә комитет яғынан ҡатнашҡан һәр кем мәсьәләне шулайыраҡ ҡуйырға тырыша. Кәңәшмәлә М. Халиҡовтың: “Что же, если тов. Халиков и т. Кушаев и другие виноваты в не подчинении обкому и не пользуются благонадежностью, то исключайте нас из партии. Тогда зачем же надо нам ходить в обком, когда наши предложения не принимаются во внимание. Я этого дальше терпеть не буду”, – тип әйтеүе тиккә булмағандыр.

Х. Ҡушаев иһә шундай белдереү яһай: “Кроме того, характерно отметить, что ни одно с моей стороны предложение никогда на заседании обкома принятым не бывает. Такое положение я считаю нетерпимым”.

Нимвицкий үҙенең йомғаҡлау һүҙендә: “Вся суть лишних споров заключается в том, что декрет Совнаркома, изданный в [19]21 г. наспех, стал проводиться в жизнь сейчас, без надлежащей санкции БОК партии (Башкирского областного комитета – **З.Н.**), – тип башҡорт телен рәсмиләштереүҙең уның рөхсәтенән тыш башлап ебәрелеүенә ишаралай. Шунда уҡ уның: «Вопрос о реализации, прежде чем получить определенное разрешение в Президиуме обкома, а затем в советском порядке, уже принял довольно уродливую форму, как это было понято Наркомпросом и Наркоматом РКИ», – тигән һүҙҙәре мәсьәләне тағы ла нығыраҡ асыҡлап ҡуйғандай.

Секретарь был осраҡта Халыҡ Комиссарҙары Советының 1921 йылда ҡабул ителгән ҡарары хаҡында һүҙ алып барыуы менән бөтөнләй үк хаҡлы түгел. Сөнки ул документ БАССР Үҙәк башҡарма комитеты тарафынан 1921 йылдың 6 июнендә Бәләкәй Башҡортостан шарттарында ҡабул ителә. Был ҡарар ултырышҡа ҡәҙәр элекке Өфө губернаһының етәксе хеҙмәткәрҙәренә билдәһеҙ булғанға оҡшай. Шуға күрәләр ҙә М. Халиҡов: «Не наша вина, если товарищи не имели интереса ознокомиться с законоположениями Советской власти по Малой Башкирии», – тип әйтергә мәжбүр була. Ул БАССР менән Өфө губернаһы бергә ҡушылып, Ҙур Башҡортостан ойошторолғанда ике яҡтың быға ҡәҙәр ҡабул иткән ҡарарҙарының көсөндә ҡалыуы хаҡында килешелгәнлеге тураһында иҫкә төшөрә. Шунан сығып, М. Халиҡов: «Таким образом, есть достаточное основание на право реализации башкирского языка сейчас же, понапрасну нас обвиняют в том, что вопрос начал проводиться без надлежащего его освещения в Президиуме обкома», – ти. Ул ултырышта БАССР Үҙәк башҡарма комитетының ошо туралағы ҡарарын, башҡорт телен ғәмәлгә индереү буйынса инструкцияны уҡып ишеттерә. М. Халиҡовтан һуң һүҙ алған Герасимов, уны яҡлағандай: «После того, как тов. Халиков объявил, что уже существует готовый декретированный в [19]21 г. проект о реализации башкирского языка, я положительно недоумеваю, почему же в начале не был поставлен на обсуждение означенный декрет Башсовнаркома и инструкции по данному вопросу. И какая была цель вызывать столько совершенно излишних словопрений в Президиуме обкома, а также кривотолков среди беспартийных членов БЦИК. По-моему, это не серьезный подход к делу и в высшей степени недопустимый», – тип ултырыш барышына үҙ ҡарашын белдерә.

Башҡорт теленең дәүләт теле итеп танылыуы, уны ғәмәлгә ашырыу буйынса Бөтә Рәсәй Үҙәк башҡарма комитетының Ҙур Башҡортостанды төҙөү хаҡында 1922 йылдың 14 июнь декретына ҡәҙәр үк Бәләкәй Башҡортостанда Башревком осоронан уҡ эш алып барылыуы тураһында элекке Өфө губернаһының ҡайһы бер етәксе хеҙмәткәрҙәренең белмәүе лә ихтимал. Шуға күрә М. Халиҡовтың ултырышта БЦИК-тың 1922 йылдың 6 июнь ҡарары менән таныштырырға мәжбүр булыуы аңлашыла, әлбиттә. Был ҡарар ВЦИК-тың 1922 йылдың 14 июнь декретынан теүәл бер аҙна элек донъя күрә. Шулай итеп, Бәләкәй Башҡортостанда башҡорт теленең дәүләт статусын тормошҡа ашырыу буйынса ныҡлы аҙымдар яһалған була. Тимәк, Герасимов хаҡлы, РКП(б) Өлкә комитеты президиумының М. Халиҡов менән Х. Ҡушаевҡа дәғүәләре урынһыҙ, сөнки улар был юҫыҡта Бәләкәй Башҡортостанда башланған эште дауам иттерә генә ине.

Ултырышта һөйләшеүҙең шундай йүнәлеш алыуының йәнә сәйер яғы бар һымаҡ: ул милли республика шарттарында дәүләт теленең үҙенсәлекле бурысын

үҙенсә аңлауҙың, йәғни субъектив ҡараштың бәләһе лә булғандыр, бәлки. Ә бит быңдай ҡараштың милли мәсьәләне ҡырҡыулаштырып ебәреүгә лә ихтимал ине. Докладтан һуң һүҙ алған Беляевтың фекере тап шундай уй тыуҙыра. “Немедленное введение башкирского языка в центральных учреждениях Башкирии неизбежно вызовет приостановку всякой деловой работы,– ти Беляев,– не могут все русские ответственные работники – коммунисты в наркоматах сразу заговорить на башкирском языке или, в конце концов, через переводчика”. Беляевтың ошонан алда ғына әйтелгәне тағы ла ҡәтғиерәк: «По специфическим условиям БАССР невыгодно допустить реализацию башкирского языка в таком порядке, как это предлагают тт. Халиков и Кушаев». Ошо уҡ кешенең: «Обязательное преподавание на всех школах на татаро-башкирском языке, как указано в проекте ВЦИК, мне думается, было бы большой ошибкой: нельзя же, в самом деле, необходимые учебники перевести быстро с русского на башкирский и в порядке принуждения заставить изучать башкирский язык», – тигән фекере иһә башҡорт теленең дәүләт теле булараҡ функцияһын аңлымыаңһыҙмы рәүештә урыҫ теленә ҡаршы ҡуйыу менән бер ине.

Ултырышта һүҙ асылда БЦИК-тың, йәғни БАССР Үҙәк башҡарма комитеты президиумының 1922 йылдың 6 июнь ҡарары тирәһендә бара һәм ҡабул ителгән ҡарар ҙа уға үҙгәрештәр индереүгә ҡайтып ҡала. БЦИК ҡарарында иһә мәктәпкә ҡағылған бер пункт та юҡ, бары башҡорт телен белгән хеҙмәткәрҙәр әҙерләү бурысы ғына ҡуйыла. Беляев иһә мәсьәләне мәктәптәрҙә уҡытыуҙы тотош башҡорт теленә күсереү, урыҫ телен башҡорт теле менән алмаштырыу рәүешендә ҡуя һәм, үҙенең ошо уйҙырмаһынан сығып, М. Халиҡов менән Х. Ҡушаевҡа ғәйепләүҙәр ташлай.

Әлбиттә, 1921 йылдың 17 апрель кәңәшмәһенең ҡарарынан сығып фекер йөрөткәндә, башҡорт телен ғәмәлгә индереүҙә ашығыслыҡ күрһәтелеүен кире ҡағыуы ҡыйын. Ҡарарҙа әйтелгәнсә, БАССР-ҙың башҡорт телен белмәгән бөтә хеҙмәткәрҙәрен дә тел өйрәнеүгә тотонорға ҡушыуҙы, махсус курстар асыуҙы бер аҙ һуңлатып тороу ҙа ҡамасауламаҫ ине. Шулай уҡ үҙәктә, урындарҙағы власть органдарында ерле халыҡтың (ҡарарҙа “туземцев” – **З.Н.**) күпселекте тәшкил итеүенә, яуаплы вазифаларҙы үҙләштерелеүенә өлгәшеүҙе лә бер аҙ көттөрөп торорға мөмкин булғандыр.

Ултырыш протоколынан күренеүенсә, М. Халиҡов та, Х. Ҡушаев та үҙ ҡараштарында ныҡ тора. Алда әйтелгәндәргә өҫтәп, М. Халиҡов сығышынан йәнә бер өҙөк: «Я категорически настаиваю на введении во всех учреждениях Башкирии основного делопроизводства на татаро-башкирском языке немедленно, сохраняя также русский язык. Мне странным кажется точка зрения в этом вопросе русских товарищей, предлагающих не вводить башкирский язык в центральных учреждениях», – тип ҡайһы яҡтың мәсьәләне хәл итеүгә ҡаршы булыуын атап әйтә.

Шул уҡ Герасимов та икенсе сығышында мәсьәләнең Партия өлкә комитеты тикшерелеүенә ҡуйылыуын тағы ла артыҡ тип таба: «В начале суждения данного вопроса не было информировано ни со стороны ВЦИК, ни со стороны Совнаркома о существовании готового, декретированного проекта по реализации башкирского языка. Чем объяснить, что этот вопрос поставлен сейчас во всей широте, для меня мало понятно... Почему-то нужно стало поднять этот вопрос, создавая вокруг него столько разговоров всюду, где бы ни следовало», – тип тәүге фекерен тағы бер ҡабатлай. «Поскольку декрет по реализации башкирского языка уже существует, необходимо закончить данный вопрос обсуждением и обличением его в законную ту или иную форму, оставив излишнее дискутирование», – тигән тәҡдим индерә Герасимов.

Нимвицкийҙың йомғаҡлау һүҙендәге «Вся суть лишних споров заключается в том, что декрет Совнаркома, изданный [19]21 г. наспех, стал проводится в жизнь сейчас, без надлежащей санкции БОК партии», тигән ҡарашын иҫкә төшөрһәк, эштең асылы нығыраҡ асыҡлана төшөр. Тимәк, элекке Өфө губернаһының партия һәм совет еткселәрен милли мәсьәлә борсомаған. Элекке Бәләкәй Башҡортостандың совет һәм хөкүмәт органдары милли мәсьәләне хәл итеүҙә үҙҙәре башлаған эште яңы шарттарҙа ла ихлас тормошҡа ашыра башлағас ҡына, улар саң ҡағырға мәжбүр була. Быны улар, хәҙер Оло Башҡортостанды етәкләгән элекке Бәләкәй Башҡортостандың совет һәм хөкүмәт органдары етәкселәренең эшмәкәрлеген бөгөнгө БАССР-ҙың етәксе партия органдарын һанға һуҡмау, тип баһалай, тел мәсьәләһе уларҙың үҙ белдеге менән үткәрелгән сәйәсәт, тип раҫлау юлынан бара. М. Халиҡов менән Х. Ҡушаев иһә РКП(б)-ның X съезының милли мәсьәлә буйынса ҡарарына һәм Советтарҙың II Бөтә Башҡортостан съезы (1921 йыл, 1–4 июнь) резолюцияһына таяна. Тәүгеһе хатта был документтарҙы башҡорт телен тормошҡа ашырыу законы тип раҫлай, өҙөп кенә «это – закон» тип ҡуя.

Элекке Өфө губернаһы етәкселәренең милли мәсьәләгә мөнәсәбәтен асыҡлауҙа М. Халиҡовтың түбәндәге һүҙҙәрен иҫкә төшөрөп үтеү бик урынлы булыр. «Обвинять создателей проекта по реализации тат[аро]-башкирского языка нельзя, что этот вопрос для русских работников новый и, конечно, безболезненно провести его невозможно; но также нельзя оставить без положительного разрешения этого вопроса, иначе что же была бы за Автономная Башкирская Республика, когда господствующим языком остался в ней русский язык, и это значило бы до некоторой степени, что не изжить национальный гнет бывших царских времен, под которым находилось башкирское население в течение нескольких столетий», – тип ул үҙенә ҡаршыларҙың милли мәсьәләнән йыраҡ тороуын күрһәтә. М. Халиҡов һ.б. сығыш яһаусылар ҡулланған «татаро-башкирский язык» төшөнсәһенең үҙ сәбәбе барҙыр. “Татар-башҡорт” тигән һүҙ барлыҡ документтарҙа ла осрай, сөнки уға тиклем башҡорт әҙәби теле мәсьәләһе хәл ителмәгән була. Татарҙар менән бергә башҡорттар ҙа XX быуат башында иҫке төрки телен алмаштырған татар әҙәби телен ҡулланыуға күскәйне. Шул сәбәпле «татар-башҡорт теле» төшөнсәһе бигерәк тә урыҫтар араһында киң ҡулланылып, башҡорттарҙың татар телендә уҡып-яҙыуы күҙ уңында тотолғандыр. Шул уҡ ваҡытта, ғәмәлдә ике милләтте ҡырҡа айырмағандарҙыр, тип уйларға ла мөмкин. Партия өлкә комитетында 1923 йылдың 12 декабрендә үткән кәңәшмәлә секретарь Восканов ошондай ҡәтғи фекер әйтә: «И можно (все товарищи пожелали), чтобы на сегодняшнем заседании покончить разговоры о татаро-башкирах. У нас есть башкиры, есть татары. Я бы просил это товарищей раз навсегда запомнить. А то, где вы бы не были, везде – «татаро-башкиры». Что это: на половину татары, на половину башкиры? У нас есть крестьянство татарское и есть ярко выраженное башкирское крестьянство, и половинчатых элементов у нас не имеется. Может быть, есть в Белебеевском кантоне: это крещеные. Я бы просил журналистов, которые также здесь присутствуют, покончить этим вопросом». Әммә был төшөнсә 30-сы йылдарҙа ла төрлө отчет һәм документтарҙа ҡулланылыуын дауам итә. Тора-бара эйәһеҙгә әүерелгән был төшөнсә статистикала аныҡ булмаған мәғлүмәттәр тупланыуға килтерә, шуның менән милли мәсьәләне хәл итеүҙең аныҡ картинаһын томалай.

Партия өлкә комитеты президиумдың ябыҡ ултырышы республикала милли мәсьәләне хәл итеүҙе бөтөнләй икенсе юлға бороп ебәреүгә өлгәшә. Һөҙөмтәлә

БАССР Үҙәк башҡарма комитеты президиумы 1922 йылдың 5 декабрендә БЦИК-тың 1921 йылдың 6 июнь ҡарарын үҙгәртеп, яңы ҡарар сығара. Бына ул: «Принимая во внимание, что немедленное и полное проведение в жизнь постановления 2-го Всебашкирского съезда Советов о признании башкирского языка государственным, наравне с русским, не могло и не может быть осуществлено из-за отсутствия достаточных средств, часто не дававших возможности проводить в жизнь самые неотложные мероприятия, так же из-за отсутствия достаточного количества квалифицированных работников, могущих поставить и инициативно руководить на башкирском языке отдельными отраслями сложного советского аппарата, а также из-за необходимости длительной и серьезной работы (выработка на башязыке соответствующей терминологии, ее популяризации, подготовка кадров работоспособных сотрудников и т.д.) Президиум БЦИК, во изменении постановления от 6-го июня 1921 г., постановляет:

*1. Временно оставить ведение на русском языке основного делопроизводства во всех центральных и кантонных советских органах, ведомствах и предприятиях БАССР.*

*2. В целях облегчения сношения с башкирским населением предложить центральным и кантонным учреждениям введение, как подсобного органа, института переводчиков башкирского языка из числа штатных сотрудников.*

*3. В волостях кантонов с преобладающим башкирским населением предложить немедленно установление ведения основного делопроизводства на башкирском языке при наличии реальной возможности осуществления этой меры.*

*4. Каждый гражданин имеет право обратиться в то или иное учреждение на одном из двух государственных языков.*

*5. Поручить Башнаркомпросу организовать курсы по подготовке работников по ведению делопроизводства на башкирском языке и установить во всех школах 2-й ступени для желающих изучение обоих государственных языков.*

*6. Поручить Совнаркому в развитие данного постановления издать в срочном порядке декрет и соответствующую инструкцию, во изменение ранее изданных.*

*7. Настоящее постановление входить в законную силу с момента его опубликования.*

Председатель Кушаев.
Секретарь Терегулов".

Партия өлкә комитеты президиумы ҡарарына үҙ фекерҙәренең индерелеүенә өлгәшеүенә ҡарамаҫтан, Х. Ҡушаев менән М. Халиҡов ҡарар рухындағы документтарҙы ҡабул итеү менән ризалашырға мәжбүр була. БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советы рәйесе булараҡ М. Халиҡов ҡул ҡуйған документта волость һәм ауыл кимәлендәге дәүләт һәм хосуси учреждениеларҙа эш ҡағыҙҙарын алып барыу тәртибе буйынса инструкция ла була. Унда үҙәк һәм кантон кимәлендәге учреждениеларға башҡорт телен дәүләт теле булараҡ ҡулланыуға индереү хаҡында бер ни ҙә әйтелмәгән. Шулай ҙа инструкцияның аҙағындағы бер һөйләм быңдай сикләүҙәргә һыймаған кеүек: «Все центральные учреждения БАССР обязуются перевести на башкирский язык все основные и важнейшие законы Рабочее-Крестьянского Правительства (кодекса и пр.) касающихся их ведомства".

Инструкцияла шулай уҡ Өлкә партия етәкселеге тарафынан үҙәк һәм кантон учреждениеларында башҡорт телен ҡулланыуҙы тәржемәселәр институты булдырыу менән алмаштырыу күҙҙә тотолған тактик аҙымға ҡаршы ла, ситләтеп

булһа ла ниҙер әйтергә теләп, башҡорт телен белгән хеҙмәткәрҙәрҙе әҙерләүгә ҡарағанда аппаратты тел белгән кешеләр менән тулыландырыу, уларға ҡарата һаҡ мөнәсәбәт булдырыу отошло булмаҫ инеме икән, тигән һорау ҡуйылғандай тойола: «Все учреждения должны комплектовать свои аппараты преимущественно из лиц, обладающих обоими государственными языками. При всех равных условиях таким лицам должно быть отдаваемо предпочтение при сокращении штатов и приглашения на службу. Только при полной невозможности проведения этой меры учреждаются должности переводчиков из числа штатных сотрудников данного учреждения».

Инструкцияның 4-се пункты ла Партия өлкә комитеты президиумының ябыҡ ултырышы ҡарары менән һыйыша алмағандай: «Все кантонные учреждения БАССР при сношениях с волостями и селениями должны вести переписку на том языке, на котором ведется делопроизводство данной волости и селения. Равным образом этот принцип должен быть соблюден при рассмотрении действий и распоряжений правительства, массовых воззваний и т.п. В место же со смешанным населением эти последние должны посылаться на обоих языках».

Был пункт бер үк ваҡытта Партия өлкә комитеты президиумының ябыҡ ултырышында һәм БЦИК-тың 1922 йылдың 5 декабрендә сығарылған ҡарарҙарҙы инҡар итә кеүек. Сөнки был ҡарарҙарҙа, үҙәк учреждениелар менән бер үк ваҡытта кантондарҙа ла эш ҡағыҙҙары тик урыҫ телендә алып барылырға тейеш, тигән шарт ҡуйылһа, инструкцияла кантон учреждениелары волостар һәм ауылдар менән үҙ-ара яҙма бәйләнеште урындағы, йәғни башҡорт телендә алып барырға тейеш булып сыға. Шуға күрә, башҡорт теленең дәүләт теле ролен үтәүендә кантон учреждениелары кимәлендә мөмкинлек асылған, тип уйларға урын бар. Нисек кенә булмаһын, БАССР Халыҡ Комиссарҙар Советы күрһәтмәһендә ниндәйҙер дәрәжәлә республиканың партия органдары үткәргән тел сәйәсәте менән килешмәүе күҙгә салына.

Алғараҡ китеп шуны әйтергә кәрәк: Бөтә Рәсәй Үҙәк башҡарма комитетының (ВЦИК) милли республикаларҙың бөтә дәүләт органдарында ла эш ҡағыҙҙарын урындағы телдәрҙә алып барыу хаҡындағы 1924 йылдың 26 июндәге хаты РКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә комитеты тарафынан башҡорт телен дәүләт кимәлендә ҡулланыуҙы тыйған сикләүҙәргә нөктә ҡуйҙы. Шул уҡ хатта эш ҡағыҙҙарын алып барыуҙы урындағы телдәргә күсереүҙең РСФСР-ҙың үҙәк органдары менән бәйләнеш тотоуҙы ҡатмарлаштырырға тейеш түгеллеге лә күрһәтелеп, эш ҡағыҙҙарын урыҫ телендә алып барыу кәрәклеге билдәләнә.

Милли республикаларҙың дәүләт органдарында эш ҡағыҙҙарын аҡрынлап урындағы телдәрҙә алып барыуға күсеү менән бер үк ваҡытта дәүләт учреждениелары һәм предприятиелары хеҙмәткәрҙәренең урындағы телдә аралашыуын индереү ҙә иғтибар үҙәгенә ҡуйыла ине.

Шулай итеп, Партия өлкә комитеты менән совет һәм хөкүмәт органдары араһындағы бәхәс хәл һуңғылары файҙаһына хәл ителә. Әммә дәүләт теле булараҡ башҡорт телен дәүләт учреждениеларының эшмәкәрлегенә индереү буйынса башланмаған эш байтаҡ була. Был йәһәттән, БАССР Үҙәк башҡарма комитетының 1922 йылдың 5 декабрь ҡарарына ярашлы, Халыҡ Комиссарҙары Советының 1923 йылдың 18 февраль декреты менән ойошторолған Башҡорт телен ғәмәлгә индереү үҙәк комиссияһының роле ҙур була. Комиссияға Эске эштәр, Мәғариф һәм Юстиция халыҡ комиссарлыҡтарынан вәкилдәр индерелә, шундай уҡ комиссиялар кантондарҙа ла эш башлай. Үҙәк комиссия Халыҡ Комиссарҙары Советына туранан-тура буйһонған хәлдә башҡорт телен рәсмиләштереүҙә бөтә дәүләт учреждениеларына етәкселек итеп киң административ хоҡуҡтарға эйә, уның ҡарарҙары бөтә совет учреждениелары өсөн мәжбүри була.

Ләкин башҡорт теленең дәүләт теле булып танылыуының тәүге осоронда тел нормаһы мәсьәләләре партия, совет һәм хөкүмәт органдарының иғтибарынан ситтә ҡала, дәүләт теленең бары әҙәби тел аша ғына ғәмәлгә инеүе иҫәпкә алынмай. Күренеүенсә, дәүләт теле итеп танылыуының тәүге этабында башҡорт телен дәүләт учреждениеларында ғөмүмән файҙаланыу мәсьәләһе алға ҡуйыла. Һуңынан көн тәртибенә башҡорт телен дәүләт теле сифатындағы көскә әүерелдерә алырлыҡ тел мәсьәләһе килеп баҫа. Бөтә милләткә яҡын булған һөйләш теле генә башҡорт телен дәүләт теле дәрәжәһенә күтәрерлек әҙәби телдең нигеҙе була ала ине. Ошондай сифаттарға эйә булған әҙәби тел ошоғаса башҡорттар ҡулланған әҙәби телдәрҙе, шул иҫәптән татар әҙәби телен дә, еңел генә алмаштыра алыр ине. Башҡорт милләте был осорҙа үҙ туған телендәге милли әҙәби телде формалаштырыуға өлгөрөп еткәйне, тура юлды табаһы ғына ҡалғайны. Башҡорт теленең дәүләт теле итеп танылыуы был йәһәттән ышанысլы гарант булыр ине.

Ошо йәһәттән әлеге миҫалда беҙ әҙәби тел тарихындағы фәһемле һәм ҡыҙыҡлы ижтимағи-сәйәси күренешкә шаһит булабыҙ: дәүләт теле әҙәби телдең тыуыуына сәбәпсе була. Быға тиклем, күп халыҡтарҙың тарихынан күренеүенсә, дәүләт телдәре әҙер әҙәби телдәр аша донъяға сыҡҡан, йәғни тәүҙә әҙәби тел барлыҡҡа килгән, унан – дәүләт теле. Тарих күп кенә әҙәби телдәрҙең шул рәүешле ҡатып ҡалғанын, уларға дәүләт теле юғарылығына сығыу бәхете теймәгәнен дә белә. Ә башҡорт теле ошо бейеклеккә күтәрелә алһын өсөн тарихҡа тәүҙә дәүләт телен ижад итергә тура килә. Шулай итеп, башҡорт милли әҙәби теле милләтенең ижтимағи-сәйәси һәм мәҙәни тормошонда урын таба алһын өсөн тәүҙә уның дәүләт теле итеп танылыуы кәрәк булды. Асылда башҡорт милли әҙәби теле – башҡорт дәүләт теленең емеше ул.

Республиканың партия, совет һәм хөкүмәт органдары тарафынан башҡорт теленең дәүләт теле буларак милли әҙәби тел менән бәйләнештә тәү тапҡыр 1923 йылдың 12 декабрендә Партия өлкә комитетында үткәрелгән кәңәшмәлә ҡарала. Өлкә комитет секретары Восканов әҙәби тел төшөнсәһен ҡулланмаһа ла, мәсьәләне асыҡ ҡуя: дәүләт теле ролен башҡорттарҙың ҡайһы һөйләше уйнарға тейеш? “Был мәсьәлә буйынса, – ти секретарь,– ике ҡараш бар. Берәүҙәр – тау районлары һөйләше яғында, икенселәр башҡаса фекер йөрөтә. Ә ҡайһы бер иптәштәр, мәҫәлән, Ҡушаев кемгә ҡушылырға белмәй. Бында урталыҡты табыу мөһим, ул тел барыһы өсөн дә аңлайышлы булһын”, – ти Восканов. Ләкин фекер алышыу башлыса башҡорт телен тормошҡа ашырыуҙың дөйөм бурыстарын тикшереүгә төшөп китә, сөнки рәсми рәүештә дәүләт теле итеп танылһа ла, башҡорт телен ғәмәлдә ҡулланыу даирәһе үтә тар була. Шуға күрә әҙәби тел мәсьәләһе бөтә үткерлеге менән тормай әле. Партия, совет һәм хөкүмәт органдары өсөн башҡорт телен административ органдарҙа ҡулланыу мәсьәләһен нигеҙҙә хәл итеү мөһим, ә милли әҙәби тел мәсьәләһе бер аҙ ситтәрәк торғандай. Шуға ҡарамаҫтан, башҡорт әҙәби теленең киләсәген билдәләйәсәк һүҙ ошо кәңәшмәлә әйтелде, тип раҫларға мөмкин.

Бығаса телгә алынған документтарҙа һүҙ башҡорт телен дәүләт теле сифатында нигеҙҙә дәүләт учреждениеларында ҡулланыу тәртибе тураһында барһа, әлеге кәңәшмәлә уны республиканың мәҙәни тормошона индереү мәсьәләһе үҙәккә ҡуйыла. Мәғариф, матбуғат, театр, мәктәп тормошонда башҡорт теленә күсеү мөһим бурыс итеп билдәләнә. «Принципиально вопрос о языке решен, декретирован, и в настоящее время в Башкирской Республике признаны государственными языками языки: русский и башкирский. Несмотря на признание башкирского языка государственным, фактический господствовал язык татарский. И на этом нельзя остановить своего внимания», – тип

сығыш яһай БЦИК президиумы рәйесе Х. Ҡушаев. «Составляющая большинство населения башкирская масса высказывает желание о проведении в жизнь своего родного языка, а потому в будущем мы все в категорической форме должны это хотение массы воплотить в жизнь»… и «… государственным языком в Башкирии должен быть язык башкирский, но вместе с тем и татарский язык не должен игнорироваться».

Башҡорт телен рәсмиләштереү тирәләй төрлө фекерҙәр булыуы аңлашыла. Х. Ҡушаев үҙ сығышында 1920 һәм 1922 йылдарҙағы Башҡортостанда йәшәгән халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәрен файҙалана. Әммә ул башҡорт теленең эшләнеп етмәгәнлеге, техник яҡтан аҡһауы хаҡындағы фекерҙәрҙе кире ҡағып, киләсәктә башҡорт яҙыусылары, башҡорт әҙәбиәте буласағына ышаныс белдерә.

1920-1921 йылдарҙа БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советы рәйесе, РКП(б) Өлкә комитетының сәйәси секретары булып эшләгән А. Бейешев кәңәшмәлә иң оҙон сығыш яһаусыларҙың береһе була. Тикшерелгән мәсьәләнең бынан алты йыл элек ҡуйылырға тейешлеген иҫкә төшөрөп, ул хөкүмәттең Стәрлетамаҡта эшләгән сағында ла был мәсьәләгә вайымһыҙлыҡ күрһәтеүен ғәйепләй. «А эта пассивность нашего правительства, когда оно было еще в Стерлитамаке, не дала возможность поставить язык на должную высоту, что теперь создает чрезвычайно трудные условия для работы. Мы объявили государственным языком – язык башкирский, а сами продолжаем издавать до сих пор татарские газеты, строим татарскую сцену, татарскую государственную труппу»,– тип А. Бейешев «Башҡортостан» гәзитен, «Яңы юл» журналын кисекмәҫтән башҡортса нәшер итеү мәсьәләһен ҡуя: «Хоть бы нам отвели одну треть этой газеты для помещения статей на башкирском языке – мы были бы довольны», – ти ул. Уның түбәндәге һүҙҙәре шул осорҙағы милли кәйефте төҫмөрләү, башҡорт теленең мәҙәни тормоштоң теге йәки был өлкәһенә үтеп инеүе өсөн үтә мөһим. «...Я считаю основным и необходимым, даже совершенно и категорически необходимым, нашу периодическую газету, которая у нас издается ежедневно, начать немедленно издавать на башкирском языке. Я не говорю тут о том, какой процент газеты занять башкирским и какую долю татарским языками. Если мы этим будем ежедневно приучать публику, башкирских корреспондентов и башкирских читателей к этому языку и преподносить им, что раньше мы преподносили им на татарском языке, то мы этим докажем, что их язык существует и они могут на своем родном языке читать и писать, и мы, таким образом, начнем приучать население к своему родному языку. Но а поскольку наша власть пока все пишет и издает все газеты на татарском языке, и все население вынуждено говорить и читать на татарском языке. Вот в чем заключается вся наша беда».

Шул йылдарҙа Т. Йәнәби «Башҡортостан» гәзитендә донъя күргән «Башҡорт матбуғаты нисек тыуҙы?» тигән мәҡәләһендә: «Билдәле, башҡорт матбуғаты әле яңы ғына донъяға тыуып килә... Хәҙерге ваҡытта тел тураһында аҙ-маҙ һүҙ була торған булһа, был – бик тәбиғи эш. Ул шулай булырға тейеш тә. Унан һуң үҙе шул тел менән һөйләп тә, уның менән яҙмаған әҙәбиәтте уҡып күнекмәгәнлектән, был эштең яңы, ят бер нәмә кеүек тойолоуы бик тәбиғи. Бының өсөн күп уҡып күнегергә кәрәк», – тип яҙа. Шулай итеп, гәзитте башҡортса нәшер итеүгә өҫтәп, халыҡтың үҙен дә туған телендә уҡырға күнектереү бурысы ла тора ине. Был инде – тотош халыҡтың аң-зиһене, психологияһы менән дә бәйләнгән мәсьәлә.

Башҡорт яҙма телен рәсмиләштереү мәсьәләһенә Ш. Хоҙайбирҙин да шундай уҡ ҡараштa тора: «Если ежедневную печать не распространим на башкирском языке в глушь населения, то он останется так, как оставался до сих пор, – ти ул,

кәңәшмәлә сығыш яһап. – Для того, чтобы популяризировать башкирский язык, а также если желаем действительно провести башкирский язык в жизнь, необходимо ежедневную газету издавать исключительно на башкирском языке». Ш. Хоҙайбирҙин матбуғатта, тормоштоң бүтән өлкәләрендә татар теленең өҫтөнлөк итеүендә хөкүмәт органдарын ғәйепләй, был эш стихиялы бара, тип баһалай. «Если мы хотим действительно провести без игр башкирский язык, то его нужно проводить в правительственном порядке...» – тип тамамлай ул сығышын.

БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советы рәйесе М. Халиҡов һөйләшеү темаһын киңәйтә: «Мне кажется, необходимо здесь наметить курс своего поведения в вопросе литературы, в вопросе издательства и в вопросе преподавания,– ти ул. – Если прежнее время башкирское население не видело на своем языке ни периодической печати, ни литературы, то сейчас Октябрьская революция дала им это право, и они вправе требовать это от нас. Вот в чем гвоздь вопроса. ...Действительно надо дать массе свой язык и подойти к ней на своем языке». М. Халиҡов быға иң яҡын юлды мәктәптә күрә: «необходимо создать башкирского учителя». Был фекергә өҫтәп, кәңәшмәлә мәктәп мәсьәләһенең ғөмүмән ҡуйылышына ла туҡтап китергә кәрәк. Сөнки Ш. Сүнчәләй ҙә үҙенең сығышында: «... в настоящее время в башкирских селениях до 85 процентов учителя – татары, и преподавание ведется на татарском языке...» – тип уҡытыусыларҙы башҡорттарҙан әҙерләүҙе мөһим бурыстарҙың береһе итеп ҡуя. Беренсе баҫҡыс мәктәптәрҙә башҡорт балаларын – башҡортса, татарҙарҙы – татарса уҡытырға тейешлеген билдәләү менән бергә, Х. Ҡушаев, икенсе баҫҡыс мәктәптәрҙә урыҫ телендә генә уҡытыу мөмкин, тигән ҡараштa тора. Быны ул башҡорт һәм татар телдәрендәге дәреслектәрҙең, уҡыу әсбәптарының етешмәүе менән нигеҙләй. Ә икенсе баҫҡыс мәктәптәре өсөн иһә бындай ҡытлыҡ юҡ. Ләкин был фекер кәңәшмәлә яҡлау тапмай.

Матбуғатҡа бәйләнешле фекерҙәр ҙә кәңәшмәлә бер төрлө генә булмай. Уға ҡарата үҙ фекерен Х. Ҡушаев кәңәшмә башында уҡ еткерә: «Гораздо труднее стоит вопрос с газетой. На каком же языке должна издаваться газета? И к разрешению его нам следует подойти с большим вниманием и большой осторожностью. Если издавать две газеты: одну на башкирском, а другую на татарском языке, трудно обеспечить их материально... Все это заставляет пока в издаваемой газете взять за основу башкирский язык, предоставляя место татарскому, все силы должны быть сосредоточены на этой единственной газете». Ә хәҙер артабан сығыш яһағандарҙы тыңлайыҡ: «...с момента окончательного перехода «Башкурдстана» на башкирский язык, должна быть организована новая газета на татарском языке, причем в целях объединения направления этих газет можно будет поручить их редактирование одной редакционной коллегии». Икенсе: «Татарское население башкирский газетой в данное время мы удовлетворить не можем. Так как там пишется из жизни Татреспублики, а там – из жизни Башреспублики. Я думаю, что этот вопрос должен быть разрешен по взгляду тов. Касимова, который предлагает издавать две газеты». Өсөнсө фекер: «Но трудность заключается в том, что не имеем достаточного кадра работников. Отсюда задача – подготовлять туземных работников и выдвигать из низовых работников более или менее способных туземцев. Эти задачи входят определенно в задачи нашей партии. А для этого требуется печать. Печать до сего времени продолжила выходить на татарском языке. Это, безусловно, недопустимо». Быныһы М. Халиҡовтың фекере: «Башкирия же не может содержать две газеты. Придется пока ограничиться одной. Но одна газета не может удовлетворить обе стороны... газета будет

печататься и на башкирском, и на татарском языке. Ничего не поделаешь...Эти товарищи считают, что данный вопрос настолько созрел, что можно безболезненно перевести газету на башкирский язык... Но ведь татарский язык имеет свою историческую традицию... Если мы подходим башкирину на родном языке, нельзя обходить и татарские массы. Если башкирские массы, может быть, до сих пор мало требовали, молчали, – ждали все время. Ведь татарские массы привыкли на своем татарском языке читать литературу и т.д. Вот почему считаю, что периодическую печать следует переводить на башкирский язык постепенно, делая смешанную». Артабан сығыш яһаусы: «Тов. Худайбердин правильно говорит, что надо до некоторой степени регламентировать, надо все увеличивать и увеличивать на башкирском языке печатание руководящих статей, известий, телеграмм, но не в один день. А потом, если экономические состояние Башреспублики позволит, можно издавать две газеты», – тигән һығымта яһай.

Документтарҙан күренеүенсә, кәңәшмәлә махсус ҡарар сығарылмай. Стенограмма Воскановтың «Нужно перевести центр тяжести на башкирский язык как на государственный...» тигән һүҙҙәре менән тамамлана. Өс көндән һуң БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советы Башҡорт телен тормошҡа ашырыу буйынса үҙәк комиссия составын раҫлай. Комиссияның составы үҙгәртелеп, рәйес итеп Ш. Хоҙайбирҙин тәғәйенләнә.

РКП (б) Өлкә комитеты президиумының 1923 йылдың 29 декабрь ҡарарын Өлкә комитет 23 декабрҙә уҙғарған кәңәшмәнең һөҙөмтәһе итеп ҡарарға кәрәктер. Унда Х. Ҡушаевтың башҡорт телен ғәмәлгә индереү буйынса башҡарылған эштәр тураһында доклады тыңланып, ентекле ҡарар ҡабул ителә. Кәңәшмәлә күтәрелгән байтаҡ ҡына мәсьәләләр унда хәл ителешен тапҡан, тип уйларға мөмкин. Ҡарарҙың матбуғат һәм нәшриәткә ҡағылышлы өлөшөндә «Башҡортостан» гәзитенең башлыса башҡорт телендә сығарылырға тейешлеге күрһәтелә. Баш мәҡәлә, рәсми хәбәрҙәрҙең тәржемәләре, хөкүмәт белдереүҙәренең һ.б. башҡорт телендә баҫылыуы мотлаҡ. Шулай уҡ «Яңы юл», «Кооператор», «Йәш юҡһыл» һ.б. баҫмалар ҙа шул тәртиптә нәшер ителергә тейеш. Дәреслектәрҙе, уҡыу әсбаптарын беренсе сиратта башҡортса нәшер итеү ҡарала. Мәғариф халыҡ комиссарлығына беренсе баҫҡыс мәктәптәр өсөн «Әлифба» һәм башҡа дәреслектәр әҙерләүгә тотонорға ҡушыла. Волостарҙа һәм ауылдарҙа эш ҡағыҙҙары шунда йәшәүселәр телендә алып барылырға тейеш. Әҙерлекле кадрҙарҙың етешмәүен күҙ уңында тотоп, Эске эштәр халыҡ комиссарлығына Мәғариф халыҡ комиссарлығы менән берлектә махсус курстар асыу йөкмәтелә. СССР Хөкүмәтенең һәм халыҡ комиссарлыҡтарының, урындағы власть органдарының бойороҡтары, декреттары, партия документтары һ. б. рәсми материалдар башҡорт телендә генә баҫылырға тейеш. Бындай материалдар менән халыҡтың татарса уҡыусыларын ТАССР ярҙамында тәьмин итеү ҡарала.

Беренсе баҫҡыс мәктәптәрҙә уҡытыуҙы һәр халыҡтың үҙ телендә ойоштороу күҙҙә тотолоп, уҡытыусылар әҙерләү ҙә шул маҡсаттан сығып алып барылырға тейеш. Икенсе баҫҡыс һәм профессиональ белем биреү мәктәптәрендә башҡорт теле предмет булараҡ уҡытыла. Мәғариф халыҡ комиссарлығының иғтибары беренсе баҫҡыс мәктәптәре өсөн башҡорттарҙан уҡытыусылар әҙерләүгә йүнәлтелә. Театр эшен юлға һалыу өсөн театр хеҙмәткәрҙәрен башҡорттарҙан әҙерләү иң тәүге эштәрҙең береһе итеп ҡуйыла. Актерҙарҙың дәүләт труппаһы башҡорт һәм татар телдәрендә бер үк дәрәжәлә уйнарға тейеш була.

Башҡорт телен тормошҡа ашырыу үҙәк комиссияһының яңы составы үҙ бурыстарын аныҡлай, тәрәнәйтә төшә. 1924 йылдың 19 ғинуарында БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советы тарафынан уның положениеһы раҫлана, кантон комиссиялары тураһындағы положение ла көсөнә инә.

Башҡорт телен ғәмәлгә индереү буйынса кантон комиссияларының эш даирәһен күҙаллау йәһәтенән Өфө кантон комиссияһының 1924 йылдың тәүге ярты йыллығы өсөн төҙөлгән һәм һигеҙ пункттан торған эш планы үтә фәһемле. Уның инеш өлөшөндә Үҙәк комиссия тарафынан йөкмәтелгән бурыстарҙы кантон башҡарма комитеты һәм РКП(б)-ның кантком комитеты менән килешеп башҡарырға тейешлелеге билдәләнә. Тәүге бурыс – автономиялы республикаларҙа туған телде дәүләт теленә әйләндереү буйынса Совет власы тарафынан күрелгән саралар хаҡында кантонда йәшәгән халыҡтарға тейешле мәғлүмәт биреү. Ул, листовкалар сығарыу менән бер рәттән, ойошторуусы-инструкторҙар тарафынан халыҡ араһында аңлатыу эше аша алып барыла. Икенсе мөһим мәсьәлә – халыҡтың милли составын асыҡлау, йәғни татарҙар һәм башҡорттар, шулай уҡ аҙ һанлы милләттәр йәшәгән ауылдарҙы ентекле иҫәпкә алыу; совет, профсоюз, партия һәм кооператив органдарында эшләгән башҡорт һәм татар хеҙмәткәрҙәренең һәм эшһеҙҙәрҙең иҫәбе буйынса мәғлүмәт булдырыу; волость башҡарма комитетында, ауыл Советтарында һ. б. йәмәғәт ойошмаларында иҫәпкә ингән хеҙмәткәрҙәрҙе файҙаланыуҙы юлға һалыу. Был эш башҡорт телен ғәмәлгә индереү буйынса үткәрелгән сараларҙың артабан да төп йүнәлеше булып ҡаласаҡ. Кантон башҡарма комитетының бүлектәрен ике дәүләт телен дә белгәндәр менән тулыландырыу – төп бурыстарҙың береһе. Был бигерәк тә халыҡ мәғарифы, ер эштәре, дөйөм бүлектәргә, кантон милицияһына ҡағыла. Урыҫтар өсөн кисекмәҫтән башҡорт телен өйрәнеү курстары асыла. Шунда уҡ йәйәләр эсендә “ул башланған да инде” тигән билдә бар. Башҡорт телен индереүҙә кантонда бер төптән эш итеү өсөн татарҙар йәки башҡорттар йәшәгән волосты бүлеп алып, тәжрибә туплау күҙҙә тотола. Иҫәптә торған татар һәм башҡорт кадрҙарын уҡыуға ебәреү комиссияһына етәкселек итеүҙе лә кантком комиссияһы үҙ өҫтөнә ала.

Әлбиттә, Өфө канткомы комиссияһының эш планы башҡорт телен ғәмәлгә индереү тураһындағы кантон комиссияһы положениеһының бөтә йүнәлештәрен дә үҙ эсенә алмай. Икенсе йәһәттән, уның эш үҙенсәлектәре башҡорт йәки татар халыҡтары күпселекте тәшкил иткән кантондарҙағы комиссияларҙың эшмәкәрлеге менән бер төрлө түгел. Шуға ҡарамаҫтан, башҡорт телен рәсмиләштереүҙең тәүге аҙымдарының береһе булараҡ, ул беҙгә күп нәмәләр хаҡында һөйләй.

Дөйөм алғанда, административ орган булараҡ Башҡорт телен ғәмәлгә индереү үҙәк комиссияһының эшмәкәрлеге ғәйәт ҙур әһәмиәткә эйә һәм айырым өйрәнеүгә торошло мөһим тема. 1927 йылда Үҙәк коммиссияға ерле халыҡты БАССР дәүләт учреждениеларына һәм ойошмаларына эшкә ылыҡтырыу (йәғни “коренизация”– **З.Н.**) бурысы өҫтәлеүе лә уның эш даирәһен киңәйтә төшә. Ошо йәһәттән 1924 йылда ҡабул ителгән Үҙәк комиссия тураһында положениела ла «Прием, увольнение и перемещение башкирских работников проводится руководителем учреждений по согласолванию с Центральной комиссией» тигән иҫкәрмә лә була. БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советының 1927 йылдың 13 сентябрендәге ҡарарында был хаҡта тағы ла аныҡыраҡ әйтелә: «Представленный ЦК по реализации башкирского языка план вовлечения в учреждения БАССР лиц, владеющих обоими государственными языками, утвердить и поручить Комиссии при проведении плана коренизации, установить очередность в выполнение плана, в первую очередь в отношении организаций и учреждений, связанных с массами и низовым советским аппаратом». Дәүләт телдәренең икеһен дә белгән хеҙмәткәрҙәрҙе учреждениелар һәм предприятиелар штатында һаҡлап ҡалыу менән бергә 50 учреждениела 830 вазифаны алмаштырыу ҙа ҡарала. Алмаштырылырға тейешле вазифалар күрһәтелеп, был эште өс йылда тамамлау билдәләнә.

Бынан өс йыл элек РКП(б) Өлкә комитеты президиумының Үҙәк комиссияның отчетын тыңлағандан һуң ҡабул иткән ҡарарына «Считая знание башязыка особой квалификацией, поручить т.т. Заикину, Султанову и Худайбердину совместно с Комиссией по реализации башкирского языка на основе ст. 47 Кодекса о труде разработать соответствующую инструкцию комплектования ответственными и техническими работниками административных и хозяйственных органов БАССР» тигән пункт индерелгән. БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советының 1927 йылдың 13 сенябрь ҡарары иһә унда ҡуйылған бурысты тағы ла аныҡлаштыра, киңәйтә. Ошоға өҫтәп, БАССР Үҙәк башҡарма комитеты президиумының 1926 йылдың 17 ноябрендә уҙған ултырышында Үҙәк комиссия отчетынан һуң сығарған ҡарарының айырым пункттарын иҫкә төшөрөп үтеү ҙә артыҡ булмаҫ. Унда: «Отметить, что центральные и кантонные учреждения, вопреки постановлению БЦИК и СНК БАССР от 31 марта с.г., в большинстве случаев свои сношения с 67-волостями, делопроизводство коих, на основание указанного выше постановления, должно вестись на башкирском языке, продолжают вести на русском языке, не предпринимая надлежащих мер к приспособлению своих аппаратов для ведения делопроизводства на обоих государственных языках», – тип билдәләнгәйне. Күрһәтелгән ҡарарҙа иһә Мәсәғүт, Стәрлетамаҡ, Бөрө, Бәләбәй, Өфө, Тамъян-Ҡатай, Арғаяш һәм Йылайыр кантондарының эш ҡағыҙҙары башҡорт йәки урыҫ телдәрендә алып барылырға тейешле һәр волость атап әйтелгәйне. Шаран волосында ғына эш ҡағыҙҙарын ике телдә лә алып барыу ҡаралғайны. Бәләбәй кантонының Бишбүләк волосында сыуаш, Бөрө кантонының Сталин волосында ул мари телендә йәки дәүләт телдәренең береһендә алып барылырға тейеш ине. Хәҙер инде БЦИК үҙенең 1926 йылдың 17 ноябрь ҡарары менән мәсьәләне дөйөм планда ҡуйып: «Предложить центральным и кантонным учреждениям в дальнейшем переписку с волостями вести на том языке, на котором ведется основное делопроизводство в каждой данной местности», – тип аныҡлай.

БАССР Үҙәк башҡарма комитеты ҡарарындағы был пункт ғәмәлдә Партия өлкә комитеты президиумының үҙәк һәм кантон учреждениеларында эш ҡағыҙҙарының урыҫ телендә алып барылырға тейешлеге хаҡындағы 1922 йылдың 16-17 ноябрь ҡарары ҡыҫымы аҫтында үҙе шул уҡ йылдың 5 декабрҙә ҡабул иткән ҡарарын юҡҡа сығарыу менән бер була. Башҡорт телен рәсмиләштереүҙәге ошондай ҡырҡа үҙгәрештәр Бөтә Рәсәй Үҙәк башҡарма комитетының милли республикаларҙа эш ҡағыҙҙарын аҡрынлап урындағы телдәрҙә алып барыуға күсеү тураһындағы хатына бәйле икәнлеге аңлашыла. Хаттағы «при этом надлежить принять во внимание, в первую очередь, введение на местных языках разговорный речи сотрудников госучреждений и предприятий» тигән һөйләм урындағы совет һәм хөкүмәт органдарына үтә ауыр бурыс йөкмәтә. ВЦИК был хатҡа өҫтәмә рәүештә 1924 йылдың 22 декабрендә ебәрелгән икенсе хатында автономиялы республикаларҙан тышта ҡулланышта йөрөргә тейешле документтарҙың бары урыҫ телендә йәки ике телдә, ахыр сиктә урыҫ телендә тәржемәһе менән бергә ебәрелергә тейешлеге тураһында асыҡлыҡ индерә.

Документтарҙан күренеүенсә, Башҡорт телен ғәмәлгә ашырыу үҙәк комиссияһы эшмәкәрлегенең һуңғы йылдарында дәүләт аппаратына ерле халыҡ вәкилдәрен ылыҡтырыу бурысы көнүҙәк мәсьәләгә әүерелә. Йәғни башҡорт телен рәсмиләштереүҙең һуңғы һөҙөмтәһе үҙенең сағылышын шунда таба, тип баһалау өҫтөнлөк ала. Хатта БАССР Үҙәк башҡарма комитеты президиумының 1932 йылдың 29 декабрендәге Үҙәк комиссияны бөтөрөү хаҡындағы ҡарарында ул «Областную комиссию по коренизации аппарата и

реализации башкирского языка признать ликвидированной»… тигән редакцияла бирелә. Бындай ҡарар ВЦИК Президиумының 1932 йылдың 1 ноябрь ҡарарына ярашлы ҡабул ителә. Әммә әле ул башҡорт телен ғәмәлгә индереүҙең, дәүләт аппаратына эшкә ерле халыҡ вәкилдәрен ылыҡтырыуҙың туҡталыуын аңлатмай. Был өлкәлә эште артабан да дауам иттереү өсөн ҡарарҙа аныҡ саралар планы эшләү кәрәклеге күрһәтелә: «…поставить на должную высоту организацию изучения работниками небашкирской национальности башкирского языка». БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советының 1929 йылдың 26 февраль ҡарарында әле: «Считать необходимым установить как предельный срок 2 года, т.е. 1929-30 годы, в течение которого все работающие в соответствующих звеньях аппарата должны изучить башязык и новый тюркский алфавит», – тип билдәләнгәйне. БЦИК ҡарарында иһә дәртләндереү саралары ла ҡаралғайны: «Предложить Башнаркомтруда разработать систему поощрительных мероприятий для работников небашкирский национальности, изучивших язык и применяющих его в работе». Дәүләт учреждениеларында эшләүселәр алдына ҡуйылған бындай бурыс ВЦИК-тың алда һүҙ барған хатындағы дәүләт учреждениелары һәм предприятиелары хеҙмәткәрҙәренең урындағы телдәрҙә һөйләшеүенә өлгәшеү хаҡындағы күрһәтмәһенә ярашлы эшләнелә, тип уйларға урын бар.

Әлбиттә, күп осраҡта һүҙ менән эште оҙон һәм ҡатмарлы ауыр юл айыра. Бигерәк тә әгәр ул яңы һүҙ һәм яңы эш булһа. Башҡорт ерендә лә ул этник мәсьәлә һәр саҡ шулай ҡырҡыу тороп, айырыуса Алтын Урҙа осоро был тәңгәлдә тәрән эҙ ҡалдыра. Ул нуғайҙарҙың рухи экспансияһы рәүешендә тарихҡа инеп ҡалған. Башҡорттарҙың Рус дәүләтенә үҙ ихтыяры менән ҡушылыуы ғына уларҙың этник үҙаллылығының һаҡланып ҡалыуына, рухи азатлыҡ алыуына килтерә. Ысынлап та, башҡорт халҡының Октябрь инҡилабына ҡәҙәр үткән юлы ауыр, ҡатмарлы. Үҙен һаҡлап ҡалыу өсөн халҡыбыҙға бик күп һынауҙар аша уҙырға тура килде. Совет власы йылдарында ул киңерәк хоҡуҡтарҙан файҙаланып, үҙенең милли яҙмышын үҙе хәл итеү мөмкинлегенә эйә булһа ла, был хоҡуҡтар үҙенән-үҙе хәл ителә торған мәсьәлә булмай. Рухи азатлыҡҡа өлгәшеү өсөн әллә күпме кәртләр аша үтеү һәләтлеге талап ителә. Сөнки ул хәҙер нуғайҙар осорона ҡарағанда күпкә ҡатмарлаша, бер тарихи акт рәүешендә генә хәл ителә алмай. Башҡорт телен ғәмәлгә индереү буйынса Үҙәк комиссияның эшмәкәрлеге туҡталыуға тиклем ВКП(б) Өлкә комитетының һәм Өлкә контроль комиссияһының 1931 йылдың 25–29 майында уҙған IV берлектәге пленумында Өлкә комитет секретары Ә. Иҫәнсуриндың докладын Үҙәк комиссияның башҡорт телен рәсмиләштереү, дәүләт аппаратын ерле халыҡ вәкилдәре иҫәбенә тулыландырыу буйынса башҡарған эштәренә йомғаҡлау отчеты итеп ҡарарға кәрәк. Был – үҙе айырым тема. Әммә шуныһы мөһим: үҙ ваҡытында шундай етди административ мөмкинлеккә эйә булған дәүләт органының үҙ ваҡытында булдырылыуы, милләт тормошо өсөн үтә мөһим мәсьәләләрҙе юлға һалыу башында тороуы – үҙе бер тарихи факт.

**Зиннур НУРҒӘЛИН,**
**филология фәндәре докторы.**

## ҺӘЙКӘЛГӘ ЛАЙЫҠ ШӘХЕС

Балапан ауылының тарихын һөйләгәндә, уның менән айырылғыһыҙ бәйле, эргә-тирәлә дан алған ҡурайсы, йырсы һәм ҡобайырсы Ишмөхәмәт сәсән Мырҙаҡаев (Мырҙаҡай Мәһәҙи улы Балапанов) йыш телгә алына. Мәшһүр ҡобайырҙарҙы, гүзәлдәрҙән-гүзәл йырҙарҙы, һоҡланғыс риүәйәттәрҙе халҡына еткергән һәм шуның менән быуындар бәйләнешенең, тарихи хәтер сылбырының бөтөнлөгөн тәьмин иткән Ишмөхәмәт Мырҙаҡаев элекке Нуғай даруғаһына ҡараған Верхнеурал өйәҙе Күбәләк волосының Балапан ауылында 1799 йылда тыуған. 1996 йылда Әбйәлил районы хакимиәте һәм башҡорттары ҡоролтайы яҡташтарының 215 йыллығын киң билдәләү тураһында ҡарар сығарҙы. Шуға тиклем күренекле шәхесебеҙгә ундай иғтибар бирелгәне юҡ ине. Сәсән хаҡындағы мәғлүмәттәр халыҡ хәтеренә таянып йыйылды.

Ниндәйерәк кеше булған һуң ул Ишмөхәмәт сәсән? Ошо һорауға яуап эҙләп, БР Үҙәк дәүләт, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми архивтарында эҙләнергә, элекке рәүиз яҙмаларын, башҡа ғилми сығанаҡтарҙы ентекле ҡарап сығырға тура килде. Табылған материалдар Ишмөхәмәт Мырҙаҡаевтың тормошо һәм ижады хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе тулыландырҙы: сәсәндең затырыуын асыҡларға, шәжәрәһен төҙөргә, ауылыбыҙҙың килеп сығыу тарихын асыҡларға мөмкинлек бирҙе. Арҙаҡлы шәхесебеҙҙе онотмау, уның мираҫын йәш быуынға еткереү – бөтәбеҙҙең дә бурысы. Түбәндәге яҙма ошоно иҫтә тотоп яҙылды ла инде. Ул күренекле фольклорсы, сәсән һәм яҙыусы Мөхәмәтша Буранғолов һ.б. күренекле шәхестәребеҙҙең яҙмаларына, тарихи документтарға нигеҙләнеп әҙерләнде.

1996 йылда сәсәндең – 215, ә 2006 йылда 225 йыллығына арнап юбилей саралары үткәрҙек. Унда Әбйәлил, Учалы, Белорет райондарының 17 ауылында йәшәгән Күбәләк ырыуынан һәм Бөтә Донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетынан да вәкилдәр ҡатнашты. Учалы яҙыусылар ойошмаһы етәксеһе Мәүлит Ямалетдин: “Ул (Мырҙаҡаев) – Балапан нәҫеленең, Күбәләк ырыуының ғына түгел, ә бөтә башҡорт халҡының күренекле вәкиле. Бөтә ғүмерен иленә, халҡына хеҙмәт итеүгә арнаған мәшһүр сәсәндең рухиәтебеҙ, сәнғәтебеҙ үҫешенә түккән көсө баһалап бөткөһеҙ. Шулай булғас, уның тормошо һәм ижады фәнни нигеҙҙә тикшерелергә, биографияһына ҡағышлы буталсыҡтар бөтөрөлөргә тейеш”, – тигәйне. Арҙаҡлы яҡташыбыҙҙың биографияһында “аҡ таптар” әлегә байтаҡ, ижады ла йүнләп өйрәнелмәгән. Шулай ҙа эҙләнеүҙәребеҙ нәтижәһеҙ ҡалманы, Ишмөхәмәт сәсәндең тыуған йылы асыҡланып, тормош юлын күҙалларға мөмкинлек тыуҙы, һәм “Башҡортостан энциклопедияһы”ның III томының 243-сө битендә “Ишмөхәмәт сәсән” исемле мәҡәлә донъя күрҙе. Тәүләп донъя күргән мәҡәләләрҙәге ҡайһы бер факттарҙың

дөрөҫ түгеллеген таныйбыҙ һәм архив материалдарына таянып уларҙы дөрөҫләргә тырыштыҡ.

Балапан ауылына нигеҙ һалған Балапан Мәтисов (1732–1812) заманының уҡымышлы хәлле кешеһе, йорт старшинаһы була. 1811 йылғы рәүиз документтарынан күренеүенсә, уның дүрт улы ла уҡымышлы: өлкән улы Ғөбәйҙулла – указлы мулла, кесеһе Мәһәҙи (1768–1839) ҙә, уның улы Мырҙаҡай ҙа (1799–1878) йорт старшиналары була. Өсөнсө, дүртенсе улдары Ҡәҙрембәт менән Әбдрәш тә заманына күрә ярайһы белем ала. Мәһәҙи Балапановтың уландары Мырҙаҡай, Баязит шәхси уҡыу йортонда белем алған. Рәүиз документтарында Мырҙаҡайҙың үҙ ҡулы менән яҙған русса яҙыуҙары һаҡлана. Шулай уҡ Мырҙаҡай һәм Баязиттың белемле булыуҙары ғәскәри хеҙмәттең формуляр исемлегендә лә асыҡ итеп яҙылған. Ишмөхәмәт сәсән Мырҙаҡаевтың йәшен уның шәкерте Ғәбит Арғынбаев һөйләүенән Мөхәмәтша Буранғолов яҙып ҡалдырған. “Мин тәү күргәндә Ишмөхәмәт ҡурайсы 90 йәштәрҙә ине. Ул 97 йәшенә етеп үлде. Ете йыл буйы уның менән осрашып тормаған айым булмағандыр”, – тип һөйләй уға Ғәбит сәсән. Ошонан сығып М. Буранғолов Ишмөхәмәт сәсәндең тыуған йылы 1781 йыл тип фараз итә, үлгән йылын 1878 йыл тип билдәләй.

Рәүиз мәғлүмәттәренә килгәндә, Ишмөхәмәт сәсән 1799 йылда тыуған, тип күрһәтелә. Мәҫәлән, 1811 йылғы VI рәүиз ҡағыҙҙарында, Мырҙаҡай Мәһәҙи улы Балапанов 13 йәштә, тип яҙыла. Рәсми әҙәбиәттәге “Ишмөхәмәт Мырҙаҡаев 1781 йылда тыуған” тигән фекер бер ниндәй ҙә документтар менән раҫланмай. Ә сәсәндең үлгән йылын уның ҡәбер ташында әле лә уҡып була – “1878”. Тыуған йылын рәүиздә күрһәтелеүенсә 1799 йыл тип алһаҡ, мәшһүр сәсәнебеҙ 79 йәшендә вафат булған, тип фаразларға мөмкин. Атаһы Мәһәҙи 1768 йылда тыуған булһа, Мырҙаҡай атаһына 13 йәш саҡта ... тыуған булып сыға.

М. Буранғолов яҙмаларындағы Ғәбит сәсән Арғынбаевтың (1856–1921) һөйләгәндәренә туҡталып китмәһәк, Ишмөхәмәт сәсән тураһындағы мәғлүмәттәр тулы булмаҫ.

“... Мин уның бер саҡта ла күңелһеҙ сағын күрмәнем. Уның янына барһаң, бөтә ҡайғың онотола ине. Ул осҡор һүҙле, тура әйтеүсән, уйынсан кеше булды. Үҙенең Аҡмәсет һуғышында Перовский менән булғанын һөйләп, унан алып ҡайтҡан бүләк ҡылысын күрһәтә, ул саҡтағы кейемдәре һаман да һаҡлана ине. Шул кейемдәрҙе миңә кейҙереп, ҡылысын таҡтырып, атлатып, шуға ҡарап үҙенең йәш сағын күҙ алдына килтерә ине.

Бер ваҡыт мин, Ирәндектән Уралдың эске яҡтарына китеп, күп ерҙәрҙе байҡағас, Уралға ҡарап йыр сығарҙым да Ишмөхәмәт ҡарт янына барҙым. Өйҙә юҡ ине. Ҡымыҙ туҫтағы яһарға сәбешкә эҙләп киткән, тинеләр. Бик оҙаҡлағас, ҡайһы яҡҡа киткәнен һораштым да эҙләп киттем. Барһам, һис тиҙ ҡайтырлыҡ түгел, бер ҙур имән төбөнә ҡырын ятҡан, ҡайтыуҙа уйы ла юҡ. Күрешеп, иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡас та:

– Әйҙә, ултыр. Шуны уйлап ятам: мин әйтәм, был донъяны ҡыуып артынан кем еткән. Донъя ҡыуып байыһаң, халыҡ әрләй; ярлы булһаң, бай ҡоллай; урта булғас – ярар. Балаға мал йыйып ҡалдырһаң да, үҙ бәхете булмаһа, барыбер бөтөр. Бынау Әйүкә тауына бер көй сығарырға уйлап ятам. Ул, исмаһам, бөтмәҫ. Олатайҙар: “Ир үлһә лә, уның исемен йә көнө, йә өнө һаҡлар, үлтермәҫ. Көнө лә, өнө лә булмаһа, йә ул тыуҙырһа, йә бур тыуҙырһа, шулар һаҡлар”, – тигән. 90-ға еткәс, дан алырлыҡ, көн табырлыҡ мал йыйып та булмаҫ. Малайҙар бар ҙа бит –

килен алырлыҡ ҡына иркәк булдылар. Бур булһалар, исмаһам, заводсыларҙы өркөтөрҙәр ине. Шуға, исмаһам, өнөм-йырым-көйөм ҡалһын, тип уйлайым, тине.

Мин шунан: "Урал тураһында бер йыр сығарҙым", – тинем.

– Баянан бирле тыңлап ятам: өйөр-өйөр ҡарғалар ҡарҡылдап, сәпсектәр, сипылдаҡ турғайҙар ҙа сырылдап үтә. Баянан бирле һаҙҙа бер һандуғас һайрай һәм барыһының да тауышын һанлай. Ауылда тәҙрә башын маҡтап гөрләгән күгәрсен менән сипелдәгән сәпсектең дә тауышы моңло ине, һандуғас юҡҡа икән. Уралды маҡтаған һандуғас – Буранбайҙың онотолмаç моңо барҙа, кеше Уралды маҡтап дан алмаç. Уралдың тәҙрә башындай берәй тауын йә дан алған ирен маҡтап ҡына күгәрсендәй булһаҡ та ярар әле. Һин йәшерәк булып ҡалдың, Буранбайҙы күрә алманың. Бына ошонда, Әйүкә тауында, ҡасып ятты ул.

*Уралҡайым һине, ай, уйлаһам,*
*Киң уйыма һыймай буйҡайың.*
*Ҡаяларың ашып, ай, буйлаһам,*
*Күҙ йәшеңме аҡҡан һыуҡайың.*
*Ҡолаҡ һалһам, һайрай ҡошҡайҙарың,*
*Аһың микән, айыра алмайым.*
*Сәскәләрең япҡан өçкәйҙәрең,*
*Һөйгән сәскә таба алмайым, –*

тип йырланы. Буранбайҙың уйына һыймаған Урал беҙҙең уйға һыямы! – тине."

М. Буранғолов яҙмаларында "Байыҡ, Буранбай сәсәндәрҙең йырҙарын Ғәбит сәсән Ишмөхәмәт сәсәндән ҡабул иткән", – тип яҙа. "Бер йыйын ине, – тип хәтерләй Ғәбит сәсән. – Минең ул саҡта 20 йәштә, ҡурайға оçта, ҡобайырҙары беләм, тип маҡтанып йөрөгән саҡ. Ә Ишмөхәмәт сәсәнде ишеткәнем булһа ла, күргәнем юҡ ине. Мин берәүҙе бейетергә – "Байыҡ" көйөн уйнаным. Шунан теге ҡарт: "Улым тиер инем, атайыңды белмәйем. Ҡустым, бир әле ҡурайыңды. Һин "Байыҡ" көйөн ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа ишетеп тартһаң, бына мин – Байыҡ сәсәндең уйнағанын үҙ ҡолағым менән ишеткән кеше. Хәйер, ул саҡта 23 йәштә генә инем, хәҙер 95-тә. Шулай ҙа тартып ҡарайым әле", – тине. Аҙағынан Байыҡ тураһында һөйләне".

Ә. Әсфәндиәров "Ауылдар тарихы" китабында Байыҡ Аблаевтың тыуған һәм үлгән йылдарын рәсми ҡағыҙҙарға нигеҙләп күрһәтә: 1734–1815 йылдар, теүәл 81 йәштә үлә. Әгәр ҙә Ишмөхәмәт сәсәндең тыуған йылы 1799 йыл икән, ул Байыҡ тураһында Буранбай сәсәндән генә ишеткән булырға тейеш. Сөнки Буранбай 1820 йылда Верхнеурал төрмәһенән ҡасҡас, Ишмәхәмәт сәсән уны Әйүкә тауында йәшерә. Ауылыбыҙҙың көньяғында урынлашҡан был тауҙа, ҙур өй ҡыйығын хәтерләтеп, "Өйташ" тип аталған мәмерйә бар. Беҙ бәләкәй саҡта, Ишмөхәмәт сәсән Буранбайҙы шунда йәшереп тотҡан, тип һөйләйҙәр ине.

Сәсәндең ҡустылары Ихсан менән Баязит, Буранбайҙы һыйлайбыҙ тип, заводсының бер һимеҙ айғырын килтереп һуя. Бынан алдағы көндә генә ямғыр яуып үткән була, һәм аттың эҙенән юллап, ауылға килгән ҡыуғын Баязит менән Ихсанды ҡулға ала. Әйүкә ҡаяһына күмелгән иттең ҡалған-боçҡанын ғына табалар. Урыçтар был урынға һуңынан Маханная гора ("махан" – ат ите) тигән исем ҡуша. Буранбай старостаға килеп: "Бар, заводсыға әйт: атты мин урланым бит. Егеттәрҙе сығармаһа, ике көндә утарын юҡ итәм!" – тигән. Был хәл документ менән дөрөçләнә. Ғәскәри хеҙмәттең формуляр исемлегендә Баязит

Балапановтың 1837 йылда – казак, 1850 йылда урядник булыуы, унан һуң зауряд-сотник дәрәжәһенә күтәрелеүе теркәлә. Ошонда уҡ “К награде не представлен из-за конокрадства” тип яҙылған.

1856 йылда тыуған Ғәбит сәсәндең “Ишмөхәмәт сәсәнде 20 йәштә күрҙем һәм ете йыл буйына унның менән осрашып тормаған айым булмағандыр” тигәне 1876 йылдарға тура килә. Яҙыусы Мәүлит Ямалетдин үҙенең “Хәтер төбө – хәтирә” тигән эсседһында: “Ишмөхәмәт Мырҙаҡаевтың 97 йәшкә етеүенә бер аҙ шикләнеп ҡарарға нигеҙ бар”, – тип билдәләй. Ул иң элек, “Ишмөхәмәт Мырҙаҡаев” тигән исем рәүиз ҡағыҙҙарында теркәлмәгән, тип бара. Ысынлап та, рәүиз мәғлүмәттәрендә Ишмөхәмәт күренмәй. 1811–1859 йылдар араһында үткән биш рәүиз (VI, VII, VIII, IX, X) ҡағыҙҙарында Ишмөхәмәт осрамай. Ләкин халыҡ хәтеренә лә ышанырға кәрәктер. “Хәтер генә түгел, тарих үҙе лә төҙәтеүҙәргә мохтаж”, – ти бит академик Ғайса Хөсәйенов.

Атайыбыҙ һәм ҡайныбыҙ Ильяс Малыбаев (1908–1970) тирә-йүндә атаҡлы ҡурайсы ине. Мырҙаҡай сығарған, тип бик күп көйҙәрҙе уйнай, йырлай торғайны. Ләкин бер ваҡытта ла “Ишмөхәмәт сәсән уйнаған, йырлаған” тимәне, ә “Мырҙаҡай бына ошолай итеп уйнаған, йырлаған” тип һәр көйгә аңлатма биреп барыр ине.

Ишмөхәмәт тигән исеме ҡайҙан килеп сыҡҡанлығы тураһында мәғлүмәттәр юҡ. Архив документтарын ентекләберәк өйрәнеү кәрәк, сөнки ул ваҡытта сәсәндәрҙең күбеһенең, үҙҙәре әйтмешләй, “ялған” исемдәре булған. Мәҫәлән, халыҡ “Буранбай йырҙары” тип йөрөткән йырҙа шундай һүҙҙәр бар:

*Минең исемемде һораһағыҙ,*
*Ялған исемем береһе – Буранбай.*

XVIII быуат аҙағында Башҡортостанда идара итеүҙең кантон системаһы индерелеп, 1865 йылда кантондар бөтөрөлә. 1798 йылдың 10 апрелендә башҡорттар менән мишәрҙәрҙе хәрби казак ҡатламына күсереү тураһында ҡарар сыға. Ошоноң менән Рәсәй империяһы билдәле хәрби-сәйәси маҡсаттарҙы күҙ уңында тота. Беренсеһе – башҡорт илен тынысландырыу булһа, икенсеһе – көнсығыш сик хеҙмәтенең бөтә ауырлыҡтарын халыҡ елкәһенә һалыу һәм, кәрәк булғанда, уны һуғыш хәрәкәттәренә йәлеп итеү. Ир-егеттәр 18 йәштән 55 йәшкәсә әрмелә (үҙ аты менән сик буйҙарын һаҡлау, яу-болалар сыҡһа – походтарҙа ҡатнашыу) хеҙмәт итергә тейеш була. Ҡыҫҡаһы, кантон тураһындағы йырҙарҙа йырланғанса:

*Батшаларҙан килгән әмер булғас,*
*Атлы казак булмай сара юҡ.*

Ишмөхәмәт Мырҙаҡаев та 1817 йылдан 1828 йылға саҡлы Верхнеурал өйәҙенең VI кантон ҡарамағындағы сик һағында атлы казак булып хеҙмәт итә. 1839 йылғы ғәскәри хеҙмәттең формуляр исемлегендә зауряд-хорунжий Мырҙаҡай Балапанов тураһында яҙыла. Хәрби юлын ул 1817 йылдың 1 майынан Верхнеурал өйәҙе сик буйы хеҙмәтендә ябай казак булып башлай. 1820 йылда урядник, 1829 йылда зауряд-хорунжий, 1833 йылдың 25 декабренән йорт старшинаһы вазифаһын башҡара. 1828-1829 йылдарҙағы Рус-төрөк һуғышы башланыу менән, 9-сы Ырымбур, 4-се Урал һәм ике Башҡорт полкы Тирасполь (Бессарабия) ҡалаһына ебәрелә. 1-се һәм 2-се Башҡорт полктары Дон казактарын алмаштырып, Днестр йылғаһы ярында сик буйы хеҙмәтен үтәй. Шул формулярҙа Мырҙаҡай Балапановтың хеҙмәте тураһында түбәндәгеләр бар:

“В 1828 по 1833 годы во 2-ом башкирском полку в Бессарабии за примерное содержание кардонной линии удостоен получить в числе прочих высочайшее благоволение, объявленное в приказе по войскам 9 сентября 1830 года линейной службы в 1818 года в городе Верхнеуральск находился”. “1833 года по решению военного судного дела произведенного выдержан на габвахте (гауптвахте) одну неделю составлением в подозрении в краже у своего полкового командира войскового старшины Краснова денег и 1836 года вторично был судим за подачу в 1824 году Государю Императору на кантонного начальника Бектимерова и по решению дела подтверждено. Ему на будущее время от подобных воздержатся. Под военным судом в комиссии при 6-м линейном батальоне с августа 1839 года».

Һүҙ 1824 йылда кантон начальнигы Биктимеров өҫтөнән Императорға яҙған ялыу тураһында бара. Хәҙерге Баймаҡ районы Сибай ауылында 1798–1820 йылдарҙа Аҡкол Биктимеров VI кантон башлығы булып торған. Яуыз, уҫал түрәләрҙән һаналған. Халыҡты туҡмау, юҡ-барға хөкөм итеү, яһаҡ һалыу уның өсөн бер ни ҙә тормаған. Баш-баштаҡ кантон өҫтөнән халыҡ күп кенә ялыу яҙған. Уларҙың бер нисәһе Үҙәк дәүләт архивы фондында һаҡлана. Ошо ялыуҙарҙың ҡайһы берҙәре тикшереп сара күреү өсөн хатта Сенатҡа барып еткән.

Аҡкол Биктимеровтан һуң ошонда уҡ 1820–1828 йылдарҙа уның улы Абдрахман Биктимеров кантон башлығы булып торған. Атаһының юлын тотмайынса, Абдрахман халыҡҡа яғымлы булырға тырышҡан, ҡайһы бер яһаҡтарҙы түләтмәй, батша түрәләренең әмерҙәрен ваҡытында үтәмәй башлаған. Уның был ҡылығы ҡайһы бер байҙарға килешеп етмәгән һәм улар кантон өҫтөнән батшаға ялыу биргән. Абдрахман Биктимеровтың халыҡтан күп кенә аҡса үҙләштереүе, законға ярамаған эш ҡылыуы, дыуамаллығы буйынса уны тегендә-бында саҡыртып йөрөткәндәр һәм “Себергә оҙатырға” тигән ҡарар сығарғандар. Быны ишетеп, ул ағыу эсеп үлә. “Абдрахман” йырында ошо турала йырлана ла инде:

*Унар ғына һумлыҡ, ай, ун аҡыҡ*
*Һалдыр, егет, эйәр ҡашыңа.*
*Атам дуҫы, тиеп ышанма, егет,*
*Атаң дуҫы етер башыңа.*
*Унар ғына һумлыҡ, ай, ун аҡыҡ –*
*Кәрәге юҡ эйәр ҡашыңа.*
*Атам дуҫы, тиеп ышандың, егет,*
*Атаң дуҫы етте башыңа.*

Ләкин архив ҡағыҙҙарында Абдрахмандың шәфҡәтле түрә булыуы раҫланмай. БР Үҙәк дәүләт архивында уның баш-баштаҡлығы тураһында яҙылған күп кенә ялыуҙар һаҡлана.

Күрәһең, 1824 йылда Ишмөхәмәт сәсән дә Аҡкол кантон өҫтөнән түгел, ә улы Абдрахман өҫтөнән ялыу яҙған булып сыға, сөнки был ваҡытта кантон башлығы булып Абдрахман Биктимеров торған.

1-се, 2-се Башҡорт полктары VI һәм IX кантон казактарынан ойошторола. Ырымбур губернаһы Черноречeнск ҡәлғәһенән Тирасполь ҡалаһына тиклем араны (2165,5 саҡрым) полктар 128 көндә үтә. Башҡорт полктары генерал-лейтенант граф Виттеның резерв корпусында була. 1-се полк Измаил, 2-се полк

Килия ҡәлғәһенә урынлаша. Бында Башҡорт полктары Бессарабиялағы сиктәрҙе һаҡлау өсөн йәлеп ителә. Мырҙаҡай Балапанов 2-се Башҡорт полкында 1833 йылдың майына тиклем хеҙмәт итә. 1816 йылдың 24 ноябрендәге VII рәүиз ҡағыҙҙарында, Мәһәҙи Балапановтың улы Мырҙаҡай 17 йәштә, тиелгән. Тәүге ҡатыны Мөьминәгә 19 йәш була. Ошо документта йорт старшинаһы Мәһәҙи Балапановтың VII рәүиздә үткәреү тураһында үҙ ҡулы менән рус телендә һәм ғәрәп хәрефтәре менән яҙған ҡултамғаһы бар. М.Балапанов Ҡаҙаҡкол, Йәнекәй (Балапан, Абҙаҡ), Мораҡай, Баттал, Ҡобағош, Әхмәр ауылдары ингән 22-се йорт старшинаһы була.

1834 йылдың 11 мартында үткән VIII рәүиз ҡағыҙҙарында яңы нигеҙ һалынған Йәнекәй ауылына Балапан, Абҙаҡтан 19 ғаилә күсенә. Рәүиздә 22-се йорт старшинаһы 35 йәшлек зауряд-хорунжий Мырҙаҡай Балапанов теркөмө үткәрә. Уның беренсе ҡатынынан 17 йәшлек Рәхмәтулла, 16 йәшлек Ғиззәтулла, 5 йәшлек Хисаметдин һәм 7 йәшлек Әминә исемле балалары, атаһы Мәһәҙи 66 йәштә була. 1859 йылдағы үткәрелгән X рәүиз документтарында Яңы Балапан ауылы VI башҡорт кантонының 5-се йортона индерелә. Мырҙаҡай Балапановҡа – 60, улдары Ғиззәтуллаға – 41, Ғәзизуллаға – 22, Мөхәмәтшаға – 16, Дәүләтшаға бер йәш була.

Генерал-адъютант Перовскийҙың 1855 йылдың 6 мартындағы 221-се ҡарарына ярашлы, йәше етеү сәбәпле, зауряд-хорунжий Мырҙаҡай Балапанов хәрби хеҙмәттән азат ителә. Ғиззәтулла Мырҙаҡаев 1835 йылдың 1 ғинуарынан Верхнеурал өйәҙенең VI кантонын сик буйы хеҙмәтендә атлы казак булып хеҙмәт итә башлай. 1840 йылда уға урядник дәрәжәһе бирелә. 1843 йылда Силәбе өйәҙендә крәҫтиәндәр сыуалышын баҫтырыуҙа ҡатнашып, 50 тин көмөш аҡса менән бүләкләнә. Шәхси уҡыу йортонда белем ала, урыҫ һәм башҡорт телдәрендә яҙа һәм һөйләшә, белемле була. 1854 йылда уҡыу полкында биш ай хеҙмәт итә. Урядник Ғиззәтулла Мырҙаҡаев игенселек менән дә шөғөлләнгән, йыл да 190 бот ашлыҡ сәскән.

Мырҙаҡайҙың кесе ҡустыһы Баязит (1820 йылғы) тураһында архивта бик ҡиммәтле ҡағыҙҙарға тап булдыҡ. VI башҡорт кантоны зауряд-сотник Баязит Балапановтың 1860 йылдағы ғәскәри хеҙмәтенең формуляр исемлегендә уның ғүмер юлын күҙаллау өсөн бөтә мәғлүмәттәр бар. Хәрби хеҙмәтен Баязит казак булып 1837 йылдың 1 ғинуарынан башлай. 1849 йылдың апрелендә Силәбе өйәҙендә крәҫтиәндәр сыуалышын баҫтырыуҙа ҡатнаша. 1850 йылдың 4 декабрендә уға урядник дәрәжәһе бирелә. 1850–1852 йылдарҙа майҙан алып сентябргә тиклем башҡорт уҡыу полкында хеҙмәт итә. “В крепость Аральскую прибыл 17 сентября (1853 йыл) того же года. За отличие оказанное в семъ делом произведен в чин зауряд сотника и награжден не взачет годовым окладом жалованья 31 руб. 56 коп. серебром. Ранен и плену неприятеля не был. Сверх настояшей обязанности особых поручений по высочайшим повелениям и отъ своего начальства не имеет. Высочайших благоволений и всемилостивейших Рескриптов не получил”.

1853 йылдың 27 декабрендә Баязит VII кантондың 3-сө бүлексәһенә күсерелә. “Шәхси уҡыу йортонда белем ала, урыҫ һәм башҡорт телдәрендә уҡый, яҙа. Нәҫелдән килгән милке юҡ, Яңы Балапан ауылында ағас өйө бар”, – тип яҙыла формуляр исемлектә. 1853 йылдың майында экспедиция составында Баязит Балапанов Һыр-Дарьялағы Аҡ мәсет ҡәлғәһенә ебәрелә. Ғәскәр башлығы старшина Демин уның ҡәлғәне алыуҙа күрһәткән батырлығын яҙып ҡалдыра: “В

1853 году находился в составе экспедиционного отряда на Сыр-Даръю, выступил 4 мая в крепость Орский в левом конном полку атамана Оренбургского казачьего войска генерал-майора Подурова. Соединились с правой колонной Карабутакском форте 14 мая и следовали через Уральское укрепление 23 мая в Аральское прибыв 8 июня. Из Аральского укрепления в Акмечеть 5 июля того же месяца, 28 июля прибыл в Акмечеть в продолжении осады под выстрелами неприятеля проведена одна траншея кругом всей крепости. 28 июля при отражении двух неприятельских вылазок 28 июля в разрезе же соединении, прибывший и взятый в плен кокандцев (артабанғы биш юлын уҡып булмай, бысранған). По взятии Акмечети 12 августа выступили под начальством генерал-майора Подурова за Аральского укрепления остановились".

1854 йылдың 4 майынан 1855 йылдың 1 февраленә тиклем Баязит кантон начальнигы ярҙамсыһы була. Башҡорт ғәскәрҙәрен тарҡатҡас, 1856 йылда VI кантон ҡарамағында ҡалдырыла. 1853–1856 йылдарҙағы һуғышта ҡатнашҡаны өсөн Владимир таҫмаһындағы бронза миҙал менән бүләкләнә. Батша хөкүмәте башҡорт полктарын ғәҙел булмаған һуғыштарҙа ла файҙалана, баҫып алыу кампанияларына йәлеп итә.

Мырҙаҡай Балапановтың икенсе ҡатыны, үҙенең 30 йәшкә кесе Хафизанан Ғәзизулла, Мөхәмәтша, Дәүләтша исемле улдары тыуа. Өсөнсө ҡатыны (исеме күрһәтелмәгән) Һибәтулла менән Фатиманы таба. Дүртенсе ҡатынынан (уның да исеме юҡ) Сәғирә исемле ҡыҙ тыуа. Сәсән бөтәһе ете ул һәм өс ҡыҙға атай була. 1850 йылғы IX рәүиз ҡағыҙҙарында Мырҙаҡай Балапановтың улы 32 йәшлек Ғиззәтулла урядник итеп күрһәтелә. Ике ҡатыны бар: Бәлхиә һәм Мәрүәт. Мәрүәттән тыуған Ибәтулла 1851 йылда үлеп ҡала. Бәлхиәнән Ғәзизә, Ғәфифә, Ғәфүрә, Ғәрифә, Хәтирә исемле ҡыҙҙары тыуа. 1859 йылғы X рәүиз ҡағыҙҙары шуны раҫлай. Ғиззәтулланан – Рамазан, Рамазандан Әҡсән тыуа. Әле Яңы Балапан ауылында йәшәгән Рамазановтар шул Рамазандың нәҫеле булыр. Ғәзизулланан – Шаһнияз, унан – Сәғит, Сәғиттән Марат тыуа. Ауылдағы Шаһниязовтар шунан килә. Мөхәмәтшанан – Шәйәхмәт, Шәйәхмәттән – Зәйнәғәбдин (Бөйөк Ватан һуғышында үлә) тыуа; Мөхәмәтшаның икенсе улы Мөхәммәттең 1932 йылғы Шәрифә исемле ҡыҙы әле Айыуһаҙы ауылында йәшәй.

1926 йылғы иҫәп алыуҙа Шаһнияз Ғәзизов, Сәғит Шаһниязов, Рамаҙан Ғиззәтуллин, Мөхәммәт Мырҙаҡаевтарҙың исемдәре бар. Шәрифә апайҙың хәтерләүенсә, атаһы оҫта ҡурайсы булған. Атайыбыҙ Ильяс Малыбаев та ҡурай уйнарға Мөхәммәт ҡарттан өйрәнеүе хаҡында һөйләй торғайны.

Ишмөхәмәт сәсән йырсы, ҡурайсы ғына түгел, тарихи документтарҙы һаҡлаусы ла булған. Ырыуҙарға ер бүлеү, төрлө шәжәрәләр, кантондарҙың ҡулъяҙмалары, батырҙың уҡ башаҡтары – барыһын да ул ҡомартҡы итеп һаҡланған. 1918 йылда ауыл халҡы йәйләүгә күскән ваҡытта Мырҙаҡай Балапановтың өйө янып китә, һәм бөтә ҡомартҡылар юҡҡа сыға. Ә был өйҙә 1879 йылғы ейәне Мөхәммәт Мырҙаҡаев йәшәгән була.

1839 йылда генерал-губернатор Перовский ойошторған Хиуа походы уңышһыҙ тамамлана. Һалдат, казак һәм башҡорттарҙан торған 5 меңлек ғәскәр туңыуҙан һәм ауырыуҙан 2 мең кешеһен юғалта. Етмәһә, 7750 арба-санаһын, башҡорт һәм мишәрҙәрҙән торған ылау йөрөтөүселәрен ҡалдырып ҡасырға мәжбүр булалар. Походтың маҡсаты урыҫ сауҙагәрҙәре мәнфәғәтен яҡлау,

казактарҙың тыныслығын тәьмин итеү һәм әсирҙәге урыҫ яугирҙарын ҡотҡарыу була. Был походта Мырҙаҡай Балапанов ҡустылары Байтүрә, Ихсан менән бергә була. Ырымбурҙың хәрби генерал-губернаторы В.А. Перовский үҙе янында йөрөткән сәсәнебеҙ музыканттар төркөмөндә ҡурайсы булып хеҙмәт иткән. Үткер һүҙе, ҡурайы менән яугирҙарҙың күңелен күтәрә белгәнен, ҡурайҙы ҡылысҡа алмаштырып, батырлыҡтар ҡылыуын иҫәпкә алып, генерал уны исемле ҡылыс менән бүләкләй. Шуныһын да билдәләп үтергә кәрәк: Хиуа походында Ишмөхәмәт сәсән йырҙарҙа данланған Ғәзебәк Насир атлы уҙаман менән бергә хеҙмәт итә. Перовский уларҙың икеһенә лә хөрмәт менән ҡарап, уларҙы бер төҫтәге атҡа атландырып, үҙенән ҡалдырмаҫ булған.

XVIII - XIX быуаттарҙағы халыҡ таланттарынан айырмалы, арҙаҡлы яҡташтарыбыҙ ҡурайҙа өҙҙөрөп уйнаған, йырҙар, ҡобайырҙар ижад итеп, халыҡҡа ишеттергән. Ишмөхәмәт сәсән – үҙенән алда йәшәгән сәсәндәрҙең ижадын түкмәй-сәсмәй замандаштарына еткереүсе лә, төплө тарихсы, йәғни сәсәнлек мәктәбен тыуҙырған кеше. Гилгәмеш хаҡындағы поэма, “Одиссея”, “Илиада”, “Манас” кеүек донъяға мәғлүм эпостар менән бер рәттән торған “Урал батыр” эпосын Ғәбит сәсән менән Хәмит сәсәндәр унан отоп алған. Ғәбит сәсәнде 1907 йылдан күреп белгән Мөхәмәтша Буранғолов: “Ул (Ғәбит) ҡурайсы, йырсы һәм сәсән ине. Ул көйҙәр, легендалар һәм эпостарҙы өйрәнеүҙә үҙенең остазы итеп ҡурайсы Ишмөхәмәт Мырҙаҡаевты телгә ала ине”, – тип яҙып ҡалдырған. Билдәле фольклорсы ғалим, профессор Салауат Галин, “Саңдүҙәк”, “Әйүкә”, “Юлтый ҡараҡ”, “Малбай”, “Томан”, “Бузыҡаев кантон” һ. б. бик күп йыр һәм көйҙәрҙең, мәшһүр “Сибай” йырының авторы ла – Ишмөхәмәт, ти.

“Хәтер төбө – хәтирә” эссеһында Мәүлит Ямалетдин: “Көй сығарыу маһирлығы тигәндәй, Ишмөхәмәт сәсәндең ижады әле яҡшылап тикшерелмәгән. Уныҡы тип иҫәпләнгән йырҙар сәсән мираҫының тик бер өлөшө генәлер, тигән уйҙа мин. Миҫал өсөн “Перовский” көйөн алайыҡ. Уны кем сығарған? Әлбиттә, Мырҙаҡаев, сөнки ул бит генерал-губернаторҙың иң яратҡан ҡурайсыһы булған. Шуға ла Перовский уны үҙе менән бергә Хиуа походына ла алып барған. Хиуа походы тигәс, “Һыр” тигән йыр иҫкә килә. Был йырҙың интонацион яҡтан “Ғүмәров” йырына иҫ киткес оҡшашлығы әллә күпме уйҙарға һала”.

Күренекле музыка белгесе, башҡорт халыҡ ижадын йыйыу, баҫып сығарыуҙа ҙур өлөш индергән фольклорсы Л.Н. Лебединский 1939 йылда экспедиция менән Аҫҡар-Ҡырҙас-Ҡыпсаҡ-Яуымбай-Собханғол-Аҡбулат-Ғәлиәкбәр ауылдары буйлап йөрөп, йөҙәрләгән йыр һәм көй яҙып ала. Лебединский үҙенең шәхси архивында “Башкирские марши XIX века уже прямо связаны с военным бытом русской армии. Они созданы под влиянием русской музыки. Характерны их названия: “Перовский” – генерал, командующий башкирскими войсками во время взятия Кокандской крепости Акмечеть в 1853 году и в то же время Оренбургский генерал-губернатор”, – тип яҙып ҡалдыра.

Йөкмәткеһенә ҡарағанда, “Перовский” 1839 йылғы уңышһыҙ тамамланған походҡа бәйле сығарылған булырға тейеш. Ә инде бейеү көйө булып йөрөгән мәшһүр “Перовский” маршы, уның күтәренкелегенән күренеүенсә, 1853 йылғы поход ваҡытында сығарылған, тип уйларға мөмкин.

Сәсәндең йырҙары тәрән йөкмәткеле, көйө моңло булыуы менән халыҡ араһында әле лә яратып башҡарыла. “Әйүкә” йырында Ишмөхәмәт сәсән дуҫ тигәндәрҙең бөтәһе лә ысын дуҫ түгел, араларында мәкерле, яуыз уйлы кешеләр барлығын да күрһәтә:

*Әйүкә лә тауҙың бүреһе,*
*Күк һырт икән уның күбеһе.*
*Дуҫ-иштәрем күп тип йөрөһәм,*
*Дошман икән уның күбеһе.*
*Әйүкә лә тауҙа бер саъыл бар,*
*Әле генә ямъыр, әле ҡар.*
*Үткән генә ъүмер үтеп китте,*
*Алдаъы көндәремдә ниҙәр бар.*

Сәсәндең киң билдәле “Саңдүҙәк” йырында иһә ауылыбыҙ урынлашҡан туғайҙың матур тәбиғәте һүрәтләнә:

*Саңдүҙәккәй, һинең, ай, буйыңда*
*Ҡыҙарып-ҡыҙарып бешә еләгең.*
*Саңдүҙәккәй, һиндә күп йәйләнем,*
*Ғүмерем булһа, таъы ла киләрем.*
*Саңдүҙәккәй, һинең йәмең булды,*
*Малым менән күсеп мин килгәс.*
*Саңдүҙәккәй, һиңә йыр сыъарам,*
*Дәртле ирҙәр йырлар, мин үлгәс.*
*Ап-аҡ та ъына аҡ уҡаны*
*Һуҙһаң ине Саңдүҙәк буйына.*
*Ошо Саңдүҙәктең буйҡайында*
*Йөрөһәң ине ъүмер буйына.*

Ишмөхәмәт сәсән сығарған “Бузыҡаев кантон” йырында иһә кантон башлығының мәкерле, яуыз кеше булыуы һыҙыҡ өҫтөнә алына. Кантон үҙ ҡатынын Себергә ебәреүҙән дә тартынмаған. Сәсән юҡҡа ғына уны юха йыланға тиңләмәй:

*Бузыҡай кантон кейгән аҡ еләндең*
*Ең осҡайҙарында уҡа бар.*
*Кермәһәнә, Йәмилә, аҡ тирмәгә,*
*Тирмә эскәйендә юха бар.*

Ишмөхәмәт Мырҙаҡаев тураһында мәғлүмәттәр өсөн беҙ Ғәбит сәсән менән Мөхәмәтша сәсәнгә бурыслыбыҙ, сөнки уларҙың күбеһен М. Буранғолов Ғәбит сәсәндән ишетеп яҙып алған. Ә Ғәбит сәсәндең хәтерендә һаҡланған ифрат бай әҙәби ҡомарҡылар, шул иҫәптән Байыҡ Айҙар сәсәндең Салауатҡа әйткән 112 юллыҡ ҡобайыры ла Ишмөхәмәт сәсәндән мираҫ булып ҡалған. Был ҡобайырҙың Байыҡ Айҙар тарафынан сығарылыуы ихтимал. Ә халыҡ ижадының XVIII быуатҡа ҡараған ҡайһы бер күренекле әҫәрҙәре, шул иҫәптән Байыҡ Айҙар импровизациялары, билдәле булыуынса, Буранбай-Йәркәй, Ишмөхәмәт Мырҙаҡаев, Ғәбит Арғынбаев, Мөхәмәтша Буранғолов кеүек атаҡлы сәсәндәр аша үткән.

Ҡабатланмаҫ «Урал батыр» эпосының мең йыллыҡтар аша беҙҙең дәүергә килеп етеүе, асылда, Ишмөхәмәт Мырҙаҡаевҡа бәйле, ул «Урал батыр»ҙы шымартып-эшкәртеп бәйән итеүсе тәүге билдәле автор, тип бөгөн беҙ хаҡлы рәүештә нарыҡларға тейешбеҙ,”– тип яҙҙы шағир Әсхәл Әхмәт-Хужа, (“Башҡортостан” гәзите, № 135, 1999 йыл).

1995 йылда Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында “Урал батыр»ҙың тәү тапҡыр аҡ ҡағыҙға төшөрөлөүенә 85 йыл тулыуға арналған төбәк-ғилми һәм

2003 йылда “Урал батыр” һәм мифология” Бөтә Рәсәй ғилми конференциялары булып үтте, ә инде милли рух-фәлсәфәбеҙҙе билдәләүсе “Урал батыр” эпосы башҡортто халыҡ итеүсе тарихи ҡомартҡыға туранан-тура мөнәсәбәте булған Ишмөхәмәт сәсән Мырҙаҡаев хаҡында бер һүҙ ҙә әйтелмәне. Уның менән күп йылдар аралашып йәшәгән Ғәбит Арғынбаев та, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, остазы хаҡында бик аҙ мәғлүмәт ҡалдырған.

Башҡорт әҙәбиәте донъяһы оҙаҡ йылдар үлемһеҙ эпос өсөн Ғәбит сәсән менән Мөхәмәтша Буранғолға дан йырлап, Ишмөхәмәт сәсәнде күләгәлә ҡалдыра килде. Шулай ҙа яҡташтары мәшһүр сәсән, данлыҡлы ҡурайсы һәм көй сығарыусы Ишмөхәмәт Мырҙаҡаевты онотмай. Тыуған йылы 1781 тип, 1996 йылда Яңы Балапан ауылында сәсәндең – 215, 2006 йылда 225 йыллығына арнап хәтер кисәләре үткәрелде.

Иншалла! Яҡташыбыҙҙың тыуған йылын асыҡларға насип булды. 2009 йылда сәсәндәрҙең сәсәне, мәшһүр йырауһы, ҡурайсы Ишмөхәмәт Мырҙаҡаевтың (Мырҙаҡай Мәһәҙи улы Балапановтың) тыуыуына 210 йыл тулды. Хөрмәтле ғалимдарыбыҙ, яҙыусылар, йәмғиәтселек вәкилдәре киләсәктә иҫәпте яҡташыбыҙҙың тыуған йылын 1799 йылдан алып барһа инде.

Ишмөхәмәт Мырҙаҡаевтың исемен мәңгеләштереү буйынса яҡташтары ярайһы ҙур эш башҡара. Сәсәндең ҡәберенә таҡтаташ ҡуйылды, Яңы Балапан урта мәктәбенә уның исеме бирелеп, таҡтаташ ҡуйылды, Яңы Балапан һәм Асҡар ауылдарында уның исемен йөрөткән урамдар, Ишмөхәмәт Мырҙаҡаев-Балапанов исемендәге район премияһы бар. Тәүгеләрҙән булып уға яҙыусы Иҙрис Ноғоманов, һәүәҫкәр композитор Камил Ниғмәтов, сәсәниәләр Хәнифә Әбүбәкерова, Вәсилә Садиҡовалар лайыҡ булды.

Яңы Балапан урта мәктәбе бинаһына ҡуйылған таҡтаташта яҙылғанса, башҡортто донъя күләменә сығарған “Урал батыр” эпосын беҙгә еткереп, үҙ халҡына һәйкәл ҡуйған Ишмөхәмәт сәсән үҙе лә һәйкәлгә лайыҡ. Был – беҙҙең генә түгел, барлыҡ яҡташтарыбыҙҙың, халыҡ сәсәненең тарихи ролен аңлаған һәр кешенең изге теләге. 1998 йылдың декабрендә башҡорт халыҡ сәсәне Мөхәмәтша Буранғоловтың 110 йыллығына арналған фәнни конференция уҙғарылып, унда 14 пунктлыҡ ҙур резолюция ҡабул ителгәйне. Әммә М.Буранғоловҡа, Ғ.Арғынбаевҡа һәм Ғ.Әлмөхәмәтовҡа һәйкәлдәр ҡуйылманы.

2010 йылда “Урал батыр” эпосының яҙып алыныуының 100 йыллығын билдәләйәсәкбеҙ. Ошо айҡанлы ҡабул ителгән ҡарарға (сәсәндәргә һәйкәл ҡуйыу тураһында) Ишмөхәмәт Мырҙаҡаевтың исемен дә өҫтәргә ине. Исмаһам, 100 йыллыҡ юбилейға резолюцияның ошо пункты мотлаҡ тормошҡа ашһын ине. Оло сәсәндәр еткергән рухи тамырҙарыбыҙға иғтибарлы булып, йәш быуынды тәрбиәләүҙә файҙаланһаҡ ине.

Үҙ тарихын белмәгән халыҡтың – киләсәге юҡ, тиҙәр. Шуның өсөн үткәнебеҙҙе онотмайыҡ!

**Рәжәп МАЛЫБАЕВ.**
**Әбйәлил районы.**

## АЛСАҠЛЫҠ НУРҘАРЫ ӨЛӘШЕП…



Ғүмеркәйҙәр уралған йомғаҡты һүткәндә әҙәм балаһы үҙенә тәғәйен юлды үтә, маңлайына яҙылған яҙмышты үҙенсә кисерә, үҙенсә шатлана, үҙенсә ҡайғыра – ғөмүмән, һәр кем яҙмышына бүленгән арауыҡты үҙенсә йәшәй. Эйе, әҙәм балаһының тормошо шунан ғибәрәт. Хоҙай тарафынан күпме ғүмер бирелгән, уның яҙмышына нимәләр күрәсәге яҙылған, булмышына ниндәй һәләт-һөнәр һалынған – былар барыһы ла Юғары көстөң ҡөҙрәтендә. Әммә өлөшкә төшкән ғүмерҙе юҡ-барға тәләфләмәй, тормош юлын матур итеп үтеү, эшләгән изгелектәрең, яҡшылыҡтарың менән кешеләрҙең күңел дәфтәренә уйылып ҡалыу – һәр әҙәми заттың изге бурысы.

Башҡортостандың халыҡ, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Рәүис Заһитов үҙенең яҙмышын сәнғәт менән бәйләгән, үҙенең тәғәйенләнешен замандаштарының күңелен байытыуҙа, уларҙың йөрәгенә матурлыҡ орлоҡтары сәсеүҙә күрә. «Йәшәгән йылдар һаны ғүмер тигән миҙгелгә өҫтәлгән, уйнаған ролдәр артҡан һайын, был ғүмерҙең ике килмәгәнлегенә, бөтә уҙған тормоштоң бер тынала үтеүенә тағы бер ғәжәпһенеп уйға ҡалам. Шағирҙар юҡҡа ғына ғүмерҙе таңғы ысыҡҡа тиңләмәйҙер!.. Беҙ бала саҡта ололарҙың «Ай күрҙе – ҡояш алды» тип әйткәндәре ни тиклем хаҡлы икәнен хәҙер генә аңлаған кеүекмен. Әммә бошоноп ултырыу, үткәндәргә үкенеү кеүек нәмәләр минең булмышыма хас түгел, һәр көнөмдән, һәр мәлемдән йәм табып йәшәргә тырышам», – ти, уҙған юлына байҡау яһап, утыҙ биш йыллыҡ ижад ғүмерендәге уңыштарын, шатлыҡ-һөйөнөстәрен, юғалтыу-көйөнөстәрен барлағанда Рәүис Хәбир улы.

Рәүис Заһитов Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында 1974 йылда эш башлай. Көндән – айға, айҙан йылға үрелгән, йылдарҙы үҙ иҫәбенә алып тиҫбе булып теҙелгән миҙгелдәр ашыҡмай ғына бер-береһенә өҫтәлә килгән. Тамсы тама-тама күл була, тигәндәй, берәмләп йыйылған ижад емештәре, театр донъяһына эскерһеҙ хеҙмәт итеүе артисҡа уңыш алып килә, уны халыҡсан ижадсы булараҡ таныта.

Алтмыш йәшлек күркәм һәм олпат юбилейын билдәләгән Рәүис ағайҙың күңелен төрлө кисерештәр биләй, ул йәшлек дәрте менән янып-ярһып

уйнаған ролдәрен һағына, күңеленә уйылып ҡалған образдарын иҫенә төшөрә... Хәтер йомғағын һүтеп-һүтеп ала: ғүмер арауығында уға осраған, тормош һуҡмағын уның менән бергә үткән, ә хәҙер инде яҡты хәтер булып ҡалған ғәзиз кешеләрен, яҡындарын юҡһына...

Бер төрлө генә күңел торошо Рәүис ағайҙың тәбиғәтенә хас түгел, сәхнәлә лә бит ул төрлө жанрҙағы спектаклдәрҙә берҙәй оҫта уйнарға һәләтле. Халҡыбыҙҙың күңел йомартлығы, нескә ябайлыҡ, тормошсанлыҡ – Рәүис Заһитов ижадына хас иң матур һыҙаттар, «Ябайлыҡта – бөйөклөк» икәнен артистың ижадын күҙәтеп барыусылар ҙа билдәләй. «Рәүис Заһитов сәхнәгә сығып баҫыуы менән үк тамашасыны әсир итә: уның булмышына һалынған алсаҡлыҡ, сәхнә һөйкөмлөгө, үҙен тотошо бөтә иғтибарҙы яулай. Актерҙың уйынында төп һыҙат – ихласлыҡ, эске тойомлау, ул үҙенең асылын, күңел торошон сәхнәгә алып сыҡҡан геройы менән бер тулҡынға көйләй ала; тулыһынса әҫәрҙәге ваҡиға менән йәшәй башлай, үҙенең образын яратып башҡара, һәм тамашасылар ҙа быны тоя – ролен яратып уйнаған актерға алҡыштарын йәлләмәй», – тигән һүҙҙәр йыш осрай артистың ижады менән ҡыҙыҡһынған белгестәрҙең, ижади портреттарын яҙған журналистарҙың яҙмаһында.

Рәүис Заһитов Ҡыйғы районының Иҫке Мөхәммәт ауылында тыуған. Моңло тауышлы атаһынан күреп, үҙе лә халыҡ йырҙарын йырларға өйрәнгән. Сәнғәт менән ҡыҙыҡһынған үҫмер егет тәүҙә Салауат районының Малаяҙ мәҙәниәт һарайында эш башлай, ә һуңынан, хыялын тормошҡа ашырыу ниәтендә, бөтә тәүәккәллеген йыйып, Өфө дәүләт сәнғәт институтына юллана. Сәхнә тигән ымһындырғыс та, арбағыс та, серле лә донъя менән һәүәҫкәр артист булараҡ таныш булған Рәүис ағай өсөн театр факультетына уҡырға инеү бәхеттең етенсе ҡатына өлгәшеү менән бер була. «Артислыҡҡа уҡырға ингәс, үҙемде ҡанатлы кеүек тойҙом, һәм был тойғо һәр бер яңы роль уйнағанда ҡабатлана килә – артистар ана шул күңел ҡанатланыуын  көтөп йәшәйҙер ул, минеңсә», –  ти артист.

«Алтын ҙур булмай» тигән әйтем бар халыҡта. Оҙон буйлы артистарға сәхнәне яулауы еңелерәк һымаҡ, буйсан булыу – уңыштың илле проценты тиерлек, тик талантың ғына булһын! Ә бына Рәүис ағайға иһә тамашасы күңелен яулар өсөн төрлө яҡлап, төрлө ысулдар менән эш итергә тура килә. Шулай булмай ни, үҙеңдең «алтын» икәнеңде иҫбат итеү кемгә еңел икән?!.. Ә шулай ҙа Хоҙайға рәхмәтле ул: уны башҡа артистар менән бутамайҙар, күңелдә йәшәгән сәм-дәрт арҡаһында театр донъяһында үҙ урынын табып ҡына ҡалманы, ә үҙен төрлө амплуала уйнарға һәләтле артист итеп танытты.

Театрҙың тартыу көстәренең береһе – ул артист исеме. Һәр заман үҙ геройын тыуҙырған кеүек, һәр театрҙың йылъяҙмаһында уға дан, танылыу алып килгән исемдәр бар. Рәүис Заһитов та – Академтеатрҙың ижадына, халыҡ араһында мәҙәниәтте пропагандалауға үҙ өлөшөн, үҙ көсөн индергән актер.

«Актер – профессия түгел, ул – диагноз» тип әйтеүселәрҙең һүҙендә хаҡлыҡ ята. Бар булмышы менән эшенә мөкиббән булған таланттар, үҙенең ролен төпсөрләп, һәр бер деталенә тиклем еренә еткереп эшләүселәр генә халыҡтың иғтибарына дәғүә итә ала. Мәҫәлән, Рәүис ағай башҡарыуында Яппар ҡарт ролен алайыҡ. Халҡыбыҙҙың ижад һандығынан алып яҙылған

был әҫәрҙә – Б.Бикбай менән З.Исмәғилевтың «Ҡоҙаса» музыкаль комедияһында – Рәүис Заһитов, ошо спектаклде ҡараған тамашасы әйтмәксе, «йөҙөп йөрөп уйнай». Ысынлап та, комедия жанрындағы спектаклдәрҙә оҫта уйнаусы актер булараҡ, Яппар ҡарт роле Рәүис ағай өсөн күнегелгән эш һымаҡ. Әммә актерҙың эҙләнеүсән күңеле был юлы ла үҙенә тынғылыҡ тапмаған – Яппар ҡарттың ҡылыҡтары, үҙен тотошо, ымхәрәкәттәре, телмәр интонацияһы ауыл ҡартының тормошҡа ҡарашын, характер үҙенсәлеген сағылдырмай ҡалмай. Ҡарт ҡуйынындағы ҡаласҡа ымһындырып, йәш кәләште үҙ ҡосағына алырға теләгән Яппар ҡарт, тормош күргән кешеләргә хас булған һиҙгерлеген юғалтып, йәш комсомолец Ильястың «ҡапҡан»ына эләгә – «кәзә һаҡалы»нан ҡотола, тар балаҡ, ялпаҡ кепка эләктереп ала. «Ир-егеттең күңелендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр» тигәнде Яппар ҡарт роле аша Рәүис ағай ихлас һүрәтләй – ҡайһы ваҡыт тамашасы сәхнәлә кем икәнен онотоп та ебәрәләр – йәш кәләш алам тип баш ватҡан Яппар ҡартмы, әллә ролен мөкиббән китеп уйнаған Рәүис Заһитовмы? Ышандырыу һәләте лә, уйын алымы ла ихлас булғас, образды тамашасылар яратып өлгөрә.

2008 йылда «Ҡоҙаса» комедияһын Мәскәүҙең театр йәмәғәтселеге лә йылы ҡабул итте. Яппар ҡарттың бөтә зал буйлап йырлап үтеүен баш ҡала тәнҡитселәре «театрҙың тамашасы менән яңыса аралашыу ысулы» тип атаны. Ысынлап та, артистар был спектаклдә тамашасы өсөн һәм тамашасы менән бергә уйнай.

Төп башҡорт милли театры сәхнәһендә өс тиҫтәнән ашыу йыл эшләү ваҡытында Рәүис Заһитов күп кенә иҫтә ҡалырлыҡ, күркәм образдар ижад итеп, үҙен рухи донъябыҙҙы байытыуға ҙур, емешле хеҙмәт һалған талантлы шәхестәребеҙҙең береһе итеп танытыуға өлгәште. Башҡорт милли театрын ойоштороусыларҙың береһе Ғималетдин Минһажевтың яҡташы булыу уға үҙ-үҙенә талапсан, һәр тотонған эшкә яуаплы ҡарарға өйрәтте. Халыҡтың рухи донъяһын, йәшәүгә һөйөүен үҙенең тәбиғәтенә, булмышына һеңдергән Р. Заһитов ихласлығы, эскерһеҙлеге, үтә бирелеп, онотолоп уйнауы, тыуҙырған образдарының милли һыҙаттарының күркәмлеге, халыҡсанлығы, тормошсанлығы менән хайран ҡалдыра.

Рәүис Заһитов ижад иткән баҙыҡ һәм тормошсан образдарҙың һәр береһендә халҡыбыҙҙың рухи ынтылыштары сағыла. Ул башҡарған бер аҙ хыялый, мөхәббәт даръяһында йөҙөүсе Ильяс (М.Кәрим, «Ҡыҙ урлау») булһынмы, оҫта ғәйбәтсе Йыһан ҡарсыҡмы (Х.Ибраһимов, «Башмағым») – улар тамашасы хәтерендә әле лә һаҡланалыр.

Һәр бер роленең булмышын шәхси төҫмөрләү аша төрлө һыҙаттар, биҙәктәр менән байытып, уның художестволы әһәмиәтен тәрәнәйтеүгә, бер бөтөн образ итеп асып биреүгә өлгәшә. Артистың был күркәм сифаттарын ул уйнаған бихисап геройҙарында күҙәтергә була: Мәмәтәй (К.Мәргән, «Шомбай»), Шамил (Ғ.Әхмәтшин, «Тальян гармун»), Моратша (М.Кәрим, «Диктаторға ат бирегеҙ!»), Нәжиб (А.Ғиләжев, «Юғалған көн»), Рәмил (Т.Миңнуллин, «Үҙебеҙ һайлаған яҙмыш»), Ғәбдрәшит (М.Фәйзи, «Аҫылйәр»), Ғәлиулла (Ә.Атнабаев, «Законлы никах менән!»), Өмөтҡужа (Х.Зарипов, «Эх, кәләше лә кәләше!»), Шакир (Ф.Бүләков, «Шайморатов генерал»), Хажибәк (Х.Зарипов, «Һүнмәһен-һүрелмәһен») һ.б.

Ғөмүмән алғанда, Р.Заһитов, яңылыҡҡа ынтылыусы, эшһөйәр артист

булараҡ, образдың эске кисерештәрен, уның спектаклдәге үҫешен үҙенсә аса белә, йәғни образдың иң кәрәкле урынын таба ла шуны төрлө төҫтәрҙә балҡытыуға өлгәшә. Шуға күрә лә Рәүис Зәһитов ҡатмарлы, көслө характерҙарҙы ла, көлкөлө образдарҙы ла ҡабатланмаҫ оҫталыҡ менән, ышандырырлыҡ итеп башҡара. Был ихласлыҡ, үҙ сиратында, тамашасы һөйөүенә әйләнеп, ижадсыны алҡыштарға күмә. Ысынлап та, артист сәхнәгә сығыу менән үк һәр ваҡыт тамаша залында ниндәйҙер йәнләнеү күҙәтелә, артист менән тамашасы араһында ихласлыҡҡа, ябайлыҡҡа, дуҫтарса мөнәсәбәткә ҡоролған, иң яҡты йөрәк хистәренән туҡылған күҙгә күренмәҫ, әммә йылыһын күңел күҙе тойорлоҡ йәнле бәйләнеш хасил була.

Заман башҡа – заң башҡа, тиһәләр ҙә, эйе, заманалар үҙгәрә, әммә халыҡтың рухи талаптары, зауығы, ихтыяжы тағы ла талапсанараҡ төҫ ала. Бер ҡарауға еңел генә һаналған комедия жанрына ҡарата ла тамашасының үҙенең мөнәсәбәте бар. «Халыҡ театрға көндәлек ығы-зығынан арынырға, ял итер өсөн килә, ә ике сәғәт ярымлыҡ комедия – ул иң шәп дауа. Халыҡ мине комедиялар аша күберәк белә, таный. Бөгөн дә уҙған йылдарҙа барған иң популяр комедияларҙан өҙөктәрҙе, театрлаштырылған тамашаларҙы тәҡдим итәбеҙ. Шул өҙөктәрҙең концерт репертуарында йәшәп килеүе – тамашасыларҙың ихтыяжынан. Яратып ҡараған өҙөктәрҙе артистар ҙа рәхәтләнеп уйнай», – тип тамашасыға рәхмәтен еткерә актер.

М.Кәримдең «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» повесы буйынса (Р.Исрафилов инсценировкаһы) спектаклдә Талип ролен дә ул үҙенсә, «заһитовса» башҡарып, дөйөм актерҙар ансамблен тулыландырырлыҡ, башҡорт театры галереяһында матур образ булырлыҡ итеп ижад итте.

Наил Ғәйетбай пьесаһы буйынса «Аты барҙың – дәрте бар» комедияһы 1997 йылда сәхнә күрә. Спектаклдең оҙон ғүмерле булыуында Рәүис Хәбир улының да өлөшө бар: ул уйнаған Закирйән роле тамашасылар алдына тормошта аҙашып ҡалһа ла, үҙенең бәхетен табырға, күңелен бөтәйтергә өмөт өҙмәгән ир ҡиәфәтендә баҫа.

Рәүис Заһитов халыҡ йырҙарын оҫта башҡарыусы йырсы булараҡ та күңелдәребеҙҙе әсир итте. «Фатима», «Буранбай», «Илсе Ғайса», «Каруанһарай» һәм башҡа халыҡ, шулай уҡ эстрада йырҙары һәр ваҡыт уның репертуарында. Бөгөнгө көндә ретро-концерт стилендә ҡуйылған «Йырҙарҙа – йылдар тауышы» программаһында Рәүис ағай «Оло юлдың туҙаны» йырын бөтә күңелен биреп башҡара, моңо менән үҙәктәрҙе өҙә.

Сағыу талантҡа эйә актер Рәүис Заһитов сәхнәлә уйнамай, ә образға инеп, шундағы тормошта йәшәй: кешеләргә ихласлыҡ, алсаҡлыҡ нурҙары өләшә, ысынбарлыҡҡа – еңелсә юмор, тормошҡа һөйөү менән ҡарарға булыша, ваҡлыҡтарға мәрәкә өҫтәй.

Ташҡындай ҡайнап торған ижади ғүмеренең иң һутлы мәлендә арымай-талмай яңынан-яңы, баҙыҡ образдар тыуҙырып, меңәрләгән тамашасыһын ҡыуандырып йәшәүен, илаһи сәнғәт донъяһына бөгөнгөләй эскерһеҙ хеҙмәтен дауам итеүен теләйбеҙ уға.

**Динара КӘРИМОВА.**



**Мөнир
ИШБУЛАТОВ**

# БАР ИНЕ ЗАМАНАЛАР...

**ХИКӘЙӘ-ХӘТИРӘ**

Мин хәҙер йырламайым. Һорамағыҙ ҙа, өгөтләмәгеҙ ҙә, ҡупырышлыҡта ла ғәйепләмәгеҙ, үпкәләмәгеҙ ҙә. Ә шулай ҙа бар ине заманалар: йырланым, алҡыштарға күмелдем... Минең йырсы булыуым кемдәрҙелер ысынлап та ҡыҙыҡһындыра икән, ошоғаса күңелем һандығында һаҡланған ҡайһы бер серҙәремдә асам. Эйе, йыр сәнғәтендәге "эшмәкәрлегем" өс осорҙан тора. Икеһе уҡыу йылдарына тура килә, өсөнсөһө хаҡында — һүҙ ахырында.

Баштан һөйләмәй әмәл юҡ.

...Башланғыс кластарҙа аҙнаһына бер тапҡыр йыр дәресе була торғайны. Мин беренсегә барғанда, ул саҡтағы Советтар Союзында йәшәгән бөтә халыҡ — олоһо ла, кесеһе лә, хатта иҫ белмәгәне лә — өсөнсө йыл инде Гитлер Германияһына ҡаршы Бөйөк Ватан һуғышында дошман менән үлемесле алышта фронтта ла, алыҫ ятҡан тылда ла ҡан түкөрә ине.

Ауылыбыҙҙың үрге осонда, ауыл көтөүен иртәнсәк туплай, кискеһен ҡаршы ала торған туғайҙа, армияға сират еткән оло малайҙарҙы һуғышҡа өйрәтәләр. Командирҙары — Әсминук фамилиялы сатан. Оҙаҡламай ҡыҙылармеец буласаҡ малайҙар уға "Товарищ военный комиссар!", "Товарищ майор!" йә "Товарищ командир!" тип төрлөсә өндәшә. Командирҙың ярҙамсыһы — "әсәвйәхим"дән килгән башҡорт ағай. Ошо урында бөгөнгө үҫмерҙәр өсөн аңлатма биреү кәрәк, тип иҫәпләйем, сөнки беҙҙең донъя тип атаған төшөнсәбеҙҙә мәңгелек бер нәмә лә юҡ: тәбиғәттә лә, социаль-ижтимағи күренештәрҙә лә һәр нәмәнең үҫеше һәм тарҡалышы була. Әлеге һүҙебеҙ ҙә бер һәйбәт ойошманың ҡатмарлы ҡыҫҡартылышынан: Осоавиахим, йәғни «Общество содействия авиации и химической защите Родины". Һуғыштан һуң уның урынына өс ойошма барлыҡҡа килде: Досарм — Добровольное общество содействия армии; Досав — Добровольное общество содействия авиации; Досфлот — Добровольное общество содействия флоту. Аҙаҡтан ошо өс йәмғиәтте ДОСААФ-ҡа берләштерҙеләр. Хәҙер РОСТО тип атайҙар.

---

*Мөнир Ишбулатов 1935 йылдың 19 ғинуарында Бөрйән районы Байназар ауылында тыуған. БДУ-ны, Бөтә Союз юридик институтын тамамлай. Уҡытыусы, мәктәп директоры, ауыл Советы рәйесе булып эшләй. Яҙыусылар союзы ағзаһы. Мәләүез ҡалаһында йәшәй.*

*Ҡәләмдәшебеҙҙе 75 йәше менән ҡотлайбыҙ!*

Ауыл осондағы баяғы туғайҙа бормалы-бормалы окоп-траншеялар ҡаҙып бөтөлгән. Ян-яҡтан йыйылған һуғышҡа өйрәнеүсе оло малайҙарҙы мәсет-клубҡа урынлаштырғандар. Хәҙер уны казарма тиҙәр. Ағас мылтыҡ менән ҡоралланған буласаҡ яугирҙарҙы иртәнсәк сафҡа теҙеп, окоптарға “уйнарға” алып китәләр. Әсәйҙәр һыйыр һауған мәлдә улар урам яңғыратып йырлап үтә, кискә тағы теҙелеп казармаға ҡайта. “Һуғыш уйыны”н ҡарап торорға, йырлағандарын тыңларға беҙ, ваҡ малайҙар, көтөү ҡаршылау һылтауы менән, ауыл осона иртәрәк йыйылабыҙ. “Уйнаусылар” икегә бүленеп, командирҙары етәкселегендә бербереһенә ҡапма-ҡаршы йүгерешәләр ҙә мылтыҡтарын шаҡылдатыша йә һалам тултырып элеп ҡуйылған тоҡтарға һөжүм итәләр. Көн һайын ҡарап тороуға беҙ ҙә командирҙарҙың приказдарын өйрәнеп алдыҡ. “Пирет атаку!” “Пирикладым бей, ыштыкым кәлей!” Командирҙар ҡайһы берҙәрен:

— Тый ыранин. Тый — убит, — тип ситкә сығарып торалар.

Бер көндө беҙ, көтөү ҡаршылаусылар:

— Бынауы Әсминук ағай, сатан булһа ла, тәрән окоптан еңел генә ырғып сыға ла ҡуя, — тип һөйләшеп торһаҡ, эргәбеҙгә “әсәвйәхим” ағай килде.

— Кемде әйтәһегеҙ, малайҙар? — тип һорашты.

— Әсминук ағайҙы, — тинек беҙ күмәкләшеп. Командир ярҙамсыһы ихлас итеп көлдө-көлдө лә:

— Эх, малайҙар, малайҙар, әсминук тигәнегеҙ диңгеҙҙә йөшәүсе бер ҡурҡыныс нәмә була. Урыҫса ось-ми-ног, беҙҙеңсә — һигеҙаяҡ. Ә комиссарҙың фамилияһы Се-ме-нюк, — ижекләп, һуҙып аңлатты был беҙгә. — Ул фронтта өс тапҡыр яраланған. Бер аҙ һауыҡҡас, беҙҙең районға хәрби комиссар итеп тәғәйенләгәндәр.

Һуғыш уйыны бөтөүгә, хәлдән тайған оло малайҙарҙы теҙәләр ҙә команда бирәләр:

— На мисте шагым арш! Запивай!

Ошолайтып минең йыр сәнғәтенә тартылыуым “окоп буйында” башланды. Бер яҡ ситтә беҙ ҙә теҙеләбеҙ ҙә ололарҙың йырҙарын отоп алырға тырышабыҙ. Ә “һуғышсылар” иртәнсәк тә, кисен дә күмәк тауыш менән ауыл урамын яңғыратып йырлап үтә.

*Мы готовы к бою, маршал Ворошилов,*
*Мы готовы к бою, Сталин наш отец!*
*В бой за Родину,*
*В бой за Сталина,*
*Боевая честь нам дорога.*
*Кони сытые бьют копытами,*
*Встретим по-сталински врага!*

Һуғыш йырҙарын әкрен генә үҙ алдыма көйләп йөрөй торғас, үҙемдең йыр сәнғәтенә нығыраҡ тартыла башлағанымды төшөндөм. Әйткәйнем бит, аҙнаһына бер тапҡыр йыр дәресе була торғайны, тип. Уҡытыусыбыҙ — үҙебеҙҙең ауылда тулы булмаған урта мәктәп, икенсе төрлө әйткәндә, ете (һуңға табан быңдай белем кимәле һигеҙ, бөгөн иһә туғыҙ класс менән үлсәнә) класс тамамлаған Ғәббәс ағай, сөнки ир уҡытыусылар фронтҡа китеп бөткән.

Германия менән һуғыш касафатынан етем ҡалғандар өсөн ул йылды беҙҙең ауылда балалар йорто астылар. Ошо йортҡа килгән Әзекәев Әхтәм исемле малайҙы Ғәббәс ағай минең эргәмә ултыртты. Әхтәм кәүҙәгә лә, йәшкә лә минән ҙур. Ҡәләмде лә, аҡбурҙы ла һулаҡай ҡулына тота. Үҙебеҙҙекеләр яттан килгән итеп Әхтәмде “һулаҡай”, “Әзекәй — мәсекәй” тип үсекләһәләр, мин парталашымды яҡлашҡан булам:

– Дөрөҫ әйтмәйһегеҙ, “мәсекәй” түгел, “мәскәй әбей” тип һөйләйҙәр әкиәттә. Әхтәм... әбей түгел дә!

Ғәббәс ағай тәүге йыр дәресендә кемдең ниндәй йыр белеүен һорашты. Бөтәбеҙҙән дә алда Әхтәм ҡул күтәрҙе һәм таҡта алдына сығып йырлап та ебәрҙе. Тауышы көслө һәм яғымлы.

*Күк күгәрсен күктәрҙә шул,*
*Күләгәһе ерҙәрҙә.*
*Хоҙай үҙе түҙем бирһен*
*Беҙҙәй бәхетһеҙҙәргә.*

Башта Әхтәмгә иғтибарлап ҡарап ултырған Ғәббәс ағай әкренләп кенә башын эйҙе, беҙгә күрһәтмәҫкә тырышып, күҙен һөрттө. Тораraҡ белеүебеҙсә, Әхтәм яңғыҙ түгел, әле уҡыу йәшенә етмәгән ҡустыһы Әнүәр, һеңлеһе Йәмилә бар икән. Был өсәүҙең аталары һуғыш тамуғында янған, ауырыу әсәләре, был ҡайғыны күтәрә алмай, балаларын үкһеҙ етемлектә ҡалдырған. Ошо арҡала өс бала менән бергә Билдәш ҡушаматлы һыйырҙарын да балалар йортона алып килеп тапшырғандар. Шулай итеп, Билдәш балалар йортоноң буласаҡ фермаһына нигеҙ һалған мал булып сыға. Быныһы, хөрмәтле уҡыусылар, икенсе тарих, йыр сәнғәтенән айырылмайыҡ әлегә. Уҡытыусыбыҙ бер Әхтәмдәрҙе генә түгел, бөтә етемдәрҙең яҙмышын уйлағандыр, моғайын, тип ҡуям бөгөн йылдар ҡатламынан шул замандарға күҙ һалып.

Бер-бер артлы сығып йырлай торғас, сират миңә етте. Ныҡ итеп тын алдым да, тауышымды Әхтәмдеке һымаҡ көслө итергә тырышып, йырлап ебәрҙем.

*Ҡоҙағыйҙың итегенең*
*Осло икән үксәһе.*
*Ҡыҙын урлап ҡасам тиһәм,*
*Күреп ҡалған әпсәһе.*

Йырым оҡшаны, ахырыһы, бөтә класс шарҡылдап көлә. Уҡытыусыбыҙ:

– Тауышың, былай, бала ҡарғаныҡындай бар, – тип йылмайҙы. Үҙем бығаса бала ҡарға тауышын ишеткәнем булмаһа ла, уҡытыусының маҡтауынан эскә йылы йүгерҙе.

Ошолай кем нимә белә, шуны йырлап, өс сирек уҡыныҡ. Етенселә уҡыған күршебеҙ Мәҙинә апай ҙа бер нисә йыр өйрәтте миңә. Шуның икеһе әле лә хәтеремдә.

*Шабыр-шобор ямғыр яуа*
*Өй башы ҡалайҙарға, шул.*
*Еткән ҡыҙҙар ҡала икән*
*Ыштанһыҙ малайҙарға.*
*Кил бында, тигән тауышҡа*
*Ҡыҙым шылған ҡамышҡа, шул.*
*Бисә айырған абышҡа...*
*Һалған уны һағышҡа.*

Быларҙы ла йырлап, кластың да, уҡытыусыбыҙҙың да һындарын ҡатырғаным булды.

Ғәббәс ағайыбыҙ үҙе йырлай белмәнеме, әйтә алмайым. Ул заманда уҡытыусыға “кәрәкмәгән” һорау биреү юҡ ине. Мәгәр дүртенсе сирек уртаһында ағайыбыҙ бер йыр өйрәтте. Уны дәрес аҙағында ғына бөтә класс менән йырлай торғайныҡ, һүҙҙәре хәтәр булһа ла, йырлағанда күҙ алдына бик болармай ғына өргән һепертмә буран ҡубыр, йә булмаһа үҙебеҙ көйләп сәңгелдәк бәүетеп ултырған һымаҡ була ине.

*Буран ҡарҙарҙы өйөрә,*
*Томалап күкте ҡаплай.*
*Йә ул йыртҡыстай үкерә,*
*Йә бала төҫлө илай.*

Өлкәнерәк кластарҙа урыҫса шиғырҙар ятлай башлағас, был йырҙың Пушкиндан тәржемә булғанлығына төшөндөк.

Икенсегә килеүебеҙгә Ғәббәс ағайыбыҙҙы юғары кластарға күсергәндәр ҙә, беҙҙе Фәрзәнә апай уҡытты. Уның атаһы беҙҙең мәктәптә директор булып эшләгән еренән һуғышҡа китә лә... ҡайтмай.

Малайҙарға ҡарағанда, ҡыҙҙар йырға әүәҫерәк. Шуғалыр, Фәрзәнә апай беҙгә байтаҡ йыр өйрәтте. Класс менән дә, берәмләп тә, икешәрләп тә "геүләтә" ине беҙҙе. Заманаһына ярашлы, йырҙарыбыҙ һуғыш тураһында булды.

*Эй, пилот, күҙеңде төҙәт,*
*Бөҙрә болоттар артынан*
*Һауаны күҙәт...*

Йәки ошолай:

*Оло юлдан саң туҙҙырып*
*Лейтенант ҡайтып килә...*

Хорҙан һуң Фәрзәнә апай миңә "минус өс" тип әйтә. Уныһы инде журналдағы "3"-төң артына һыҙыҡ ҡуйылғанын аңлата. Яңғыҙ йырлағанда "2"-ле ҡуя. Ә Әхтәм матур тауышлы. Йырларға ярата, һәр саҡ "5"-ле ала. Икешәрләп йырлағанда мин Әхтәмгә тағылып ҡараным.

– Миңә һалынаһың да ҡуяһың, етмәһә, йырҙы боҙаһың, – тип сөңкөлдәй шул Әхтәм. Парталаш тип, исмаһам, өндәшмәһә ине лә бит... Бер саҡ мине бөтөнләйгә оятҡа ҡалдырҙы. Йырҙың ҡап уртаһында шып туктаны ла ҡуйҙы. Мин, Ғәббәс ағай әйткәнсә, ҡарға балаһы тауышы менән "...тенант ҡайтып..." тип әйтеп өлгөрҙөм, класташтарым күмәкләшеп хихылдарға тотондо. Әхтәмгә шул тиклем хәтерем ҡалды. Ә теге заманда бер үҙем уны яҡлашҡан булам бит әле.

Икенсе кластан һуң был йырҙарҙы бүтәнсә йырламаныҡ. Йылдар үтә килә байтаҡ китаптар уҡыһам да, һүҙҙәрен бер ерҙә лә осратманым, кем ҡайҙан отоп алып класҡа өйрәткәнен дә белә алманым. Әүәлге һымаҡ Виктор Татарский алып барған "Встреча с песней" тигән тапшырыу булһа, шунда мөрәжәғәт итер инем дә, хәҙер уныһы ла юҡ, шикелле. Шулай ҙа Нәзифә Ҡадирова "оло юлдың туҙаны"н туҙҙыра башлаһа, ана-бына "беҙҙең" лейтенант килеп сығыр һымаҡ тойола.

Башҡа фәндәрҙән өлгәшһәм дә, йырҙан "2"-леләр сәпәлеп тора шул. Әхтәм йырлағанда ҡолағымды баҫып ултыра башланым.

Өсөнсө класта район үҙәгенән килгән Зөлхиә апай уҡытты. Ул да яңы йырҙар менән байытты беҙҙең күңелдәрҙе.

*Алмағастар сәскә атҡан саҡта*
*Йылға өҫтөнән томандар аҡты.*
*Сығып текә бейек яр башына,*
*Зәйтүнәкәй алыҫҡа баҡты.*

Бөгөн дә популярлығын юғалтмаған "Катюша"ның үҙ заманы өсөн башҡортсаға әүеш-тәүеш ителгәнен һуңлап ҡына аңланым, әлбиттә.

Дүртенселә ике уҡытыусы ҡулынан үттек. Тәүҙә райондан – Сабира апай, аҙаҡтан Үзбәкстандан килгән Зөбәтә апай уҡытты. Үҙе ып-ысын башҡорт булһа ла, беҙҙең яҡ өсөн исеме ситенерәк булғанға, беҙ уны Зөбәйлә апай тип йөрөттөк.

Ике апайыбыҙ ҙа беҙҙе йыр сәнғәтенә тағы ла нығыраҡ ылыҡтырҙы. Сабира апайыбыҙ:

*Мылтыҡ аҫып, ҡылыс тағып,*
*Яуға китте комсомолка Гөлсара –*

тип Еңеү байрамынан һуң да беҙҙе һуғыштан айырмаһа, Зөбәйлә апайыбыҙ ҙа шуны дауам иттерҙе.

*Чапаевтың бүреге*
*Ҡыҙыл буҫтауҙан матур.*
*Чапай ҡурҡыуҙы белмәгән,*
*Ул булған герой-батыр.*

Бөтә класс дәртләнеп йырлай, ә мин бахырҙың һаман шул “2”-ленән баш сыҡмай. Ни хәл ҡылырға икән, тигән мәсьәлә мине бик ныҡ борсоуға һалды. Ҡайғырып-көйәләнеп, баш ҡатырып-аптыранып йөрөй торғас, ҡәтғи ҡарарға килдем. Йыр сәнғәтендә мин Әхтәмдең танауына сиртергә тейешмен, тип үтә лә ныҡ ҡәһәтләндем, сөнки парталашым була тороп, мине һатып, намыҫымды шул хәтлем кәмһетте. Күрһен әле ул минең кем икәнлекте!

Өйөбөҙҙә кеше ҡалмағанды көтөп кенә йөрөйөм дә күнекмәләр үткәрергә тотонам. Ул замандағы өйҙәрҙә, хәҙерге һымаҡ, әйләнеп сыҡҡыһыҙ мебель тигән нәмә юҡ: өҫтәл, урындыҡ һәм ике-өс ултырғыс. Бер мөйөшкә барып баҫам, бөтә тауышҡа һөрән һуғып йырлап ебәрәм дә ҡуян шикелле ырғып-һикереп ҡаршы яҡ мөйөшкә сабам һәм үҙемдең тауышҡа ҡолағымды ҡуям. Шунан был яҡта йырлайым да теге яҡҡа елдерәм, дүртенсе тапҡыр күнекмә үткәргәнемдә, тауышым үҙемә оҡшай башланы. Күнекмәнән-күнекмәгә тауышым һаман матурая, үҙемдең мөйөштән-мөйөшкә йүгереүем шәбәйә бара. Бер ай эсендә ун ике мәртәбә күнекмә үткәреү форсаты тейҙе миңә. Тауышым да һәйбәт ишетелә. Күңелемде ҡәнәғәтлек тойғоһо биләй башланы. Йырлайым да ҡаршы яҡҡа йәнә йүгерәм, йәнә тыңлайым. Ошо күнекмәләрем менән үҙем дә уйламаҫтан-һиҙмәҫтән замандында ғәйәт ҙур асыш яһаған булғанмын икән. Эҫе мәлендә аңлатыусы булмағас, ҡайһылайтаһың. Мин төпкөл ауыл мәктәбендә саҡ дүртенселә уҡып йөрөйөм. Ике тиҫтә йылдан һуң ғына бер ғилемле кеше минең бер ҡайҙа ла теркәлмәгән асышымдың мәғәнәһенә баһа бирҙе. Баҡһаң, йыр сәнғәтенә ныҡлап юл һалған сағымда мин “сверхзвуковой” тип аталған самолеттар уйлап табылғандан күпкә алда “тауыш барьеры”н үтеү өлкәһендә беренсе ҡарлуғас булғанмын.

– Асышың тураһында ваҡытында тейешле урындарға хәбәр ебәрһәң, бөгөн исемеңде бөтә донъя белер, күп кенә илдәрҙең фәндәр академияларының хөрмәтле ағзаһы булыр инең, – тине бер ғилем эйәһе. – Һис шикһеҙ, һине Нобель премияһына лайыҡ тип табырҙар ине, – тип ебәрә хатта.

– Минең маҡсат йыр сәнғәтенә юл асыу булды, – тип яуапланым. – Һәм мин быға ирештем. Ә асышҡа килгәндә, берәй фәнни хеҙмәтегеҙҙә минең хаҡта телгә алып китһәгеҙ, шуныһы ла баштан ашҡан.

Йырлап өйрәндем. Класта йырлаған йырҙарҙы мөрхәтһенмәйем хәҙер. Өрәңы йыр менән шаңҡытырға кәрәк һабаҡташтарымды. Тырыша торғас, уныһын да булдырҙым. Шәмбе көндө һуңғы дәрес – йыр. Был юлы Зөбәйлә апай, нишләптер, күнегелгән тәртипте үҙгәрткән. Тәүҙә бөтә класс “Чапай”ҙы башҡарҙы. Мин ауыҙымды ла асманым.

– Нишләп, исмаһам, хорҙа ҡатнашмайһың? – тине уҡытыусы апай миңә ҡәтғи тауыш менән.

– Барыбер “ике”ле ҡуяһығыҙ ҙа инде, – тинем тыныс ҡына ҡиәфәттә.

Бына яңғыҙышар йырларға мәл етте.

– Йә, кем башлай? – Апайыбыҙ класҡа ҡарап киң йылмайҙы. – Һәр ваҡыттағыса, Әхтәм, һинме?

Ҡулымды күтәргән ыңғайға:

— Мин! — тип ысҡындырҙым һәм таҡта эргәһенә барып та баҫтым. Ҡалғандар, йөҙҙәренә мыҫҡыллау билгеһе сығарып, пырхылдаша башланы. Апайыбыҙ миңә ҡарап шаҡ ҡатҡан да ҡуйған. Күкрәгем күбәләй ҡабарып киткәнсә эскә тын тултырҙым һәм көслө, моңло тауыш менән шәхсән үҙем ижад иткән йырымды яңғыратып ебәрҙем:

*Агиҙелгә таш ташланым,*
*Суп итеп барып төштө.*
*Йырҙан гел "ике" тимәгән,*
*Мин дә алырмын "биш"те!*

Һабаҡташтарым тәүҙә "аһ" итеп ҡалды ла, тотондолар күмәкләп сәпәкәй һуғырға, апайыбыҙ ҙа уларға ҡушылды, ауыҙы ҡолаҡтарына етте.

— Тағы йырла, тағы! — тип һөрәнләшәләр, туҡтауһыҙ сәпәкәй итәләр.

Күңелем төпкөлөнән кемдер "һыҙҙыр әйҙә" тип ҡеүәт биргән һымаҡ. Яңы дәрт менән Мәҙинә апайҙан өйрәнеп, һаҡлыҡта тотҡан йырымды ла сығарҙым:

*Беҙҙең ауыл кылубында*
*Була уйын кисәһе, шул.*
*Ирен йоҡларға һалған да*
*Сығып тайған бисәһе.*

Ҡул сабыуҙар оҙаҡ дауам итте. Зөбәйлә апай миңә:

— Күптән шулай кәрәк ине! Ниндәй шәп һәләтеңде йәшереп йөрөгәнһең ошоғаса, һиңә бер ыңғайҙан ике "биш"ле ҡуям! — тип иғлан итте күтәренке рухта.

Мин ғорур төҫ менән Әхтәмгә ҡарайым. Бөршәйеп, минән дә ҡайтышыраҡ булып ҡалған һымаҡ күренде ул күҙемә. Шәп йырлаһа ла, бер юлы ике "5"-ле алғаны һис тә булманы. Миңә, әйтерһең, кешегә күренмәҫ ҡанат үҫте. Бөтә мәктәп буйлап йырлай-йырлай осоп йөрөгөм килде. Тик дәрес бөткәнен аңлатып шылтыраған ҡыңғырау эште боҙҙо.

Ошо иҫтәлекле ваҡиға менән минең йыр сәнғәтендәге беренсе осором тамам булды.

***

Икенсе осор үҙебеҙҙең баш ҡалабыҙҙа башланды. Мин ауылыбыҙҙан университетҡа ингән тәүге студент булып киттем. Беренсе курстағыларҙы төрлө эштәргә, түңәрәктәргә, тағы ла әллә нимәләргә йәлеп итәләр, йәғни яңы донъяға алып инәләр. Бер семестр уҡыуға, беҙҙең күҙҙәр бер аҙ асыла төштө: ижтимағи саралarға үтә тыңлаусан, буйһоноусан беренселәрҙе, ҡолаҡтары кейеҙләнә башлаған икенселәрҙе ылыҡтырырға тырышалар. Өсөнсөнән башлап ҡалған юғары курстар ваҡ-төйәк мәшәҡәттән тайғылау яғын ҡарай. Йөрәгендә дәрте, күңелендә ихласлығы булған өлкәндәр генә спорттың, ижадтың, сәнғәттең һәм башҡа нәмәләрҙең төрлө тармаҡтарында оҫталыҡтарын камиллаштыра.

Сентябрь айы колхозда уңыш йыйыуҙа үтте. Октябрҙә ысын студент тормошо башланды.

Ай урталарында беренсе курстарҙы ғәләмәт иркен аудиторияға йыйҙылар ҙа, факультет, бүлексә, төркөмдәр буйынса исемлектән барлап, фамилиялар тапҡырына "сәүкә" ҡундырып сыҡтылар. Ошо процедура бөтөүгә, аудиторияға арҡаһына чехол менән ауыр баян йөкләгән ҡоңғорт йөҙлө, ярайһы мыҡты кәүҙәле егет килеп инде. Ойоштороусы апайыбыҙ уны бик ихлас ҡаршы алды, баянын ысҡындырып, өҫтәлгә ҡуйырға ярҙамлашты. Шунан аҡлы-ҡаралы елле телдәре булған музыка ҡорамалы эргәһенә ултыртып ҡуйҙы. Ул нәмә роялме, пианиномы, фортепьяномы — һәр хәлдә мин белмәйем, сөнки быға тиклем күргәнем юҡ, ләкин бер-

береһенә оҡшаш шундай ҡорамалдар булғанлығын китаптар уҡығанда самалаған бар. Ойоштороусыбыҙ фамилияһын әйткән берәү музыкант эргәһенә бара. Ул иһә баяғы ҡорамалдың теленә баҫа ла “А” тип әйттерә һәм апайыбыҙҙан исемлек тапҡырына ниндәйҙер һүҙ яҙҙырта. Бына мин дә музыкант янына баҫтым. Һыуыҡ тейҙереп, тамағым ғыжылданҡырап торған саҡ. “Аааа” тип һуҙыуым булды, “бас” тип яҙҙыртып ҡуйҙы мине. “Бас” һүҙе радионан концерттарҙы ҡалдырмай тыңлап барыусы йырһөйәрҙәрҙән әҙ-мәҙ таныш. Уларҙың:

— Башҡорт йырсылары араһында берҙән-бер “бас” Ғабдрахман Хәбибуллин ғына, — тигәндәрен ишеткеләгәнем бар. Йырсының “Шайморатов генерал”ды башҡарғандағы тауышы менән күңелдән генә үҙемдекен сағыштырып ҡараным да “Ғабдрахман ағайҙан ҡалышырға ярамай, мәле еткәс, Башҡортостанда ике “бас” буласаҡбыҙ,”— тигән һығымта яһаным. Бөйөк Шаляпин да “бас” менән йырлаған! “Эй, ухнем!” Минең тауышҡа баһа биргән музыкант йыр сәнғәтендә белгес, тип кәйефемде күтәрәм. Белгес, әлбиттә, яңылышмай. Әле ул сәнғәт училищеһында уҡып йөрөй икән. Алғараҡ йүгереп булһа ла, әйтәйем әле, арыуыҡ ғүмерҙән һуң һәләтле композитор һәм үҙ йырҙарын башҡарыусы Мөфтәдин Ғиләжевта мин әлеге музыкантыбыҙҙы төҫмөрләнем. Әгәр яңылышҡан булһам, бифәйбә, дуҫ кеше.

Күҙем алдында йәйғор төҫтәре балҡытҡан хыялдар менән мин йыр сәнғәте киңлектәренә яңынан барып индем. Йөрәк елкенә, күңел осона, бөтә тәндә әйтеп аңлата алмаҫлыҡ ниндәйҙер еңеллек тойола. Башҡорт йырсылары араһындағы “икенсе бас” перспективаһы мине болоттарҙан бейеккәрәк алып менеп китә. Татлы хыялдарымды тәбиғәт тә аңлай, уртаҡлаша. Урам ашаһындағы ҡарғалар ҙа ҡарҡылдауҙан туҡтап, баштарын минең яҡҡа бора, ҡанаттарын ҡағып-һуғып мине тәбрикләй. Рәхмәт һеҙгә, ҡарғалар, кеше күңеленә иғтибарлы булыуығыҙға!

Тауыштарға баһа биреп бөткәс, музыкантыбыҙ беҙҙе биш рәткә теҙҙе. Сафыбыҙҙы йәнә бер ҡарап сыҡты ла:

— Һин, дуҫ кеше, был урында бөтөнләй күренмәйһең бит, — тип мине алға сығарып, иң уртаға баҫтырҙы. Был иһә хөрмәт үә иғтибар арта тигәнде аңлата бит инде. Бас һирәк осрай торған тауыш икәненә мин тағы бер инандым.

Бөтә илебеҙ менән тиҙҙән Бөйөк Октябрь революцияһының сираттағы йыллығын байрам итәсәкбеҙ. Ошо датаға революцион һәм ватансылыҡ рухындағы күтәренке йөкмәткеле йырҙар өйрәнелергә тейеш. Музыкантыбыҙ башта ҙур инструменттан уйнап ишеттерҙе, унан баянына ҡушылып үҙе йырланы:

— Беҙ бөгөн университеттың хор капеллаһына нигеҙ һалабыҙ. Был оло эштә һәр кем үҙ һәләтен тулыһынса асырға тейеш, — тине. — Рамазан Йәнбәковты үҙегеҙгә үрнәк итеп ҡуйығыҙ. Биолог һөнәренә уҡый, ә йыр сәнғәтендә яңынан-яңы еңеүҙәр яулай. Урыҫтың күренекле композиторы Бородин белеме менән химик. Ә беҙ уны химик тип түгел, сәнғәт әһеле тип беләбеҙ. Күңеле йырҙа булған кешене алған һөнәре түгел, ә йыр сәнғәте донъяға таныта. Бына ҡайҙа ул йырҙың көсө!

Миңә, әлбиттә, капелланың нимә аңлатҡаны ҡараңғы, әммә “хор капеллаһы” тигәндәрендә ниндәйҙер серлелек тойомлана.

Инеш телмәрҙән һуң музыкант айырыуса бер илһам менән:

— Башланыҡ! И-и...

Капеллаға нигеҙ моңон ҡойоусылар дәррәү күтәреп алды.

*Ленин жив. Он вечно будет с нами!*
*В каждом сердце честном он живет.*
*И родное ленинское знамя*
*По дороге жизни нас ведет.*

Дөйөм эшкә мин өлөшөмдө индереүем булды, күршеләрем ике яҡтан ҡабырғаларыма төртөп тә ебәрҙе:

— Урманың араһында аҙаштыңмы әллә? Бында аҡырырға түгел, ә йырларға кәрәк!

Минең һөмһөрөм ҡойолоп киткәнен шундуҡ аңғарып ҡалған музыкант:

— Һин, дуҫ кеше, бирешмә, башлап ебәргәндә ундай ғына кәкере-бөкөрөһө була ла үтә ул,—тип һүренке күңелемдәге сәнғәт усағына туҙ ҡыҫтырып, ут төртөп ебәрҙе. Ни әйтһәң дә, моң даръяһында йөҙгән нескә тойғоло кеше шул, киләсәктә башҡорт йырын тағы бер баҫҡысҡа күтәрәсәк “бас”тың бәҫен аңлай, башҡаларға һоро масса итеп ҡараһа, миңә “дуҫ кеше” тип өндәшә. Шунан нисек йылынмайһың да нисек тоҡанмайһың инде. Дәрестәрҙән һуң ашарға ла ебәрмәй, көн һайын репетицияға алып ҡалалар. Байрам етеп килә. Хорға теҙелеп, йырға ҡушылдынимһәм, баяғы ике күршем төртөнә лә төртөнә.

— Йырҙы боҙаһың бит!

Шунан береһе урыҫсалап:

— Дикарь лесной! — тип мыңғырҙаһа, икенсеһе башҡортсалап:

— Урман кейеге! — ти.

Әйтерең бармы. Минең “бас”тан көнләшә былар. Заманы ғына етһен, күрһәтермен әле мин һеҙгә “урман кейеге”н. Бас Федор Шаляпин. Ғабдрахман Хәбибуллин. Был данлыҡлы исемлекте өсөнсө булып мин дауам итәсәкмен.

Ниһайәт, байрам етте. Тантанаға ҡара салбар һәм аҡ күлдәк, ҡыҙыл юбка һәм зәңгәр кофта кейеп килгән егеттәр һәм ҡыҙҙар сәхнәлә үҙ урынын алды. Теге ике сөңкөлдәк миңә ҡапаҡ һалмаҡсы:

— Йырҙы боҙһаң, кәрәгеңә аласаҡһың!

Тәгәрмәс соҡорға төшкән ыңғайы мин дә арбанан ауып ҡала торғандарҙан түгел.

— Белеп ҡуйығыҙ, миндә ҡыпсаҡ ҡаны ҡайнай! — тип, киноларҙа күргәнемсә, боксерҙар позаһына баҫып, тегеләрҙекенән ҡайтышыраҡ булһа ла, йоҙроҡтарымды уйнатып алдым алдарында. Ҡайҙа барһындар, шымдылар, әлбиттә. Баяғы шул көнсөллөк көтөрҙәтә эстәрен. Бүтән берәүҙә лә минеке шикелле тауыш юҡ. Баритон-маритон, сопрано-мопрано, тағы әллә нәмәләр күп. Ә “бас” берәү генә. Шуға ла минең тауыш ғомборҙап-дөмбөрҙәп, ғырылдап-хырылдап башҡаларҙыҡынан айырылып торғанын яратмайҙар. Йырҙы боҙаһың, тигән була ла ҡалалар. Йәнәһе, үҙҙәре генә йырсы.

Иң яуаплы мәл һуҡты. Шаршауҙы асып ебәрҙеләр. Тамаша залында иң алғы рәттә урынбаҫарҙары, декандар уртаһында ректорыбыҙ ултыра. Ул минең күҙемә генә текләгән. Арттараҡ юғары курс студенттары. Икенсе рәттә беҙҙең төркөм етәксеһе — ул дәүерҙә хәҙерге һымаҡ “куратор” тигән һүҙ уйлап табылмаған ине — Әмир ағай күренә. Ошондай хөрмәтле, олпат тамашасылар алдында үҙемде лә күрһәтергә, йырҙы ла боҙмаҫҡа кәрәклеген аңғарҙым. Ғәҙәтемсә, үпкәгә йыр башлар алдынан күкрәк тә, ҡорһаҡ та ҡабарғансы һауа тыңҡысланым. Тын сығыуы мөмкин булған бөтә тишек-тошоҡто ныҡлап бикләнем. Музыкантыбыҙ тәүге аккордты алды ла беҙгә ишара яһаны: “И-и...” Хәтәр ҡеүәтле тауыш менән хор башланды.

*Вихри враждебные веют над нами,*
*Темные силы нас злобно гнетут.*
*В бой роковой мы вступили с врагами,*
*Нас еще судьбы безвестные ждут.*

Мин ике күршемә хәйләле ҡарашымды һирпеп алдым. Бик ҡупырайһағыҙ, минһеҙ генә көсәнегеҙ әйҙә, ҡылайым әле һеҙгә ҡылыҡты, бер уңға, бер һулға

ҡарап, тауыш-тын сығармай ғына тегеләр ыңғайына ауыҙымды асам да йомам, асам да йомам.

Йырлап бөттөк. Тамашасылар геү килеп ҡул саба, ҡул саба, ҡул саба... Ун минут булғандыр был тыйып туҡтатҡыһыҙ алҡыш. Тимәк, университет етәксеһе менән күҙгә-күҙ терәшеп, иң алда торған миңә лә өлөш тейә был алҡыштан. Ректорыбыҙ урынынан тороп:

– Всему составу университетской хоровой капеллы объявляю благодарность, – тип иғлан иткәйне, залдағылар ҙа, сәхнә түрендә баҫып торған беҙ ҙә күмәкләшеп сәпәкәй һуғабыҙ. Мине әйтеп аңлатҡыһыҙ ғорурлыҡ тойғоһо солғап алды. Ғүмерҙә лә онотолмаҫ тамаша!

Үҙ өлөшөмә төшкән алҡышлы көмөштө һәм ректорҙың рәхмәтен алғандан һуң мин:

– Етте, үҙ баһамды өлгәшелгән юғарылыҡтан төшөрмәҫкә кәрәк, – тинем һәм капелланан тайҙым. Төркөм етәксеһе Әмир Иҙрис улы:

– Өҫтөңдән ялыу бар, нишләп хорға йөрөмәйһең? – тип һораны.

– Минең “бас”ты өнәп бөтмәйҙәр бит. Әйҙә, үҙҙәре йырлаһын, – тип яуаплағас, етәксебеҙ үҙенең яратҡан әйтемен йәнә бер ҡабатланы:

– “Значит”тың яңы ғына уйлап сығарылған мәле, ике һүҙҙең береһендә ҡыҫтырып ебәрһәм, урыҫтар шаҡ ката ла ҡуя, – тип серле йылмайҙы. Шул саҡ минең хәтергә беҙҙең мәктәпкә Маҡар районынан килгән Яппаров ағайҙың: “Булмағас булмай икән баҙарҙа сөсө күмәс”, – тигәне төштө. Ике уҡытыусының да әйтемдәрендә үҙ-ара бәйләнеш барҙыр, тигән уй яралды минең башта.

Шулай итеп, университет һынлы юғары уҡыу йортон таң ҡалдырған йыр һәм шуға бәрәбәр алҡыштар менән минең йыр сәнғәтендәге икенсе осор тамамланды. Өсөнсө осорға килгәндә, уныһы үтә ябай ғына. Башта иҫкәрткәнемсә, мин хәҙер йырламайым.

– Йырла әле, моңло тауышыңды, исмаһам, бер ишетәйек, – тип ныҡышҡан, инәлгән кеше лә юҡ. Минең дә йылдарым, үҙегеҙ күреп тораһығыҙ, майһыҙ тәгәрмәс шикелле, шығыр-шығыр иткән булып арғы сигенә ығыша. Уйлана китһәң, иҫ китерлек! Оло ғына биш һыйыр ғүмерен йәшәгәнмен икән. Ошолайтып уҙған йылдар һуҙымынан үҙемә күрә ҡайһы бер һығымта ла яһағанмын: әҙәми зат билдәле бер һыҙыҡҡа еттениһә, бөгөнгөһөнә шөкөрана ҡыла ла, иртәгәһен ишәккә ҡалдырып, үткән ғүмер һуҡмағына кире борола, алыҫта ҡалған ҡыуаныстар-үкенестәрҙе яңынан байҡай. Йәнә тағы бер нәмәгә иғтибар итәйек. Ғәҙәттә, кешеләр урынһыҙ көйө:

– Йырҙың йыртығы юҡ, – тигән була ла ҡалалар. Тырышһаң, иждиһат итһәң, йырҙы ла йыртып була ул. Йыр сәнғәтендә минең үткән юлым быға кире ҡаҡҡыһыҙ дәлил.

Шулай ҙа ғүмеремдең йыр сәнғәтенә бағышланған ярсыҡтары бөгөн йөрәгемде йылыта, күңелемде иретә, дәрт һәм шатлыҡ менән, моң һәм һағыш менән һуғарылған ҡылдарымды тирбәтә-иңрәтә. Хәтирәләр миңә йәшәүгә илһам бирә. Эх, бар ине заманалар... Әйтерһең, мин өр-яңынан йыр дәресендә ике “5”-ле алам, гүйә, мине алҡышлап бөтә университет ҡул саба, ә ректорыбыҙ рәхмәт иғлан итә.

Мөхтәрәм туғандар, иҫтәлектәремдең мажор тулҡынында хыялдағы йыр сәхнәһенән һеҙҙең алдығыҙҙа сал башымды эйәм, оло сабырлығығыҙ һәм иғтибарығыҙ өсөн йөрәк түренән урғылған рәхмәттәремде еткерәм. Юҡ, юҡ, борсолмағыҙ, был юлы алҡыштар кәрәкмәй. Биғәйбә.

***

Башҡорт дәүләт академия драма театрында III Бөтә Донъя башҡорттары ҡоролтайын үткәреүгә әҙерлек буйынса ултырыш үтте.

БР Хөкүмәте вице-премьеры, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры И. Илешев инеш һүҙендә: «Ҡоролтайҙы үткәрергә ваҡыт бик аҙ ҡалды, ә эш бик күп һәм ҡатмарлы. Шуға күрә был ҡыҫҡа ғына ваҡытты һөҙөмтәле файҙаланырға кәрәк. Сараға әҙерлекте ҡала һәм район хакимиәттәре башлыҡтары етәкләргә бурыслы. Шул уҡ Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуҙа ла урындағы ҡоролтай комитеттарына әүҙем ҡатнашыу фарыҙ», – тине. Республикабыҙ Президенты исеменән йыйында ҡатнашыусыларҙы уның кәңәшсеһе С. Лаврентьев тәбрикләне, 2010 йылдың Республика йылы тип иғлан ителеүе, Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул ителеүгә 20 йыл тулыу айҡанлы үткәрелгән барлыҡ сараларҙа ла әүҙем ҡатнашырға саҡырҙы.

И. Илешев III ҡоролтайҙа яңы етәксе һайланғанға тиклем Бөтә Донъя башҡорттары ҡоролтайы комитеты рәйесе вазифаһын ваҡытлыса башҡарыуҙы БР Хөкүмәте аппаратының бүлек мөдире А. Ғәлинға йөкмәтергә тәҡдим итте.

***

Халыҡ-ара Аҡмулла көндәре, ғәҙәттәгесә, бай программа буйынса уҙғарылды, һәм мәғрифәтсе шағирҙың исеме республикабыҙҙа ғына түгел, бәлки, төрки телле байтаҡ илдәрҙә лә киң билдәле булыуын йәнә раҫланы. Мәҫәлән, Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһында "Мифтахетдин Аҡмулла образы – сәнғәттә" тигән темаға "түңәрәк өҫтәл" ойошторолдо.

Аҡмулла көндәре мәғрифәтсе шағирҙың йәнтөйәгендә – Миәкә районында тамамланды. С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хәсән Назар, Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге дәүләт, Аҡмулла премиялары лауреаттары шағирә Гөлфиә Юнысова, яҙыусы, "Башҡортостан" гәзитенең баш мөхәррире урынбаҫары Факил Мырҙаҡаев, БР Яҙыусылар союзы аппаратынан Рәшит Сабитов, "Ағиҙел" журналының бүлек мөхәррире Сабир Шәрипов, Башҡорт дәүләт педагогия университетының кафедра мөдире Сәлимә Таһирова һ.б. ҡасандыр мәҙрәсәләрендә шәкерт Мифтахетдин уҡыған Әнәс һәм Мәнәүезтамаҡ ауылдарында әҙәби осрашыуҙар уҙғарҙы. Һуңынан байрамға йыйылыусылар Туҡһанбай ауылында Аҡмулла шишмәһе һыуын уртланы, шағир музейын ҡарағандан һуң уның бюсына гөлләмәләр һалды.

Мәҙәниәт йортонда ойошторолған тантанала район хакимиәте башлығы Зәйнулла Насиров йылдар үткән һайын Аҡмулла ижадына, уның нәсихәттәренә ҡыҙыҡһыныу арта барыуын, мәртәбәле Аҡмулла премияһы лауреаттарының ишәйеүен билдәләне. Был юлы районды ң оло бүләгенә филология фәндәре докторы, профессор, Рәсәй фәндәр академияһы академигы, С. Юлаев исемендәге премия лауреаты Әхмәт Сөләймәнов менән Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре, филология фәндәре кандидаты Нәркәс Хөббитдинова "Аҡмулланы биргән Мең ҡәүеме фольклоры" тигән өс томлыҡ фәнни-популяр хеҙмәт өсөн лайыҡ булдылар.

***

Стәрлетамаҡ Яҙыусылар ойошмаһының ойошторолоуына 25 йыл тулыу оло байрам төҫөн алды, ошо уңайҙан Башҡорт дәүләт драма театрына күп халыҡ йыйылды. Ойошманың яуаплы секретары Кәбир Аҡбашевтың докладынан һуң республикабыҙҙа иң эреләрҙән һаналған, сафтарына 27 ағзаны, йөҙҙән ашыу йәш һәм башлап яҙыусыны берләштергән әҙәби ғаиләне БР Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, шағир Ҡәҙим Аралбай тәбрикләне, төбәктәге бер төркөм ҡәләмдәштәренә БР Яҙыусылар союзының 75 йыллығы айҡанлы Маҡтау грамоталары тапшырҙы. Ҡала етәкселеге исеменән иһә хакимиәт башлығы урынбаҫары Ғәфүр Һәйетҡолов ҡотланы һәм бүләкләне. "Ағиҙел" журналының баш мөхәррире Әмир Әминев, "Һәнәк" журналының баш мөхәррире Марсель Сәлимов, БР Яҙыусылар союзының шиғриәт секцияһы рәйесе, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хәсән Назар, проза секцияһы рәйесе Сабир Шәрипов, Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһы доценты Рәйсә Илешева, педагогия колледжы, сәнәғәт предприятиелары, мәҙәниәт учреждениелары, ижтимағи-милли үҙәктәр, шулай уҡ Мәләүез, Салауат, Ишембай, Күмертау ҡалалары, Ғафури, Ауырғазы райондары вәкилдәренең сығышы ла йылы ҡабул ителде. Әҙәби-музыкаль кисәне (режиссеры – С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Гөлдәр Ильясова) Стәрлетамаҡ, Салауат башҡорт театрҙары, ҡала филармонияһы һәм бейеү театры артистары, күренекле фольклор ансамблдәренең һәүәҫкәрҙәре сағыу номерҙар менән биҙәне.

Ҡала хакимиәтенең әҙәбиәт, сәнғәт һәм мәҙәниәт өлкәһендәге Ғәли Ибраһимов исемендәге ике премияһына шағир Салауат Рәхмәтулла менән Башҡортостандың халыҡ артисы Рауил Галин лайыҡ булды.

***

Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры 90 йыллыҡ юбилейын билдәләне. Театр коллективын тәбрикләргә БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, БР мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илешев, БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты Рауил Бикбаев һәм башҡа абруйлы ҡунаҡтар килде.

– Бер сәғәт эсендә иҫ киткес тамаша ҡуйҙығыҙ. Рәхмәт һеҙгә! Бөгөнгө байрам – әҙәбиәтебеҙҙең дә байрамы ул. Театрҙың уҙғаны – әҙәбиәт тарихы. Уларҙың бөгөнгөһө һәм киләсәге айырылғыһыҙ, – тине Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев.

Илдус Илешев ихлас күңелдән Фидан Ғафаровты, Гөлли Мөбәрәкованы Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең Почет грамоталары менән бүләкләне. Алһыу Бәхтиева, Миңзәлә Хәйруллина, Светлана Хәкимова, Хәкимйән Зарипов БР Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығының Почет грамоталарына лайыҡ булды.

Юбилей кисәһендә Ғәлиәскәр Камал исемендәге татар дәүләт драма, Мирхәйҙәр Фәйзи исемендәге Ырымбур дәүләт драма, Төмән драма һәм комедия театрҙары һәм республикабыҙҙың ун бер дәүләт театры вәкилдәре лә ҡатнашты.

***

Әлшәй тарафтарына "Ағиҙел көнө" үткәреү маҡсатында килгән әҙиптәрҙе – журналдың баш мөхәррире Әмир Әминев, прозаик Сабир Шәрипов менән шағир Әхмәҙин Әфтәхте тәүҙә район хакимиәте башлығы Дамир Мостафин ҡабул итте, уның урынбаҫары Заҡуан Әхмәтов әңгәмә уҙғарҙы. Әҙиптәр Мөхәмәтша Буранғолов исемендәге башҡорт лицейында, Себенле һәм Ташлы урта мәктәптәрендә иҫтә ҡалырлыҡ әҙәби осрашыуҙар уҙғарҙы. Ҡайҙа ла әҙәбиәт һәм матбуғат хаҡында йәнле һүҙ барҙы, шиғырҙар яңғыраны, етди һорауҙарға яуаптар бирелде. Ташлы ауылында "Ағиҙел"селәр байтаҡ йылдар әҙәби журналыбыҙҙың

баш мөхәррире вазифаһында эшләгән күренекле яҙыусы Рәйес Низамовтың (1932 – 1978) ҡәберенә зыярат ҡылды.

***

Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында билдәле шағир, меценат һәм йәмәғәт эшмәкәре Дәрдмәндтең (Закир Рәмиев) тыуыуына 150 йыл тулыуға арналған әҙәби-музыкаль кисә үтте. Был сараны "Рамаҙан" төрки милли-ағартыу үҙәге ойоштторҙо. Шағирҙың юбилейы айҡанлы БР Президенты Мортаза Рәхимов кисәлә ҡатнашыусыларға тәбрикләү хаты ебәрҙе.

...Шиғриәт классигы Дәрдмәндтең иҫтәлеге ул тыуып-үҫкән Мәләүез районының Ергән, ул йәшәгән Баймаҡ районының Юлыҡ ауылдарында ҡәҙерләп һаҡлана. Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, шағир Хәсән Назар ҙур делегация менән Дәрдмәнд эҙҙәренән бергә шул төбәктәрҙә булып, әҙәби осрашыуҙарҙа сығыш яһап ҡайтты.

Делегацияла Закир Рәмиев – Дәрдмәндтең Төркиәнән, республикабыҙҙың төрлө тарафтарынан йыйылған туғандары Ҡазандан татар әҙиптәре Туфан Миңнуллин, Гәрәй Рәхим, Рәзил Вәлиев булды. Был сәфәр билдәле йәмәғәтсе, йырсы, педагог Марат Шәрипов хәстәрендә һәм етәкселегендә ойоштороллдо.

***

Ҡырмыҫҡалылар үҙ районынан сыҡҡан арҙаҡлы шәхестәр менән һәр саҡ һаҡлы ғорурлана. Районда уларҙың юбилейҙары ихлас уҙғарыла, төрлө ижади кисәләр ойошторола. Әле яңыраҡ Боҙаяҙ ауылында билдәле яҙыусы, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Фәнил Әсәновтың (1929 – 1995) тыуыуына 80 йыл тулыуға арналған хәтер кисәһе яҙыусының исемен йөрөткән урта мәктәптә уҙҙы. Кисәгә Өфөнән С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ирек Кинйәбулатов, әҙиптәр Рәшит Низамов, Дилә Булгакова, Рәшит Сабит килгәйне. Район сәхнә оҫталары, мәктәптең төрлө синыф уҡыусылары яҙыусының әҫәрҙәре буйынса йөкмәткеле концерт ҡуйҙы.

***

Башҡорт дәүләт филармонияһында күренекле яҙыусы, шағир, йәмәғәт эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Булат Рафиҡовтың (1934 – 1998) тыуыуына 75 йыл тулыу айҡанлы хәтер кисәһе уҙҙы.

Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Рауил Бикбаев үҙенең сығышында әҙиптең ижадына, ижтимағи-сәйәси, журналистик һәм мөхәррирлек эшмәкәрлегенә ентекле байҡау яһаны, күркәм кешелек сифаттарына туҡталды. Шағирҙар Ирек Кинйәбулатов, Ҡәҙим Аралбай уға арналған шиғырҙарын уҡыны, иҫтәлектәр һөйләне. "Ағиҙел" журналының баш мөхәррире Әмир Әминев, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева, "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге рәйесе Риф Иҫәнов, әҙиптең ҡыҙы Гөлназ Даниловаың сығыштарында ла әҙип портретына сағыу буяуҙар өҫтәлде.

Юбилейға Мәләүез район һәм ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары И.Р. Мөләков етәкселегендә делегация килгәйне, тамашасылар уларҙың да сығышын ихлас ҡабул итте.

Йыйында һүҙ сәнғәте менән сәхнә сәнғәте аралашып барҙы. Азат Айытҡолов, Тәнзилә Үҙәнбаева, Харис Шәрипов, Урал Мортазин һ.б. концерт номерҙары алҡыштарға күмелде. Әйткәндәй, йыр премьераһы ла булды: Булат Рафиҡовтың "Аралар" исемле шиғырына композитор Айһылыу Сәлмәнова романс яҙған, һәм ул Сәйҙә Ильясова менән Айгиз Хисмәтуллин башҡарыуында яңғыраны.

Кисәне оло зауыҡ менән Әнисә Яхина алып барҙы, ул Булат Рафиҡовтың байтаҡ шиғырҙарын да уҡыны.